ӘКРӘМ
БЕЙЕШ

# ТЕЛ
# ХИКМӘТТӘРЕ

ББК 81.2 Баш
Б 35

**Бейеш Ә.**
**Тел хикмәттәре.** — Өфө: «Китап», 1999. — 144 бит.

Был китапта грамматик хеҙмәттәрҙең, әҙәбиәт менән матбуғат теленең урыҫ теленә эйәреп, башҡорт тел ҡанундарын боҙған ерҙәре, даими төҫ алған хаталары ҡарала һәм башҡорт ҡанундарына ғилми аңлатма бирелә. Шунын менән китап урыҫ теленең тәьҫиренән азат ителгән башҡорт грамматикаһын эшләүгә һәм әҙәби яҙма телде таҙартып, үҙ асылына ҡайтарыуға ярҙам итә. Ул уҡытыусыларға, уҡыусыларға һәм яҙышыу менән шөғөлләнгән бөтә кешегә файҙалы әсбап була ала.

Һүҙ һәм терминдарҙың ҡайһы береһе автор ҡулланғанса ҡалдырылды.

ТП-205

ISBN 5-295-02594-2 © Бейеш Әкрәм, 1999

# Баш һүҙ

Ислам динен һәм ислам мәҙәниәтен тараткан Төркөстан мосолмандарының төрки телен ете-һигеҙ быуат буйы яҙма тел итеп файҙаланған башҡорт халҡы XX быуаттың 20-се йылдар уртаһына тиклем үҙ телендә яҙыу тәжрибәһен белмәй. РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты 1921 йылдың 27 июнендә башҡорт телен урыҫ теле менән бер ҡатарҙан дәүләт теле тип иҫәпләү хаҡында декрет сығарып, 1— 4 июлдә Советтарҙың II Бөтә Башҡортостан съезы шул декретты раҫлаған саҡта, башҡорт теле ғилми яҡтан бөтөнләй тиерлек өйрәнелмәгән була. Уны тиҙ арала дәүләт теле итеп ғәмәлләштерер өсөн, әҙәби яҙма телдең нигеҙен һәм нормаларын билдәләү, алфавитын һәм орфографияһын эшләү, төрлө дәреслек яҙыу, һүҙлек төҙөү кеүек мөһим эштәрҙе нык ҡыҙыулатып ебәрәләр. Был эш иң ҙур милли бурыстарҙың береһенә әйләнеп, шуның буйынса хөкүмәт комиссиялары ойошторола, ҡарарҙар сығарыла, бөтә булған ғилми көс шуға йәлеп ителә. Башҡорт уҡымышлылары араһынан сыҡҡан Нурыйағзам Таһиров, Хәбибулла Ғәбитов, Әбделәхәт Уйылданов, Ғәббәс Дәүләтшин кеүек үҙ заманының тел белгестәре, яҙыусылар, дәүләт эшмәкәрҙәре һәм башҡалар ҡайнар дәрт менән янып йөрөп эшләй. Шуларҙың көсө менән ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бик күп эш башҡарыла, һәм 1924—1925 йылдарҙан башлап башҡорт теле ысын яҙма тел булып ғәмәлгә инә.

Бөгөнгө телселәр, башҡорт әҙәби яҙма телен эшләгән саҡта, ике диалекттағы һөйләү теле менән халыҡ ижадының камиллашҡан теле нигеҙ итеп алына, тигән ҡараштa тора. Улар нисә быуат буйы яҙма тел булып хеҙмәт иткән һәм тейешле яҙыу күнекмәһе биргән төрки телде иҫәптән төшөрөп ҡалдыра. Ә ғәмәлдә башҡорттар шундай күнекмә алмаған һәм төрки телдең синтаксик, стилистик, лексик сараларын үҙләштермәгән булһа, тормоштоң төрлө өлкәһендә файҙаланырлыҡ, ҡатмарлы ғилми һәм ижтимағи фекер йөрөшөн кәрәгенсә сисеп бирерлек яҙма телгә улай тиҙ генә эйә була алмаҫ ине. Төрки телде иҫәптән төшөрөү һаман да башҡортто яҙма теле булмаған, яҙыуҙың ни икәнен белмәгән халыҡтар төркөмөнә индереп, тарихи дөрөҫлөктө боҙоуға килтерә.

Шул башланғыс дәүерҙән һуңғы 60—70 йыл эсендә башҡорттоң тел ғилеме лә, әҙәби яҙма теле лә, һис һүҙһеҙ, бик нык үҫә: ҙур

күләмле ғилми хеҙмәттәр, һүҙлектәр эшләнә, яңынан-яңы мәктәп дәреслектәре сыға, әҙәбиәт менән матбуғат теленең дә алға киткәне күҙгә күренеп тора. Ләкин тел өлкәһендәге байтаҡ мәсьәлә әле булһа хәл ителеп бөтмәгән. Хәл ителмәгән мәсьәләләрҙең ҡайһы береһе тәүге дәүерҙән үк килә.

Тәүге мәлдәге кәмселектәрҙе аңлап та, ғәфү итеп тә була: тел белеменең яңы моронлаған сағы, тейешле нигеҙ, йәғни башҡорт теле генә түгел, шуғаса яҙма тел булып йөрөгән төрки тел буйынса ла ғилми грамматика юҡ, заман талабынса йәһәтләп эш башҡарырлыҡ әҙерлекле кешеләр етешмәй. Шундай шартта тәүге мәктәп дәреслектәрен теләһә-теләмәһә лә башҡа телдәрҙең әҙер грамматикаһынан өлгө алып эшләргә мәжбүр булалар. Башҡорт теленең беренсе грамматикалары шулай барлыҡҡа килә, һәм быныһы әле уның ҙур бәлә булмай. Әммә артабанғы мәктәп дәреслектәренең генә түгел, хатта башҡорт теле буйынса башҡарылған ғилми хеҙмәттәрҙең дә һаман бүтән тел, атап әйткәндә, урыҫ теле ҡалыбынан ҡотола алмай йонсоуы ысын бәләгә әйләнә. Ж. Ғ. Ҡейекбаев етәкселегендә 1964 йыл эшләп сығарылған «Башҡорт теле дәреслеге» шул ҡалыптан ҡотолорға бер аҙ ынтылыш яһаған һымаҡ булһа ла, ҡотолоп бөтә алмай. Башҡорт телселәрен тотош тигәндәй ылыҡтырып, күмәк көс менән башҡарған «Грамматика современного башкирского литературного языка» (М., 1981) тигән ҙур ғилми хеҙмәт тә күп кенә урында үҙ аллы фекер әйтеү кимәленә күтәрелеп етмәй. Тимәк, тел белемендә башҡорт телен урыҫ теле күҙлегенән ҡарап тикшереү һәм яҡтыртыу ошо көнгә хәтле дауам итә. Беҙ шуға күнеккәнбеҙ, шулай тейеш һымаҡ күрәбеҙ, ләкин беҙҙең эшкә ситтән ҡараған кешеләр уны тиҙ үк аңлап ала. Шул кешеләрҙең береһе, башҡорт телен яҡшы өйрәнгән немес (алман) ғалимәһе Маргарете Эрсен-Раш, 1995 йылғы I Бөтә донъя башҡорт ҡоролтайында сығыш яһап: «Дәреслек төҙөгәндә башҡорт теле грамматикаһының урыҫ теле грамматикаһы ҡалыбында яҙылғанын күрҙем. Шуға үҙебеҙҙең дәреслектә башҡорт теле грамматикаһын, әгәр мөмкин булһа, уның үҙенсәлектәренән сығып яҙырға тырышмаҡсыбыҙ», — тине.

Тел ҡоролошо хаҡында яҙылған хеҙмәттәр, иң элек мәктәп дәреслектәре, норматив көс алып, әҙәби башҡорт теленә йүнәлеш бирә. Әҙәбиәт, матбуғат, радио, телевидение исеменән яҙған һәм һөйләгән кешеләрҙең күпселеге дәреслектә күрһәтелгән тел үлсәмен ҡағыҙә рәүешендә ҡабул итә. Шуның өсөн, мәҫәлән, дәреслектәрҙең урыҫ теленә яраҡлаштырып, хәҙерге заман сифат ҡылымы тип аңлатҡан *-ыусы* (алыусы, барыусы) формаһын әҙәби телдә урынһыҙ ҡулланыу сикһеҙ киң таралып китте. Унан башҡа ла урыҫ менән тамам аралашып бөткән хәҙерге заманда урыҫ теленең кире йоғонтоһо ифрат та көсәйҙе. Элек тел таҙалығын ҡатын-ҡыҙ һаҡлай ине. Ситкә бик сығып йөрөмәй, күберәк ғүмерен ауылда үткәргән ҡатын-ҡыҙҙың теле саф милли тел өлгөһө булғанға күрә туған телде «әсә теле» ти торғайнылар. Беҙҙең дәүер балалары туған телде шул әсәләрҙән өйрәнеп үҫте. Әлеге көндә ҡатын-ҡыҙ ул

гүзәл сифатын юғалтты. Әйләнгән һайын урыҫ телен ҡыҫтырып һөйләү күпселек кешенең ғәҙәтенә инеп китте. Был нәмә бер ҙә урыҫ телен бик яҡшы белгәндән түгел, ә уның көслө ҡыҫымы аҫтында үҙ телебеҙгә иғтибарҙы кәметкәндән, уйламай-нитмәй анһат ҡына һөйләп, вайымһыҙ көн итергә йәтешләнеп алғандан килә. Һөйләү телендәге шул вайымһыҙлыҡ яҙма телдә лә бик ныҡ сағылыш ала.

Яҙышҡан кешеләрҙең күбеһе хәҙер урыҫ телендә уйлап, башҡортлаштырылған урыҫ телендә яҙыуға күсеп бөтөп бара. Уларҙың яҙғанын уҡығанда, бер юлы урыҫ теленә ауҙара бармайынса, күп ваҡыт аңлап та булмай. Айырым шәхестәрҙең шундай теленән дөйөм башҡорт әҙәби теле хасил булып, шул «әҙәби» тел барған һайын милли мәҙәниәт кимәлен күрһәткән бер билгегә әйләнә башланы. Бер ҡарағанда, был хәүефте аңламаған кеше лә юҡ һымаҡ. Һәр кем тиерлек яҙма телдең шул хәлгә ҡалғанына көйөнә, үҙенсә борсолоп, телгә иғтибарлы булырға, милли телдең сафлығын, матурлығын һаҡларға өндәй, әммә үҙенә килгәндә, үҙе яҙған нәмәләрҙең телен яҡшыртырға бер ҙә тырышып бармай һәм үҙенең теленә һүҙ тейҙергәнде һис кенә лә яратмай. Шул арҡала минең 1967 — 1969 йылдарҙа әҙәбиәт теле буйынса «Ағиҙел» журналында сығарған мәҡәләләрҙе яҙыусылар бик ауырға алды һәм миңә ҡаршы ялған тәнҡит ойоштороп, ауыҙҙы ябып ҡуйҙы. Милли телде үҙенең мин-минлегенән өҫтөн ҡуйған кеше, әлбиттә, улай итмәҫ ине. Шундай уҡ мөнәсәбәт әле лә дауам итә. Дөрөҫ һүҙгә ҡолаҡ һалмаҫҡа, күренеп торған хатаны төҙәтмәҫкә тырышыу — беҙҙең яҙма телде харап иткән иң ҙур сәбәптәрҙең береһе.

Ғибрәт өсөн гәзит-журналдан бер мәҡәлә йәки хикәйә алып, телен төпсөп тикшереп ҡарағыҙ: һәр һөйләмендә тиерлек әллә нисә хата табылыр. Урыҫ телендә яҙылған булһа, шул хәтле хаталы нәмәне һис тә баҫып сығармаҫтар ине. Урыҫтың яҙма теле һәр яҡлап тәртипкә килтерелгән, һәм ул ныҡлы тәртип уға үҙенән-үҙе килмәгән. Мәҫәлән, Радищевтың «Путешествие из Петербурга в Москву» тигән әҫәрен үҙе яҙған тәүге нөсхәнән уҡыһаң, телендәге хатаға иҫ китерлек. XIX быуат баштарына ҡәҙәр урыҫ яҙма теле шул хәлдә була. Шул телгә иң беренсе башлап А. С. Пушкин йән өрә. Уның әкиәттәре, сәсмә әҫәрҙәре (теҙмә әҫәрҙәрен әйтеп тораһы ла юҡ) әлеге көндә лә урыҫтар өсөн иң матур, иң камил тел өлгөһө булып тора. Үҙ әҫәрҙәренең телен еренә еткереп эшләргә ул йыбанмаған һәм шул саҡта иң элек ябай халыҡ теленән үрнәк алған. А. С. Пушкиндан һуңғы урыҫ яҙыусылары ла әҙәби әҫәрҙең теленә ғәйәт ҙур әһәмиәт һәм иғтибар бирә. Шулай итеп, урыҫ әҙәби теленә яҙыусылар нигеҙ һала, һәм шул нигеҙҙе тел ғалимдары өйрәнеп, аңлатып, ҡаты ҡанун менән ныҒыта. Урыҫ теленең хатта бер һүҙен дә хәҙер, беҙҙәге кеүек, һәр кем үҙе теләгәнсә яҙа алмай. Үкенескә ҡаршы, Пушкин һәм Толстойҙар беҙҙә юҡ, ләкин әҙәби яҙма телде ғилми нигеҙҙә тамам тәртипкә килтереп, тейешенсә ҡанунлаштырыу беҙгә лә бик кәрәк, шунһыҙ уға дәүләт теле тигән статус биреү ҙә әллә ни ярҙам итә алмаҫ.

Башҡорт теленә дәүләт статусы бирелергә тейеш, ул турала «Теле барҙың — иле бар» тигән китапта (Төҙ. Зәйтүнә Ханова, 1995) минең мәҡәлә лә баҫылды. Әммә шуның менән бер ыңғай беҙҙең алда әҙәби телде үҙ асылына ҡайтарыу, тейешле кимәлгә күтәреү бурысы тора. Әҙәби телдең грамматик ҡоролошона үҙ күҙебеҙ менән ҡарап, һәр һүҙ һәм грамматик форманың ысын мәғәнәһен асып, урыҫ теленең ҡыҫымы арҡаһында килеп ингән һәр төрлө ят нәмәнән таҙарынмайынса, алға китеп булмай. Ошо маҡсат күҙлегенән әҙәби яҙма телде тәртипкә килтереү яңғыҙ-яры кешенең ҡулынан килә торған эш түгел. Әҙәби телдең яҙмышы — яҙышҡан кешеләр ҡулында. Ҙур яуаплыҡ менән ҡарап, күмәк көс менән тотонғанда ғына, ул эште беҙ башҡарып сыға алабыҙ.

Башҡорт әҙәби яҙма теле бөгөн шундай хәлдә. Әгәр беҙ хәҙергесә урыҫ теленең ҡыҫымына тотош буйһоноп, артабан да ирекле йәки ирекһеҙҙән уға яраҡлашһаҡ, үҙ телебеҙгә ҡәбер әҙерләүебеҙ шул булыр. Көслө сит тәьҫир арҡаһында үҙ теленән яҙған халыҡтарҙың миҫалы тарихта етәрлек. Көслө сит тәьҫирҙән һәм үҙебеҙҙең вайымһыҙлыҡтан беҙҙең тел дә һуңғы сиккә яҡынлап килә. Мәсьәлә шулай бик киҫкен булғанға, юғарыла әйткән эштәргә башланғыс биреү һәм ҡулдан килгән хәтле өлөш индереү ниәте менән ошо эште яҙып ҡарарға булдым.

Мин бында һәр кешенең яҙған нәмәһен ҡарап, телен тикшереп сығырға уйламайым, ә яҙма телдә нығынып, «законлашып» киткән етешһеҙлектәр тураһында ғына һүҙ алып барам. Шул «законлы» хаталарҙың һәр береһенә кәрәгенсә миҫал килтереп, һәр миҫалды төпсөп тикшереү рәүешендә яҙған был эш ҡайһы берәүгә, бәлки, оҡшамаҫ, ялҡытҡыс нәмә булып күренер. Ләкин туған теленең яҙмышы өсөн көйгән, уны яратҡан, яҡшылап өйрәнергә теләгән кеше быны уҡырға йыбанмаҫ. Туған телде өйрәнеү анһат эш түгел, төпсөнмәйенсә, көс түкмәйенсә генә уның бөтә нескәлегенә, эске көйөнә төшөнөп алыу мөмкин түгел.

Был эште мин 1996 йылғы «Ағиҙел», «Шоңҡар» журналдарынан, «Башҡортостан», «Йәшлек» гәзиттәренән йыйған материал буйынса яҙҙым. Ул баҫмалар бәләкәй генә хәбәрҙән алып ҙур күләмле әҙәби әҫәргә тиклем һәр төрлө жанрҙы эсенә ала һәм яҙма тел хаҡында шуларҙан ғына сығып та фекер йөрөтөп була. Миҫал килтергәндә, мин авторын атамай, сығанағын ғына күрһәтәм, сөнки бер кемгә лә теймәй, бөтә иғтибарҙы телгә йүнәлткәндә файҙаһы күберәк булыр, белекле кеше былай ҙа аңлар, тип уйлайым.

Миҫалдың сығанағын биргәндә, журнал исеменең баш хәрефе, сыҡҡан йылы, һаны, бите күрһәтелә, гәзит исеменең баш хәрефе, сыҡҡан көнө күрһәтелә: «Ағиҙел» — (А., 96, 10, 25), «Шоңҡар» — (Ш., 96, 3, 45), «Башҡортостан» — (Б., 12. 05. 96), «Йәшлек» — (Й., 24.07.96).

# ТЕЛ ҺӘМ МИЛЛӘТ

Милли тел — аралашыу ҡоралы ғына түгел, ә иҫ киткес ғәжәп бер ижад емеше. Кешелек аҡылы донъяға килтергән ҙур асыштар араһындағы иң даһи асыш — кешенең теле. Донъяла нисәмә төрлө тел бар, шуларҙың һәр береһе үҙ ысулы, үҙ сараһы менән бер үк маҡсатты, кешенең фекерен сағылдырыу маҡсатын, бойомға ашыра. Шуға күрә тел ғөмүмән бер мөғжизә булһа, һәр тел — үҙенә башҡа бер мөғжизә, үҙенә башҡа бер ижад емеше. Үҙенә башҡа ижад емеше булған өсөн ғалимдар хәҙерге телдәрҙе генә түгел, әллә ҡасан юҡ булған, бөгөнгө көндә бер генә халыҡ та һөйләшмәгән боронғо телдәрҙе лә өйрәнә. Улар ҙа ҡыҙыҡ. Шулай булғас, үҙеңдең туған телең нисек ҡыҙыҡ булмаҫҡа, ҡәҙерле булмаҫҡа мөмкин? Телдең бер генә өнө лә, бер генә грамматик формаһы ла буштан булмаған, һәр береһе, меңәр-меңәр йыллыҡ юл үтеп, хәҙерге урынын, хәҙерге мәғәнәһен алған, һәм шуларҙың ойошоуынан телдең бөтә эске ҡоролошо төҙөк бер көйгә килгән. Йырҙың көйө булған кеүек, телдең дә үҙ көйө бар. Шул көйҙө күңел ҡылдарың менән ишетеп, үҙең теләгәнсә сыңлатырға өйрәнмәйенсә, һис кенә лә телде беләм, белеп бөттөм, тип әйтеп булмай. Телдең тәрәнлеге — төпһөҙ, аҡылы — сикһеҙ.

Тел халыҡтың үҙе менән бергә яралып, үҙе менән бергә үҫә. Шуның өсөн ул халыҡтың бөтә яҙмышын, бөтә булмышын сағылдыра. Әйтәйек, башҡорт теленең башҡа төрки телдәргә һис тә оҡшамаған үҙенсәлекле сифаттары бар икән, ул башҡорт халҡының борон заманда уҡ төрки донъянан айырылып, бүтән мөхиттә ғүмер иткәнен күрһәтә. Шуның менән бергә, башҡорт халҡын төрлө-төрлө этник төркөмдән ойошҡан сып-сыбар бер «ҡорама» тип ни хәтле иҫбат итергә тырышһалар ҙа, башҡорт телендә тотош һаҡланған дөйөм төрки нигеҙ ундай хәбәрҙе бушҡа сығара. Телселәрҙең ҡайһы береһе башҡорт телен Урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан һуң ғына дөйөм тел рәүешенә килә башлаған

тип иҫәпләгән була. Ләкин «ҡырҡ ҡорамалы» халыҡ булған булһа, ул Оло Иҙелдән Тубылға, Яйыҡтан Пермгә ҡәҙәр биләп торған иркен ерҙәренә өс-дүрт быуат эсендә генә башҡорт телен уртаҡ тел итеп тарата алмаҫ ине. Башҡорт бер ваҡытта ла бүтән халыҡтарҙы ҡол итеп тотмаған, үҙ телен башҡаларға көсләп таҡмаған, тимәк, уның теле халыҡ булып ойошҡан иң боронғо дәүеренән үк дөйөм тел булып йөрөгән булған. Башҡорт теле беҙгә шундай һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Тел — халыҡтың иң боронғо тарихи көҙгөһө. Беҙҙең унан да боронғо, унан да ышаныслы бер нәмәбеҙ ҙә юҡ.

Милләттең эске тәбиғәтен күрһәткән билгеләрҙән, әлбиттә, тел иң беренсе урынды алып тора. Тел милләттең этник булмышын билдәләй, мәҙәниәтен кәүҙәләндерә. Шуның өсөн милләтте ғәҙәттә теле буйынса атап йөрөтәләр һәм теленә ҡарап, кешенең милләтен беләләр. Халыҡ үҙе хатта тыуған еренә, мәҙәниәтенә ҡарағанда ла телен алға ҡуя. Тел уның рухи донъяһын, милли тойғоһо менән милли ғорурлығын, ата-бабаһы менән балалары алдындағы тарихи бурысын тотош үҙ эсенә ала. Оҙон ғүмер юлында үҙ иркенән мәхрүм ителгән халыҡтарҙың милли күрһәткестәре һаҡланырға йәки юғалырға мөмкин, әммә теле иҫән булһа, халыҡ үҙе лә иҫән була, теле үлһә, үҙе лә бергә үлә.

Үлем һәм ҡалым мәсьәләһе үҙ иркенә йәшәй алмаған бойондороҡло халыҡтарҙа ғына була, ләкин улар ҙа ҡапыл ғына юҡҡа сыҡмай. Этник билгеләренең, бигерәк тә теленең, ғәжәп ҙур тереклек көсөнә эйә булғанлығы арҡаһында, улар тышҡы баҫым һәм ҡыҫымға быуаттар буйы бирешмәй ҡаршы тора ала. Халыҡ үҙенең телен, туплаған мәҙәни байлығын иҫ киткес ауыр ғазаптар аша алып килә, үлемесле көсөргәнеш менән милли үҙенсәлектәрен тапатмай һаҡларға тырыша. Һаҡларға тырышҡан һайын халыҡтың милли тойғоһо көсәйә һәм шул тойғо рухын үҫтереп, берҙәмлеген нығытып, уны милли азатлыҡ көрәшенә күтәрә. Милли азатлыҡ көрәше алдында һәр ваҡыт милли дәүләт төҙөү маҡсаты тора, башҡа маҡсатты ул белмәй, сөнки йәмғиәт үҫешенең объектив ҡануны шуны талап итә. Объектив ҡанун буйынса, һәр халыҡ милли дәүләт ҡороп ойошорға тейеш. Дәүләт булып ойошҡас ҡына, ул милләткә әйләнә, һәм шундай милләт кенә иркенләп йәшәргә, һәр яҡлап үҫергә мөмкинлек ала. Уйлай белгән кеше быны электән аңлаған. Мәҫәлән, танылы башҡорт мәғрифәтсеһе М. Өмөтбаев: «Әҙәбиәт һәм мәғрифәт күберәген үҙ хөкүмәте булған халыҡтарҙа алға киткән», — тип ошо быуат башында уҡ яҙған.

Әммә милли дәүләт ҡороп өлгөрмәй йәки, өлгөргән хәлдә лә, уны ҡурғай алмай, икенсе бер дәүләттең аяҡ аҫтына ҡалған халыҡтарға ирекkә сығыу анһат түгел. Быуаттар буйы йән аямай көрәшеп, иҫәпһеҙ ҡорбан биреп, көс-хәл менән үҙ маҡсатын бойомға ашырған халыҡтар бар донъяла. Мәҫәлән, ирланд халҡының ете йөҙ йылдан артыҡ, көньяҡ славян халыҡтарының мең йылдан артыҡ ғүмере тынғыһыҙ яу менән үтә. Башҡорт халҡының да татар-монгол яуынан һуңғы бөтә тарихы әле һүрелеп, әле тоҡанып, өҙлөкһөҙ дауам иткән азатлыҡ көрәшенән ғибәрәт. Аҡтыҡ ғәйрәтен йыйып, яҡты өмөт менән янып, башҡорттар 1917—1920 йылдарҙа тағы бер ҡуҙғала ла, тағы еңелә. Ҡаты ҡорал көсө һәм ялған сәйәсәт хәйләһе менән урыҫтар башҡорт хәрәкәтен быуып һала.

Икенсе донъя һуғышынан һуң йөҙәрләгән колониаль халыҡ ирек алып, үҙ дәүләтен ҡорҙо. Хатта икһеҙ-сикһеҙ океан уртаһындағы бәләкәй генә утрауҙар ҙа ике-өс йөҙ мең кешенән торған ярым ҡырағай халыҡтары менән хәҙер үҙ аллы дәүләт булып йәшәй. Шуларҙың $^3/_4$ өлөшөнә элекке колонизаторҙар үҙ теләге менән азатлыҡ бирҙе. Ә урыҫтар үҙҙәренең колониаль хөкөмөн, яуыз империяһын һаҡлар өсөн тас йәбешеп, һаман ҡан ҡоя. Империя ҡулынан ысҡынырға уйлаған сисән (чечен) халҡын улар ни хәлгә төшөрөп ҡуйҙы! Ярар, сисәндәр бирешмәне, ни күрһә лә, теләгенә иреште. Ә быуаттар буйы ҡырыла, ҡыҫырыҡлана торғас, үҙ илендәге халыҡтың $^1/_5$ өлөшөнә генә тороп ҡалған башҡортта бүре тырнағынан ҡотолорлоҡ ундай көс юҡ. Тимәк, башҡорт халҡына артабан да милли дәүләт ҡороу хоҡуғынан мәхрүм булып, кәм-хур көйө ғүмер һөрөргә яҙған. Ул ғүмерҙең ҡасан өҙөлөрө билдәһеҙ, тик донъя шулай барһа, ҡасан да бер өҙөлөрө генә билдәле. Был мәсьәлә туранан-тура телдең яҙмышына бәйләнгән.

Бойондороҡло халыҡтың теле лә бойондороҡло. Милли хужалығы, милли эшмәкәрлеге булмағас, башҡорттар үҙ алдына бер нәмә лә эшләй алмай, һәр яңы нәмәне, ваҡ-төйәгенә ҡәҙәр, әҙер көйө урыҫтан ала, һәм һәр нәмәнең үҙе менән бергә урыҫтар ҡушҡан атамаһы ла башҡорт теленә килеп инә. Мәҫәлән, *вертолет* тигән һүҙҙе алайыҡ. Ул асылда — яһалышы яғынан да, мәғәнәһе яғынан да хилаф бер һүҙ. Ләкин урыҫтар хилаф бер һүҙ яһап, яңы осҡос төрөнә атама иткән икән, шул атама башҡорт теленә лә алынған. Үҙебеҙгә үҙебеҙ хужа булһаҡ, шуны матур итеп башҡортса әйтергә аҡыл етмәҫ инеме ни? Ошоноң һымаҡ кәрәкмәгән һүҙ хәҙер беҙҙә бик күбәйеп китте. Һәр яңы атаманы урыҫ теленән алғас, башҡорт теленең үҙендәге һүҙ

яһау саралары ҡулланыштан сыға, үҙ нигеҙендә һүҙ байлығын арттырыу туҡтай. Лексика өлкәһендә генә түгел, грамматика өлкәһендә лә ят телдең йоғонтоһо менән башҡорт теленең үҙ мөмкинлектәрен ситләтә торған ят нәмәләр килеп инә һәм, ғөмүмән, бөтә йәһәттән телдең үҫешенә, камилланышына кәртә ҡуйыла. Таныҡлы украин телсеһе А. А. Потебня: «Уңайлы тарихи шарттарҙа һәр халыҡтың теле юғары үҫешкә, камилланышҡа һәләтле», — тигән. Башҡорт теленә ана шул уңайлы шарт юҡ. Халыҡты ҡол иткәндә, ул шартты ла көл иткәндәр.

Халыҡтар борон-борондан үҙ-ара аралашып, алыш-биреш итешеп йәшәгән, һәм шул алыш-биреш, һис һүҙһеҙ, телдә лә сағылыш тапҡан. Телдәр бер-береһенән һүҙ алышҡан, хатта грамматика өлкәһендә лә йоғонто яһашҡан. Тик был йоғонто грамматик форма йәки ҡоролманы туранан-тура күсереү рәүешендә түгел, ә шуның өлгөһөндә үҙ сараларын үҫтереү, үҙенең лексик һәм грамматик туҡымаһына ҡушып бергә үреү рәүешендә ғәмәлгә индерелгән. Шуға күрә үҙләштерелгән саралар телдең тәбиғәтен һәм ҡоролошон боҙмай, ыңғай килеп, уны байытыуға, үҫтереүгә килтергән. Мәҫәлән, ғәрәп һәм фарсы телдәренән ингән *фәҡәт, сөнки, ләкин, һәм* кеүек теркәүестәрҙе хәҙер сит һүҙ тип әйтеүе лә ҡыйын, улар башҡорт теленең үҙенекенә әйләнгән, уның синтаксик мөмкинлектәрен киңәйтергә ярҙам иткән. Шулай уҡ *ҡамыт, сана, бүрәнә* тигән һымаҡ күп һүҙҙе бөгөн кемдеке тип тә ҡапыл-ҡара әйтерлек түгел. Ул һүҙҙәрҙең урыҫ теленән алынғандары ла башҡорт теленең фонетик үҙенсәлегенә яйлашып, үҙләшеп бөткән. Сит йоғонтоноң насар яғы хаҡында һөйләгәндә, быны һымаҡ ыңғай йоғонто күҙҙә тотолмай. Телдәге йоғонтоноң ике төрлөһө бар: тиң хоҡуҡлы телдәрҙең үҙ-ара алыш-биреше һәм хакимлыҡ иткән телдең бойондороҡло телде бөтөрөп алып барған көсле һөжүме. Милләттең яҙмышы телдең яҙмышына бәйләнгән икән, милли телде һаҡлап алып ҡалыр өсөн, күмәк көс, күмәк тырышлыҡ менән ят телдең тиҫкәре йоғонтоһона ҡаршы торорға һәм шул эште аңлап, белеп эшләргә кәрәк. Бөгөнгө көндә милләттең тереклеген тәьмин итә торған иң ҙур сараларҙың береһе икәнен иҫәпкә алғанда, башҡорт телен урыҫ теленең ҡоллоғонан ҡотҡарыу эшен хатта милли азатлыҡ көрәшенә тиңәргә мөмкин.

Донъя гел шулай булмаҫ. Кешелек донъяһында бер империя ла мәңге йәшәй алмаған. Заманында ниндәй дәһшәтле империялар ҡитғаларҙы биләп, дер ҡалтыратып тотҡан. Улар ҡаҡшамаҫтай булып, быуаттар буйы хөкөм һөрһә лә, бара-бара барыбер ҡыйраған. Урыҫ империяһы ла күҙгә

күренеп тарҡала башланы. Уның аҙаҡкы көнө, бәлки, алыҫ та түгелдер. Шул көнгә хәтле телебеҙҙе ҡурсалап, кер тейҙермәй һаҡлап тора алһаҡ, милли азатлыҡ алыуға, милли дәүләт ҡороуға ла өмөт тота алырбыҙ. Дәүләт ҡорғас, ысын милләт булып, үҙ яйыбыҙға йәшәргә һәм үҫергә тулы мөмкинлек асылыр.

## КҮПЛЕК ТӨШӨНСӘҺЕ

Башҡорт телендә, башҡа төрки телдәрҙәге кеүек үк, күплек төшөнсәһенең грамматик күрһәткесе булып *-лар* ялғауы йөрөй, ләкин ул күплекте билдәләр өсөн һәр урында ҡулланылмай, сөнки күплек төшөнсәһе телдәге дөйөмлөк төшөнсәһе менән нығ бәйле. Дөйөмлөк төшөнсәһе һәр атама һүҙҙең мәғәнә йөкмәткеһенә инә, йәғни бөтә атама һүҙ теге-был нәмәнең бер берәмеген генә түгел, ә күп берәмектән торған дөйөм төркөмөн, тотош затын аңлата. Мәҫәлән, *ат* тигән һүҙ билдәле бер атты белдереүҙән элек, шул затҡа ингән бөтә хайуанды, ғөмүмән йылҡы малын үҙ эсенә ала. Шуның өсөн *Ул ат көтә* тигәндә аттың берәү түгел, күп икәне үҙенән-үҙе аңлашыла.

Һүҙ барышында нимәнеңдер билдәле, тәғәйен бер төркөмө йәки ғөмүмән бөтә заты күҙҙә тотолорға мөмкин. Шуларҙың тәүгеһендә күплекте күрһәтер өсөн күплек ялғауын ҡулланырға тура килә, ә икенсеһендә күплек ялғауы бөтөнләй кәрәкмәй. Мәҫәлән, *Мышылар һыулауға төшкән; Ҡарағайҙар елгә сайҡала* тигәндә күҙгә күренеп торған билдәле мышылар һәм ҡарағайҙар тураһында һүҙ барғас, күплек ялғауы кәрәк була. Шул уҡ һүҙҙәрҙе *Беҙҙең яҡта мышы бар; Ҡарағай йыл буйы йәшел була* тигәндә күплек ялғауы менән алып булмай, сөнки бында мышы һәм ҡарағайҙар айырым-айырым берәмектәрҙән торған күмәк төркөм итеп түгел, ә бөтә заты менән тотош бер берәмек итеп бирелә.

Күплек һәм дөйөмлөк төшөнсәләренең грамматик формаланышы төрлө телдә төрлөсә була. Урыҫ телендә лә атама һүҙҙәр, беҙҙәгесә, дөйөмлөк төшөнсәһенә эйә. Мәҫәлән, *дом* тигән һүҙ билдәле бер өйҙө түгел, ғөмүмән шул рәүештәге нәмәләр төркөмөн аңлата, ләкин ул һүҙ билдәле өйҙәрҙе белдергәндә лә, ғөмүмән бөтә өй затын белдергәндә лә күплек формаһында алына. Баяғы миҫалдарҙы урыҫ теленә кү-

серһәк, уларҙың бөтәһе лә күплек формаһын талап итә: *Лоси пришли на водопой; Сосны качаются на ветру* — билдәле нәмәләр; *У нас водятся лоси; Сосны зелены круглый год* — айырып билдәләнмәгән нәмәләр. Күплек формаһының ҡулланышы урыҫ телендә бик киң, унда күплек төшөнсәһе лә, дөйөмләк төшөнсәһе лә һәр ваҡыт күплек формаһы менән нығытыла.

Тимәк, башҡорт телендә күплек менән дөйөмләк төшөнсәләре үҙ-ара ап-асыҡ сик менән айырылып, грамматикала үҙенә башҡа сағылыш ала. Урыҫ телендә сик үткәрелмәй, күплек булған һәр ерҙә күплек формаһы ҡулланыла. Беҙҙең яҙышҡан кешеләр ошо ерҙә тотош урыҫ теленә эйәреп, бөтә урында күплек ялғауы ҡуйып, башҡорт теленең үҙенсәлеген, грамматик ҡанунын боҙа. Мәҫәлән,

*Һыуҙы малдарға ташып эсерергә мәжбүрбеҙ* (Й., 16.07.96) тигән һөйләмдәге *мал* һүҙенең эске йөкмәткеһе иң элек дөйөмләк мәғәнәһенә эйә, ул билдәле бер хайуанды күҙҙә тотоп һөйләгәндә генә берлек мәғәнәһенә эйә булырға мөмкин. Шуға күрә күплек ялғауы уға бөтөнләй йоҡмай. Башҡорт телендә, *мал, йылҡы, кейек* тигән кеүек, ғөмүмән дөйөмләк мәғәнәһе менән генә йөрөй торған һүҙҙәр бар. Улар күплек ялғауын яратмай.

*Киләһе йылда ла ҡунаҡтар йыйырбыҙ* (Б., 19.07.96) тигәндәге *ҡунаҡ* һүҙе берәм-берәм ҡунаҡты түгел, ғөмүмән ҡунаҡ кешене күҙҙә тота, ул дөйөмләк мәғәнәһен йөкмәгән. Урыҫ телендә булһа, был һүҙ, әлбиттә, күплек формаһында торор ине, ә беҙҙә күплек ялғауы менән алыу мәғәнәһеҙ конкретлыҡҡа килтерә.

*Был китапта балалар тәрбиәләү тураһында яҙылған* (А., 96, 1, 8) тигәндәге *бала* һүҙе, *бала ҡарау, бала аҫрау, бала табыу, бала үҫтереү* тигән һүҙҙәрҙәге кеүек, берлек формаһында торорға тейеш.

*Талдар араһында ҡоштар сутырлаша* (Б., 23.08.96) тигәндәге *тал* һүҙенә;

*Туҡта, сәскәләр йыйып апҡайтайым әле кәләшкә* (А., 96, 8, 117) тигәндәге *сәскә* һүҙенә;

*Һиңә хаттар яҙып ҡына йыуанам* (Б., 24.09.96) тигән һөйләмдәге *хат* һүҙенә был урында күплек ялғауы ҡушып булмай.

*Кешеләрҙең балалары һинең йәштә ике ат менән урманға утынға йөрөй* (А., 96, 1, 89) тигән һүҙ халыҡ телендә *әҙәм балаһы* тип берлек формаһында әйтелә.

*Мөнәсәбәттәрҙе асыҡлау өсөн Әхмәҙулла менән осрашып һөйләшергә ине* (Б., 10.07.96) тигәндәге *мөнәсәбәт* һүҙе лә күплектә торорға тейеш түгел.

Урыҫ телендә парлы нәмәнең атамаһын күплек формаһында алалар: *сапоги, лыжи.* Башҡорттар бер маҡсатка хеҙмәт иткән парлы нәмәне берәмектәргә бүлмәй, икеһен бер нәмәгә һанай һәм уға күплек ялғауы ҡушмай.

*Иҙел, күҙҙәрендәге әсе йәштәрҙе һөртөргә лә онотоп, тышҡа атылды* (Й., 11.07.96) тигән һөйләмдәге *күҙ* һүҙенә;

*Һалдат... ҡултыҡ таяҡтарына таянды* (Ш., 96, 3, 10) тигәндәге *ҡултыҡ таяғы* һүҙенә күплек ялғауы ҡушҡас, һәр күҙ һәм һәр таяҡ бер-береһенә ҡатнашы булмаған ике айырым нәмә һымаҡ күренеп, мәғәнәне тарҡата. Парлы нәмәнең икеһенә баҫым яһап, конкретлаштырырға кәрәк булғанда ла, башҡорттар күплек ялғауы түгел, *ике* (хайуан аяғына ҡарата — *дүрт*) тигән һүҙ ҡушып: *Ике күҙенән яҙҙы, Дүрт аяғынан баҫа алмай, Ике ҡулын кеҫәһенә тыҡҡан,* тип әйтә. Ғәҙәттә конкретлаштырыу сараһын башҡорттар парлы нәмәнең икеһе 'хаҡында түгел, ә, киреһенсә, береһе хаҡында һөйләгәндә ҡуллана: ике күҙе лә күрмәһә, *Күҙе күрмәй,* бер генә күҙе күрмәһә, *Һыңар күҙе күрмәй* йәки *Бер күҙе күрмәй,* тип әйтә.

Башҡорт телендә дөйөмләштереү, йыйнау мәғәнәһендәге ҡушар һүҙҙәр бик ҙур урын алған. Күплек төшөнсәһе бирер өсөн махсус рәүештә яһалған ул һүҙҙәргә тағы өҫтәп күплек ялғауы ҡушыу, әлбиттә, бер үлсәүгә лә һыймай. Ләкин беҙҙең яҙма телдә хәҙер уларҙы күплек ялғауһыҙ бөтөнләй ҡулланмай башланылар. Был тағы баяғыса күплек төшөнсәһе булған һәр ерҙә күплек формаһы ҡулланған урыҫтарға эйәреүҙән килә.

*Мал-тыуарҙар һаны кәмеүгә китте* (Б., 24.07.96) тигәндәге *мал-тыуар;*

*Хоҙайбирҙеләрҙең гәзит-журналдарҙан айырылғаны юҡ* (Й., 19.09.96) тигән һөйләмдәге *гәзит-журнал;*

— *Нимә, Зәйтүнә ҡәрендәш, бала-сағаларың күпме, ҡайҙалар?* (А., 96, 1, 4) тигәндәге *бала-саға* һүҙҙәре үҙенән-үҙе күплек мәғәнәһенә эйә, шуға йәнә күплек ялғауы өҫтәп ҡуйыу телде боҙоуҙан башҡа бер нәмә лә бирмәй.

Ҡушар һүҙ беҙҙә күп. Айырым һүҙ булып телдә ныҡлы урын алғандарынан тыш, уларҙың һүҙ ыңғайында яһап әйтелгән сағы йыш була. Шуға күрә быны үҙенә күрә бер һүҙ яһау сараһы тип әйтергә мөмкин. Ныҡлы урын алғандарына, *аҙыҡ-түлек, ата-баба, ата-әсә, бәлә-ҡаза, дуҫ-иш, ер-һыу, кәрәк-ярак, ҡайғы-хәсрәт, ҡатын-ҡыҙ, ҡорал-яраҡ* тигән кеүек, актив һүҙҙәр инә. Улар бер ваҡытта ла күплек ялғауын ҡабул итмәй.

Аныҡлаусы булып билдәле (иҫәпле) йәки билдәһеҙ (иҫәпһеҙ) күплекте белдергән һүҙ торһа, исем һәр ваҡыт берлектә

килә. Был ҡағиҙә башҡорт теленә генә түгел, алтай телдәренең бөтәһенә лә хас. Урыҫ телендә, киреһенсә, был урында мотлаҡ күплек формаһы ҡулланыла.

Билдәле (иҫәпле) күплекте төрлө төркөмгә ингән һандар билдәләй, йәғни төп һан (*дүрт, тиҫтә, йөҙ* һ. б.), бүлем һаны (*бишәр, егермешәр, иллешәр* һ. б.), сама һаны (*утыҙлап, алтмышлап, меңәрләгән* һ. б.). Урыҫ телендә *шесть карандашей, по десяти рублей, сотни людей* тип әйтелһә, башҡорт телендә *алты ҡәләм, унар һум, йөҙәрләгән кеше* тип кенә әйтеп була. Күҙ йомоп урыҫ теленә эйәреү арҡаһында, беҙҙең яҙышҡан кешеләр үҙебеҙҙең телдәге ошо ҡаты ҡағиҙәне лә иҫәптән сығарып ташланы.

*Урге Яйыҡ ҡәлғәһенән 2800 Урал аръяғы башҡорттарын һәм 450 Исәт казактарын берләштергән отряд килергә тейеш* (А., 96, 4, 133);

*Беҙҙең тармаҡта төрлө кимәлдәге 2318 етәксе кадрҙар эшләй* (Б., 14.09.98);

*Ике йөҙ мең самаһы был әсирҙәрҙе батша хөкүмәте... тимер юл хеҙмәтендә файҙаланды* (А., 96, 3, 80);

*Ул тиҫтәгә яҡын фән кандидаттары әҙерләп сығарҙы* (Б., 14.09.96);

*...Байрамдары меңләп кешеләр йыйылған ғибәҙәт тамашаларына әйләнер ине* (А., 96, 3, 125);

*...Ихтилал ҡот осҡос яуызлыҡ менән баҫтырыла. Меңәрләгән ауылдар юҡ ителә* (Й., 19.09.96);

*Беҙҙең тирәлә генә унарлаған приискылар бар ине* (А., 96, 6, 157) тип яҙыуҙы хәҙер гәҙиттәге бер нәмәгә әйләндерҙеләр.

Күп ваҡыт, кәрәгенә ҡарап, аныҡлаусы һан менән исем араһына иҫәп берәмеген белдергән (нумератив) һүҙ ҡыҫтырыла: *ун баш һыйыр, биш ус ярма, өс бәйләм һепертке, ике йомғаҡ май* һ. б. Был урында ла исемде күплек формаһында алырға ярамай. Тимәк,

*Муса... бер төргәк ҡағыҙҙар килтереп һалды* (А., 96, 3, 74);

*Сәхнәгә бер төркөм ҡурайсылар күтәрелеп, «Урал» көйөн һуҙып ебәрә* (Й., 28.09.96) тип яҙыу һис дөрөҫ булмай.

Билдәһеҙ (иҫәпһеҙ) күплекте сифаттар, сифат мәғәнәһе алып, аныҡлаусы хеҙмәтен үтәгән рәүештәр һәм грамматикала билдәләү алмашы тип йөрөтөлгән һүҙҙәр күрһәтә. Тәүге төркөмгә *күп (бик күп, күп кенә), күпме (әллә күпме), күпселек, күмәк, байтаҡ, бихисап, хәтһеҙ, әҙ (әҙ генә), нисә (бер нисә, әллә нисә), нисәмә (әллә нисәмә), ни хәтлем (әллә ни хәтлем)* тигән кеүек һүҙҙәр, икенсе төркөмгә *бөтә, бөтөн, бар, барлыҡ, һәммә, көллө* тигән кеүек һүҙҙәр

инә. Ошо һүҙҙәр аныҡлаусы булып килгәндә, исемдәргә йәнә күплек ялғауы ҡушып булмай. Шулай булғас, түбәндәге миҫалдарҙа уны ҡушыу бик ҙур хата булып тора.

*Яҙыусыға бик күп хаттар килде* (Б., 12.11.96);

*...һөрән һалып күмәк һыбайлылар сабып үтте* (А., 96, 4, 62);

*Әлеге көндә был йәһәттән байтаҡ мәғлүмәттәр тупланған* (Й., 3.08.96);

*Аҙмы ни ҡала һәм районда хәл итә торған мәсьәләләр* (Б., 19.07.96);

*Һиңә бөтә йән эйәләре буйһона* (Б., 16.07.96);

*Бар проблемалар ҙа еңел хәл ителер һымаҡ күренә* (Й., 18.07.96);

*...Район үткәргән барлыҡ кәңәшмәләргә инәбеҙ* (А., 96, 11, 8) тигән һөйләмдәрҙәге *хат, һыбайлы, мәғлүмәт, мәсьәлә, йән эйәһе, проблема, кәңәшмә* тигән һүҙҙәр барыһы ла берлек формаһында, йәғни ялғауһыҙ, алынырға тейеш.

Күплек төшөнсәһе биргән сифат һәм сифатлашҡан рәүештәр ҡайһы берҙә баш йәки эйәрсен һөйләмдең хәбәре булып китә, ләкин шул саҡта эйә хеҙмәтен үтәүгә күскән баяғы исемдәр барыбер күплек ялғауын ҡабул итмәй. Шуға күрә,

*Ауылда ишле ғаиләләр байтаҡ икән* (Б., 13.09.96) тигәндәге *ғаилә* һүҙенә;

*Хәбәрҙәр күп, араларында хәүефлеләре лә бар* (А., 96, 3, 74) тигән һөйләмдәге *хәбәр, ара* һүҙҙәренә күплек ялғауы яңлыш ҡушылған.

Бәғзе берҙә, күплек төшөнсәһенең тулылығына баҫым яһарға кәрәк булғанда ғына, исемгә күплек ялғауы ҡушырға мөмкин, тик уның өсөн аныҡлаусылыҡ мөнәсәбәтендәге ике һүҙ эйәлек мөнәсәбәтенә күсерелергә тейеш: *ауылдарҙың байтағы, уҡытыусыларҙың бөтәһе лә* һ. б. Шул йәһәттән,

*Мәктәптәрҙең күбеһендә башҡорт теле өйрәнелә* (Й., 29.06.96) тигән һөйләм дөрөҫ төҙөлгән, ләкин күп ваҡыт был ҡағиҙәгә иғтибар бирелмәй. Мәҫәлән,

*Борсолмағыҙ, бөтә пассажирҙар ҙа... автобуста баш ҡалаға оҙатыласаҡ* (А., 96, 1, 23) тигән һөйләмдә *пассажирҙарҙың бөтәһе лә* тип;

*Райондың бөтә хужалыҡтарында ла бесәнгә ваҡытында төштөләр* (Б., 26.07.96) тигән һөйләмдә *район хужалыҡтарының бөтәһендә лә* тип;

*Был, күрәһең, Башҡортостандағы барлыҡ театрҙарға хас күренештер* (Й., 18.10.94) тигән һөйләмдә *театрҙарҙың*

*барыһына ла* тип яҙғанда ғына башҡорт теленең ҡағиҙәһенә ҡаршы килмәҫ ине.

*Бөтә, һәммә* тигән кеүек билдәләү алмаштарын эйәлек мөнәсәбәтендә ҡулланыу ғөмүмән башҡорт теленә нығыраҡ хас, уларҙы аныҡлаусы урынына ҡуйыу һаман да баяғы урыҫ теленең тәьҫире арҡаһында өҫтөнлөк алып китте, тип әйтергә мөмкин.

Күплек төшөнсәһен туранан-тура аңлатмаһа ла, ситләтеп күплекте белдергән *төрлө (төрлө-төрлө, күп төрлө)* һәм *һәр (һәр бер, һәр төрлө)* һүҙҙәре лә, аныҡлаусы булып килгәндә, исемдең күплек формаһы менән һыйышмай. Шуның өсөн,

*Бөтә төр эштәрҙе башҡорттар үҙҙәре башҡара* (Й., 10.09.96) тигән һөйләмдәге *эш* һүҙенә;

*Төрлө мәшәҡәттәр менән ике аҙна ваҡыт һиҙелмәйсә үтеп тә китте* (Б., 27.08.96) тигәндәге *мәшәҡәт* һүҙенә;

*Ямантауҙа һәр төрлө үләндәр ҡотороп үҫкән* (А., 96, 5, 104) тигәндәге *үлән* һүҙенә күплек ялғауы ҡушып булмай. Күплек ялғауы бында ла, үрҙә әйтелгәнсә, эйәлек мөнәсәбәтенә ингән исемгә ҡушҡанда ғына урынлы була. Тимәк,

*Дөйөм алғанда, бөтә кешеләр ҙә бер төрлө* (Б., 10.07.96) тигән һөйләмдә йә *бөтә кеше бер төрлө,* йәки *кешеләрҙең бөтәһе лә бер төрлө* тип әйтһәк кенә, телдең яйына килә.

Күплек төшөнсәһен ситләтеп аңлатҡан һүҙҙәр иҫәбенә шулай уҡ *башҡа, бүтән, бәғзе, ҡайһы бер* тигән кеүек һүҙҙәр инә һәм уларҙың артындағы исемдәр ҙә күплек ялғауын ҡабул итә алмай.

*Ҡайһы бер урындарҙа әле бесән әҙерләү дауам итә* (Й., 27.07.96) тигәндәге *урын* һүҙе;

*Нәфисә лә тирә-яҡтағы бүтән тауыштарҙы онотто, тик шишмәне генә тыңланы* (Б., 4.10.96) тигәндәге *тауыш* һүҙе;

*Теге йәки был халыҡтар ҡуҙғалған икән, уға ҡаршы тороу урынына, был хәрәкәтте файҙалана белергә кәрәк* (А., 96, 5, 77) тигән һөйләмдәге *халыҡ* һүҙе башҡорт теленең ҡағиҙәһе буйынса берлектә алынырға тейеш.

Күплек төшөнсәһен нык көсәйтеп бирергә теләгәндә, аныҡлаусы хеҙмәтен үтәгән һүҙҙе ҡабатлап, ҡушарлатып әйтеү башҡорт телендә ҙур урын алған: *көтөү-көтөү мал, йөк-йөк утын, тәпән-тәпән май* һ. б. Юғарыла ҡараған башҡа урындағы кеүек, бында ла исем күплек ялғауы менән йөрөмәй. Шулай булғас,

*Һин матур-матур сәскәләр табып алып ҡайта инең* (А., 96, 2, 94) тигән һөйләмдәге *сәскә* һүҙенә;

*Таш бина алды майҙанына саф-саф ғәскәрҙәр теҙелгән* (А., 96, 4, 72) тигәндәге *ғәскәр* һүҙенә;

*Күптәнме ни бында өйөр-өйөр малдар әйҙәлде* (Й., 18.07.96) тигән һөйләмдәге *мал* һүҙенә күплек ялғауы ҡушыу, башҡорт теле күҙлегенән ҡарағанда, ҙур хата була.

Ҡемдең йәки ниҙендер эш-ҡылығын, сифатын билдәләп, яңғыҙы йәкиярҙамлыҡ ҡылым менән бергә һөйләмдә хәбәр хеҙмәтен үтәп килгән һүҙ, бер берәмек түгел, төркөм тураһында һүҙ барғанда ла, күплек формаһын ҡабул итмәй. Был урында ла башҡорт теле урыҫ теленә тап килмәй. Урыҫ телендә, *Я — хлебороб, Мы — хлеборобы, Ты стал студентом, Вы стали студентами* тигәнде башҡорттар, *Мин — игенсе, Беҙ — игенсе, Һин талип булдың, Һеҙ талип булдығыҙ* тип әйтә, йәғни *игенсе, талип* тигән һүҙҙәр бер ерҙә лә күплектә алынмай. Ошо ныҡлы ҡағиҙәне тотҡанда,

*Бөтәһе 1000 баш һыйыр малы булып, шуның 250 башы — һауын һыйырҙар* (Б., 24.07.96) тигән һөйләмдәге *һауын һыйыр;*

*Бөтәһе лә — буласаҡ уҡытыусылар бит* (Б., 17.07.96) тигәндәге *уҡытыусы;*

*Ҡыҙыҡтар был ике аяҡлылар* (А., 96, 6, 100) тигәндәге *ҡыҙыҡ;*

*Һеҙ әле — малайҙар ғына* (А., 96, 6, 105) тигән һөйләмдәге *малай;*

*Көтөүселәр булып өлкән синыф уҡыусылары эшләгәнен белгәс, яланға киттек* ( Й., 13.07.96) тигән һөйләмдәге *көтөүсе;*

*Балалар — беҙҙең тормош сәскәләре* (Й., 16.07.96) тигәндәге *сәскә* һүҙенә һис кенә лә күплек ялғауы ҡушып булмай.

Шундай һүҙҙәргә ҡараған *кем? нимә?* тигән һорау һүҙҙәре лә күплектә тора алмай, йәғни,

*Кемдәр улар?* (А., 96, 3, 31);

*Уларҙың кемдәр икәнен Бәхтиәр өләсәһенән һорашты* (А., 96, 2, 126);

*Яңы лауреаттар кемдәр булыр?* (Й., 18.10.94) тип әйтеү дөрөҫ булмай.

Быға ҡәҙәр әле гел исем төркөмөнә ингән һүҙҙәрҙең күплек ялғауын ҡабул иткән-итмәгән урындары хаҡында һөйләнелде. Ҡылымға килгәндә, уның күплек төшөнсәһенә булған мөнәсәбәтен эйә—хәбәр араһындағы ярашлыҡ күҙлегенән генә ҡарап үтергә мөмкин, сөнки күберәк шул урында кәрәгенән артыҡ тырышлыҡ күрһәтеп ебәрелә.

Урыҫ телендә эйә менән хәбәр берлек-күплектә һәр ваҡыт тулыһынса ярашып килә. Унда, мәҫәлән, *Они вышел на*

*работу* тип эйәне күплектә, хәбәрҙе берлектә әйтеү — башка һыймаçлык эш. Башкорт телендә ул юк. Башкорт телендә эш-хәрәкәттең күмәк зат тарафынан башкарылғанына баçым яһап, бик конкретлаштырырға кәрәк булғанда ғына һөйләмдең хәбәрен эйәһе менән күплектә яраштырып куйырға була. Уларҙы һәр һөйләмдә яраштыра башлаһаң, хата була, ә яраштырмағандан мәғәнәгә бер зыян да килмәй.

*Ульяновск калаһынан дүрт талип... палатка короп яталар икән* (Б., 31.07.96);

*Улар был бинаны калдырып китергә мәжбүр булғандар* (Й., 21.11.96);

*Улар элекке эшмәкәрлектәре өсөн ғәйепләнмәйҙәр* (А., 96, 4, 80);

*Таня менән коллегам Марат почтаға киттеләр* (Й., 29.08.96) тигән һөйләмдәрҙең хәбәрен эйә менән күплектә яраштырыу хата булған, уларҙың береһендә лә күплек ялғауы кәрәкмәй.

Шулай итеп, төпсөп караганда, күплек төшөнсәһенең грамматик формаланышы башкорт теле менән урыç теленең һәр береһендә үҙенә бер төрлө, башкортта бик тар, урыçта бик тулы икәнен асыклап була. Һәр телдең үҙ яйы, үҙ канундары бар. Шул үҙенсәлекле канундары буйынса, башкорт теле, бер яктан, күплек формаһын бик кыçһа, икенсе яктан, уны урыç теленә хас булмаған урындарға тарата. Иң билдәлеләре шулар:

1. Халык йырҙарында һәм юғары рәсми стилдә ниндәй ҙә булһа хис һалыр өсөн *беҙ, һеҙ* алмаштарына кушыла:

*Ат эйәрләттеләр, ай, беҙҙәргә, Хәтирә лә һылыуҙы эҙләргә.*

2. Халык йырҙарында шулай ук хис өçтәр өсөн яңғыҙлык һәм уртаклык исемдәргә кушыла:

*Уфаларҙан килгән, ай, әфлисун, бер-берекәйҙәре бирәр һум;*

*Алмалары, хөрмәләре кыҙарып бешәр әле.*

3. Аныклаусыһы һан йәки сифатлашкан рәүештән торған исемгә кушылып, күплек мәғәнәһен көсәйтә йәки сама мәғәнәһе бирә:

*Мин күп йылдар инде Стәрлетамакта йәшәйем* (Б., 17.07.96);

*Ун сакрымдар үткәс, юлыбыҙҙы эре-эре ак таштар быуҙы* (Б., 1.08.96).

4. Бер берәмектән торған нәмә йәки шәхестең атамаһына кушылып, үҙенең түгел, ә эйәһенең күплеген белдерә:

*Булат менән Ғәлиә әсәләрен көтөп ултыра;*

*Йәштәр тәүге балаларын табып та өлгөрмәгән, һуғыш башланған* (А., 96, 1, 61);

*Талха Зәки Вәлидиҙе Уйташ тауындағы йәйләүҙәренә алып китте* (А., 96, 3, 69).

5. Шәхси исемгә ҡушылып, шул шәхесте эсенә алған бөтә төркөмдө белдерә:

*Апайымдарға барып киләйем әле;*

*Бөгөн Әнүәрҙәр менән эшләнем.*

6. Ауыл, ҡала, төбәк атамаһына ҡушылып, шунда йәшәгән бөтә халыҡты белдерә: *баймаҡтар, яңауылдар.*

7. Эйәһеҙ һөйләмдең хәбәренә ҡушылып, күмәк кешенең эш-хәрәкәтен белдерә:

*Хәҙер әҙәп-тәртипте оноттолар.*

Яҙышҡан кешеләр күплек формаһының ҡулланышындағы был үҙенсәлекле урындарҙа бик хаталанмай. Иң күп хата шул форманы урыҫ теленең һәр ҡулланған ерендә ҡулланыу, урыҫҡа нык эйәреү арҡаһында килеп сыға. Шуның өсөн, башҡортса яҙғанда, күплек ялғауын тейешле ерҙә генә ҡуйып, әҙ булған һайын яҡшы тигән күҙлектән сығып эш итергә кәрәк. Уны ҡуймағанда күплек мәғәнәһе аңлашылмаҫ һымаҡ күреп, еренә еткерергә тырышыу телде асыҡламай, ә киреһенсә, сыуалтып, тел ҡағиҙәләрен боҙоуға килтерә.

# ИЗАФЕТ

Төрки телдәрҙә «изафет» тигән грамматик ҡоролма ҙур урын алып тора. Грамматик хеҙмәттәрҙә уны эйәлек мөнәсәбәтенә ҡуйылған ике исемдән тороп, тәүгеһе аныҡлаусы хеҙмәтен үтәгән һүҙ бәйләнеше тип аңлаталар. Изафеттың өс төрөн билдәләйҙәр: 1) ике һүҙе лә грамматик формаһыҙ нигеҙ һүҙҙән тора: *ағас өй, үгеҙ быҙау, кәбәк баш* һ. б.; 2) тәүге һүҙе төп килеш формаһы, икенсе һүҙе 3-сө зат эйәлек ялғауы менән килә: *ат башы, аш ҡалағы, һыйыр кәртәһе* һ. б.; 3) тәүге һүҙе эйәлек килеш ялғауы, икенсе һүҙе 3-сө зат эйәлек ялғауы менән килә: *ауылдың урамы, кешенең эше, донъяның күрке* һ. б.

Ошо өс төрҙөң тәүгеһен ысын мәғәнәле изафетҡа һанап булмай, һәм беҙҙең яҙма телдә уны яңлыштырыу ҙа юҡ, ти-

ергә була. Шуға күрә был хеҙмәттә изафеттың һуңғы ике төрө хаҡында ғына һүҙ алып барыла.

Изафеттың ике төрө бер-береһенән билдәлелек-билдәһеҙлек төшөнсәһе буйынса айырыла: *ат башы* тигәне айырып билдәләнмәгән дөйөм мәғәнәлә әйтелһә, *аттың башы* тигәне, эйәлек килеш формаһы арҡаһында, айырып билдәләнгән бер нәмәне аңлата.

Изафеттарҙың нигеҙе ябай, ләкин ғәмәлдәге телдә улар грамматик ялғау, аныҡлаусы һүҙ ҡабул итеп йәки бер-береһенә өҫтәлеп, ныҡ ҡатмарлашып китә, шул саҡта бөтә конструкцияны дөрөҫ итеп ҡороу мөһим урын ала. Яҙма телдәге бөтә буталсыҡ та шул саҡта килеп сыға.

Билдәһеҙлек, дөйөмлөк мәғәнәһенә эйә булған *ат башы, ат һарайы* тигән изафет бер бөтөн һүҙ берәмеге рәүешендә йөрөй, шуға күрә аныҡлаусы йәки күплек ялғауы ҡушҡанда, ул, айырым бер исем һымаҡ, үҙенең дөйөмлөк мәғәнәһен юғалтып, билдәлелек мәғәнәһе ала, йәғни *екке ат һарайы* йәки *ат һарайҙары* тип үҙгәрткәндән һуң, ғөмүмән ат һарайы түгел, ә, нисектер, билдәле булған ат һарайын йәки һарайҙарын күҙҙә тотҡанды аңлата.

Ошо урында *аттар һарайы* тип изафеттың тәүге һүҙенә күплек ялғауы ҡушыу бер нәмә лә бирмәй, мәғәнәһеҙлеккә генә килтерә. Ни өсөн тигәндә, күплек ялғауы, йәнәш торған ике һүҙҙе тартып, грамматик бәйләнешкә килтереү һәләтенә эйә түгел, шул арҡала бында *ат* һәм *һарай* тигән һүҙҙәр үҙ-ара бәйләнмәгән айырым-айырым һүҙ булып ҡала, һәм изафет тарҡала. Уларҙы бәйләп, изафет яһар өсөн, күплек ялғауынан һуң эйәлек килеш ялғауы ҡуйып, *аттарҙың һарайы* тигән рәүешкә килтерергә кәрәк була. Ул саҡта, әлбиттә, билдәһеҙлек, дөйөмлөк мәғәнәһе юғалып, изафеттың өсөнсө төрө барлыҡҡа килә. Әгәр был изафетта дөйөмлөк мәғәнәһен һаҡлап, аттарҙың күплеген генә күрһәтергә кәрәк була икән, уның өсөн *ат* һүҙенә күплек ялғауы ҡушыу кәрәкмәй, дөйөмлөк мәғәнәһендәге *ат* һүҙе ул күплекте үҙенән-үҙе аңлатып тора.

Башҡорт телендәге ошо ҡағиҙәләрҙе иҫәпкә алмағанлыҡтан, беҙҙең яҙма телдә йыш ҡына ҙур хата яһала. Мәҫәлән,

*Билдәләнгән ҡағиҙәләрҙе боҙған эттәр хужаларына штраф санкциялары исем өсөн генә һалына* (Б., 17.09.96) тигән һөйләмдә дөйөмлөк мәғәнәһендәге *эт* һүҙенең үҙенән-үҙе күплекте белдергәнен уйламай, хужаларҙың ғына түгел, эттең дә күп булғанын күрһәтер өсөн изафеттың ике ағзаһына ла күплек ялғауы ҡушылған, һөҙөмтәлә мәғәнәһеҙ бер һүҙ теҙеме килеп сыҡҡан.

*Башҡортостанда... карст күлдәре күп. Шундай күлдәр төптәре, мәҫәлән, Асылыкүл менән Ҡандракүл араһында осрай* (Й., 18.07.96) тигәндә шулай уҡ *күл төптәре* тип кенә ҡуйылһа ла, бер нисә күл икәне аңлашылыр ине.

*Райондар хакимиәттәрендә ошо мәсьәләне хәл итеү буйынса... яуаплы кеше тәғәйенләргә тәҡдим ителде* (Б., 17.09.96) тигән һөйләмдә йәнә *райондар хакимиәттәре* тип әйтеү беҙҙең тел ҡағиҙәһенә ҡаршы килә. Ул урыҫ теленә хас нәмә. Унда *администрации районов* тип ике һүҙгә лә күплек ялғауы ҡушыу кәрәк, ә беҙҙә *район хакимиәте* тигән һүҙ бар икән, күплек ялғауын шуның аҙағына ғына ҡуйып та, күп район хаҡында һүҙ барғанын белдереп була.

*Китаптар күргәҙмәләре ойоштороп, беҙ ҙә үҙ әҙәбиәтебеҙҙең хазиналары менән таныштырасаҡбыҙ* (Й., 9.07.96) тигәндәге *китаптар күргәҙмәләре* бигерәк хилаф булып тора, сөнки *китап күргәҙмәһе* — терминлашыуға яҡын торған бер һүҙ берәмеге, шуны тарҡатып, араһына күплек ялғауы ҡыҫтырыу ҡағиҙәгә һыймай.

Килтерелгән миҫалдарҙа үҙебеҙҙең тел мөмкинлегенә ышанмай, урыҫ теленең яйына килтереп, еренә еткереп яҙырға тырышыу ныҡ эште боҙған.

Башҡорт теле күҙлегенән, хәҙерге телдә урынлашып алған *балалар баҡсаһы, балалар йорто* тигән һүҙҙәрҙең яһалышы ла ҡағиҙәнән ситкә сыға. Бында *бала* һүҙе дөйөмлөк мәғәнәһе менән килеп, ғөмүмән бала затын аңлатып торорға тейеш, сөнки ниндәйҙер билдәле балалар күҙҙә тотолмай. Ә ул дөйөмлөк мәғәнәһен *бала* һүҙенең берлек формаһы ғына бирә ала. Изафетҡа аныҡлаусы һүҙ ҡуйып, бер төркөм баланы нисектер айырып билдәләгәндә генә, йәғни *һәләтле балалар баҡсаһы, зәғиф балалар йорто* тигән кеүек урында ғына, күплек формаһын ҡулланып була.

Изафет өлкәһендә беҙҙең менән бер үк ҡағиҙәгә буйһонған төрөк теле урыҫ теленә эйәрмәгәс, был мәсьәләлә хаталанмай. Төрөктәр *чожук баһчеси* (детский сад), *чожук саһасы* (детская площадка), *чожук һасталыклары* (детские болезни), *чожук һикайелери* (детские рассказы) тип әйтә, һәм шул рәүештә был һүҙҙәр изафет талабына ла тотош яуап бирә, мәғәнә йәһәтенән дә дөрөҫ була. Бындағы *чожук* (бала) һүҙе конкрет мәғәнәгә түгел, дөйөмләштерелгән мәғәнәгә эйә, ә күплек ялғауы ҡушһаң, ул кәрәкмәгән билдәлелек мәғәнәһе ала һәм изафеттың эске бәйләнеше өҙөлә. Бигерәк тә *балалар баҡсалары* тигәндә, ҡолаҡҡа йоҡмаҫ грамматик тавтология хасил була. Ул тавтологик форма бер төрлө лә грамматик функция үтәй алмай, телде боҙоп ҡына тора. Шулай булғас,

*Дүртөйләләге шикелле балалар йорттарының республикала ике тиҫтәләп булғанын әйтһәк, ... тотолған сығымдарҙы иҫәпләргә мөмкин* (Б., 17.07.96) тигәндәге *балалар йорттары;*

*Ветерандар советтары пенсияны район хакимиәтенең социаль бүлегенән алғанда һәйбәт булыр ине тигән теләк белдерә* (Б., 25.07.96) тигәндәге *ветерандар советтары,* тел талабы буйынса, *бала йорттары, ветеран советтары* тип әйтелергә тейеш.

Ошоға оҡшаш миҫалдарҙан

*Ижади ойошмалар етәкселәре лә ошо хәлгә иғтибар итмәй килә* (Ш., 96, 3, 111);

*(Драматург) драматик яҙмышлы кешеләр образдарын үҙәккә ҡуя* (Б., 12. 11. 96) тигән һөйләмдәрҙе алайыҡ. Уларҙың беренсеһендә *ойошма етәксеһе,* икенсеһендә *кеше образы* тигән изафет лексик конструкцияның нигеҙе булып килә. Шул изафеттарҙың тәүге ағзаһына ла, икенсеһенә лә күплек мәғәнәһе бирер өсөн, аҙағына күплек ялғауы ҡушып, *ойошма етәкселәре, кеше образдары* тип әйтеү етә. Уларҙың *ижади, драматик яҙмышлы* тигән аныҡлаусылары тәүге һүҙҙе аныҡлап килә һәм изафеттың дөйөм ҡоролошона тәьҫир итмәй.

Яҙма телдә изафеттың икенсе төрөн ҡулланыуҙа булған шундай хаталар менән бергә, икенсе һәм өсөнсө төрҙәрен бер-береһе менән бутау, улар араһындағы айырманы юйырға тырышыу хәҙер ғәҙәткә инеп китте. Быны белмәгәндән түгел, белә-күрә шулай итәләр, тип уйлауҙан башҡа сара ҡалмай. Мәҫәлән,

*Дуҫлыҡ ныҡлығы шунда* (А., 96, 10, 105) тигәндәге *дуҫлыҡ ныҡлығы;*

*Ул үҙенең әрнеүҙәре менән тулы, ситтәр көйөнөсөнә урын аҙ ҡалған* (А., 96, 6, 3) тигәндәге *ситтәр көйөнөсө;*

*Йәштәр йыйындарында аҡ тирмәләр... күңелде рухландырып тора* (Й., 20.07.96) тигәндәге *йәштәр йыйындары* башҡорт теленә хас түгел. Улар билдәле, аныҡ нәмәне аңлата һәм изафет ҡағиҙәһе буйынса тәүге һүҙе эйәлек килеш ялғауы менән алынырға тейеш. Тейешле ялғауҙы ҡуймай ҡырҡып ташлағас, ике аралағы грамматик бәйләнеш өҙөлгән, һәм, авторҙың яҙғанын аңлар өсөн, беҙ етмәгән нәмәһен үҙебеҙ еткереп уҡырға мәжбүр булабыҙ. Беҙҙең тел, әлбиттә, ыҡсымлыҡты ярата, ҡайһы берҙә һүҙ йәки һөйләмде ҡыҫҡартып та ебәрә. Ләкин мәғәнәне боҙоу, һүҙҙәрҙең грамматик бәйләнешен өҙөү иҫәбенә бер нәмәне лә ҡыҫҡартып булмай. Уның ҡыҫҡарта торған үҙ урындары бар.

Изафеттың төрөн алмаштырыу абайһыҙҙан эшләгән эш түгел икәнен күрһәтер өсөн, тағы миҫал килтерергә мөмкин:

*Исхаҡ ҡустыһы хәлен аңлай* (А., 96, 1, 37) тигән һөйләмдәге *ҡустыһы хәле;*

*Улар... халҡы бәхете өсөн баш һала* (Й., 12.09.96) тигәндәге *халҡы бәхете;*

*Нәркәс... ырыуҙаштары тормошо хаҡында хафалана* (А., 96, 4, 117) тигән һөйләмдәге *ырыуҙаштары тормошо* шулай уҡ эйәлек килеш ялғауын алып ырғытыу һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан. Килеш ялғауын ташлап, изафеттың ике ағзаһына ла ҡушылған эйәлек ялғауын бер-бер артлы килтереп ҡуйыу телгә ят булып тора. Юғарыла изафеттың тәүге ағзаһындағы күплек ялғауы хаҡында әйткән һүҙҙе бында эйәлек ялғауына ҡарата әйтергә тура килә. Эйәлек ялғауы ла изафеттың ике ағзаһын грамматик бәйләнешкә килтерә алмай. Ҡатар ҡуйылған ике һүҙ үҙ-ара бәйләнешһеҙ, мәғәнәһеҙ булып тороп ҡала. Уларҙы бәйләр өсөн тәүге һүҙҙең эйәлек ялғауына өҫтәп, эйәлек килеш ялғауы ҡушырға, йәғни *ҡустыһының хәле, халҡының бәхете, ырыуҙаштарының тормошо* тип әйтергә кәрәк. Шул саҡта ғына был һүҙҙәр изафет рәүешенә килеп, мәғәнәне дөрөҫ сағылдыра ала.

Ғәмәлдәге телдә әле күҙәтеп үткән ике һүҙле (йәки ике ағзалы) ябай изафет үҙе бер берәмек булып, яңы ҡатмарлы изафеттың беренсе йәки икенсе ағзаһына әйләнеп китергә һәм шул саҡта ҡатмарлы изафет икенсе йә өсөнсө изафет ҡағиҙәһе буйынса ҡоролорға мөмкин. Мәҫәлән, хәҙерге заманда *хакимиәт башлығы* тигән һүҙ ныҡ таралды. Шул башлыҡты бер административ берәмеккә теркәргә кәрәк булғанда, икенсе изафет ҡағиҙәһе буйынса *район хакимиәт башлығы, ауыл хакимиәт башлығы* тип әйтеп була. Был изафет хакимиәт башлығын айырып билдәләмәй, атап киткәндә ҡулланыла. Бер нисә районның йәки бер нисә ауылдың хакимиәт башлығын белдерер өсөн күплек ялғауы, ике ағзалы изафеттағы кеүек үк, уның иң аҙаҡҡы һүҙенә генә ҡушыла, йәғни *район хакимиәт башлыҡтары, ауыл хакимиәт башлыҡтары* тип әйтелә, сөнки изафет бер бөтөн лексик конструкция булып тора, һәм һуңғы һүҙҙең күплек формаһы бөтә конструкцияға күплек мәғәнәһе биреп, бер нисә район йәки ауылдың хакимиәт башлығы күҙҙә тотолғанын аңлата. Тел ҡағиҙәһе буйынса, ул шулай. Ләкин беҙҙең гәзит-журналда шуны *район хакимиәттәре башлыҡтары, ауыл хакимиәттәре башлыҡтары* тип яҙыу ныҡлы урын алған, йәнәһе лә, шулай итмәгәндә, хакимиәттең күплеге аңлашылмай. Ә ғәмәлдә тағы әлеге күплек ялғауы менән

эйәлек ялғауынан һуң талап ителгән эйәлек килеш ялғауын киҫеп ташлау бында изафеттың эске бәйләнешен өҙөп, мәғәнәһен боҙоуҙан башҡа бер нәмә лә бирмәй.

Ошо уңай менән билдәле ваҡиғаның атамаһы итеп алынған *Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы* тигән һүҙ хаҡында ла әйтеп китмәй булмай, ул да яңлыш ҡалыпҡа һалып яһалған. Был атаманы яһағанда, тәүҙә ни әйтергә уйлағаныңды асыҡларға кәрәк ине: *бөтә донъя ҡоролтайы* икән, ул башҡорт кешеләренең ҡоролтайымы әллә ғөмүмән башҡорт халҡының ҡоролтайымы? Башҡорт кешеләренең ҡоролтайы икән, ул саҡта күплек һәм эйәлек ялғауы менән килеп, билдәлелек мәғәнәһе алған *башҡорттары* һүҙенә тағы эйәлек килеш ялғауы өҫтәргә лә *Бөтә донъя башҡорттарының ҡоролтайы* тип әйтергә кәрәк ине. Әгәр ҙә ул ғөмүмән башҡорт халҡының ҡоролтайы булһа, *башҡорт* һүҙе дөйөмлөк мәғәнәһе ала һәм, икенсе изафет ҡағиҙәһе буйынса, был атама *Бөтә донъя башҡорт ҡоролтайы* тип аталырға тейеш була. Ошо ике варианттың береһен алғанда ғына, изафеттағы һүҙҙәр үҙ-ара грамматик бәйләнешкә инеп, тейешле мәғәнәгә эйә булған булыр ине.

Шул уҡ *район (ауыл) хакимиәт башлығы* тигән өс ағзалы изафет теге йәки был ағзаһына баҫым яһап, айырып билдәләргә кәрәк булғанда, өсөнсө изафет ҡағиҙәһе буйынса ҡорола, һәм ул: 1) башҡа административ берәмектеке түгел, райондыҡы (ауылдыҡы) икәнен күрһәтергә кәрәк булғанда, *райондың (ауылдың) хакимиәт башлығы* тигән; 2) башҡа бер ойошманыҡы түгел, хакимиәттеке икәнен күрһәтергә кәрәк булғанда, *район (ауыл) хакимиәтенең башлығы* тигән ике төрлө төҫ ала.

Өс ағзалы изафеттар ошо юғарыла күрһәтелгән тәртип буйынса ҡорола. Шулай булғас,

*Ҡыҙыл йылғаһы яры буйлап тар ғына арба юлы үтә торғайны* (Б., 24.07.96);

*...Башланғыс белемде тыуған ауылы мәҙрәсәһендә алған* (А., 96, 3, 123);

*Яңыкүл ауылында балалар фольклор фестивале булып үтте* (Й., 25.07.96) тигән һөйләмдәрҙә телдең ҡануны һәм һүҙҙең мәғәнәһе боҙолмаһын өсөн *Ҡыҙыл йылғаһының яры, тыуған ауылының мәҙрәсәһе, балаларҙың фольклор фестивале* тип тултырып яҙырға кәрәк. Был урында бигерәк тә изафеттың йәнәш килгән ағзаларына ялғап, өҫтө-өҫтөнә ҡатландырып ҡуйған бер үк күплек һәм эйәлек ялғауҙарының телде ныҡ боҙғанын, мәғәнәһеҙләгәнен иҫтән сығарырға ярамай. Мәҫәлән,

*Тоҡтобай, Атъетәр ауылдары мосолман казактары менән һөйләшеүҙән баш тартманы Зәки Вәлиди* (А., 96, 3, 69) тигәндәге *ауылдары мосолман казактары;*

*Хәҙисова етәкселегендә(ге) бер төркөм Бөрйән, Белорет, Әбйәлил, Учалы райондары ауылдарында булды* (Й., 9.07.96) тигән һөйләмдәге *райондары ауылдары;*

*Район мәктәптәре директорҙары... Өфөлә булып ҡайтты* (Б., 10.07.96) тигәндәге *мәктәптәре директорҙары* изафет ҡағиҙәһенә ҡаршы килә. Ҡағиҙәгә һыйҙырыр өсөн, өс һөйләмдә лә изафеттың беренсе ағзаһына өҫтәп эйәлек килеш ялғауы ҡушырға кәрәк. Ә инде,

*Ауыл, ҡалалар хакимиәттәре башлыҡтары кешеләр араһына бик сыҡмай* (Й., 29.06.96) тигән һөйләм бөтөнләй хата булған. Уны артыҡ нәмәләренән таҙартып, *Ауыл, ҡала хакимиәт башлыҡтары кеше араһына бик сыҡмай* тип әҙәм рәүешлерәк итеп яҙып була.

Изафеттың ҡоролош ҡағиҙәһен боҙоу арҡаһында кәрәк урында эйәлек килеш ялғауын ҡуймай китеү менән бер ыңғай, кәрәкмәгән ерҙә ҡуйыу хәлдәре лә яҙма телдә йыш була. Мәҫәлән,

*Фекер алышыуҙа Өфөнөң революцион комитеты ағзалары... ҡатнашты* (А., 96, 4, 78) тигән һөйләмдә *Өфө революцион комитеты* тәүге изафет булырға тейеш (*революцион* һүҙе — аныҡлаусы, изафет ҡоролошона тәьҫир итмәй). Шул изафетҡа *ағзалары* тигән һүҙ ҡушылып, өс ағзалы ҡатмарлы изафет хасил була. Был миҫалда икенсе изафет ҡағиҙәһе буйынса яһалған тәүге изафеттың *Өфө* тигән һүҙенә эйәлек килеш ялғауы бушҡа ҡушылған, ә тәүге изафетты ҡатмарлы изафеттың өсөнсө ағзаһы менән бәйләр өсөн кәрәк булған урында, йәғни *комитеты* һүҙенә, эйәлек килеш ялғауы ҡушылмаған. Һөҙөмтәлә, өс ағзалы был изафет төҙөк лексик конструкция була алмаған. Уның дөрөҫө, *Өфө революцион комитетының ағзалары* тигән рәүештә булырға тейеш.

*Күлдәрҙең исемдәренең аҙағындағы «ярви» «озеро» булып китә* (Ш., 96, 3, 132) тигәндә тәүге изафетты *күл исемдәре* тип икенсе изафет ҡағиҙәһе буйынса ҡорорға кәрәк, билдәлелек мәғәнәһе талап ителмәгәс, *күл* һүҙен күплек һәм эйәлек килеш формаһы менән ҡатмарлаштырыу бөтөнләй урынһыҙ. Шул тәүге ябай изафетҡа *аҙағы* тигән өсөнсө һүҙ ҡушылған. Уны бәйләр өсөн *исем* һүҙен тулы формаға килтереү бында дөрөҫ булған.

*Рәсәйҙең Именлек Советының яңы секретары элеккеләрҙең уңышһыҙ сәйәсәтен ҡабатламаһын ине* (Б., 11.07.96) тигәндәге *Именлек Советы* һәм *яңы секретары* тигән

һүҙҙәр ҡатмарлы изафеттың аныҡлаусылы бер бөтөн ағзаһы булып килә. Тимәк, *Рәсәй Именлек Советы* тәүге изафет була һәм ундағы *Рәсәй* һүҙенә эйәлек килеш ялғауы ҡушыу кәрәкмәй. Тәүге изафетты өсөнсө ағза менән бәйләр өсөн *советы* тигән һүҙгә эйәлек килеш ялғауы кәрәк, унығы был һөйләмдә дөрөҫ ҡуйылған.

Ялғауҙарҙы урынлы-урынһыҙ ҡуйып, грамматик бәйләнеш ҡағиҙәләрен боҙоу яҙма телдә изафеттың ҡоролошо ҡатмарлашҡан һайын күбәйә. Ә ул ҡатмарлашыу һәм шуға ҡарап ялғауҙарҙың ҡуйылышы төрлөсә булырға мөмкин.

*Хоҙайбирҙе ауылы мәҙәниәт йортона инәбеҙ* (Й., 19.09.96) тигәндә *Хоҙайбирҙе ауылы* һәм *мәҙәниәт йорто* тигән ике изафет ҡатарлашып килә. Уларҙы бәйләр өсөн тәүге изафет аҙағына эйәлек килеш ялғауы ҡуйып, *Хоҙайбирҙе ауылының мәҙәниәт йортона* тип әйтергә кәрәк ине. Бында ул ҡуйылмаған, шул арҡала ике аралағы мөнәсәбәт өҙөлгән.

Ҡатар килгән изафеттарҙың ике араһын бәйләмәй китеүҙән башҡа, эске бәйләнеште бүтән төрлө сыуалтҡан саҡтар йыш була. Шуны күрер өсөн, ике ағзалы изафетты артабан үҫтереп, нимә булғанын тикшереп ҡарайыҡ:

1) *Башҡортостан Республикаһы* — икенсе изафет ҡағиҙәһе буйынса ҡоролған, тәүге һүҙгә ялғау кәрәкмәй.

2) *Башҡортостан Республикаһының Президенты* — яңы ағза ҡушылған, уны бәйләр өсөн тәүге изафеттың аҙағына эйәлек килеш ялғауы ҡуйылған.

*3) Башҡортостан Республикаһы Президентының указы* — ҡатмарлы изафетҡа тағы бер ағза ҡушылған, килеш ялғауы һуңғы ағзаны бәйләр өсөн аҙаҡҡа табан күскән.

Яңы ағза ялғана килә ҡатмарлы изафеттағы ағзалар һаны ҡайһы берҙә биш-алтыға барып етә, һәм шул саҡта эйәлек килеш ялғауы иң һуңғы ағзаны бәйләр өсөн һаман аҙаҡҡа күсә бара. Ә беҙҙең гәзиттәр шуны күсермәй, һәр ваҡыт

*Башҡортостан Республикаһының Дәүләт йыйылышы ҡарары* (Б., 13.07.96) тип яҙып килә. Шул арҡала, берҙән, *йыйылышы ҡарары* тигәндә бер үк эйәлек ялғауы йәнәш килеп телде йәмһеҙләһә, икенсенән, ҡатмарлы изафеттың һуңғы һүҙе шыпа бәйләнешһеҙ ҡала.

Яҙма телдә аҙым һайын осраған ошоноң һымаҡ миҫалдың ике-өсәүһен генә килтереп китәйек:

*Был йыйында мәләүездәрҙең... район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтары урынбаҫарҙары һәм халыҡ талантары ҡатнашты* (Б., 24.09.96) тигән һөйләмдә бер

ынғай өс һүҙгә эйәртендереп эйәлек ялғауы ҡушылған, ә һөйләмде бәйләп торған еп юҡ. Бәйләр өсөн *район һәм ҡала хакимиәт башлыҡтарының урынбаҫарҙары* тип, *хакимиәт* һүҙенең ялғауҙарын алып ташлап, *башлыҡтары* һүҙен эйәлек килеш формаһына ҡуйыу етә.

*Өфө төбәк идаралығы советы ултырышында «Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы Көстәр ветерандары тураһында»ғы Башҡортостан Республикаһы Законының үтәлешен тикшереү һөҙөмтәләре ҡаралды* (Б., 25.07.96) тигән һөйләмдә лә — шул уҡ нәмә. Был һөйләм ғөмүмән ныҡ буталсыҡ, аңлайышһыҙ итеп төҙөлгән. Тотош урыҫ теленең ҡалыбына һалып эшләгән өсөн шулай килеп сыҡҡаны күренеп тора. Ләкин барыбер уны үҙ телебеҙҙең яйына килтереп, *Өфө төбәк идаралығы советының ултырышында «Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы Көс ветерандары тураһында» тигән Башҡортостан Республикаһы Законының үтәлешен тикшереү һөҙөмтәһе ҡаралды* тип яҙғанда арыуыраҡ булыр ине.

Килтерелгән был миҫал ирекле-ирекһеҙҙән тәржемә итеп яҙылған, шуға күрә ундағы хаталарҙы аҡлап булмаһа ла, аңлап була. Ә инде ғүмер буйы тел белеме өлкәһендә эшләгән берәүҙең тәржемә итеп түгел, үҙ теле менән яҙған нәмәһендә шундай уҡ хата яһағанын һис тә аңлап булмай. Ул кеше:

*Тәтешле районының Һәүәләй ауылы халҡы әлеге көндә үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләй* (Й., 29.10.96) тип яҙа. Бындағы ҡатмарлы изафетты *Тәтешле районы Һәүәләй ауылының халҡы* тип ҡорорға, йәғни эйәлек килеш ялғауын аҙаҡҡа күсерергә, кәрәк ине. Шунан тыш, бында *халыҡ* һүҙенән һуң *үҙҙәрен* тип күплектә әйтеү ҙә хата булған.

Билдәләү (йәки ҡайтым) алмашы тип йөрөтөлгән *үҙ(е)* тигән һүҙ берлектәге түгел, хатта күплектәге һүҙ менән бәйләнештә торғанда ла күп ваҡыт берлек формаһын һаҡлай *(Улар үҙе килде)* һәм исем йәки алмаштан һуң килгәндә, алдындағы һүҙҙең эйәлек килеш формаһында тороуын бөтөнләй талап итмәй. Шуға күрә,

*...Башҡортса уҡытыуға ата-әсәләрҙең үҙҙәре лә ҡаршы ине* (Б., 19.09.96) йәки

*Уғаса ишектә Мәфтуха апайҙың үҙе лә күренде* (Б., 24.07.96) тип әйтеп булмай, ә *ата-әсә үҙе лә, Мәфтуха апай үҙе лә* тип кенә әйтеп була.

Изафеттың беренсе йәки икенсе ағзаһы булып исем генә түгел, исем ҡылым да килергә мөмкин. Шул саҡта ла лексик конструкция изафет ҡағиҙәһе буйынса ҡорола һәм шунда ғына тейешле мәғәнәне бирә ала. Мәҫәлән,

*Башҡортостанда... «Әсә һәм бала» (тигән) бүлексә асылыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй* (Й., 13.07.96) тигәндә *бүлексә асылыуы* тигән изафеттың икенсе ағзаһы — исем ҡылым. Шул изафетты тейешле ҡағиҙәгә килтерер өсөн, *бүлексәнең асылыуы* тип тәүге һүҙҙе эйәлек килеш формаһында алырға кәрәк.

*Аҡтарҙың хәрәкәте тарҡалыуға барыуын раҫлаған тағы бер ваҡиға булды* (А., 96, 4, 63) тигән һөйләмдә лә *барыуы* тигән исем ҡылым ҡатмарлы изафеттың өсөнсө ағзаһы булып килгән. Уны тәүге изафетҡа бәйләр өсөн, *хәрәкәте* тигән һүҙҙе эйәлек килеш формаһына ҡуйырға кәрәк. Ә *аҡтар* һүҙендә эйәлек килеш ялғауы — артыҡ. Тотош төҙәтеп сыҡҡанда, был лексик конструкция *аҡтар хәрәкәтенең тарҡалыуға барыуы* тигән төҫ алыр ине.

*Иҡтисади хәл ныҡ көсөргәнешле булыуға ҡарамаҫтан... мөмкин булғандың бөтәһен дә эшләргә тырышалар* (Б., 17.07.96) тигәндә *көсөргәнешле булыу* тигән исем ҡылым изафеттың икенсе ағзаһы булып килгән, ә *хәл* һүҙе — уның беренсе ағзаһы. Шуларҙы бәйләп, изафетты үҙ тәртибенә килтерер өсөн, *хәл* һүҙенә эйәлек килеш ялғауы, *булыу* һүҙенә эйәлек ялғауы ҡушып, *иҡтисади хәлдең көсөргәнешле булыуына ҡарамаҫтан* тип әйтергә кәрәк ине.

*Төркөстан фронты махсус комиссияһы тикшереүе һөҙөмтәләренә һылтанып, РКП(б) өлкә комитеты хәҙер... кантондарға, өйәҙҙәргә күрһәтмәләр биреп ята* (А., 96, 6, 29) тигәндә *тикшереү һөҙөмтәләре* тигән һүҙ бәйләнеше ҡатмарлы изафеттың икенсе өлөшө булып тора, *тикшереү* тигән исем ҡылым уның тәүге ағзаһы булып килгән. Бында ҡатмарлы изафеттың икенсе өлөшөн тәүгеһенә бәйләр өсөн, *тикшереү* һүҙенә эйәлек ялғауы түгел, ә *комиссияһы* тигән һүҙгә эйәлек килеш ялғауы ҡушырға кәрәк ине. Шунда ғына был ҡатмарлы изафет *Төркөстан фронты махсус комиссияһының тикшереү һөҙөмтәһе* тигән төҙөк бер рәүешкә килә.

Телдә ҙур урын алып торған изафетты дөрөҫ ҡороу, дөрөҫ ҡулланыу яҙма телдең төҙөклөгө, аңлайышлығы һәм матурлығына ныҡ тәьҫир итә. Шуның өсөн уның һәр кемгә билдәле булған ҡоролош ҡағиҙәләренә иғтибарлы булып, тейешенсә үтәргә кәрәк. Шул саҡта ғына тел камиллығына өлгәшеп була. Әллә ниндәй кәрәкмәгән ғәҙәт табып, изафеттың эске грамматик бәйләнешен тәьмин иткән эйәлек килеш формаһын киҫергә, тел ҡанунын үҙгәртергә маташыу бер ҙә яҡшы эш түгел. Беҙҙең телдә төп грамматик ҡанундар, шул иҫәптән изафеттың ҡоролош һәм ҡулланыш ҡануны, борондан уҡ нығынып бөткән, ул ҡанундарҙы боҙоу телдең ни-

гезен кыйратыузан, телде бөтөрөүзән башка бер нәмә лә бирмәй. Төп канундарын ситкә кағып түгел, ә бик нык һаклап кына, беҙ туған телебеҙҙең урынын нығыта, ғүмерен оҙайта алабыҙ.

## ЭЙӘЛЕК ТӨШӨНСӘҺЕ

Эйәлек төшөнсәһен белдергән грамматик форма ниҙеңдер эйәһен һәм шул эйәгә мөнәсәбәтле нәмәне күрһәтә, йәғни *китабым* тигән һүҙҙәге *-ым* ялғауы китапты ла, шуның 1-се зат шәхесенеке булғанын да бер юлы аңлатып тора. Эйәлек формаһын исем, исемләшкән сифат, һан, исем ҡылым һәм сифат ҡылымдар ҡабул итә. Эйәлек формаһы зат менән үҙгәрә: 1-се зат — *-м (-ым), -быҙ (-ыбыҙ);* 2-се зат — *-ң (-ың), -ғыҙ (-ығыҙ);* 3-сө зат — *-ы (-һы), -лары.*

Эйәлек формаһындағы һүҙ эйәне белдереп, алдында торған һүҙ менән бер һүҙ бәйләнеше яһай, шул саҡта зат алмаштары эйәлек килеш ялғауы менән, ә 3-сө затҡа ҡараған башҡа һүҙҙәр төп килеш йәки эйәлек килеш ялғауы менән килә: *минең китабым, һинең китабың, уның китабы; китапхана китабы, уҡыусының китабы.* 3-сө заттағы эйәлек конструкцияһы күп урында изафетҡа тап килә, ләкин уның һөйләмдәге бүтән төрлө эйәлек мөнәсәбәтен белдереп килгән урыны ла күп. Был бүлектә яҙма телдең шул урындарҙа йыш яһай торған хаталары ҡарала.

Иң элек ялғауын тейешһеҙгә ҡуйып, тел ҡанунын ныҡ боҙған бер урын хаҡында әйтергә кәрәк.

Беҙҙең телдә ғәрәптән инеп, ныҡлы урын алған сифат яһаусы *-и* формаһы бар. Был форма күберәк ваҡыт ғәрәп һүҙҙәре менән ҡулланыла, әммә ҡайһы берҙә башҡорт һүҙҙәренә лә ҡуçә. Сифат формаһында тороп, сифат булып йөрөгән ул һүҙҙәр, әлбиттә, һөйләмдә аныҡлаусы хеҙмәтен үтәй. Шулай булғас, ҡағиҙә буйынса, уның аныҡланыусыһына эйәлек ялғауы ҡушылырға тейеш түгел. Ошо ҡағиҙәне белә тороп, ни өсөндөр беҙҙә, мәçәлән, *төрки* тигән сифаттан һуң аныҡланып килгән исемгә эйәлек ялғауы ҡушып яҙыу нык таралды. Ҡағиҙә буйынса *төрки тел* тип яҙылырға тейеш булһа, шуны хәҙер бөтә ерҙә *төрки теле* тип яҙалар. Был, күрәһең, тағы әлеге урыç йоғонтоһонан килеп сыҡты. Бер-береһенән айырыр өсөн урыçтар төрөктәрҙе *турки, турецкий* тип, ҡалған төрки халыҡтарҙы *тюрки,*

*тюркский* тип йөрөтөргә булды. Улар шулай итеп ике донъяны айырғас, беҙҙә лә тел сараһы менән айырмаҡсы булып, береһен *төрөк,* башҡаларын *төрки халыҡ* тип алырға ҡарар иттеләр. Бының, әлбиттә, зарары булмаҫ ине, ләкин шуның менән бергә беҙҙә *төрки* тигән һүҙҙең исем түгел, сифат икәнен оноттолар ҙа, *төрөк халҡы, төрөк теле* тигәнгә оҡшатып, *төрки халҡы, төрки теле* тип алып киттеләр. Бара-бара яҙма телдә шул хатаны киңәйтеп, башҡа һүҙҙәргә лә тарата башланылар.

*Башҡорттар боронғо төрки традицияларына, шул иҫәптән дини-фәлсәфәүи нигеҙҙәренә ныҡ таяныусылар булып китә* (Ш., 96, 3, 147) тигән һөйләмдең бүтән етешһеҙлектәренә иғтибар бирмәй, баяғы сифат — исем мөнәсәбәтен генә алайыҡ: *төрки* һәм *дини-фәлсәфәүи* тигән сифаттарҙан һуң *традиция* һәм *нигеҙ* һүҙҙәренә эйәлек ялғауы ҡушып, *төрки традициялары, дини-фәлсәфәүи нигеҙҙәре* тип әйтеп булмай. Уны бында *төрки традицияларға, дини-фәлсәфәүи нигеҙҙәргә* тиергә кәрәк. Шуның кеүек *төрки тел (телдәр), төрки халыҡ (халыҡтар)* тип яҙыу ғына беҙҙең тел ҡануны буйынса дөрөҫ була.

Ғәрәп теленән инеп, *-и* формаһы менән йөрөгән сифаттарҙан башҡа, беҙҙең телдә урыҫ теле аша көнбайыш телдәренән килеп, *демократик, капиталь* рәүешендә йөрөгән сифаттар бар. Уларҙы ҡайһы бер кеше урыҫтың *демократический, капитальный* тигәненән ҡыҫҡартып алынған тип уйлай, ә ғәмәлдә кәрәкмәгән урыҫ ялғауын алып ташлап, беҙ уларҙы көнбайыш телдәрендәге асылына ҡайтарғанбыҙ. Көнбайыш телдәре уларҙы беҙҙәге формала сифат итеп йөрөтә, һәм беҙҙең телгә лә улар сифат булып килеп ингән. Шулай булғас, аныҡлаусы хеҙмәтен үтәгән саҡтарында аныҡланыусы исем бында ла эйәлек ялғауын ҡабул итергә тейеш түгел. Ә яҙма телдә йәнә ҡағиҙәне тотмайҙар. Мәҫәлән,

*Эштәрҙе алдағы 1997—1998 театраль миҙгеленә тиклем теүәлләргә булдыҡ* (Б., 22.11.96) тигәндәге *театраль миҙгеле;*

*Пролетар революцияһының маҡсаты төрлө халыҡтар һәм милләттәр араһындағы сиктәрҙе юҡҡа сығарыу...* (А., 96, 3, 75) тигәндәге *пролетар революцияһы* кеүек яңлыш төҙөлгән конструкция төрлө ерҙә осрап тора.

Кәрәкмәгән ерҙә эйәлек ялғауы ҡушыу ғына түгел, кәрәк урында төшөрөп ҡалдырыу ҙа беҙҙең яҙма телдә ғәҙәти хәлгә әйләнде. Шулар эсенән туғанлыҡ мөнәсәбәтен белдергән һүҙҙәрҙең ҡулланыш формаһын яңлыштырыу бик йышайып китте.

Беҙҙең башҡорт атаһы йәки әсәһенең үҙенә өндәшкәндә *атай, әсәй* тип өндәшә, һис ваҡытта ла *атайым, әсәйем* тип әйтмәй, ә улар хаҡында һөйләгәндә *атайым, әсәйем* ти һәм һис бер ваҡыт *атай, әсәй* тип һөйләмәй. Беҙҙең өсөн шул әйтелеш ныҡлы ҡағиҙә булып тора. Был әйтелеш өндәшеү формаһындағы *олатай, өләсәй, ҡарттай, ҡәртсәй, ағай, апай* тигән һүҙҙәргә лә бер тигеҙ ҡағыла. Урыҫ телендә улай түгел. Унда *отец (папа) — мой отец (мой папа), мать (мама) — моя мать (моя мама)* кеүек туғанлыҡ һүҙҙәренең һәр формаһын һәр ерҙә ҡулланырға мөмкин. Мәҫәлән, *Мама моя, не плачь* — үҙенә өндәшкәндә әйтелгән, *Мама ушла на работу* — уның хаҡында һөйләгәндә әйтелгән, һәм бындағы ике әйтелеше лә башҡорт ҡағиҙәһенә ҡаршы килә. Хәҙер беҙҙең яҙышҡан кешеләр шул ҡаршылыҡты күрмәй, әйләнгән һайын туғанлыҡ һүҙҙәренең формаһын урыҫтыҡына оҡшатып яҙа.

*Ошо таштарҙы теҙгәндә ниҙәр генә уйланың икән, әсәйем* (Б., 4.10.96) тигән кеше, ситтән тороп булһа ла, әсәһенең үҙенә өндәшә.

*Ҡәҙерле атайым, әсәйем, әгәр һеҙ тере булһағыҙ, әгәр һеҙ мине үҙегеҙҙең ҡыҙығыҙ тип таныһағыҙ, хәбәр итегеҙ...* (А., 96, 5, 127) тигән кеше лә атаһы менән әсәһенә өндәшеп әйтә. Урыҫтарға был урында *моя мама, дорогие мои папа и мама* тиергә яраһа ла, беҙҙә улай тип әйтмәйҙәр. Беҙҙә *атай, әсәй* тиҙәр. Тик ныҡ хисләнеп, өҙөлөп өндәшкәндә генә, *әсәйем* түгел, *әсәкәйем* тип әйтеп булалыр, бәлки.

Туған кешенең үҙенә өндәшкәндә эйәлек ялғауын ҡушып булмаған кеүек, шул туғандар тураһында һөйләгән саҡта эйәлек ялғауы ҡушмайынса *атай, әсәй* һ. б. тип әйтеү ҙә беҙгә хас түгел.

*Килә торғас, атай ҙа күңелләнеп китте, йыр башланы, әсәйҙең дә йөҙөндә шатлыҡ...* (А., 96, 5, 115);

*Күрше ихатала атай менән ағай төйә-туҡмай арба тәгәрмәсенең шинын алмаштыра* (Б., 2.10.96);

*Бер ваҡыт көҙгә табан олатай менән арбаға бесән тейәнек тә ҡараңғылатып ҡайтып киләбеҙ* (Й., 11.07.96);

*Мин йәйҙе ауылда өләсәйҙәрҙә үткәрәм* (А., 96, 8, 27) тигән һөйләмдәрҙә *атайым, әсәйем, ағайым, олатайым, өләсәйем* тип әйтеү генә башҡортса дөрөҫ була. Урыҫтар, әлбиттә, бындағы бөтә ерҙә *отец (папа), мать (мама)* һ. б. тип әйтә, уларға эйәреп үҙ телебеҙҙе боҙорға ярамай. Хәҙер, күрәһең, шуны аңламай башланылар: *Гөлдәр хуш еҫ тарата, әсәй беҙҙе ярата* тип хатта бәләкәй балаларҙы ла боҙоҡ телдә йырлаталар. Эйәлек ялғауын кәрәк ерҙә ҡуймай киҫеп ташлау ни хәлгә килтергәнен асығыраҡ күрер өсөн,

*Ҡарт уландарын өйләндереп, башҡа сығарырға булған. Бының өсөн тәбиғәттең иң матур урынлы өс ҙур йылға буйын һайлаған. Өлкән улға — Иҙел буйы, уртансы улға — Һаҡмар буйы, иң кесе улға — Оло Эйек буйы* (А., 96, 11, 149) тигән миҫалды алып ҡарайыҡ. Ул бөтөнләй башҡорт теленең яйына килмәй. Әгәр шунда *иң матур урынлы* тип түгел, *иң матур урынынан* тип, *(өлкән, уртансы, кесе) улға* тип түгел, *улына* тип, *(Иҙел, Һаҡмар, Оло Эйек) буйы* тип түгел, *буйын* тип еренә еткереп яҙған булһа, дөрөҫ тә, аңлайышлы ла булыр, еңел дә уҡылыр ине. Урыҫ телендә *(старшему, среднему, младшему) сыну* тип әйтелһә лә, беҙҙә улай тип әйтелмәй. Шуны һәр ваҡыт иҫтә тоторға кәрәк.

Эйәлек категорияһы урыҫ телендә юҡ. Урыҫтар теге-был нәмәне грамматик форма ярҙамында шәхескә бәйләп һөйләмәй. Ә башҡорт телендә һәр нәмәнең грамматик затҡа булған мөнәсәбәте эйәлек ялғауы менән билдәләп әйтелә. Яҙышҡан кешеләр һөйләм эсендә грамматик һәм мәғнәүи бәйләнеш булдырған шул категорияны иҫәпкә алмай, күп ваҡыт эйәлек ялғауын төшөрөп ҡалдыра.

*Башҡа бер ни ҙә кермәй, дәрестәр ҙә, малайҙар ҙа, дискотека ла онотолдо* (Й., 16,07.96) тигән һөйләмдә һөйләүсе үҙенең башы хаҡында әйтә, тимәк, ул *башыма* тиергә тейеш. Урыҫтар *в голову* тигән өсөн генә эйәлек ялғауын киҫеп ташлап булмай.

*Аҙымдарҙы йышайта төшәм* (Ш., 96, 5, 29) тигәндә лә үҙенең аҙымы хаҡында әйткәнен билдәләмәгәс, *аҙым* һүҙе мөнәсәбәтһеҙ булып, үҙенә башҡа айырылып тора.

*Ҡыҙ иркәләнде лә иркәләнде, барса мәшәҡәт-ғәмде онотоп иҙрәне лә иҙрәне* (А., 96, 1, 39) тигән һөйләмде грамматик һәм мәғнәүи яҡтан еренә еткерер өсөн, 3-сө затҡа бәйләп, *мәшәҡәт-ғәмен* тиергә кәрәк ине.

*Йүнлерәге тормай, яй сығыу менән, баш ҡалаға китеү яғын ҡарай* (А., 96, 11, 7) тигәндә донъяның яйы күҙҙә тотола. Шулай булғас, 3-сө зат эйәлек ялғауын ҡушып, *яйы* тип әйткәндә генә һөйләмдең мәғәнәһе теүәлләнә.

*Кешеләр төрлө була: берәүҙәр алма беш, ауыҙыма төш, тип көтөп көн күрә, икенселәр иһә, изге маҡсаттарға ынтылып, тормоштан йәм табып йәшәй* (Й., 13.07.96) тигән һөйләмдә кешенең берәүҙәре һәм икенселәре тураһында һүҙ бара, тимәк, улар 3-сө затҡа мөнәсәбәтле һәм *берәүҙәре, икенселәре* тип 3-сө зат эйәлек ялғауы менән әйтелергә тейеш.

*Ҡарт бүтән һүҙ өндәшмәй, үҙ урынына ятты, ҡалғандар ҙа йоҡоға таралышты* (А., 96, 10, 66) тигәндә лә бер

төркөм кеше күҙҙә тотола һәм шул төркөмдөң *ҡалғандары* хаҡында һүҙ алып барыла. Шул ике төшөнсәне мәғнәүи яҡтан бәйләр өсөн, тағы 3-сө зат эйәлек ялғауы кәрәк. Урыҫтарҙың *остальные* тип эйәлеккә битараф итеп әйткән һүҙенә оҡшатыу беҙгә ярамай.

*Хеҙмәт ҡоралдары бик ябай булыуға ҡарамаҫтан, был боронғо кешеләр ут таба, торлаҡ төҙөй, кейем әҙерләй белгән* (Б., 25.09.96) тигән һөйләмдең дөйөм мәғәнәһе бында *хеҙмәт ҡоралдары бик ябай булыуға ҡарамаҫтан* тигән кире һөйләм түгел, ә *хеҙмәт ҡоралдарының бик ябай булыуына ҡарамаҫтан* тигән кире хәл булырға һәм *ябай булыу* тигән исем ҡылымдың эйәлек формаһында торорға тейешлеген күрһәтә. Урыҫ телендәге *несмотря на примитивность орудий труда* тигәндән уңышһыҙ күсереп һәм исем ҡылымдың эйәлек ялғауын алып ташлап, әлеге кире хәлде автор кире һөйләмгә әйләндергән, шуның менән һөйләмдең бөтә төҙөлөшөн, мәғәнәһен боҙған.

*Ойошторолоуына ике йыл тирәһе генә үтеүгә ҡарамаҫтан, үҙәк ағзалары яҡташтары менән осрашыуҙар үткәрә* (Й., 29.08.96) тигән һөйләмдә лә дөйөм мәғәнә *ойошторолғанына ике йыл тирәһе генә үтеүенә ҡарамаҫтан* тип кире хәлдең тейешле формаға килтерелеүен, йәғни исем ҡылымдың эйәлек ялғауы менән алыныуын, талап итә. Ошо ике һөйләмдән сығып фекер йөрөткәндә, *ҡарамаҫтан* тигән бәйләүестең ғөмүмән кире һөйләм яһай алыуы шик уята. Исем ҡылым *ҡарамаҫтан* тигән бәйләүес менән килгәндә, кире һөйләмдең хәбәре була, тигән һүҙҙең ғөмүмән хата булыуы, был урында исем ҡылымдың һәр ваҡыт эйәлек формаһында тороп, кире хәл яһауҙа ҡатнашыуы мөмкин. Мәсьәләне асыҡлар өсөн, һис һүҙһеҙ, күберәк миҫал йыйып, төпсөбөрәк тикшереү кәрәк.

Күҙҙән үткәргән миҫалдар төрлө һүҙ төркөмө һәм төрлө һөйләм киҫәгенән торған һүҙҙәрҙең эйәлек формаһында алыныуын һөйләмдең төҙөлөшө һәм эске мәғнәүи бәйләнеше талап иткәнен асыҡ күрһәтә. Күп ваҡыт эйәлек мөнәсәбәтен күренеп торған айырым һүҙ түгел, ә һөйләмдәге фекер йөрөшө билдәләй. Шул фекер йөрөшөн белеп, һүҙҙәрҙең үҙ-ара бәйләнешен дөрөҫ сағылдырған хәлдә, әлбиттә, төрлө хатаға ла юл ҡуйылмаҫ ине.

Исем ҡылымды эйәлек формаһына ҡуйған *ҡарамаҫтан* бәйләүесенән башҡа, үҙе эйәлек менән үҙгәргән бәйләүестәр бар. Шулар эсенән тәүҙә иң күп ҡулланышлы һәм иң буталышлы *тураһында (хаҡында)* тигән бәйләүесте тикшереп китергә кәрәк. Был бәйләүес яҙма телдә шул *тураһында (хаҡында)* тигән 3-сө зат формаһы менән урыҫ телендәге *о*

предлогына тиң итеп алынған да үҙгәртмәй-нитмәй 1-се һәм 2-се затта ла ҡулланып тик йөрөтөлә. «Башҡортостан» гәзите *Үҙебеҙ хаҡында үҙебеҙ* тип рубрика бирә, «Йәшлек» гәзите *Үҙем хаҡында үҙем* тип мәҡәлә башы ҡуя, яҙыусылар *Үҙем тураһында* тип белешмә яҙа. Башҡа ерҙә лә был бәйләүес гел бер төрлө ҡулланыла. Мәҫәлән,

*Үҙем хаҡында мин бер генә нәмә әйтә алам* (Б., 9.07.96);

*Үҙебеҙ тураһында ни әйтәйек инде* (Б., 18.07.96);

*Үҙең тураһындағы иғландарҙы күргәнһеңдер, моғайын* (А., 96, 3, 72);

*Мөнир ағай, үҙегеҙ тураһында һүҙҙе дауам итегеҙ инде* (А., 8, 28) тигән һөйләмдәрҙең тәүге икеһендә *үҙ(е)* тигән алмаш 1-се заттың берлеге менән күплегендә, һуңғы икеһендә шул уҡ алмаш 2-се заттың берлеге менән күплегендә торһа ла, шулар менән бергә килгән бәйләүес бөтә ерҙә 3-сө заттың берлегендә алынған. Ундай ҡаршылыҡтың тел төҙөлөшөндә булыуы мөмкин түгел. Был бәйләүес үҙе зат менән үҙгәрә, һәм алмаштың зат формаһы менән бәйләүестең зат формаһы, тел ҡануны буйынса, үҙ-ара ярашып торорға тейеш.

Ғәмәлдәге телдә бәйләүестең 1-се һәм 2-се зат формалары тулы көйө түгел, ҡыҫҡартып ҡулланыла һәм һөҙөмтәлә уларҙың зат менән үҙгәреше шундай төҫ ала:

1-се зат: *минең турала (хаҡта), беҙҙең турала (хаҡта);*

2-се зат: *һинең турала (хаҡта), һеҙҙең турала (хаҡта);*

3-сө зат: *уның тураһында (хаҡында), улар тураһында (хаҡында).*

*Үҙ(е)* алмашы менән килгәндә лә, бәйләүес шул ҡағиҙә нигеҙендә үҙгәрә:

1-се зат: *үҙемдең турала (хаҡта), үҙебеҙҙең турала (хаҡта);*

2-се зат: *үҙеңдең турала (хаҡта), үҙегеҙҙең турала (хаҡта);*

3-сө зат: *үҙе тураһында (хаҡында), үҙҙәре тураһында (хаҡында).*

Бәйләүестең зат формаһы 1-се һәм 2-се затта ҡыҫҡартылһа ла, тел ҡанунына ҡаршы килмәй, сөнки бында иң мөһиме зат формаларын бер-береһе менән бутамай, йәғни 1-се һәм 2-се заттарҙа 3-сө зат бәйләүесен ҡулланмай, алмаш менән бәйләүестең формаларын үҙ-ара яраштырып ҡуйыуҙан ғибәрәт. Әгәр 3-сө затта алмаш урынына башҡа бер һүҙ килә икән, ул һүҙ төп килештә алына: *кеше тураһында, яҡшылыҡ тураһында, уҡыу тураһында* һ. б.

Яҙма телдә, *тураһында* тигәндәге кеүек, *алдынан* тигән бәйләүесте лә урынһыҙ ҡулланып, бик йыш хата яһайҙар. Был бәйләүес ғәмәлдә — *алдан* тигән бәйләүестең 3-сө зат формаһы *(алдан — алдынан)*, ә уныһының сығышы *ал(д)* тигән исемгә ҡайтып ҡала: тәүҙә *-н* ялғауы ярҙамында исемдән рәүеш яһалған (сағыштыр: *кисен, ҡышын)*, аҙаҡ шул рәүеш бәйләүес хеҙмәтен дә үтәй башлаған. Был бәйләүестең *алда* тигән варианты ла бар. Өс варианттың да мәғәнәһе һәм ҡулланылған урыны бер-береһенә оҡшаған. Ләкин уларҙың *алдынан* тигәне үҙенә бер башҡараҡ тора. Ул ике урында йөрөй:

1. Хәл-ваҡиғаны белдергән исемгә йәки шуның алмашына эйәреп, хәл әйтеме яһай. Мәҫәлән,

*Байрам алдынан беҙ өй ағартырға өмә яһаныҡ;*

*Яҙғы сәсеү эштәре алдынан игенселәр бөтә техниканы ҡабаттан ҡарап, йүнәтеп ҡуйҙы.*

Был юлы *алдынан* һүҙе үҙенең тәүге исем мәғәнәһенә яҡынлай.

2. Һөйләмдең эйәһе 3-сө заттағы алмаш йәки исемдән килгәндә, ҡылымдың киләсәк заман *-ыр* формаһына эйәреп, хәл әйтеме яһай. Мәҫәлән,

*Ул йоҡоға ятыр алдынан малын ҡарап инде;*

*Мәхмүт юлға сығыр алдынан өй беренсә йөрөп, туғандары менән хушлашып сыҡты.*

Был юлы 3-сө зат эйәлек формаһындағы *алдынан* бәйләүесе 3-сө заттағы эйә менән грамматик яҡтан ярашып тора. Ошо ике урындан башҡа бәйләүестең *алдынан* тигән формаһы бер ерҙә лә йөрөмәй.

Бәйләүестең *алда* һәм *алдан* тигән ике формаһы юғарыла күрһәтелгән ике шарт булмаған ерҙә шулай уҡ ҡылымдың киләсәк заман *-ыр* формаһына эйәреп, хәл әйтеме яһай. Мәҫәлән,

*Яҙырға ултырыр алдан мин яҡшылап уйымды төйнәнем;*

*Ерекле ауылына етер алда машина боҙолдо.*

Ошонан тыш, *алда* бәйләүесе сығанаҡ килештәге алмаш, исем һәм киләсәк заман *-ыр* формаһына эйәреп, хәл әйтеме яһай. Мәҫәлән,

*Ямғырҙан алда бесәнде кәбәнгә һалып өлгөрҙөк;*

*Ҡайтырҙан алда инеп сығаһы ерем бар;*

*Минән алда килеп тә еткәнһең.*

Тимәк, *алда, алдан, алдынан* тигән бәйләүестәрҙең башҡарған грамматик хеҙмәте оҡшаш булһа ла, һәр береһенең үҙ урыны, үҙ ҡулланышы бар. Беҙҙең яҙма телдә иһә, уны

уйлап-нитеп тормайҙар, бөтә ерҙә *алдынан* тигән форманы ҡулланалар. Мәҫәлән,

*Башҡорт мәктәбенә уҡыусы йыйыр алдынан ата-әсә менән ун туғыҙ тапҡыр осрашыу уҙғарылды* (Б., 12.07.96) тигән һөйләмдә 3-сө зат формаһындағы эйә юҡ, бәйләүестең *алдынан* тигән 3-сө зат эйәлек формаһын бер нәмә лә талап итмәй. Шулай булғас, *алдан* тип кенә алып була.

*...Төп мәсьәләгә күсер алдынан инеш һүҙем дә оҙаҡҡа һуҙылды* (А., 96, 6, 164) тигәндә 1-се зат исеменән һүҙ алып барыла, шулай булғас 3-сө зат эйәлек формаһындағы *алдынан* бәйләүесе менән ул бөтөнләй һыйыша алмай.

*Урынымдан торғас, утты ҡабыҙыр алдынан, тәҙрәгә күҙ һалдым* (А., 96, 11, 11) тигән һөйләмдә лә 1-се зат исеменән һөйләгән һүҙ 3-сө заттағы бәйләүес менән һыйышмай.

*Йыйылыш тамамланыр алдынан театр директоры... Рәмил Ниғмәтйәновҡа ла һүҙ бирҙе* (А., 96, 7, 54) тигән һөйләмдең эйәһе 3-сө затта торһа ла, хәл әйтемендәге эштең уға мөнәсәбәте булмағас, *алдынан* тип 3-сө зат формаһында әйтеп булмай, *алда* тип әйтергә кәрәк. Ошо һөйләмде *Йыйылышты тамамлар алдынан театр директоры... һүҙ бирҙе* тип үҙгәртһәк кенә, эйә менән хәл әйтемендәге эш үҙ-ара мөнәсәбәткә килер ҙә, *алдынан* тигән бәйләүесте ҡулланып булыр ине.

Эйәлек менән үҙгәрә торған бәйләүестәрҙән йәнә *арала, араһында* тигән бәйләүестең грамматик формаһын яҙма телдә яңлыштырып ҡулланалар. Был бәйләүес *ара* тигән исемдән яһала. Ул сифат ҡылымдың *-ған* формаһынан һәм төп килеш йәки эйәлек килештәге исем менән алмаштан һуң килеп, ике нәмәнең мөнәсәбәтен белдерә. Шул саҡта 3-сө зат эйәлек формаһында торған *араһында* бәйләүесе, әлбиттә, 3-сө заттағы алмаш йәки исем менән генә ҡулланыла. Мәҫәлән,

*Уларҙың араһында төрлө хәл була: талашып та, ярашып та китәләр, әммә яманлашмайҙар;*

*Ирмен тигән ирҙәр араһында ваҡ-төйәк ғәйбәткә һис тә урын булаһы юҡ.*

Һәр ерҙә 3-сө заттың 3-сө зат менән генә яраша алыуы, юғарыла әйткәнсә, үҙенән-үҙе билдәле булһа ла, яҙма телдә шуға иғтибар бирмәй, күрәләтә хата яһайҙар. Күрәһең, урыҫ телендәге *между* предлогына бәйләүестең *араһында* тигән формаһын тиң ҡуйғандан был шулай килеп сыға. Мәҫәлән,

*Унының менән үҙем араһында ниндәйҙер яҡынлыҡ, уртаҡлыҡ тойҙом* (Й., 19.11.94) тигән һөйләмдә *үҙем* тигән алмаш 1-се заттыҡы, уны 3-сө зат эйәлек формаһындағы *араһында*

тигән бәйләүескә бәйләп булмай. Бында *уның менән үҙемдең арала* тип яҙыу дөрөҫ була.

*Был сер, дуҫым, икебеҙ араһында ғына ҡалһын* (Ш., 96, 4, 73) тигәндә лә *икебеҙ* тигән һүҙ 1-се затҡа ҡарай, шулай булғас, *икебеҙҙең арала* тип кенә әйтеп була.

Эйәлек формаһын урынлы-урынһыҙ ҡулланыуҙан башҡа, уны һүҙгә ялғаған саҡта ла хәҙер тел ҡағиҙәһен иҫәпкә алмайҙар. Башҡорт телендә *теге, ошо* тигән кеүек күрһәтеү алмаштарына эйәлек ялғауының туранан-тура түгел, ә *тегенеһе, ошоноһо* тип, *-н-* өнө аша ҡушылғаны яҡшы билдәле. Шулай уҡ *ҡайһы* тигән һорау алмашына ла *ҡайһыныһы* тип эйәлек ялғауы *-н-* аша ҡушыла, ләкин был алмаш тулы формаһын һаҡламай, ғәмәлдәге телдә тартылып, *ҡайныһы* тигән бик уңайлы рәүеш ала. Эйәлек ялғауын *был, шул, ул* тигән алмаштарға ҡушҡанда, боронғо *-л* ялғауы төшөп ҡала ла, *бы, шу, у* тигән тәүге тамырға эйәлек ялғауы тағы баяғы ҡағиҙә буйынса *-н-* өнө аша ҡушылып, *быныһы, шуныһы, уныһы* тигән форма барлыҡҡа килә. Беҙҙең тел өсөн был ныҡлы ҡағиҙә булып тора. Шуны онотоу арҡаһында яҙма телдә ошо алмаштарҙы бик йоғошһоҙ, яһалма формаға килтереү киң урын алды. Мәҫәлән,

*...Сәйҙә ҡыуа, ә тегеһе ҡаса* (А., 96, 7, 25) тигәндәге *тегеһе;*

*Был ике фекерҙең ҡайһыһында дөрөҫлөк?* (Б., 19.09.96) тигәндәге *ҡайһыһында;*

*Ҡайһыһы ҡырын ятҡан, ҡайһыһы ултырған килеш, утҡа төбәлеп, өнһөҙ генә йыр тыңлай* (А., 96, 3, 65) тигәндәге *ҡайһыһы;*

*Идара ағзаларының һәр ҡайһыһы үҙ эшен үҙе белеп башҡара* (Б., 12.07.96) тигәндәге *һәр ҡайһыһы* тигән формалар башҡорт телендә бөтөнләй юҡ. Уларҙы тел ҡағиҙәһенә килтереп, *тегенеһе, ҡайныһында, ҡайныһы, һәр ҡайныһы* тип төҙәтеп сығырға кәрәк.

Әллә ҡайҙан яһап, килешмәгән форма һәм һүҙҙәр индереү беҙҙең яҙма телде бик боҙа, ысын халыҡ теленән ситләштерә. Шул яраҡһыҙ, яһалма нәмәләр ҡайһы берҙә һис көтмәгән ерҙә килеп сығып, ғәжәпкә ҡалдыра. Мәҫәлән,

*Ишек алды бала-саға тауышынан яңғырап тора. Кемеһелер илай, ошаҡлар өсөн әсәһен саҡыра* (А., 96, 7, 60) һәм

*Кемеһенә кәңәш, кемеһенә ярҙам кәрәк* (Б., 2.10.96) тигән һөйләмдәрҙә *кемеһе* тип;

*Ун ике егеттең уныһы үлеп ҡалдылар* (Б., 12.11.96) тигән һөйләмдә *уныһы* тип, ни өсөн ике эйәлек ялғауын бер-береһенә өҫтәп, ҡатландырып ҡуйғандарын һис аңларлыҡ

түгел. Күрәһең, *кемелер илай, ун ике егеттең уны* тип тейешенсә яҙыу был авторҙарға әҙ тойолған. Унан һуң, башҡорттар бындай урында *кеме* тип тә әйтмәй, *ҡайныһы* ти. Был *кемеһе* тигәндең тағы баяғы урыҫ телендәге *кто, кто-то, кому-то* тигән һүҙҙәрҙән күсереп алынғаны күренеп тора. Эйәһе һандан килгән һуңғы һөйләмдең хәбәрен *ҡалдылар* тип күплектә алыу ҙа урыҫ теленә эйәргәндән килә. Ҡалай ғына әйләнһәң дә, урыҫ теленән туп-тура күсергән нәмә аптырата. Яҙышҡан кешеләр шуның менән ҙур зыян килтергәнен, үҙебеҙҙең яҙма телде юҡҡа сығарғанын аңлаһа, бәлки, иғтибарлыраҡ булырҙар ине.

## Килеш менән бәйләүес

Килеш тигән грамматик категория исемде икенсе исемгә йәки ҡылымға бәйләп, ике аралағы синтаксик мөнәсәбәтте белдереп тора. Башҡорт телендә алты килеш бар, һәм шуларҙың төп килештән башҡаһы грамматик күрһәткес булып торған ялғау менән билдәләнә: эйәлек килештең ялғауы — *-ның,* төшөм килештеке — *-ны,* төбәү килештеке — *-ға,* сығанаҡ килештеке — *-нан,* урын-ваҡыт килештеке — *-ла.* Килештең мәғәнәһе һүҙ бәйләнешендә һәм һөйләмдә генә асыла.

Төп килештәге исем синтаксик йәһәттән исем менән дә, ҡылым менән дә бәйләнешкә инә ала: *емеш баҡсаһы, хат алыу.*

Эйәлек килештә торған исем гел исем менән һәм исемләшкән һүҙ менән бәйләнешкә инә: *ағастың ботағы, көндөң һыуығы.*

Башҡа килештәр ҡылым менән һәм, шунан тыш, һуңғы өсөһө бәйләүес менән мөнәсәбәткә килә. Уларҙың исем менән бәйләнешкә инеүе — төрки телдәрҙең, шул иҫәптән башҡорт теленең, ҡануны буйынса, мөмкин булмаған эш. Ләкин хәҙерге башҡорт яҙма телендә урыҫ теленә эйәреп ошо ҡанунды боҙоу ғәҙәттәге хәлгә әйләнде. Күпселек урында килеш формаһындағы һүҙҙе бәйләнмәҫ һүҙ менән бәйләп ҡуйыу тотош һөйләмдең урыҫса төҙөлөүенән, урыҫса уйлап яҙылыуынан килеп сыға. Мәҫәлән,

*«Һеҙҙең һымаҡ башҡа бер халыҡ та шулай ҙур бола күтәрмәй», — тип зарлана... кенәз Урусов үҙенең баш-*

*ҡорттарға мөрәжәғәтендә* (А., 96, 4, 73) тигән һөйләмдә *башҡорттарға мөрәжәғәтендә* тип, төбәү килештәге *башҡорттарға* һүҙен *мөрәжәғәт* тигән исемгә бәйләп, башҡорт телен боҙа торған хата яһалған. Шуның менән бергә, урыҫтың *в своем обращении к башкирам* тигәненән һүҙмә-һүҙ күсереү арҡаһында мәғәнәгә лә зыян килгән. Тел ҡанунына ла, мәғәнәгә лә хилафлыҡ ҡылмаҫ өсөн, был һөйләмде үҙ телебеҙҙең яйына килтереп, аңлайышлы ғына итеп төҙөргә булыр ине.

*Халыҡтарҙың... яҡшылыҡ менән яманлыҡҡа мөнәсәбәте, кешенең ерҙәге урыны хаҡында фекер йөрөтөүе күп төрлө һәм үҙенсәлекле* (Б., 12.07.96) тигән һөйләмдә лә *яҡшылыҡ менән яманлыҡҡа* тигән төбәү килештәге һүҙҙе *мөнәсәбәте* тигән исем менән бәйләп булмай. Бәйләр өсөн һүҙ бәйләнешенең тәүге өлөшөн нисектер сифат формаһына килтерергә кәрәк. Быны ң һымаҡ урында күберәк ваҡыт *булған* тип ике араға ярҙамлыҡ һүҙ ҡыҫтырып әйтәләр.

*Башҡорттарҙың үҙаллылыҡҡа хоҡуғын нигеҙләп яҙа улар* (А., 96, 9, 180) тигәндәге *үҙаллылыҡҡа хоҡуғы* урыҫтың *право на самостоятельность* тигәненән *на* предлогы урынына төбәү килеш формаһы ҡуйып күсерелгән, ул форманың исем менән һыйышмағаны иҫәпкә алынмаған. Башҡорт теленең ҡағиҙәһе буйынса, бында, *кешелек хоҡуғы, азатлыҡ хоҡуғы* тигәндәге һымаҡ, *үҙ аллыҡ хоҡуғы* тип әйтелергә тейеш ине.

*Ошо эш менән йөрөүселәрҙе Сыромолотов... революцияға хыянатлыҡта ғәйепләне* (А., 96, 3, 75) тигән һөйләмдә урыҫтың *в измене революции* тигәненән алып, башҡорт грамматикаһына йоҡмай торған һүҙ бәйләнеше төҙөлгән.

... *Ошо производствоға ялыуҙы тикшереү буйынса командировкаға ебәргәйнеләр* (А., 96, 1, 19) тигәндәге *производствоға ялыу* һәм шулай уҡ *йыһанға сәйәхәт, ижадҡа илһам* тигән кеүек һүҙҙәрҙә төбәү килеш формаһын исем менән мөнәсәбәткә килтереү, әгәр ул артабан *...сәйәхәт итеү, ...илһам алыу* тип ҡылымға бәйләнмәһә, беҙҙең тел ҡағиҙәһенә ҡаршы килә. Тел ҡағиҙәһенә һыймаған шундай нәмәнең күбәйеүе туған телде һәләкәткә алып бара. Мәҫәлән, «Башҡортостан» гәзите *Игенгә хаҡтар тураһында* тип мәҡәлә башы бирә (Б., 12.09.96). Шуны урыҫса түгел, *Иген хаҡы тураһында* тип үҙебеҙсә әйтеп булмаймы ни? Юҡ, нишләптер беҙ тотош урыҫтан күсереүгә һалышып киттек.

Төбәү килештәге кеүек, урын-ваҡыт килештәге һүҙҙәрҙең дә исем менән мөнәсәбәткә килә алмауы хаҡында юғарыла әйтелде. Яҙма телдә был килеште лә күп урында яңлыш ҡулланалар. Мәҫәлән,

*Тышҡы ҡиәфәтендә ихласлыҡ... уның геройҙарының төп шарттарының береһе булып тора* (Й., 18.10.94) тигән баштан-аяҡ килешһеҙ һөйләмдәге *тышҡы ҡиәфәтендә ихласлыҡ* тигән һүҙ бәйләнешен алайыҡ. Ундағы *ихласлыҡ* тигән исем алда торған килеш формаһы менән килешә алмай. Ике һүҙҙе бәйләр өсөн тәүгеһен *ҡиәфәтендәге* тип сифат формаһына килтереү талап ителә.

*Ул Афғанда хеҙмәтенән һуң да үҙ теләге менән ҡалған* (Й., 26.12.96) тигәндә шулай уҡ *Афғандағы* тип сифат формаһына килтергән хәлдә генә ике һүҙҙе бәйләп була. Ләкин урыҫ телендәге *после службы в Афгане* тигән һүҙгә әүрәп, беҙҙең автор үҙ телендәге ҡағиҙәне онотҡан.

Сығанаҡ килештә торған һүҙҙе исем менән бәйләп яҙыу шулай уҡ беҙҙең тел ҡанунына ҡаршы килә. Шуға күрә,

*Башҡорт теленән таблицалар күптән иҫкерҙе, яңылары һаман сығарылмай...* (Б., 19.07.96) тигән һөйләмдә *башҡорт теленән таблицалар* тип әйтеү башҡортса булмаған. Урыҫ телендә *таблицы по башкирскому языку* тиелә икән, шуны үҙебеҙсә уйлап, нисектер икенсе төрлө, мәҫәлән, *башҡорт теленең таблицалары* тип әйтеп булыр ине. **Иң мөһиме — үҙебеҙсә уйлап өйрәнеү.** Шул саҡта үҙ телебеҙҙәлә тейешле фекерҙе сисерлек сара табылыр.

*1985 йылда К. У. Черненконың Юғары Советҡа һайлау алдынан сығышын телевизор аша тапшырырға әҙерләү ике йөҙләлөктөң иң юғары нөктәһе булды шикелле* (Б., 12.09.96) тигән һөйләмдә *һайлау алдынан сығышы* тип әйтеү сараһыҙҙан түгел, үҙебеҙсә уйламағандан булған. Беҙҙең гәзит-журналдан башҡа, радио-телевидениела ла *төҙөлөштәрҙән хәбәрҙәр, сит илдәрҙән яңылыҡтар* тигән кеүек килешһеҙ һүҙҙән тартынмайҙар, *төҙөлөш хәбәрҙәре, сит ил яңылыҡтары* тип үҙебеҙсә әйтеү уларҙың да башына килмәй.

Башҡорт телендә грамматик хеҙмәте яғынан килеш категорияһына бәйләүестәр яҡын тора. Уларҙың төрлөһө төрлө килеш (төп килеш, төбәү килеш, сығанаҡ килеш) формаһындағы исемгә, исемләшкән һүҙгә, эйәлек килеш формаһындағы алмашҡа һәм шулай уҡ сифат ҡылымға эйәреп, күпселек ваҡыт һөйләмдәге ҡылым менән мөнәсәбәткә инә. Урыҫ теленең йоғонтоһона бирелеп, шул бәйләүестәрҙе тейешһеҙ мөнәсәбәткә ҡуйыу ҙа беҙҙең тел ҡанунын нык боҙоуға килтерә. Һүҙҙе башлап, иң тәүҙә *менән* бәйләүесе хаҡында әйтергә мөмкин.

Һөйләм эсендә *менән* бәйләүесе ҡатнашлыҡ, маҡсатлыҡ, ярҙамлыҡ мәғәнәләрен бирә, һәм ул шулай уҡ теркәүес хеҙмәтен үтәп йөрөй *(Әмәт менән Йәмәт, ат менән һыйыр).*

Яҙма телдә уны яңлыштырыу бәйләүес мәғәнәһе менән килгән сағында йыш була. Мәҫәлән,

*Үҙәк менән мөнәсәбәттә башҡорттарҙың хәле ҡырҡыулашып киткәс, нәк бына ошо Солтанғәлиев ике арала илсе вазифаһын үтәгәйне* (А., 96, 5, 39) тигәндәге *Үҙәк менән мөнәсәбәттә* һүҙе беҙҙең тел ҡағиҙәһенә бөтөнләй ҡаршы килә. Урыҫтың *в отношениях с Центром* тигәнен башҡорт теленә шул көйө күсереп булмай, сөнки *менән* бәйләүесе *мөнәсәбәт* тигән һүҙ менән туранан-тура бәйләнешкә килә алмай. Бәйләнешкә килтерер өсөн һөйләмде, *башҡорттарҙың Үҙәк менән мөнәсәбәте ҡырҡыулашып киткәс,* тигән һымағыраҡ итеп үҙгәртергә кәрәк. Шул саҡта *менән* бәйләүесе менән *мөнәсәбәт* тигән һүҙ араһындағы яраҡһыҙ бәйләнеш өҙөлөп, икенсе төрлө конструкция (*башҡорттарҙың... мөнәсәбәте)* барлыҡҡа килә, һәм һөйләм үҙ телебеҙҙең яйына һалына.

*Беҙҙең менән әңгәмәнән һуң директор... район үҙәгенә китте* (Б., 27.07.96) тигән һөйләмдәге *беҙҙең менән әңгәмә* лә *после беседы с нами* тигәнде шул көйө күсереп, *менән* бәйләүесен *әңгәмә* тигән исем менән бәйләп ҡуйғанға күрә, башҡорт теленә йоҡмай. Был һөйләмде лә, *беҙҙең менән әңгәмәләшкәндән һуң,* тип үҙебеҙсә төҙөргә кәрәк ине.

Телдә йыш ҡулланылған *өсөн* бәйләүесе шулай уҡ алмаш, исем, исемләшкән һүҙ һәм сифат ҡылымға эйәреп төрлө мәғәнә бирә. Хәҙерге яҙма телдә уны,

*Тәртип һаҡлау өсөн... бик аҙ ғына ғәскәр ҡалдырабыҙ* (А., 96, 4, 63);

*Халыҡтың көнкүрешен яҡшыртыу өсөн күп нәмә эшләнә* (Й., 19.09.96) тип исем ҡылымға эйәртеү киң таралған. Был, әлбиттә, дөрөҫ түгел, сөнки бәйләүестең алдында торған ҡылым заманға битараф була алмай. Киләсәк заманға йүнәлтелгән эш-хәрәкәтте белдергәндә, ул бәйләүес сифат ҡылымдың *-ыр* формаһы менән *һаҡлар өсөн, яҡшыртыр өсөн* тип, үткән заманда булған эш-хәрәкәтте белдергәндә, сифат ҡылымдың *-ған* формаһы менән *һаҡлаған өсөн, яҡшыртҡан өсөн* тип әйтелә. Уны исем ҡылымға эйәртеп, *һаҡлау өсөн* тип ҡуйырға һис ярамай.

Был *өсөн* бәйләүесе һәр ваҡыт үҙенән һуңғы ҡылым менән генә мөнәсәбәткә инә. Яҙма телдә шуны исем менән бәйләп тағы хата яһайҙар. Шул хатаны асығыраҡ итеп күрһәтер өсөн, миҫалды күберәк килтереп, ентекләберәк тикшермәйенсә булмай.

*Хөкүмәт, азатлыҡ һөйөүсе халыҡтың үҙ ере өсөн көрәшен баҫтырып, яңы һөжүмгә күсә* (А., 96, 4, 132) тигән һөйләм, әлеге әйткәнсә, тотош урыҫса төҙөлгән, уны анһат ҡына итеп йүнәтерлек тә түгел. Шулай булһа ла, *халыҡтың*

*үҙ ере өсөн көрәше* тип әйткән өлөшөн айырым алып, ҡарап ҡарайыҡ. Күп кеше хәҙер урыҫса фекер йөрөтөргә күнегеп бөткәнгә *азатлыҡ өсөн көрәш, алдынғылыҡ өсөн ярыш* тигән һүҙгә бер ҙә аптырамай башланы. Ә ғәмәлдә *өсөн* бәйләүесен исем менән бәйләп ҡуйған был конструкциялар беҙҙең тел ҡоролошона хас нәмә түгел. Башҡорт теленең ҡоролош ҡануны *азатлыҡ өсөн көрәшеү, алдынғылыҡ өсөн ярышыу* тип бәйләүесте ҡылым менән мөнәсәбәткә килтергәнде генә ҡабул итә. Әгәр *көрәш* һүҙен ҡулланырға уйлайһың икән, ул саҡта *азатлыҡ көрәше, алдынғылыҡ ярышы* тип изафет конструкцияһы яһарға кәрәк була. Шуның һымаҡ,

*Әбйәлил өсөн һуғыш хурлыҡтарын онотҡандар тиһеңме?* (А., 96, 4, 80) тигән һөйләмдә лә *өсөн* бәйләүесен *һуғыш* тигән исем менән мөнәсәбәткә килтереү хата булған. Был урынды йә *Әбйәлил һуғышындағы хурлыҡтарын,* йәки *Әбйәлил өсөн һуғышҡан саҡтағы хурлыҡтарын* тип төҙәткәндә генә үҙ телебеҙҙең яйына килә.

*Һул яҡта — ...ҡышын бәрәс, быҙау бикләү өсөн оя* (А., 96, 7, 109) тип яҙған кеше *бикләү өсөн оя* тип башҡортса әйтеп булмағанын, *бикләй торған оя* тип әйтелгәнен иҫенән сығарған.

Күҙҙән үткәргән миҫалдар яҙышҡан кешеләрҙең һөйләмде урыҫса төҙөп, *өсөн* бәйләүесен *за* һәм *для* тигән ике предлог урынына ҡулланырға тырышҡанын асыҡ күрһәтә. Әлбиттә, был ҡылыҡ яҙма телде боҙоп, ғөмүмән башҡорт теленең нигеҙен емереүгә алып бара. Шундай уҡ нәмә башҡа төрлө бәйләүестәрҙе ҡулланғанда ла күп осрай. Мәҫәлән,

*Башревкомға ҡаршы сараларҙың тиҙ һәм белеп эшләнеүе Йомағоловты ныҡ ғәжәпләндерә ине* (А., 96, 5, 89) тигәндәге *ҡаршы саралар;*

*Беҙ енәйәтселеккә, коррупцияға ҡаршы көрәштең демократик алымдарын бик тә хуплайбыҙ* (Б., 11.07.96) тигәндәге *ҡаршы көрәш* һүҙендә исем менән мөнәсәбәткә килмәй торған *ҡаршы* бәйләүесе *сара* һәм *көрәш* тигән исемдәргә туранан-тура бәйләп ҡуйылған. Был *ҡаршы* бәйләүесен дә шул рәүештә ҡулланыу яҙма телдә киң урын алған. Мәҫәлән, *Хөкүмәткә ҡаршы агитацияны туҡтатырға; Дошманға ҡаршы һуғышты көсәйтәләр* тип яҙыуҙан берәү ҙә тартынмай. Бында ике нәмәне айыра белергә кәрәк: һөйләмдәге ҡылым *ҡаршы* бәйләүесе менән мөнәсәбәткә ҡуйылған исемгә ҡараймы әллә шул бәйләүестең үҙенә ҡараймы? Килтерелгән миҫалдарҙа ул ҡылым исемгә бәйләнгән *(агитацияны туҡтатырға, һуғышты көсәйтәләр),* бәйләүескә ҡылымдың мөнәсәбәте юҡ, шуға күрә беҙҙең телгә

йоҡмай. Ләкин һөйләмде, *Хөкүмәткә ҡаршы агитация алып баралар; Дошманға ҡаршы һуғыш башлайҙар* тип ҡорһаҡ, *агитация алып баралар, һуғыш башлайҙар* тигән хәбәр төркөмдәре *ҡаршы* бәйләүесе менән мөнәсәбәткә инә, һәм шул беҙҙеңсә дөрөҫ була.

Сығанаҡтарҙан алып килтергән миҫалдарҙы үҙ телебеҙҙең яйына һалыр өсөн, *Башревкомға ҡаршы йүнәлтелгән саралар, коррупцияға ҡаршы йүнәлтелгән көрәш* тип ике араға сифат ҡылым ҡуйырға, йәғни был һүҙҙәрҙе аныҡлаусылыҡ мөнәсәбәтенә килтерергә кәрәк.

*Мәскәүҙең Финляндияға ҡарата ниәттәре бик асыҡ күренә* (Ш., 96, 3, 130) тигән һөйләмдә лә бәйләүесте тура исемгә бәйләгән *ҡарата ниәттәре* һүҙен *Финляндияға ҡарата тотҡан ниәттәре* тип аныҡлаусылыҡ мөнәсәбәтенә килтергәндә генә башҡорт теленең талабына яуап бирә.

Бәйләүес менән исемде аныҡлаусылыҡ мөнәсәбәтенә килтерер өсөн, ике араға сифат ҡылым ҡыҫтырыуҙан башҡа, ҡайһы берҙә бәйләүескә сифат ялғауы ҡушырға ла мөмкин. Мәҫәлән,

*Беҙ федераль бюджет тураһында закондың бөтә талаптарын да үтәйбеҙ* (Б., 2.10.96);

*Буранбай сәсән тураһында мәғлүмәттәрҙе заманында атаҡлы Мөхәмәтша сәсән Буранғолов та аҡ ҡағыҙға теркәгән* (А., 96, 10, 178);

*Шиғриәтебеҙ тураһында уйҙар* (А., 96, 10, 178) тигән һөйләмдәрҙәге *тураһында закон, тураһында мәғлүмәт, тураһында уйҙар* беҙҙең телгә бөтөнләй ят, башҡортса улай тип әйтеп булмай. Урыҫ телендәге *закон о... , сведения о... , мысли о...* тигәнде күсергәнгә ул шулай килеп сыҡҡан. Бәйләүесте *тураһындағы* тигән сифатҡа әйләндереп, ике араны аныҡлаусылыҡ мөнәсәбәтенә ҡуйғанда ғына был һүҙҙәрҙе тейешле рәүешкә килтереп була.

Яҙма телдә яңлыш ҡулланылған бәйләүестәрҙең иң ҙур ауырлыҡ килтергәне — *буйынса* тигән бәйләүес. Бөтә бәлә уны урыҫ телендәге *Министерство по делам национальностей, отдел Кабинета Министров по гуманитарным и социальным вопросам, председатель Государственного комитета по делам молодежи, заведующий отделом по трудоустройству, Комиссия по государственным премиям, заместитель директора по хозяйственным делам, советник по культуре и просвещению, дежурный по общежитию* тигән һымаҡ ойошма һәм вазифа атамаларын һүҙмә-һүҙ күсереп, шундағы *по* предлогын бөтә ерҙә *буйынса* бәйләүесе менән алмаштырғандан килеп сыға. Шуны алыштырған саҡта, *буйынса* бәйләүесенең үҙенән һуң торған исем менән һис тә

мөнәсәбәткә килә алмағанын бер кем дә иҫәпкә алмай. Ғәмәлдә урыҫ теленә нык тап килтереп эшләгән шул термиңдар башҡорт телендә сикһеҙ хилаф булып тора һәм тейешле мәғәнәне бирмәй. Ул терминдарҙы аңлаған хәлдә лә, урыҫ телендәгеһен белгән өсөн генә аңлап була. Урыҫ теленән күсереп, хилаф һүҙ яһау урынына, һәр береһен үҙебеҙсә әйтергә тырышһаҡ, бер ҙә насар булмаҫ ине. Шул саҡта юғарыла килтергән һүҙ һәм терминдарҙы, мәҫәлән, *Милли эштәр министрлығы, Министрҙар Ҡабинетының гуманитар һәм социаль мәсьәләләр булеге, Йәштәр эшен атҡарған дәүләт комитетының рәйесе, эш менән тәьмин итеү бүлегенең мөдире, дәүләт бүләге биреү комиссияһы, директорҙың хужалыҡ эшендәге урынбаҫары, мәҙәниәт һәм мәғариф өлкәһендәге кәңәшсе, ятаҡ дежуры* тип әйтеп булыр ине. Телдең тәбиғәтен боҙоп, йәбешмәҫ ергә тотош *буйынса* бәйләүесен йәбештереп ултырғанса, бик һирәгенә генә *өлкәһендәге* тигән бер һүҙ өҫтәп киткәндә лә зыян булмаҫы күренеп тора. Ләкин урыҫ теленә саҡ ҡына тура килмәгән нәмәне бер ҙә ҡабул итә алмаған кешеләр был тәкдимде хуп күрер тип ышаныуы бик ҡыйын. Заманында миңә шундай кешеләрҙең береһе менән эшләргә тура килде. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең редакцияһындағы бер бүлек мөдире минең башҡортса яҙғанды тотош төҙәтеп: *«Һин һәр һөйләмеңде рус теленә тәржемә итеп ҡара. Рус теленә һүҙмә-һүҙ тура килеп торһа ғына, дөрөҫ була»,* — тип өйрәтә торғайны. Шулай уйлаған кеше әле юҡтыр, тип һис әйтеп булмай.

Ойошма һәм вазифа атамаларында ғына түгел, бүтән ерҙә лә урыҫ телендәге *по* предлогына тура килтереп, *буйынса* бәйләүесен яҙма телдә йыш ҡулланалар. Мәҫәлән,

*Илдәрҙе колонизациялау буйынса экспедицияға хәрбиҙәр, ... белгестәр йәлеп ителә* (Б., 30.07.96) тигән һөйләмдә бәйләүесте *экспедиция* тигән исемгә бәйләп булмай, *колонизациялау экспедицияһы* тип әйтергә кәрәк.

*Унда (семинарҙа) колхоз, совхоздарҙың баш зоотехниктары, йылҡысылыҡ буйынса белгестәр ҡатнашты* (Б., 1.08.96) тигәндә лә *йылҡысылыҡ буйынса белгес* тип ҡолаҡҡа йоҡмаҫ һүҙ яһағанса, *йылҡысылыҡ белгесе* тигәндә, үҙ телебеҙҙең ҡануны менән дә, алдағы тиң киҫәктең формаһы менән дә ярашып торор ине.

*...Утилләштереү буйынса хеҙмәт ҡалалағы хәлгә бигүк йоғонто яһап бармай* (Б., 17.09.96) тигәндәге ... *буйынса хеҙмәт* урынына *утилләштереү хеҙмәте* тип әйтелергә тейеш ине.

*Уның... хәҙерге әҙәбиәт үҫешенең актуаль проблемалары буйынса сығыштары йәлеп итә* (Й., 23.11.96) тигән һөйләмдә лә *буйынса сығыштары* тип бәйләүесте исем менән мөнәсәбәткә килтерергә тырышыу урынына йәки *...буйынса яһаған сығыштары,* йәки *проблемалары тураһындағы сығыштары* тип әйткәндә генә дөрөҫ була. Урыҫтың *по* предлогын туранан-тура күсереп,

*...Рәжәптең университет буйынса дуҫы (Б., 25.07.96);*

*Заводтағы эш буйынса иптәшем* (А., 96, 1, 117) тип яҙыуҙы ла хәҙер беҙҙә яҙыкка һанамайҙар, шуны *университетташ дуҫы* йәки *университетта бергә уҡыған дуҫы, заводта бергә эшләгән иптәше* тип үҙебеҙсә әйтмәй, телде боҙоп, урыҫлаштырып ебәреүҙе яҡшы күрәләр.

Яҙма телдә, үрҙә күҙәтеп үткәндәрҙән тыш, ҡылымға эйәргән исемдең килеш формаһын билдәләгәндә хата күп яһала. Ҡылым менән исемдең был мөнәсәбәтен грамматик хеҙмәттәрҙә «башҡарыу» тигән килешһеҙ генә бер термин менән йөрөтәләр. Һөйләмдәге ҡылым үҙенә мөнәсәбәте булған исемдең ниндәй ҙә булһа бер килеш формаһында торғанын талап итә. Ул килеш формаһы иң элек ҡылымдың мәғәнәһе менән билдәләнә, йәғни мәғәнәһенә ҡарап, теге-был ҡылым йә төшөм, йә төбәү, йә сығанаҡ, йә урын-ваҡыт килешендәге исем менән бәйләнешкә килә. Төрлө һөйләмдең мәғәнәһенә ярашып, бер үк ҡылымдың талабы үҙгәрергә лә мөмкин. Мәҫәлән, *Ул ауылға ҡасты* һәм *Ул ауылдан ҡасты* тигән һөйләмдәге бер үк ҡылым ике төрлө килеш формаһын эйәрткән. Ләкин бер ваҡытта ла *Ул ауылды ҡасты* тип әйтеп булмай, һәм шул нәмә һәр ҡылымдың ҡайҙа ниндәй килеш ялғауы талап иткәнен белеп, яңлыштырмай ҡулланырға кәрәк икәнен күрһәтә. Яңлыштырыу бар икән, ул авторҙың йә белмәгәненән, йә иғтибар бирмәгәненән килә. Мәҫәлән,

*Үҙ аллы һөйләшеүҙәр барышында ике яҡ та... бер-беренә ғәйепләүҙәрҙе көсәйтә генә* (Б. 19.07.96) тигән һөйләмдәге *ғәйепләү* ҡылымы *кемде? нимәне?* һорауына яуап биреп, тура тултырыусының төшөм килешкә ҡуйылыуын талап итә, тимәк, *бер-беренә* түгел, *бер-береһен ғәйепләй* тип әйтергә кәрәк.

*...Теүәл фәндәрҙән башҡортса уҡытыу өсөн ғилми нигеҙләнгән терминологик һүҙлектәр төҙөүҙе... үҙ өҫтөнә ала* (Б., 1.08.96) тигәндә лә *уҡытыу* һүҙе *фәндәрҙән уҡытыу* түгел, *фәндәрҙе уҡытыу* тип исемдең төшөм килешкә ҡуйылыуын һорай.

*...Һүҙ оҫтаһына, еңеүгә дәрт өҫтәп, «Афарин! Афарин!» — тип ҡеүәтләгәндәр* (Й., 18.10.94) тигән буталсыҡ

һөйләмдә *ҡеүәтләгәндәр* ҡылымына һорау ҡуйып, яуап алыр өсөн исемде төшөм килешкә ҡуйып, *һүҙ оҫтаһын ҡеүәтләгәндәр* тиергә кәрәк.

*(Йыйынды) ойоштороусы һәм ауылдар араһында таратыусы буларак..., фекеремде әйтмәксемен* (Б., 18.07.96) тигәндәге *таратыу* ҡылымына бәйле исем *ауыл араһына* тип төбәү килешкә ҡуйылырға тейеш.

*Яуаптар табырға бөтөнләй өмөт өҙмәһәк ярай ҙа* (А., 96, 9, 15) тигәндәге *өмөт өҙөү* ҡылымы төбәү килештәге түгел, сығанаҡ килештәге һүҙҙе генә эйәртә ала *(донъянан өмөт өҙөү, кешенән өмөт өҙөү)*, шулай булғас, бында ла *яуап табыуҙан* тип әйтеү генә дөрөҫ була.

*Йорттар араһындағы ситән-кәртәләр соҡорҙа шыуған кеүек нисектер аҫҡа китеп бара ине* (А., 96, 1, 61) тигән һөйләмдәге *шыуыу* һүҙе сығанаҡ килеште талап итә *(боҙҙан шыуыу, тауҙан шыуыу)*, тимәк, *соҡорҙан шыуыу* тип кенә әйтеп була.

*Балаларға пионер лагерына урындар етмәй* (А., 96, 9, 19) тигәндә *урын етмәй* икән, *лагерында* тип әйтергә кәрәк, *лагерына* тип бөтөнләй әйтеп булмай.

Ҡылымдар, билдәле килеш формаһын эйәрткән кеүек, бәйләүестәрҙең дә үҙенә кәрәген генә эйәртә. Мәҫәлән,

*Иҙәндәр күтәрмәнән түргә ҡәҙәр балаҫ менән түшәлгән* (А., 96, 3, 149) тигәндәге *түшәлеү* ҡылымын *менән* бәйләүесенә бәйләп булмай, *ябыу* һүҙе булһа ғына улар бәйләнешә алыр ине *(ҡалай менән өй башын ябыу)*. Был һөйләм ғөмүмән баштан-аяҡ насар төҙөлгән.

Ҡылымдарҙың башҡарыуы, йәғни билдәле бер килеште һәм бәйләүесте генә эйәртеү һәләте, — бик ҙур мәсьәлә. Һәр ҡылымды айырым-айырым тикшермәйенсә, ул мәсьәләне сисеп бөтөп булмай. Ә ундай эш был хеҙмәттең маҡсатына инмәй. Бында кешенең иғтибарын йәлеп итер өсөн күҙгә салынған бер нисә миҫалға ғына туҡтап кителде.

Телдәге бер нәмәне лә бәләкәй тип булмай, уның һәр нәмәһе бер биҙәк, бер семәр булып дөйөм туҡыманы хасил итеүҙә ҡатнаша. Ләкин тотҡан урыны, ҡулланышы менән килеш һәм бәйләүестәр туҡыманың арҡауын һәм буйлығын тәшкил иткән иң мөһим категорияларҙың береһе булып тора. Шул мөһим өлкәне яҡшы белеү, ят нәмәләрҙән таҙартыу, дөрөҫ ҡулланырға өйрәнеү, һис һүҙһеҙ, туған телдең булмышын һәм яҙмышын хәл итә. Урыҫ теленән туп-тура күсереп хата яһаған башҡа урындағы кеүек, килеш формаһы менән бәйләүесте яңлыш ҡулланған ерҙәр ҙә туған телде йәлләү, уның өсөн әсенеү, һыҙланыу тойғоһо уята.

# Сифат менән рәүеш

Сифат менән рәүештең бер-береһенә оҡшаған яғы, оҡшамаған яғы бар. Улар икеһе лә аныҡлаусы хеҙмәтен үтәй, шул яғы менән оҡшаш. Ләкин сифат ниндәй ҙә булһа бер нәмәнең билгеһен, ә рәүеш эш-хәрәкәттең йәки билгенең билгеһен күрһәтә. Беҙҙең грамматик хеҙмәттәр һөйләм эсендә нәмәнең (исемдең) билгеһен күрһәткән сифаттарҙы аныҡлаусы тип, эш-хәрәкәттең (ҡылымдың) билгеһен күрһәткән рәүештәрҙе хәл тип йөрөтә. Икенсе яҡтан, нәмәләгә һәм эш-хәрәкәттәге ҡайһы бер билгенең асылы бер төрлө булырға, әйтәйек, бер нәмәнең яҡшы йәки насар булғаны кеүек, эш-хәрәкәттең дә яҡшы йәки насар булыуы мөмкин, йәғни *яҡшы кеше* тип кешенең тәбиғәтендәге ыңғай һыҙатты билдәләйбеҙ икән, *яҡшы эшләй* тип эштең башҡарылышындағы ыңғай һыҙатты билдәләйбеҙ. Шул йәһәттән сифат менән рәүеш тағы бер-береһенә яҡынлаша, һәм шундай оҡшаш һыҙатты күрһәткән саҡта улар грамматик форма ҡабул итмәй, тамыр һүҙ көйө ике хеҙмәтте бер тигеҙ үтәй ала. Формаль яҡтан бер-береһенән айырылмай сифат булып та, рәүеш булып та йөрөгән һүҙ башҡорт телендә байтаҡ: *алыҫ — яҡын, ауыр — еңел, етеҙ — яй, матур — ямаҡ, яҡшы — насар* һ. б. Ошоноң һымаҡ, бер ыңғай сифат булып та, рәүеш булып та йөрөгән һүҙҙәрҙең ҡайһы береһендә ике мәғәнәнең береһе өҫтөнлөк итә. Мәҫәлән, *күп* һәм *әҙ* тигән һүҙҙәр рәүеш мәғәнәһендә йышыраҡ, сифат мәғәнәһендә һирәгерәк йөрөй, йөрөгәндә лә күберәк ваҡыт һөйләмдең хәбәре булып килә. Формаль күрһәткесе булмаған һүҙҙәрҙең шулай уҡ ике төрлө хеҙмәт үтәй алмағандары, йә сифат булып аныҡлаусы хеҙмәтен генә, йә рәүеш булып һөйләмдә хәл хеҙмәтен генә башҡарғандары була. Һүҙҙәр араһындағы был айырма тотош уларҙың мәғәнә йөкмәткеһенән килә: бер һүҙҙең мәғәнәһе нәмәнең билгеһен дә, эш-хәрәкәттең билгеһен дә тасуирлай ала, ә икенсе һүҙҙең мәғәнәһе йәки нәмәнең, йәки эш-хәрәкәттең билгеһенә генә тап килә, шуға күрә ул йә сифат булып, йә рәүеш булып ҡына йөрөй ала. Беҙҙең яҙма телдә күберәк ваҡыт ошо ике мәғәнәгә эйә була алмаған һүҙҙәрҙе ҡулланғанда хата яһала. Мәҫәлән,

*...Фырт кирасирҙар, гусарҙар... Вуаль аҫтынан уларҙы илгәҙәк күҙәткән наҙлыҡайҙар...* (А., 96, 5, 73) тигәндәге *илгәҙәк* һүҙе, *илгәҙәк кеше* тип, кешенең тәбиғәтен, тәбиғи сифатын билдәләгәндә генә әйтелә, эш-ҡылығын тасуирла-

ғанда ул ҡулланылмай. Урыҫ телендәге *приветливый* тигән сифатҡа тап килһә лә, *приветливо* тигән рәүешкә уны тап килтереп булмай.

*Ат ҡапыл ҡырағай бышҡырҙы ла ҡар туҙҙырып ситкә ырғыны* (А., 96, 1, 45) тигән һөйләмдәге *ҡырағай* һүҙе *дико* тигәндән күсерелгән, ләкин *ҡырағай* һүҙенең рәүеш мәғәнәһе юҡ, сифат мәғәнәһе генә бар. Урыҫтың *дико всхрапнул* тигәнен башҡорт кешеһе *яман бышҡырып ебәрҙе* тип әйтә.

*Башҡорттарҙың үҙ биләмәләрен азат итеү өсөн хәрби хәрәкәттәргә ҡушылыуын чехтар ныҡыш талап итә* (А., 96, 4, 19) тигән килешһеҙ һөйләмдәге *ныҡыш* һүҙен дә рәүеш мәғәнәһендә ҡулланыу дөрөҫ булмаған. Башҡорт телендә *ныҡыш, ныҡымыш* һүҙе кешенең тәбиғәтен белдереп, сифат мәғәнәһендә генә йөрөй. Ул урыҫ телендәге *упорно* тигән рәүеште алмаштыра алмай. Һөйләмдә *ныҡышып* тигән форма ғына хәл хеҙмәтен башҡара ала.

*Юҡ, былар тураһында тәрән уйланғаным юҡ* (Ш., 96, 1, 96) тигәндәге *тәрән* һүҙе ҡайһы берҙә рәүеш мәғәнәһе алып, һөйләмдә хәл хеҙмәтен үтәһә лә, был урында ҡулланылмай, сөнки ул *уйланыу* ҡылымы менән килешә алмай: *тәрән уйға сумыу* йәки *батыу* тип әйтеп була, *тәрән уйлау* йәки *уйланыу* тип әйтеп булмай. Яҙған саҡта һүҙҙәрҙең үҙ-ара һыйышыу-һыйышмауын да иҫәпкә алырға кәрәк.

*Запастағы моряктарҙы байрамдары менән ҡайнар ҡотлайбыҙ* (Й., 27.07.96) тигәндәге *ҡайнар ҡотлайбыҙ* тигән һүҙҙе *горячо поздравляем* тигәндән күсереп телгә индереп ебәрҙеләр ҙә, яҙғанда ла, һөйләгәндә лә бик ныҡ ҡулланып алып киттеләр. Ғәмәлдә рәүеш формаһындағы *горячо* һүҙен башҡорттоң *ҡайнар* һүҙе алмаштыра алмай, сөнки ул һүҙ тура мәғәнәлә лә, күсмә мәғәнәлә лә сифат булып, тик аныҡлаусы хеҙмәтен генә үтәй ала: *ҡайнар һыу, ҡайнар сәләм, ҡайнар йөрәк* һ. б. Башҡорт телендә баяғы һүҙҙе *ҡайнар күңелдән* йәки *ҡайнар йөрәктән ҡотлайбыҙ* тип кенә әйтергә мөмкин һәм шул рәүештә генә ул дөрөҫ була.

*Ялҡау ғына атланы* (А., 96, 1, 30) тигәндәге *ялҡау* һүҙе лә кешенең тәбиғи сифатын ғына белдерә ала, шуға күрә һөйләмдә хәл хеҙмәтен үтәй алмай. Быны̧ң һымаҡ урында башҡорттар *иренеп кенә атланы* тип әйтә. Урыҫтарҙың *лениво* тигән рәүешен *ялҡау* тип күсерергә ярамай.

Күҙәтеп үткән миҫалдар формаль күрһәткесе булмаған сифаттарҙың теләгән береһен рәүеш мәғәнәһендә ҡулланып булмағанын асыҡ күрһәтә. Теге-был һүҙҙе рәүеш мәғәнәһендә ҡулланыр алда урыҫ теленә йөҙ тотоп түгел, башҡорт теленең үҙенән сығып, һәр һүҙҙең мәғәнә йөкмәткеһен, ҡулланышын белеп яҙғанда, төрлө хатаға урын ҡалмаҫ ине.

Ләкин яҙма телдә уға ҡарап тормай, нигеҙ һүҙҙәрҙе генә түгел, махсус ялғау менән яһалған ысын сифаттарҙы ла рәүеш мәғәнәһендә ҡулланыу ныҡ таралған. Мәҫәлән,

*Халыҡ йолаһы буйынса ҡунаҡсыл ҡаршыланы* (А., 96, 3, 72) тигәндәге *ҡунаҡсыл* һүҙе — *-сыл* ялғауы менән яһалған сифат, уны рәүеш мәғәнәһендә һис тә ҡулланып булмай, урыҫ телендәге *гостеприимно* тигән рәүешкә тап килтереп маташыу ҙур хата була.

...*Үҙенә ҡайғыртыусан йылмайып ҡарап торған ревком рәйесе ҡулдарын кире ҡағырға көсө етмәне* (А., 96, 4, 85) тигән аңлайышһыҙ һөйләмдәге *ҡайғыртыусан* һүҙе — *-сан* ялғауы менән яһалған сифат, рәүеш мәғәнәһендә йөрөмәй, һөйләмдә хәл хеҙмәтен үтәй алмай, урыҫ телендәге *заботливо* рәүешен алмаштырмай.

*Зәки Вәлиди губком докладын артабан йүгерек уҡыны* (А., 96, 6, 40) тигәндәге *йүгерек* һүҙе — *-ек* ялғауы менән яһалған сифат, уны урыҫ телендәге *бегло* тигән рәүеш урынына ҡулланып булмай. Башҡорттар был урында *йүгертеп уҡыу* тип әйтә.

*Ильяс ағай малайҙарға хәйләкәр ҡарап, тәмәкеһен өнһөҙ генә көйрәтә бирә* (А., 96, 6, 100) тигән һөйләмдәге *хәйләкәр* һүҙе — фарсы теленән үҙләштерелгән сифат, рәүеш мәғәнәһендә уны ҡулланып булмай.

*Күҙҙәрен упайтып, һис кенә лә уңайһыҙланмай, һынамсыл ҡараны* (А., 96, 1, 3) тигәндәге *һынамсыл* һүҙе шулай уҡ — *-сыл* ялғауы менән яһалған сифат, рәүеш мәғәнәһендә йөрөй алмай.

Яҙма телдә *-лы* ялғауы менән яһалған сифатты рәүеш мәғәнәһендә бигерәк йыш ҡулланалар һәм шуның менән күрәләтә телде боҙоп, һүҙ ҡулланыу ҡағиҙәһенә ихтирамһыҙлыҡ күрһәтәләр.

Башҡорт телендә *-лы* һәм *-һыҙ* ялғауҙары менән яһалған сифаттарҙың формаль мәғәнәһе бер нәмәлә йәки кешелә ниҙеңдер булыу-булмауын аңлатыуға ҡайтып ҡала. Ошо мәғәнәлә улар грамматик ҡанун буйынса исем менән бәйләнешкә инеп, аныҡлаусы булып йөрөй: *моңло йыр, аҡыллы фекер, килешле һүҙ, бәхетһеҙ тормош, ғәмһеҙ йоҡо, ырамһыҙ эш* һ. б. Шуларҙың абстракт бер сифатты билдәләү кимәленә күтәрелгән ҡайһы берҙәре һөйләмдә хәл хеҙмәтен дә үтәй ала. Миҫалға *аҡыллы* һәм *шатлыҡлы* тигән һүҙҙәрҙе алайыҡ. Бының *аҡыллы* тигәне аҡылдан мәхрүм түгеллекте аңлатыу менән бергә, кешенең тәүфиҡле, яҡшы ҡылыҡлы булғанын, уйлап эшләй белгәнен күрһәтә. Ә *шатлыҡлы* һүҙендә ундай киң мәғәнә юҡ, ул кемдәлер йәки ниҙәлер шатлыҡ булғанын белдереүҙән башҡа бер нәмә лә аңлат-

май. Шуға күрә киң мәғәнә алған тәүге һүҙ сифат та, рәүеш тә булып йөрөгән формаль күрһәткесһеҙ һүҙҙәр төркөмөнә күсеп, аныҡлаусы хеҙмәтен дә, хәл хеҙмәтен дә башҡара, тар мәғәнәле *шатлыҡлы* һүҙе хәл хеҙмәтен үтәй алмай. Шулай уҡ *бәхетле* тигән һүҙ кешенең бәхетен генә белдерә, һис бер эш-хәрәкәтте бәхетле йәки бәхетһеҙ тип әйтеп булмай. Урыҫ телендә *счастливо улыбаться* тип әйтергә мөмкин икән, унда *счастливый* тигән сифат түгел, *счастливо* тигән рәүеш хәл хеҙмәтен үтәп, ҡылым менән бәйләнешкә инә. Ошо принципиаль айырмаға иғтибар бирмәгәндән беҙҙең яҙма телдә *бәхетле йылмайыу* тип, урыҫ телендәге рәүеш урынына сифат формаһындағы һүҙҙе ҡуйып, ҙур хата яһайҙар һәм шул хатаға киң юл асалар. Мәҫәлән,

*Башҡорт матбуғатын ентекле күҙәтеп барам* (Й., 20.03.97) тигән һөйләмдәге *ентекле күҙәтәм* һүҙе башҡорт теленең ҡағиҙәһенә һыймай, *ентекләп күҙәтәм* тигәндә генә дөрөҫ була.

*Балалар шыма, етеҙ, аңлы уҡырға өйрәнде* (Б., 1.08.96) тигән һөйләмде башҡортса уйлай белгән кеше ...*шыма, етеҙ итеп, аңлап уҡырға өйрәнде* тип яҙыр ине, *аңлы уҡыуҙың* ни икәне лә аңлашылмай.

*Ҡарт улына асыулы ҡарап ҡуйҙы* (А., 96, 8, 17) тигәнде башҡорт кешеһе *асыуланып ҡарап ҡуйҙы* тиер ине.

*Ул баш ҡала журналисы тураһында бик ентекле һорашты* (А., 96, 1, 22) тигәндәге *ентекле һорашты* һүҙен башҡортса *ентекләп һорашты* тип әйтәләр.

— *Иптәштәр менән бер аҙ фекер алышҡайныҡ инде,* — *тине ул сер сискәндәй йомағайлы* (А., 96, 5, 75) тигән хилаф һөйләмдә *йомағайланып* тиһә лә, исмаһам, арыуыраҡ булыр ине.

*(Етәкселек) һеҙгә төрлө яҡлы булышлыҡ итә* (Б. 6.07.96) тигәндә лә *төрлө яҡлы* түгел, *төрлө яҡлап* тип әйтергә кәрәк.

Сифат төркөмөнә ҡараған һүҙҙәр урынына хәл ҡылым формаһын ҡуйып яҙғанда, берҙән, башҡортса килеп сыҡҡанын, икенсенән, мәғәнәнең асыҡланғанын килтерелгән миҫалдар яҡшы күрһәтә. Сифатты ҡулланған хәлдә лә, *итеп* тигән ярҙамлыҡ ҡылым менән бергә алып, һөйләмдә хәл хеҙмәтен башҡарған рәүешкә әйләндереү башҡорт теленә хас бер сара булып тора. Мәҫәлән,

*Мәктәптәрҙең күбеһендә башҡорт теле төплө өйрәнелә* (Й., 29.06.96) тигәндәге *төплө өйрәнеү,* һис шикһеҙ, урыҫтың *основательно изучать* тигән һүҙенән алынған, ләкин *основательно* һүҙе — рәүеш, башҡорт телендәге *төплө* һүҙе — сифат. Уларҙың грамматик функцияһы бер-бе-

реһенә тап килмәй, тап килтерер өсөн башҡорттағы сифатты *төплө итеп* тигән рәүешкә әйләндерергә кәрәк. Шул саҡта *төплө итеп өйрәнеү* тип башҡортса әйтеп була.

*...Капиталь ремонтҡа бүленгән аҡса маҡсатҡа ярашлы тотонолмай* (Й., 16.07.96) тигән һөйләмдәге *маҡсатҡа ярашлы* һүҙе һөйләмдә хәл хеҙмәтен башҡара алмай, башҡарһын өсөн *маҡсатҡа ярашлы итеп* тиергә кәрәк.

*Ул Башҡорт хөкүмәте вәкиленә мәғәнәле ҡарап алды* (А., 96, 4, 66) тигәндәге *мәғәнәле* һүҙе рәүеш түгел, һөйләмдә хәл булып килә алмай. Бында ла *мәғәнәле итеп* тиһәң генә башҡортса дөрөҫ була.

*Малға ҡарап торабыҙ, ишле аҫрайбыҙ* (Б., 2.08. 96) тип әйтеп булмай, сөнки, берҙән, *ишле* һүҙе — сифат, *ишле мал* тигән һымаҡ урында ғына ҡулланыла, икенсенән, уның ҡулланышы бик сикле. Был урында *күп аҫрайбыҙ* тиеүҙән яҡшыһы юҡ.

Яҙма телдең рәүеш урынына *-лы* ялғаулы сифатты ҡулланған күп ерендә һис бер сифат формаһын түгел, ә *менән* бәйләүесе ҡушылған нигеҙ һүҙҙе алырға кәрәк булып сыға. Ошо нәмә *-лы* ялғаулы сифаттың был урынға көсләп килтереп индерелгәнен тағы бер тапҡыр күрһәтә. Мәҫәлән,

*Бөтәһе лә уны иғтибарлы тыңлағанға оҡшай* (А., 96, 7, 43) тигәндәге *иғтибарлы* һүҙе һөйләмдә хәл хеҙмәтен һис тә башҡара алмай, уның урынына *иғтибар менән* тип әйтергә кәрәк.

*Казактар уны хөкүмәт вәкиле итеп, ихтирамлы ҡабул иттеләр* (А., 96, 3, 69) тигәндә лә *ихтирамлы* түгел, *ихтирам менән* тиергә кәрәк.

*Көндәр көсөргәнешле үтә торҙо* (А., 96, 4, 79) тигәндәге *көсөргәнешле* урынына *көсөргәнеш менән* тиһәң дөрөҫ була.

*Профессиональ бурысымды намыҫлы үтәгәнгә минең дә кәйеф күтәренке ине* (Б., 12.09. 96) тигән һөйләмдә *намыҫлы үтәү* тип әйтеү хата булған. Уны *намыҫлы кеше* тигән һымаҡ урында аныҡлаусы итеп кенә ҡулланып була. Был һөйләмдә *намыҫ менән* тип кенә әйтергә мөмкин.

Сифаттың *-лы* формаһын рәүешкә әйләндерер өсөн ҡайһы берҙә *рәүештә* тигән һүҙҙе ҡушып әйтәләр. Мәҫәлән,

*Каруанһарай 1846 йылдың 30 авгусында тантаналы асыла* (Й., 10.09.96) тигән һөйләмдәге *тантаналы* урынына *тантаналы рәүештә* тип;

*Волейболсыларыбыҙҙың уңыштары менән дә хаҡлы ғорурланабыҙ* (Й., 20.07.96) тигәндәге *хаҡлы* урынына *хаҡлы рәүештә* тип;

*Пьесаларҙа геройҙар... характер логикаһына ярашлы хәрәкәт итә* (А., 96, 4, 122) тигән һөйләмдәге *ярашлы* уры-

нына *ярашлы рәүештә* тип әйткәндә генә башҡортса дөрөҫ була.

Бөгөнгө яҙышҡан кешеләрҙең урыҫ телендәге рәүеш урынына универсаль бер форма итеп *-лы* формаһындағы сифатты ҡулланырға әүәҫләнеүҙәре әҙәби яҙма телде иң ныҡ ҡыйраткан ҡылыҡтарҙың береһенә әйләнде. Был *-лы* формаһы бик актив, ул, ныҡлы лексик берәмеккә әйләнгән һүҙҙәрҙән тыш, һүҙ ыңғайында ла һәр исемдән һүҙ яһай ала, ләкин ул һүҙҙәрҙең барыһы ла сифат булып яһала, береһе лә рәүеш булып яһалмай, һөйләмдә уны аныҡлаусы итеп кенә ҡулланып була. Шуның менән иҫәпләшеү хәҙер бөттө. Хатта әүәлдән булған рәүештәрҙе лә *-лы* формаһындағы сифат менән алмаштыра башланылар. Мәҫәлән,

*Ун биш йәшендә үҙ аллы уҡырға өйрәнә* (Б., 27.12.96) тигән һөйләмдәге *үҙ аллы* — сифат, урыҫ телендәге *самостоятельно* тигән рәүешкә ул тап килмәй. Уның урынына башҡорт телендә *үҙ алдына* тигән рәүеш бар.

*Дәрестәрҙән тыш үҙ аллы математиканан мәсьәләләр сисә, шашка уйнарға ярата* (Й., 16.07.96) тигән һөйләмдә лә *математиканан үҙ алдына мәсьәлә сисә* тигәндә генә дөрөҫ була. Шуның кеүек, *үҙ аллы йәшәү, үҙ аллы эшләү, үҙ аллы уйлау* һ. б. тип яҙған бөтә ерҙә *үҙ алдына* тиергә кәрәк.

Шул уҡ *-лы* формаһындағы *яйлы* һүҙен рәүеш мәғәнәһендә ҡулланып, яҙма телдә йәнә ҙур хата яһайҙар.

*...Рухи донъяңды шуға яйлы көйләп ебәрәһе генә бар* (А., 96, 10, 123) тигән һөйләмдәге *шуға яйлы* урынына *шуның яйына* тип яҙырға кәрәк икәне күренеп тора. Ләкин хәҙер *үҙ яйына эшләй, уның яйына йөрөй* тип яҙаһы күп ерҙә *үҙ яйлы, уға яйлы* тип яҙалар.

Башҡорт телендәге *ныҡ* һүҙе сифат мәғәнәһендә лә, рәүеш мәғәнәһендә лә йөрөй, ә шунан яһалған *ныҡлы* һүҙе формаһы менән дә, мәғәнәһе менән дә — сифат, шуға күрә аныҡлаусы хеҙмәтен генә башҡара ала *(ныҡлы кеше)*. Яҙышҡан кешеләр шуны уйлап тормай, *ныҡлы* һүҙен һөйләмдәге хәл урынына ҡуллана. Мәҫәлән,

*Октябрьскийҙа самбо ныҡлы үҫешкән* (Й., 10.09.96);

*Тәбиғәтем һөймәй. Һуңғы ваҡытта шуны ныҡлы аңланым* (Б., 27.08.96) тип яҙыуҙы хәҙер бер нәмә хәтле күрмәйҙәр. Был һөйләмдәрҙең икеһендә лә *ныҡ* тип кенә әйтергә кәрәк, ине. Шунан башҡа, ҡайһы берҙә һөйләмдәге хәл хеҙмәтен *ныҡ* тигән һүҙ түгел, ә *ныҡлап* тигән хәл ҡылым башҡарып килә.

*Ватан ғилми-тикшеренеү үҙәге... ҙур, мөһим проблеманы хәл итеү эшенә ныҡлы тотонған* (Б., 1.08.96) тигән һөйләмдә *ныҡлы тотонған* тип түгел, *ныҡлап тотонған*

тип әйтеү дөрөҫ була. Шулай уҡ, тел ҡануны буйынса, *ныҡлы уйлау, ныҡлы тикшереү* һ. б. тип түгел, ә *ныҡлап уйлау, ныҡлап тикшереү* тип яҙылырға тейеш.

Урыҫ теленең рәүешенә ошо *-лы* формаһын ҡулайлаштырыуға һалышып, беҙҙең яҙышҡан кешеләр йыш ҡына бер ҙә булмаған һүҙҙе лә яһап ҡуя. Мәҫәлән,

*Ғәлимйән... туңәрәк буйлап дөп-дөп килеп, ынтылышлы әйләнеп сыҡты* (А., 96, 3, 22) тигән һөйләмдәге *ынтылышлы* һүҙе, һис шикһеҙ, урыҫ телендәге *стремительно* тигән рәүешкә яраҡлаштырып яһалған, һәм, шуны яһар өсөн, автор йәнә әлеге *-лы* формаһын алған. Ә шул ябай ғына нәмәне башҡортса уйлап яҙған булһа, нимә тип әйтергә, моғайын, һүҙ табыр ине.

*Мишкә хеҙмәткәрҙәре... ныҡышмалы эшләй* (Б., 13.09.96) тигәндәге *ныҡышмалы* — былай ҙа беҙҙең телгә йоҡмаған, урыҫ телендәге *упорно* һүҙенә яйлаштырылған бер яһалма һүҙ, өҫтәүенә һөйләмдә шуны хәл урынына ҡуйыу бигерәк үлсәүгә һыймай. Унын урынына *тырышып* тип кенә әйткән булһа, дөрөҫ тә, матур ҙа булыр ине.

Хәҙерге башҡорт яҙма теленә, күрәһең, урыҫ телендәге *согласно, относительно* тигән рәүештәргә яраҡлаштырып *бәйле* һүҙен алмаҡсы булғандар, сифат формаһындағы ул һүҙҙең һөйләмдә хәл хеҙмәтен үтәй алмағанына әһәмиәт бирмәгәндәр. Шул арҡала,

*Был сара ике аралағы килешеүгә бәйле тормошҡа ашырылды* (Й., 25.07.96);

*Артабан ҡайһы йүнәлештә китеүгә бәйле артыҡ икеләнмәне ул* (Б., 22.11.96) тип яҙыуҙы бер ҙә хилаф күрмәйҙәр. Шуны тәүге һөйләмдә *килешеү нигеҙендә тормошҡа ашырылды* тип, икенсе һөйләмдә *...китеү хаҡында икеләнмәне* тип яҙһалар, башҡорт теленең яйына килер ине.

Яҙма телдә *-лы* формаһындағы сифатҡа ҡарағанда *-һыҙ* формаһындағы сифатты һөйләмдәге хәл урынына һирәк ҡулланалар, ләкин уны ла буш итмәйҙәр. Мәҫәлән,

*...Алғы бүлмәлә баяғы һалдаттың түҙемһеҙ арлы-бирле тапаныуы ишетелеп тора* (А., 96, 3, 50) тигәндәге *түҙемһеҙ* урыҫтың *нетерпеливо* тигәненән күсерелгән, күсергәндә, йәнә әлегесә, рәүеште сифат менән алыштырып булмағаны иҫәпкә алынмаған. Башҡорт кешеһе был урында *түҙемһеҙләнеп* тип әйтер ине.

*Бөгөн бер организмды ошондай киҫәктәргә аҡылһыҙ бүлгеләү Русия сәнәғәтенә төҙәтә алмаҫлыҡ зыян килтерәсәк* (А., 96, 5, 75) тигән һөйләмде лә *аҡылһыҙланып, бер организмды киҫәктәргә бүлгеләү* тип төҙәтергә кәрәк,

тимәк, һүҙе генә түгел, һөйләме лә урыҫ теленең йайына килтерелгән.

Хәҙерге башҡорт яҙма телендә шулай уҡ ғәрәп теленән ингән сифаттарҙы рәүеш итеп, һөйләмдәге хәл урынына ҡулланыу ныҡ таралды. Ҡул осондағы материалды ғына ҡарағанда ла, *ғилми нигеҙләү, етди ҡарау, етди уйлау, етди үҫеү, ижади эшләү, иҡтисади яңырыу, ҡәтғи тыйыу, матди ярҙам итеү, сәйәси айырылыу, тарихи раҫлау, тәбиғи ҡабул итеү, фәлсәфәүи дөйөмләштереү, хәрби ҡаршы тороу* тигән кеүек, ҡанунға һыймаған һүҙ күп осрай, ә ғәмәлдә уларҙың иҫәбе юҡ.

*Башҡорт матбуғатын даими алдырам* (Б., 31.07.96);

*Бөгөн рәсми иғлан ителгән фәнни сәйәсәт юҡ* (Б., 24.07.96);

*Изге башланғыстар етди уйланылманы* (Й., 25. 07.96);

*Съезд бурыстарҙы ҡәтғи ҡуйҙы* (Й., 15.12.96);

...*Сәйәси ғәйепләнеп төрмәгә ябылған* (А., 96, 3, 127);

*Бының үтәлеүенә шәхси яуап бирәсәкһегеҙ* (А., 96, 5, 89) тигән һөйләмдәрҙәге *даими, рәсми, етди, ҡәтғи, сәйәси, шәхси* тигән һүҙҙәрҙең сифат икәнлеге, сифаттың һөйләмдә хәл хеҙмәтен башҡара алмағанлығы һәр кемгә билдәле, ләкин ни өсөн тел ҡанунын бөтөнләй һанға һуҡмай, шуларҙы тотош хәл урынына ҡулланып алып киткәндәрен генә һис аңларлыҡ түгел. Ҡағиҙә буйынса, был һүҙҙәрҙе һөйләмдә хәл урынына ҡулланыр өсөн тәүҙә рәүеш формаһына килтерергә кәрәк. Ул йәһәттән бер нисә сара бар. Беҙҙең телгә ҡайһы бер һүҙҙең ғәрәптәге сифат формаһы ғына түгел, *даимән, ҡәтғиән, шәхсән* һ. б. тип рәүеш формаһы ла алынған булған һәм шул формалар элек актив ҡулланылған. Бөгөн шуларҙы кире ҡайтарып, активлаштырып ебәрергә мөмкин. Икенсенән, беҙҙең телдә ул сифаттарҙы *итеп, яҡтан, йәһәттән, нигеҙҙә* тигән кеүек ярҙамлыҡ һүҙ ҡушып рәүеш мәғәнәһенә килтереү ныҡ урын алған. Мәҫәлән, *ҡәтғи итеп әйтеү, иҡтисади яҡтан үҫеү, ғилми яҡтан нигеҙләү, тәбиғи итеп һөйләшеү* тип яҙыу элекке баҫмаларҙа йыш осрай һәм шул сара башҡорт теленең тәбиғәтенә тап килә. Өсөнсөнән, беҙҙең телдә ғәрәптән ингән сифаттарҙы *рәүештә* тигән ярҙамлыҡ һүҙ ҡушып, *рәсми рәүештә иғлан итеү, ижади рәүештә эшләү* һ. б. тип рәүешкә әйләндереү сараһы электән яҡшы билдәле. Ошо билдәле сараларҙан баш тартҡан өсөн хәҙер телдең нигеҙен ҡыйрата торған хаталар яһала.

Ғәрәп теленән ингән сифаттарҙың ҡулланышындағы хаталар көнбайыш телдәренән алған яңы һүҙҙәргә лә бер тигеҙ таратыла. Шул арҡала *демократик үҙгәртеп ҡороу,*

*профессиональ баһалау, социаль яҡлау, физик арыу* тигән кеүек хилаф һүҙ гәзит-журнал телендә ғәҙәттәге бер күренешкә әйләнде.

*Урҙә килтерелгән факттар... айырым вазифалы кешеләрҙең ветерандарҙың хоҡуҡтарын тәьмин итеүгә формаль ҡарауы тураһында һөйләй* (Б., 25.07.96) тигәндәге *формаль ҡарау;*

*Төбәктә ритуаль хеҙмәтләндереү системаһы яйға һалыуҙы талап итә* (Б., 25.07.96) тигән һөйләмдәге *ритуаль хеҙмәтләндереү* һүҙҙәре башҡорт теленең грамматик ҡанунына ҡаршы килә. Был яңы сифаттарҙы һөйләмдәге хәл урынына ҡуйыр өсөн, тағы баяғы ғәрәп һүҙҙәрен рәүешләштергән сараларҙы, йәғни *итеп, яҡтан, йәһәттән, нигеҙҙә, рәүештә* тигән ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе ҡулланып, *формаль рәүештә ҡарау, ритуаль яҡтан хеҙмәтләндереү, профессиональ нигеҙҙә баһалау* тип яҙырға кәрәк.

Яҙышҡан кешеләрҙең яуапһыҙ, еңел ҡарауы сәбәпле, яҙма телгә ғәжәп нәмәләр йыш килеп инә. Мәҫәлән,

*Войцехович Зәки Вәлидигә һынамаҡ ҡарап торҙо* (А., 96, 6, 56) тигәндәге *һынамаҡ* һүҙен;

*Репродуктор тауышы ла үтә йонсоу, арыған яңғырай* (А., 96, 1, 21) тигән һөйләмдәге *арыған* һүҙен телде хөрмәт иткән кеше был урында яҙмаҫ ине.

Сифатты рәүеш мәғәнәһендә ҡулланып тел нигеҙен ҡыйраҡкан кеүек, *-лата, -са* йәки башҡа төрлө ялғау менән яһалған ысын рәүеште аныҡлаусы итеп ҡулланыу ҙа хәҙергә яҙма телдә тамам законлашып китте. Был йәһәттән иң элек тел ғалимы булып йөрөгән кешеләр үрнәк күрһәтеп, *Русса-башҡортса һүҙлек* менән *Башҡортса-русса һүҙлек* сығарҙы. Ярар, *Башҡортса календарь* тигәнде хәҙер *Башҡорт календары* тип төҙәттеләр, ләкин башҡа ерҙә һаман *башҡортса гәзит, иптәштәрсә табын, туғандарса берҙәмлек, урыҫсанан тәржемә, урыҫса-башҡортса мәктәп* тип яҙыу өҫтөнлөк итә. Быларҙың береһендә лә рәүеш формаһындағы һүҙҙе ҡулланырға ярамай, был һүҙҙәр башҡортса *Башҡорт-урыҫ һүҙлеге, башҡорт телендәге гәзит* һ. б. тип әйтелергә тейеш.

Шуның һымаҡ,

*Ҡыҫҡа еңле аҡ кофтаһы ғына уның Зөбәржәт түгел, ә заманса йәш ҡатын икәнен белдерә* (Б., 23.07.96) тип әйтеү ҙә дөрөҫ булмай. Бындағы *заманса* һүҙенең мәғәнәһен дә аңларлыҡ түгел: заманса кейенгәнме ул, заманса ҡыланғанмы? Әллә ғәҙәттәге *замана ҡатынымы*? Ни әйтергә уйлай автор?

*Ерҙәр бер төрлө түгел, урындар ҙа төрлөсә* (А., 96, 4, 129) тигәндәге *төрлөсә* — рәүеш, ул һөйләмдең хәбәре була алмай, хәбәр хеҙмәтен бында *төрлө* тигән сифат башҡарырға тейеш. Ошоноң урынына *төрлө була* тип йәки башҡа бер ҡылымға ҡушып әйтһәк, *-са* формаһындағы рәүештең кәрәге булмаҫ ине.

Сифат урынына рәүеш формаһындағы һүҙҙе ҡулланып хаталанған кеүек, *кем? нимә? ниндәй?* тигән һорауҙарҙы *нисек?* һорауы менән алмаштырыу ҙа хәҙерге ваҡытта яҙма телдә генә түгел, һөйләү телендә лә киң таралып китте. Башҡорт телендәге *нисек?* һорауы эш-хәрәкәттең башҡарылыу юлын, ысулын, рәүешен белергә теләгәндә генә ҡуйыла, исемгә төбәп ул һорауҙы ҡуйып булмай. Хатаның башы, минеңсә, урыҫ телендәге *Как звать? Как дела?* тигән һүҙҙәрҙе башҡорт теленә *Исеме(ң) нисек? Хәлдәр нисек?* тип туранан-тура күсергәндән килә. Күсергән саҡта тәүгеһендәге һорауҙың *звать* тигән ҡылымға төбәлгәнен, икенсеһендәге һорауҙы биргәндә *идут* тигән ҡылымдың күҙҙә тотолғанын һәм шуға күрә урыҫ телендә *как?* тигән һорауҙың дөрөҫ ҡуйылғанын иҫәпкә алмағандар, тик шуға *нисек?* һорауын тап килтереүҙе генә белгәндәр. Һөҙөмтәлә, *нисек?* тигән рәүеш һорауын *исем* һәм *хәл* тигән исемдәргә төбәп ҡуйғандар. Был, әлбиттә, — аңын-тоңон белмәй, күҙ йомоп урыҫҡа эйәргәндең бәләһе. Урыҫҡа эйәрмәй, үҙенсә һөйләгән саҡта башҡорттар,

*Исеме(ң) кем?* тип кешенең исемен һорай;

*Исеме нимә?* тип ауылдың, йылғаның, эттең һ. б. нәмәнең исемен һорай;

*Ни хәл? Ни хәлдә(һең)?* тип кешенең хәлен һорай торғайны. Шуны онотоуҙары етмәгән, өҫтәүенә хәҙер *ниндәй?* тиәһе бөтә ерҙә *нисек?* ти башланылар:

*Урыҫ шағирҙары нисек булған? Ә беҙҙең башҡорт, татар шағирҙары нисек һуң?* (А., 96, 1, 91);

*Милли мәктәп нисек булырға тейеш?* (Й. 5.09.96).

Хәҙер яҙма телдә ошоноң һымаҡ хатаның күп булғанына ғәжәпләнәһе генә ҡала.

*Ундай туй нисегерәк булалыр, мин дә күҙ алдына килтермәйем* (А., 96, 11, 13);

*Башҡа төркөмдәр менән мөнәсәбәттәрегеҙ нисек?* (Й., 10.09.96) тигән һөйләмдәрҙә лә *нисек?* тип түгел, *ҡалай? ни рәүешле?* тип кенә һорап була.

*...һуғыш михнәтен тәү осорҙа асыҡ ҡына күҙ алдына килтермәнеләр, һуғыштың нисек икәнен белмәнеләр* (А., 96, 5, 178);

*Бының һөҙөмтәһе нисек буласаҡ?* (А., 96, 4, 63) тигән һөйләмдәрҙә шулай уҡ *нисек?* тип түгел, *ни? ниндәй?* тип һорау ҡуйырға кәрәк.

Уйлап-нитеп тормай, ят бер шауҡым менән *нисек?* һүҙен универсаль бер һорау һүҙенә әйләндереп, исемгә лә, сифатҡа ла, рәүешкә лә яраҡлаштырыу башҡорт телен бик нык боҙа, нык имгәтә.

Телдәге һәр һүҙ төркөмөнөң үҙ урыны, үҙ мәғәнәһе, үҙ функцияһы бар. Билдәле мәғәнәгә һәм грамматик функцияға эйә булған төрлө һүҙ төркөмө араһындағы мөнәсәбәттән төҙөк тел туҡымаһы, тел ҡоролошо хасил була, һәм, шул туҡыма эсендәге тәртип һаҡланған хәлдә генә, тел үҙенең хеҙмәтен тейешенсә башҡара ала. Эске тәртип ҡанундарын боҙоу һис бер яңылыҡҡа ла, яҡшылыҡҡа ла килтермәй, тик телде зәғифләп, эшкә ярамаған боҙоҡ ҡоралға әйләндерә.

Элегерәк, минең белеүемсә, сифатты рәүеш урынына, рәүеште сифат урынына ҡуйып яңлыштырыу булмай торғайны. Ҡайһылыр бер мәлдә урыҫ теленә эйәреү нык көсәйеп киткәс, тел ҡанундарын ситкә тибеп, ике араны болғата башлағандар ҙа, шул «яңылыҡ», йоғошло ауырыу кеүек, бөтә кешенең башын әйләндергән. Үҙебеҙҙең тел сараһы етмәгәнгә ирекһеҙҙән эшләгән эш булһа, бәлки, был хата йүнәлеште аңларға ла мөмкин булыр ине. Әммә юғарыла күҙәтеп үткән миҫалдар тел сарабыҙҙың етәрлек икәнен, һәр ерҙә үҙ телебеҙ менән кәрәгенсә әйтеп булғанын ап-асыҡ күрһәтеп тора. Тимәк, ғәфү иткеһеҙ был хаталар, беренсенән, телгә еңел ҡарап, уны теләһә нисек ҡыландырғандан, икенсенән, тотош урыҫ теленә яраҡлашырға тырышып, белер-белмәҫ көйө һәр нәмәне күсергәндән килеп сыға. Белер-белмәҫ көйө булмаһа, урыҫ телендәге рәүешкә сифатты яраҡлаштырып, бер тел ҡанунына ла һыймаҫлыҡ хилафлыҡтар эшләп ултырыу булмаҫ ине.

# Сифат һәм исем яһай торған *-ғы, -лы, -лыҡ* ялғауҙары

Сифаттың ҡулланышындағы етешһеҙлектәр тураһында һөйләгәс, яҙма телдә дөрөҫ ҡулланылмаған бер нисә форма тураһында ла бер ыңғай әйтеп китергә тура килә, сөнки уларҙың яһалышы менән ҡулланышы бер-береһенә нығ бәйләнгән. Был бәйләнеш йәһәтенән бигерәк тә *-ғы* ялғауы менән яһалған сифаттар үҙенә башҡа айырылып тора.

Сифат яһай торған *-ғы* ялғауы төрлө нигеҙгә ҡушылып, нәмәнең урын һәм ваҡытҡа ҡарата булған мөнәсәбәтен белдерә: *аҙаҡҡы, түбәнге, боронғо, йәйге* һ. б. Ошоноң һымаҡ төрлө нигеҙҙән яһалған һүҙҙәр айырым лексик берәмек булып, телдә ныҡлы урын алған. Ләкин шунан башҡа, *-ғы* ялғауының урын-ваҡыт килеш формаһына ҡушылып, һүҙ ыңғайында ғына һүҙ яһап китә торған бик актив бер функцияһы бар: *ауылдағы, быйылдағы, ситтәге* һ. б. Был урында *-ғы* ялғауы лексик мәғәнә биреүҙән бигерәк, килеш формаһындағы һүҙҙе аныҡлаусылыҡ мөнәсәбәтенә килтереп, эргәһендәге исем менән бәйләр өсөн хеҙмәт итә, шунһыҙ килеш формаһы үҙе генә исем менән бәйләнешә алмай, һәм һөйләм эсендәге мәғнәүи бәйләнеш өҙөлә. Мәҫәлән,

*Чечен һуғышы барышында юғалтыуҙар төрлө сығанаҡта төрлөсә күрһәтелә* (Б., 26.11.96) тигәндәге *барышында юғалтыуҙар* бер-береһенә синтаксик бәйләнеше булмаған ике һүҙ булып, һөйләмде икегә айырып тора. Бәйләнеш булһын өсөн *барышындағы юғалтыуҙар* тиергә кәрәк ине.

*Ул... запас ҡапҡа янында техника буйынса урынбаҫарҙың УАЗ-игын шәйләмәй* (А., 96, 1, 26) тигән боҙоҡ һөйләмдән нимәнең ҡайҙа икәнен дә аңлап булмай, шуны *запас ҡапҡа янындағы* тиһә, аңлап булыр ине.

Тейешле ергә *-ғы* ялғауын ҡуйып, һүҙҙәрҙе синтаксик бәйләнешкә килтереп бармаһаң, һәр ваҡыт тел боҙола, һөйләмдең дөйөм мәғәнәһенә зыян килә. Әллә шуны аңлап бөтмәгәндән, әллә иғтибар бирмәгәндән, беҙҙә күп кеше кәрәк ерҙә *-ғы* ялғауын төшөрөп ҡалдыра.

Тейешле ерҙән *-ғы* ялғауын төшөрөп ҡалдырыу яҙма телдең бер етешһеҙлеге булһа, тейешһеҙ ергә *-лы* һәм *-лыҡ*

ялғауҙарын ҡатландырып ҡуйыу — икенсе ҙур етешһеҙлеге. Мәҫәлән, *һәләтлелек, уңдырышлылыҡ, хислелек* тигән формалар *һәләт, уңдырыш, хис* тигән нигеҙ һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә бер нәмә лә өҫтәмәй, йәғни өҫтө-өҫтөнә ҡушҡан ике ялғау яһалма һүҙҙең мәғәнәһен нигеҙ һүҙҙең мәғәнәһенә кире ҡайтарып ҡуя.

*Ураҙбикәнең ихлас саҡырыуын Сәйҙә шунда уҡ тойҙо, ләкин әҙәплелек һаҡлап, уны тағы бер аҙ ялындырырға теләне* (А., 96, 7, 60) тигән һөйләмдә *әҙәплелек һаҡлау* тип бөтөнләй буш бер һүҙ яһап ултырғанса, халыҡ телендәге *әҙәп һаҡлау* тигән һүҙҙе генә алһа, мең артыҡ булыр ине.

*Тәртиплелеккә, татыулыҡҡа ынтылған кешеләрҙән эскеселәр үрнәк алһын ине* (Й., 13.07.96) тигән һөйләмдә лә *тәртип* тип кенә әйтәһе урынға *тәртиплелек* тип өс ҡатлы һүҙ яһауҙың бер кәрәге лә булмаған.

*Яңы Енәйәт кодексынан эш хаҡын законһыҙ тотҡарлаған өсөн яуаплылыҡҡа тарттырыу тураһындағы статьялар алып ташланған* (Й., 29.03.97) тигәндәге *яуаплылыҡҡа тарттырыу* һүҙен *яуапҡа тарттырыу* тип ҡәҙимгесә әйтһә, яҡшыраҡ аңлашылыр ине.

Ялғауҙарҙы кәрәкһеҙгә ҡатландырып ҡуйыу, килтерелгән миҫалдарҙағы кеүек, исемдән исем яһағанда ғына түгел, сифаттан исем яһаған саҡта ла йыш осрай. Мәҫәлән, *түҙем, сыҙам* тигән һүҙҙәр — сифат: *түҙем халыҡ, сыҙам кеше.* Шул һүҙҙәрҙән абстракт мәғәнәле исем яһар өсөн нигеҙ һүҙҙең үҙенә генә *-лыҡ* ялғауы ҡушаһы урынға, беҙҙә тәүҙә *-лы* ялғауы ҡушып сифаттан сифат яһайҙар ҙа, шуға өҫтәп *-лыҡ* ялғауы ҡушалар һәм *түҙемлек, сыҙамлыҡ* тип кенә әйтәһе урынға, *түҙемлелек, сыҙамлылыҡ* тигән ҡатмарлы, мәғәнәһеҙ бер һүҙ яһап ҡуялар.

*Тәү ҡараштa уҡ бөркөлөп торған бер ҡатлы шаянлылыҡ, тышҡы ҡиәфәтендә ихласлылыҡ, донъя мәшәҡәттәренән саҡ ҡына булһа ла өҫтә тороусы хыялы уның геройҙарының төп шарттарының береһе булып тора* (Й., 18.10.94) тигән ғәжәп буталсыҡ, хилаф һөйләмде тотош тикшереп тормай, *шаянлылыҡ, ихласлылыҡ* тигән һүҙҙәрен генә алайыҡ. Бындай һүҙҙәрҙең башҡорт телендә булыуы ла мөмкин түгел. Ни өсөн автор *шаянлыҡ, ихласлыҡ* тип кенә әйтмәй, шул хәтле ҡатландырып әйтергә булған — уныһын, бәлки, үҙе лә белмәйҙер. Ошо *-лы* менән *-лыҡ* ялғауҙарын ҡатландырып яҙыу бик йоғошло бер сиргә әйләнде. Шул арҡала хатта,

*Беҙҙең сафтар... үҙебеҙҙең хуш күңеллелек, игелеклелек арҡаһында һирәгәйҙе* (А., 96, 6, 11) тигәндәге кеүек, өс ҡатлы ялғау ҡушыуҙан да тартынмай башланылар.

Башҡорт теле мәғәнәгә зыян килмәçлек ерҙә мөмкин ҡәҙәр ҡыçҡа, ыҡсым итеп әйтергә ярата. Ул ҡайһы берҙә һүҙҙәрҙе генә түгел, һүҙ бәйләнештәрен дә тарттырып, ыҡсымлап әйтеп ебәргәнде хуп күрә. Һөйләү телендә *алып кил* тигәнде *әпкил, ни эшләп* тигәнде *нишәп* тип төрлөсә ҡыçҡартҡан һүҙ күп йөрөй. Әлбиттә, һөйләү теленә эйәреп, шуның бөтәһен дә яҙма телгә күсереү тураһында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел, ләкин һәр һүҙҙе тулы формаһына килтерергә тырышып, кәрәгенән артыҡ оҙонайтып ебәреү ҙә телде һис матурламай. Шул йәһәттән *-лы* ялғаулы сифатҡа *-лыҡ* ялғауы өçтәп яһаған абстракт исем бигерәк килешһеҙ, ҡатлы-ҡатлы булып сыға. Шуны булдырмаç өсөн, һөйләү телендәге кеүек, яҙма телдә лә *-лы* ялғауын төшөрөп ҡалдырып, һүҙҙе ябайлаштырырға мөмкин. Ялғауҙы ҡыçҡартҡандан мәғәнәгә бер зыян да килмәй, шуның өçтөнә һүҙ ыҡсымланып, еңеләйеп, әйтеүгә лә, яҙыуға ла йәтеш булып ҡала. Мәçәлән,

*Рәсәйгә хәҙер тыныслыҡ, тотороҡлолоҡ ифрат та кәрәк* (Б., 11.07.96) тигән һөйләмдә *тотороҡлолоҡ* тип ауыр итеп әйткәнсә, *тотороҡлоҡ* тип кенә ҡалдырғанда мәғәнәгә зыян килмәгәне күренеп тора.

*Улар был тормош тигәндең ҡатмарлылығын, хәйләләрен белеп бөтмәй* (Ш., 96, 4, 151) тигәндәге *ҡатмарлылыҡ* урынына ла *ҡатмарлыҡ* тип кенә әйтеп була.

*Ғәскәрҙе таратыу — ул Башҡортостан үҙаллылығының һәләкәте* (А., 96, 4, 57) тигән һөйләмдәге *үҙаллылыҡ* һүҙен *үҙаллыҡ* тип ҡыçҡартҡандан йәнә зыян юҡ. Шуның һымаҡ, *шәфҡәтлелек* тигәнде *шәфҡәтлек, яуаплылыҡ* тигәнде *яуаплыҡ* тип бер ҙә икеләнмәй әйтергә мөмкин. Һөйләү телендә улар шулай йөрөй.

Телде ныҡ ауырлаштыра торған был ике ҡатлы ялғауҙы ыҡсымлыҡ, ябайлыҡ хаҡына хатта мәғнәүи йөкмәткеһе булған урында ла ҡыçҡартып була. Ҡайһы берҙә *-лы* ялғауын ҡыçҡартыу мәғәнәгә тәьçир итһә, *-лыҡ* ялғауын ташлап, уның урынына *икән, булыу* тигән ярҙамлыҡ һүҙҙәрҙе ҡулланыу дөрөç була. Мәçәлән,

*Уның ғәҙәтен, үҙһүҙлелеген беләһең бит* (Ш., 96, 4, 32) тигәнгә ҡарағанда, *үҙ һүҙле икәнен беләһең бит* тип әйтеү, әлбиттә, бик күпкә яҡшыраҡ. Шундай уҡ башҡа ерҙә, *үҙһүҙлелек ярамай* түгел, ә *үҙ һүҙле булыу ярамай* тиеү телдең ыңғайына килә. Халыҡ шулай һөйләй.

Халыҡ телендә *-лылыҡ* тигән ике ҡатлы ялғау бер ваҡытта ла ҡулланылмай. Халыҡ телендә булмаған был нәмәне әҙәби телгә көсләп индереү бер ҙә яҡшы түгел.

Яҙма телдә *-лыҡ* ялғауын ҡулланырға әүәҫләнеп, кәрәкмәгән ерҙә лә сифат ҡылымға ҡушып ебәреү шулай уҡ һүҙҙе һәм ғөмүмән һөйләмде ныҡ ҡатмарлаштырыуға килтерә. Мәҫәлән,

*...Моңлана-моңлана юлға йыйылынғанлығын телгә алмау* (дөрөҫө: *алмай) мөмкин түгелдер* (А., 96, 1, 14) тигән һөйләмдә исемләшкән сифат ҡылым шәхестең эш-хәлен үҙе лә бик асыҡ күрһәтә, шуға өҫтәп тағы *-лыҡ* ялғауын ҡушыу, һүҙҙе оҙонайтыуҙан, ауырлаштырыуҙан башҡа, мәғәнәгә бер нәмә лә өҫтәмәй. Шулай булғас, бында *юлға йыйылынғанын* тип әйтеү телгә ятышлыраҡ була. Шуның кеүек,

*Башҡорт халҡының милли азатлыҡ өсөн көрәш юлын бер яҡлы сағылдырғанлығы нығыраҡ күренә* (А., 96, 6, 121) тигәндәге *сағылдырғанлығы* һүҙен *сағылдырғаны* тип;

*Уның зарланып йәшәмәгәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып үтке килә* (Б., 24.09.96) тигән һөйләмдәге *йәшәмәгәнлеген* урынына *йәшәмәгәнен* тип;

*Тимерҙең кем балаһы икәнлеген яҡшы беләләр ине шул улар* (А., 96,10, 19) тигәндәге *икәнлеген* урынына *икәнен* тип;

*Берәүгә лә зарланырлыҡ урын юҡ* (Б., 13.07.96) тигән һөйләмдәге *зарланырлыҡ урын* һүҙен *зарланыр урын* тип кенә яҙырға кәрәк ине. Кәрәкмәгән ялғауҙы ҡыҫҡартыу һүҙгә ыҡсымлыҡ ҡына түгел, асыҡлыҡ бирә, уның мәғәнәһен юшҡындан таҙарта.

Телдә һәр форманы үҙ көйөнә килтереп, матур итеп яҙыу ҙур әһәмиәткә эйә. Ҡулына ҡәләм тотҡан кеше үҙе яҙғанды үҙенеке тип түгел, башкорт халҡыныҡы тип ҡараһа, үҙе яҙғанды башҡорт әҙәби теленең хәлен, камиллығын, яҙмышын билдәләгән үлсәү тип һанаһа, төрлө етешһеҙлек тә кәмер һәм, бәлки, бара-бара бөтөр ине. Төҙөкләнгән һайын телдең ғүмере оҙоная, уның ғүмерен оҙайтыуға һәр беребеҙ яуаплы.

## РӘҮЕШ ЯҺАЙ ТОРҒАН *-СА* ЯЛҒАУЫ

Грамматик хеҙмәттәр *-са* ялғауының исем, сифат һәм алмаштарҙан оҡшатыу, сағыштырыу, самалау мәғәнәһендәге рәүеш яһауын күрһәтә: *байрамса, дуҫтарса, төрлөсә, боронғоса, үҙҙәренсә, беҙҙеңсә, киреһенсә, барынса* һ. б. Улар

шулай уҡ *-са* ялғауы менән яһалып, ваҡытты сикләү мәғәнәһендә йөрөгән рәүештәрҙең һирәк булғанын билдәләп китә: *йәйгәсә, ошоғаса, әлегәсә* һ. б. Ә ғәмәлдә рәүештең ошо һуңғы төрө башҡорт телендә киң таралған, сөнки әлеге ваҡытта киләсәк заман хәл ҡылымы йәки хәл ҡылымдың 3-сө төрө (формаһы) тип йөрөтөлгән һүҙҙәр барыһы ла хәл ҡылымға түгел, ә рәүеш төркөмөнә инә, һәм уларҙың мәғәнәһе ваҡытты сикләү менән генә бөтмәй.

Ысынлап та, *ошоғаса* тигән һүҙ менән *ошо мәл еткәнсә* тигән һүҙҙең һәм *минеңсә* тигән һүҙ менән *мин уйлағанса* тигән һүҙҙең мәғәнәләрен сағыштырып ҡараһаҡ, араларында айырма юҡ икәне күренеп тора, ә грамматик хеҙмәттәрҙә шуларҙың *ошоғаса, минеңсә* тигәндәрен рәүешкә, *еткәнсә, уйлағанса* тигәндәрен хәл ҡылымға индереп йөрөтәләр, шуға яҡын торған *минең уйлауымса* формаһын бер ергә лә индермәйҙәр. Шул арҡала телселәрҙең фекере ғөмүмән буталсыҡ, нигеҙһеҙ булып сыға.

Башҡорт телендәге хәл ҡылым формалары *(-ып, -а/-й, -ғас)* нигеҙ ҡылымдан яһала, һәм ул шулай булырға тейеш, ә хәл ҡылымдың 3-сө төрө тип йөрөтөлгән *-ғанса* формаһы бер ҙә улай түгел. Ғәмәлдә уны бер бөтөн ялғау, бер форма тип тә әйтеп булмай, ул сифат ҡылымдың *-ған* ялғауы менән рәүеш яһай торған *-са* ялғауынан тора. Бындағы *-са* ялғауы, бүтән сифаттарға ҡушылған кеүек, сифат ҡылымға ҡушылып рәүеш яһай. Ул сифат ҡылымға ғына түгел, эйәлек һәм килеш формаһындағы исемдәргә лә ҡушыла ала. Шуның өсөн телдә уның таралышы һәм ҡулланышы бик киң. Уны регуляр һүҙ яһаусы ялғау тип иҫәпләргә кәрәк.

Телдәге бер категорияны икенсе категория менән бутауҙары етмәгән, телселәр, әлеге шул *-ғанса* формаһынан тыш, йәнә әллә ниндәй бер *-ғансы* формаһындағы хәл ҡылымды килтереп сығара, йәғни бер үк хәл ҡылымды икегә бүлеп аҙапландыра, йәнәһе, шуның *-ғанса* тигәне эш-хәрәкәтте башҡарыу рәүешен *(өйрәткәнсә эшләү)* аңлата, ә *-ғансы* тигәне ваҡытты сикләү *(барып еткәнсе йүгереү)* һәм ике эш-хәрәкәтте сағыштырып, икенсеһенә өҫтөнлөк биреү *(Ятып ҡалғансы, атып ҡал)* мәғәнәһен йөрөтә.

Тәүге мәктәп дәреслектәрендә бер үк форманы *-ғанса* һәм *-ғансы* тип икегә бүлеү булмай. Х. Ғәбитов, Ғ. Уйылданов, Ғ. Дәүләтшиндарҙын 1926 йыл сығарған «Башҡорт теленең нәхүе»ндә *ҡасанғаса?* тигән һорауға яуап булып килгән *-ғанса* формаһы күрһәтелеп, *һағынбай бер дәрес бөтөп, икенсе дәрес булғанса тышҡа сығып һауа алыштырып ала* тигән миҫал килтерелә. Ә. Мансуров грамматикаһының 1933 йылғы 1-се баҫмаһында ул форма телгә

алынмай, ә 1934 йылғы 2-се баҫмаһында киләсәк заман хәл ҡылымы тип *-ғанса* формаһы бирелә лә *Хәбәр булғанса урыныңдан ҡуҙғалма* тигән миҫал ҡуйыла. С. Ғәлиевтың 1938 йыл сыҡҡан «Грамматика» китабында ла киләсәк заман хәл ҡылымы тип *-ғанса* формаһы атала, *-ғансы* формаһы күрһәтелмәй. Был *-ғанса* формаһы 1941 йылда баҫылған дәреслектәрҙә үҙгәртелә. Шул йылы Ә. Мансуров «Грамматика» тигән, С. Ғәлиев «Башҡорт теле грамматикаһы» тигән китабында киләсәк заман хәл ҡылымы тип *-ғансы* формаһын бирә. Күрәһең, улар уны татар телендәге *-ганчы* тигәнгә оҡшатыр өсөн шулай итә. Шуға ҡарамаҫтан, Н. Ҡ. Дмитриев 1948 йылда баҫылған «Грамматика башкирского языка» тигән китабында *-ғанса* формаһын ғына күрһәтә, *-ғансы* тигәнен телгә лә алмай. Беренсе башлап, Ж. Ғ. Ҡейекбаев етәкселегендәге коллективтың 1964 йыл сығарған «Башҡорт теле дәреслеге» был «хәл ҡылым» формаһын *-ғанса* һәм *-ғансы* тип икегә бүлеп бирә. Шунан бирле был бүленеш һәр дәреслектә һәм грамматик хеҙмәттә ҡабатланып килә. Бүленеште нығытыр өсөн телселәр *-ғансы* формаһына үҙ һорауын ҡуймаҫҡа тырыша. А. А. Ғәлләмов һәм башҡаларҙың 1978 йылғы «Башҡорт теле» дәреслегендә генә *ҡасанғаса?* тигән һорауға яуап биреүе хаҡында әйтелә лә, башҡа хеҙмәттәрҙә, һорау һүҙенең формаһы менән хәл ҡылымдың формаһы тап килмәгәнгә, *ҡасанға тиклем?* тигән һорау ғына ҡуйыла. Ләкин улай итеп кенә телдә булған нәмәне, әлбиттә, юҡҡа сығарып булмай.

Хәл ҡылым формаһы итеп күрһәткәндә, мәктәп дәреслектәре һәм башҡа грамматик хеҙмәттәр *-ғансы/-ғанса* формаһының юҡлығы булмай тип билдәләп китә. Был да унын хәл ҡылым түгеллеген иҫбатлаған бер дәлил булып тора, сөнки хәл ҡылымдың юҡлыҡ формаһы булыуы мөмкин түгел. Юҡлығы юҡ икән, хәл ҡылымға ҡарамай, рәүеш категорияһына ҡарағаны өсөн уның юҡлығы юҡ.

Башҡорт телендә *-ғансы* формаһының булмағанын һәм *-ғанса* формаһының хәл ҡылымға түгел, ә рәүеш категорияһына ингәнен иҫбатлар өсөн, шул уҡ *-са* ялғауы менән яһалып, шулай уҡ ваҡытты һәм эш-хәрәкәтте сикләп тора торған бүтән һүҙҙәр менән сағыштырып ҡарау яҡшы. Мәҫәлән,

*Үҙемә туранан-тура бер ни әйткәндәре юҡ быҒаса* (А., 96, 6, 114) тигән һөйләмдәге *быҒаса* һүҙе, берҙән, *-са* ялғауы менән яһалған, икенсенән, рәүеш төркөмөнә инә. Тимәк, мәғәнәһе менән тап килеп торған *был мәл еткәнсә* һүҙе лә, берҙән, *-сә* ялғауы менән йөрөргә, икенсенән, бөтә һүҙ бәйләнеше менән бергә рәүеш төркөмөнә инергә тейеш.

Бында *быҒаса* тигән бер һүҙҙе *был мәл еткәнсә* тигән һүҙ бәйләнеше менән сағыштырыуҙың әһәмиәте юҡ. Иң мөһиме — уларҙың мәғәнәһе тап килә. Шулай булғас, формаһы ла, категорияһы ла бер булмай мөмкин түгел.

*Шул көндән бөгөнгәсә Ирнат Шәйхисламович биләгән вазифаһында һынатмай эшләй* (Б., 12.07.96);

*Мин ошо көнгәсә үҙебеҙҙе мәҒрифәтле кешеләр, Ғилем эйәләре тип һанай инем* (А., 96, 2, 149) тигән һөйләмдәрҙә шулай уҡ *бөгөнгәсә, ошо көнгәсә* тигән һүҙҙәр *-сә* ялғауы менән йөрөгәс, сифат ҡылымдан яһалып, шул уҡ мәғәнәне биргән һүҙҙәр ҙә *-Ғанса* формаһында ғына тора ала.

*«Баҡсасылыҡ» журналына яҙылып, яҙҒаса баҡса үҫтереү серҙәрен өйрәнде* (А., 96, 2, 66) тигәндәге *яҙҒаса;*

*Күңел-асыу, йыр-бейеү, ҡурай-ҡумыҙ тартыу таңҒаса дауам итте* (Б., 2.08.96) тигән һөйләмдәге *таңҒаса;*

*Ғинуар селләләренәсә ер өҫтө... ап-асыҡ ята бирҙе* (А., 96, 2, 65) тигән һөйләмдәге *Ғинуар селләләренәсә;*

*Бала сағы ете йәшенәсә ауылда үтә* (А., 96, 2, 64) тигәндәге *ете йәшенәсә;*

*Эйе, эште аҙаҒынаса еткереп булманы* (А., 96, 4, 64) тигән һөйләмдәге *аҙаҒынаса;*

*Бородино яланынан алып ПарижҒаса үткән еңеүле юлдары күҙ алдына килеп баҫа* (Й., 10.09.96) тигәндәге *ПарижҒаса;*

*Ристандар, йәмләнеп бөткән алма аҒастарын тамырынан алып тәүге ботаҡтарынаса кимереп сыҡҡандар* (А., 96, 2, 65) тигән һөйләмдәге *тәүге ботаҡтарынаса;*

*Ринат та, күпме кәрәк шунса дауаланыр инем, ... ти* (Б., 2.08.96) тигәндәге *шунса;*

*УҒаса ишектә Мәфтуха апай үҙе лә күренде* (Б., 24.07.96) тигән һөйләмдәге *уҒаса;*

*Өләсәһе иртәнге намаҙ артынса уҡ Гүриә ҡартҡа барып хәйер бирҙе* (А., 96, 2, 129) тигәндәге *намаҙ артынса;*

*Белә-нитә ҡалһа, яйларбыҙ әле мөмкин булҒанса* (А., 96, 6, 112) тигән һөйләмдәге *мөмкин булҒанса* һүҙҙәре — бөтәһе лә ваҡытты, эш-хәрәкәтте сикләү мәғәнәһенә эйә һәм шул уҡ мәғәнәне йөрөткән «хәл ҡылым»дың да *алҒанса, барҒанса* тигән формала булырға тейешлеген иҫбатлап тора. Халыҡ телендә ул шулай, тик грамматик хеҙмәттәрҙә генә уны көсләп индерелгән *-Ғансы* формаһына килтереп, боҙоп маташалар. Шуға ҡарамаҫтан, тел барыбер үҙенекен итә. Ҡайһы бер ваҡыт яҙышҡан кешеләр уны үҙҙәре лә һиҙмәҫтән дөрөҫ яҙып ебәргеләй. Мәҫәлән,

*Башҡорт һәм урыҫ ҡыҙыл армеецтары капитал донъяһы пыран-заран килгәнсә, Совет власы бөтә ерҙә лә тан-*

*тана иткәнсә, бер туғандай берләшеп һуғышасаҡ* (А., 96, 5, 31) тигән һөйләмдең авторы *пыран-заран килгәнсә, тантана иткәнсә* тип яңлыш ҡына дөрөҫ яҙып ҡуйған. Үкенескә ҡаршы, яҙышҡан кешеләрҙең шулай итеп яңлышҡан сағы һирәк була. Улар дәреслек биргән ҡағиҙәгә буйһоноп, «дөрөҫ» яҙырға тырышып ята. Мәҫәлән,

*Үҙ улдары үҫкәнсе башҡа өй-йорт һалыусы булмаған* (Й., 19.10.96) тигән һөйләмдәге *улдары үҫкәнсе;*

*Совхозға ҡушылғансы беҙ бай колхоз инек* (Й., 18.10.96) тигәндәге *совхозға ҡушылғансы;*

*Ҡунаҡханаға урынлашҡансы тамам ҡараңғы ла төштө* (А., 96, 1, 18) тигәндәге *ҡунаҡханаға урынлашҡансы;*

*Баҫыуҙа ысыҡ төшкәнсе иген уралар* (Ш., 96, 3, 72) тигәндәге *ысыҡ төшкәнсе;*

*Белоретҡа еткәнсе ауыр уйҙарҙан арына алманым* (Й., 29.08.96) тигәндәге *Белоретҡа еткәнсе;*

*Судьялар мәсьәләне тамам хәл иткәнсе уйын хатта бер аҙға туҡтап торҙо* (Б., 14.09.96) тигән һөйләмдәге *хәл иткәнсе;*

*Тауҙай донъямдың күҙ асып йомғансы көл булыуына йөрәгем сыҙаманы* (А., 96, 1, 6) тигәндәге *күҙ асып йомғансы* һүҙҙәре ваҡытты, араны һәм эш-хәрәкәтте сикләү йәһәтенән *шуғаса, таңғаса, ауылғаса, аҙағынаса* тигән кеүек һүҙҙәргә тап килеп тора һәм уларҙы *үҫкәнгәсә, ҡушылғанғаса, урынлашҡанғаса, ысыҡ төшкәнгәсә, еткәнгәсә, хәл иткәнгәсә* тигән һүҙҙәр менән алмаштырып була. Шулай булғас, ни өсөн былары рәүеш булып *-са* ялғауы менән, ә килтерелгән миҫалдағылары хәл ҡылым булып *-сы* ялғауы менән яһалырға тейеш? Был һорауға, әлбиттә, дәреслек яҙған телселәр яуап таба алмай.

Был форма сикләү мәғәнәһендә *-ғанса* ялғауы менән йөрөргә тейеш була икән, ике эш-хәрәкәтте сағыштырғанда ла, *-ғансы* ялғауы түгел, ә *-ғанса* ялғауы менән генә йөрөй ала. Шуға күрә,

*...Коралға тотонғансы һөйләшеп килешеү хәйерлерәк булмаҫмы?* (Б., 30.07.96) тигән һөйләмдәге *ҡоралға тотонғансы;*

*Тәнҡит яҙам тигән булып әрләнеп йөрөгәнсе «Алға» колхозына китергә кәрәк* (А., 96, 11, 15) тигәндәге *әрләнеп йөрөгәнсе;*

*Минең менән булышҡансы отчетын йүнләп әҙерләһен ине* (А., 96, 11, 20) тигән һөйләмдәге *минең менән булышҡансы* һүҙҙәрен дә *ҡоралға тотонғанса, әрләнеп йөрөгәнсә, минең менән булышҡанса* тип яҙырға кәрәк.

Рәүеште хәл ҡылым тип бутағанға күрә, ҡайһы берәүҙәр *-ғансы* тип яҙһа ла, һаман уны хәл ҡылым тип үҙләштереп бөтмәй һәм шул форма менән килгән хәл әйтеме артынан өтөр ҡуймай яҙа, ә икенсе берәүҙәр, өтөр ҡуйылырға тейеш, тип уйлай ҙа,

*Ҡараңғы төшкәнсе, нимә эшләп ултыраһығыҙ?* (А., 96, 1, 11);

*Ғүмер буйы ҡол булғансы, үлгәнең артыҡ* (А., 96, 2, 99);

*Башта, ауылдан сыҡҡансы, улар дүртеһе бер санала елдерҙе* (А., 96, 3, 60);

*Ғаиләң, балаларың бар, аҡса емеше ашағансы, баҡса емеше ашап торорһоғоҙ, тинеләр* (А., 96, 2, 64) тип кәрәкмәгән ергә өтөр ҡуйып ебәрә. Тимәк, тел категорияһын билдәләгәндәге буталыш тыныш билдәләрен бутауға килтерә.

Был йәһәттән эш-хәрәкәтте сикләгән рәүеш үҙенә башҡараҡ тора. Грамматик хеҙмәттәр ҡушҡанса *-ғансы* ялғауы менән яҙһалар ҙа, уның *-са* ялғауы менән яһалған рәүеш икәне асығыраҡ күренә.

*...Ҡәҙерле кешеһе менән танһыҡтары ҡанғанса һөйләшкәндәй, серләшкәндәй тойҙо үҙен* (Б., 4.10.96) тип «яңлышып» киткән урындар йышыраҡ осрай һәм был форманы өтөр менән айырыу бер кемдең дә башына килмәй. Мәҫәлән,

*Халыҡ үҙе лә ҡулынан килгәнсе ярҙам итте* (Й., 19.10.96);

*...Көн һайын туйғансы майлы ҡоймаҡ ашарға мөмкин* (А., 96, 2, 127);

*Таң алдынан әлһерәгәнсе йүгереп, арып килә лә ауыр серемгә тала* (Й., 12.09.96);

*Тимер мейесте ҡыҙҙырғансы яғалар...* (А., 96, 1, 106).

Ошондай урында көсләп индерелгән *-ғансы* формаһын тотош *-ғанса* тип төҙәтеп, әҙәби телде үҙ асылына ҡайтарырға кәрәк.

Был *-са* ялғауының сифат ҡылым формаһына ҡушылған саҡта ла хәл ҡылым түгел, ә рәүеш яһағанына ҡаршы фекерҙә торған кешеләр, бәлки, ул һүҙҙәрҙең күпселек ваҡытта яңғыҙ йөрөмәгәнен, һүҙ бәйләнеше эсендә генә тейешле мәғәнәне биргәнен дәлил итеп килтерер. Ундай дәлилгә нигеҙ юҡ. Сөнки *-са* ялғауы менән яһалып, һис һүҙһеҙ рәүеш булып йөрөгән һүҙҙәр ҙә йыш ҡына һүҙ бәйләнеше эсендә генә тулы мәғәнәгә эйә була. Шуны күрһәтер өсөн юғарыла килтергән миҫалдарҙағы *ғинуар селләһенәсә, ете йәшенәсә, тәүге ботаҡтарынаса, мөмкин булғанса* тигән һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү етә. Уның тегеләре лә, былары ла һөйләмдәге хәл төркөмөн ойоштороп, хәбәр менән мөнәсәбәткә инә. Шу-

нан һуң, *-ғанса,* йәғни *-ған+са,* формаһындағы һүҙҙәрҙең дә яңғыҙ йөрөүе бик ғәҙәти хәл. Миҫалға,

*...Картайғанса колхозда ҡарауылсы булып эшләне* (А., 96, 1, 72);

*Миңә лә ҡайтҡанса укол ҡаҙап ҡаңғырттылар* (Й., 12.09.96) тигән һөйләмдәрҙе килтереп була.

Шулай итеп, башҡорт телендә рәүеш яһай торған *-сы* ялғауы булмаған кеүек, хәл ҡылым яһай торған *-ғансы* ялғауы ла юҡ, *-сы* ялғауы беҙҙең телдә исем яһай: *ташсы, уҡытыусы* һ. б.

Ошо урында бер ыңғай *-ып* хәл ҡылымының юҡлығы тип йөрөтөлгән *-майынса* формаһы хаҡында ла әйтеп китергә тура килә.

Ж. Ғ. Кейекбаев етәкселегендә эшләнгән 1964 йылғы «Башҡорт теле дәреслеге» *-майынса* формаһын юҡлыҡ формаһының тәүге төрө тип, *-май* ялғауы менән яһалғанын ҡыҫҡа төрө тип атай. Һуңғараҡ сыҡҡан дәреслектәрҙең дә ҡайһы береһендә шул фекер ҡабатлана. Ә ғәмәлдә *-май* формаһы менән *-майынса* формаһының мәғәнәләре бер түгел. Мәҫәлән,

*Артабан һүҙҙе сурытмайынса йылы ғына хушлаштылар* (Б., 27.08.96);

*Ишми мәрхүмдең, толҡа таба алмайынса,... бер китеп, бер ҡайтып йөрөгән төйәге ошо инде* (Б., 27.08.96);

*Төрлө мәшәҡәт менән ике аҙна ваҡыт һиҙелмәйенсә үтеп тә китте* (Б., 27.08.96);

*Ҡаты госпиталь койкаларында ҡуҙғала алмайынса ятыу тамам ялыҡтырҙы* (А., 96, 8, 14) тигән һөйләмдәрҙә *-майынса* формаһын түгел, *-май* формаһын ҡулланырға кәрәк булған. Ике форманың *-майынса* тигәне ҡәтғи, киҫкен мәғәнәгә эйә. Ул нык баҫым яһап, һүҙҙе көсәйтеп әйтер өсөн ҡулланыла. Был мәғәнә *-са* ялғауының хәл ҡылымды рәүеш төркөмөнә күсереп, лексик берәмеккә әйләндергәненән килә. Шуға күрә *-майынса* формаһын хәл ҡылымдың юҡлығы тип әйтеп булмай. Рәүеш яһай торған *-са* ялғауы бында ла үҙ хеҙмәтен үтәй, һәм *-майынса* формаһындағы һүҙҙәрҙе рәүештең бер төрө тип иҫәпләү дөрөҫ була. Мәғәнәһен асығыраҡ итеп күрһәтер өсөн, форманы дөрөҫ ҡулланған бер нисә миҫал килтереп китергә кәрәк. Уларҙы юғарыла килтергән миҫалдар менән сағыштырып ҡарарға мөмкин. Шул саҡта ике форманың араһындағы мәғәнә айырмаһы асыҡ күренер.

*Шул ваҡыт үтмәйенсә, янымa берәү ҙә килмәһен* (А., 96, 10, 14);

*Мин ҡайтмайынса, йоҡларға ла ятмай* (Ш., 96, 1, 49);

*Берлинға барып етмәйенсә, һуғыш тамамланасаҡ түгел* (А., 96, 8, 40) тигән һөйләмдәрҙә *-майынса* формаһы дөрөҫ ҡулланылған. Бында ул форманы *-май* формаһы менән алыштырып та булмай, ә, дәреслектәрҙә әйтелгәнсә, улар бер үк хәл ҡылымдың ике төрлө юҡлығы ғына булған булһа, мәғәнәгә зыян килтермәй, бер-береһен алыштыра алырға тейештәр ине. Тимәк, һәр форманың үҙ мәғәнәһе, үҙ ҡулланышы бар. Уларҙы һис тә яңлыштырырға ярамай.

Ҡайһы берәүҙәр һөйләгән саҡта *-майынса* формаһын *-майса* тип ҡыҫҡартып әйтә, йәғни ялғауҙы һүҙҙең нигеҙенә бәйләп торған *-н-* өнөн төшөрөп ҡалдыра. Һөйләгәндә ул булалыр, ләкин шуны әҙәби яҙма телгә индереү дөрөҫ булмай. Унһыҙ ҙа яҙышҡан кешеләр һуңғы ваҡытта ике аралағы *-н-* өнөн ташлап, *болан балаһылай, ил ағаһылай, йәшен утылай, кәзә бәрәселәй, телеграм бағанаһылай, һыу һөлөгөләй* тип яҙыуҙы бер ғәҙәт итә башланы. Был ғәҙәт яҙма телде боҙоуға килтерә. Ул йәһәттән *ҡайһыныһы* тигән һүҙҙе *ҡайһыһы* тип ҡыҫҡартыу ҙа телде зәғифләй, сөнки ундай форма телдә юҡ. Улай тип хатта әйтеп тә булмай. Халыҡ был оҙон һүҙҙе *ҡайныһы* тип ҡыҫҡарта, һәм ул әҙәби телгә лә шул рәүештә инергә тейеш. Халыҡ теленә йоҡмаған нәмәне табып, әҙәби телгә көсләп индерергә ярамай. Халыҡ телен төрлөсә ҡыландырыу, төҙәткеләү менән булышҡанса, яҡшылап өйрәнергә кәрәк. Ә өйрәнә торған нәмә етәрлек. Ошо рәүеш яһай торған *-са* ялғауын ғына алғанда ла, грамматик хеҙмәттәрҙә уның насар өйрәнелгәне күренеп тора. Бер ҡалыпҡа һалып, шул ҡаты ҡалып эсендә ниҙәр бар икәнен тикшермәй, хеҙмәттән хеҙмәткә, дәреслектән дәреслеккә күсереп ултырыу бер ҙә яҡшы эш түгел.

## ИСЕМ ҠЫЛЫМ

Грамматик хеҙмәттәрҙә *-ыу* формаһындағы ҡылымды исем ҡылым тип йөрөтәләр. Исем ҡылым эш-хәрәкәтте атап биреүе менән исемгә тартыла, шуға күрә килеш һәм эйәлек менән үҙгәрә. Унда заман төшөнсәһе юҡ, ул эш-хәрәкәтте бер заман менән дә мөнәсәбәткә ҡуймай. Мәҫәлән, *Мәктәп менән ҡалаға барыу бер ваҡиға булып ҡалды; Сабит эш ятмай, мутлашып йәшәүҙе артыҡ күрә* тигән һөйләмдәрҙә *барыу, йәшәү* һүҙҙәре эш-хәрәкәттең ҡасан булғанын

күрһәтмәй, уны атап ҡына китә. Шул уҡ мәғәнәлә исем ҡылым, *Ул атлауын белә; Бер һуғыуы була, ишек асылып та китә; Дүрт көн үтеүгә әйләнеп тә ҡайттым* тигән кеүек, төрлө урында ҡулланыла.

Эш-хәрәкәтте атап, исемләштереп күрһәтеү һәләте булғанға, исем ҡылым исем функцияһын да үтәй ала: *Сәлмән ҡайтыу яғына китте; Ашауға аҡса күп кәрәк* һ. б. Исемләшкән исем ҡылымдар терминлашҡан исем һәм, шул иҫәптән, *көтөү, һыулау* кеүек терминға әйләнгән һүҙҙәр менән бер түгел. Терминлашҡан исемдәрҙә, ҡылымдан яһалған хәлдә лә, хәрәкәтлек мәғәнәһе булмай, ә исем ҡылымда, исем функцияһын башҡарған сағында ла, хәрәкәтлек мәғәнәһе һаҡлана.

Исемгә күсеп бөтмәй, исем менән ҡылым араһында тороп, хәрәкәтлек мәғәнәһен һаҡлаған өсөн, исем ҡылым синтаксик йәһәттән битараф ҡылым формаһы булып ҡала. Битараф форма булғанға, йәғни тотош инфинитив талабына яуап биргәнгә күрә, ҡылымдың *-ыу* формаһын башҡорт теленең инфинитивы тип иҫәпләргә ныҡлы нигеҙ бар. Ҡылымдың *-ырға* формаһын инфинитив (уртаҡ ҡылым) тип иҫәпләгән кешеләр менән бер ҙә килешеп булмай.

Ҡылымдың *-ырға* формаһын инфинитив (уртаҡ ҡылым) тип алып китеү урыҫ телендәге *работать* тигән инфинитивтың функцияһына түгел, мәғәнәһенә тап килерлек форма эҙләгәндән килеп сыҡҡан. Урыҫ телендә ул форма ысынлап та — инфинитив, битараф ҡылым формаһы, ә беҙҙәге *эшләргә* тигән форма битараф түгел, үҙ алдына һүҙ булып йөрөй алмай, һөйләм эсендә генә маҡсат хәле булып теййешле мәғәнә ала. Килеш ялғауы ҡушыла торған сифат ҡылым формаһы унан башҡа ла бар. Шул уҡ киләсәк заман сифат ҡылымына, төбәү килештән башҡа, йәнә төшөм килеш менән сығанаҡ килеш ялғауы ҡушып була. Шунан тыш, үткән заман сифат ҡылымы килеш ялғауы ҡабул итеп, төрлө синтаксик конструкция эсенә инә. Тимәк, ҡылымдың *-ырға* формаһы — үҙенә башҡа урын алған айырым форма түгел, ә ғәҙәттәге бер грамматик форма. Урыҫ телендәге инфинитив менән ҡайһы бер урында мәғәнәләре тап килгән өсөн генә уны башҡорт теленең инфинитивына һанау һис тә дөрөҫ булмай. Уны инфинитив тип, урыҫ теленең инфинитивы һымаҡ ҡулланырға маташыу телде боҙоуҙан башҡа бер нәмә лә бирмәй. Мәҫәлән,

*Ҡөтөлмәгән ғәжәйеп бер хәл килеп сыҡты. Әйтергәме ниндәй икәнен?* (А., 96, 1, 133) тигәндең һуңғы һөйләме *Сказать какой?* тигәндән күсерелгән, инфинитив урынына, йәнәһе, инфинитив ҡуйылған, ә килеп сыҡҡан мәғәнәһеҙ бер

һүҙ. Башҡортса уны, *Әйтәйемме?* тип кенә әйтәләр, башҡа бер һүҙ ҙә бында кәрәкмәй.

Атап ҡына китмәй, башҡарылышын сағылдырғанда, эш-хәрәкәтте мотлаҡ заман менән мөнәсәбәткә ҡуйырға кәрәк була, сөнки уның замандан тыш башҡарылыуы бөтөнләй мөмкин булмаған нәмә. Шул саҡта заман төшөнсәһенә битараф булған исем ҡылым (инфинитив) формаһы тейешле мәғәнәне бирә алмай, заман төшөнсәһен заман мәғәнәһенә эйә булған сифат ҡылым формалары менән генә биреп була.

Сифат ҡылым формалары эйәрсен эш-хәрәкәтте төп эш-хәрәкәткә ҡарата өс заман кимәленә ҡуйып сағылдыра:

1) Эйәрсен эш-хәрәкәт төп эш-хәрәкәттән элек булған булһа, йәғни төп эш-хәрәкәткә ҡарата үткән заман мөнәсәбәтендә торһа, *-ған* формаһындағы сифат ҡылым килә: *Өфөнән килгәнебеҙҙе белеп кеше йыйылып китте.*

2) Эйәрсен эш-хәрәкәт хәҙерге заманда йәки төп эш-хәрәкәт менән бер мәлдә башҡарылһа, шулай уҡ *-ған* формаһындағы сифат ҡылым килә: *Халыҡты нимә борсоғанын яҡшы аңлайым.*

Эш-хәрәкәттең башҡарылышы түгел, һөҙөмтәһе билдәләнгәндә лә, исем ҡылым түгел, *-ған* формаһындағы сифат ҡылым ҡулланыла: *Клуб ишеге асылғанын бик оҙаҡ көттөк.*

3) Эйәрсен эш-хәрәкәт төп эш-хәрәкәттән һуң була торған булһа, *-ыр* формаһындағы сифат ҡылым талап итеlә: *Пландың үтәлеренә өмөт бар.*

Беҙҙең яҙышҡан кешеләр, исем ҡылым менән сифат ҡылым араһындағы грамматик һәм функциональ айырманы аңлап етмәгән өсөн, ошо күрһәткән урындарҙа һәр ваҡыт тиерлек исем ҡылым формаһын ҡулланып ҙур хата яһай. Мәҫәлән,

*Байтаҡ юл китеүебеҙҙе абайламай ҙа ҡалғанмын* (Б., 30.07.96) тигән һөйләмдә *юл китеүебеҙҙе* тип исем ҡылым формаһы ҡуйғас, эйәрсен эш-хәрәкәттең заманы билдәһеҙ булып ҡалған, ике эш-хәрәкәт араһындағы заман мөнәсәбәте боҙолған һәм шул хата һөйләмдең дөйөм мәғәнәһенә зыян иткән. Ошо урында *юл киткәнебеҙҙе,* тип тейешле форманы ҡуйғанда ғына мәғәнә тотош асыҡланып китә.

*Бер көндө... һигеҙ йәшлек бер малайҙың юғалыуы асыҡланды* (Й., 12.08.96) һәм,

*Урыны-урыны менән йыйылған күләүектәр генә ямғыр яуыуын хәтерләтә* (А., 96, 11, 11) тигән һөйләмдәр *юғалыуы, яуыуын* тигән һүҙҙәрҙең *юғалғаны, яуғанын* тип, заманға мөнәсәбәтле итеп яҙылғанын талап итә. Был һөйләмдәрҙә эйәрсен эш-хәрәкәт төп эш-хәрәкәттән алда булған.

*Өй эсендә себен осҡан тауыш та ишетелә, хатта ел иҫеүен тоя ҡолаҡ япрағы* (А., 96, 1, 38) тигән һөйләмдә, *себен осҡан* тигән һымаҡ, *ел иҫкәнен* тиһәк, икенсе эйәрсен эш-хәрәкәт тә заман мәғәнәһе алып, төп эш-хәрәкәт менән тейешле мөнәсәбәткә инер ине. Бында бөтә эш-хәрәкәт хәҙерге заманда башҡарыла.

*Эх, ауырымаһам, бер нәмәнән дә ҡурҡмауымды күрһәтер инем һеҙгә* (Б., 14.09.96) тигән һөйләмдә *ҡурҡмауымды* тип заман мәғәнәһе бирмәй яҙыу эш-хәлде йәнһеҙләндерә. Уға йән бирер өсөн *ҡурҡмағанымды* тип сифат ҡылым формаһына ҡуйырға кәрәк.

*Минең башҡортса өндәшеүемә тәүҙәрәк ышанмай торҙолар* (Й., 25.07.96) тигәндә лә *өндәшеүемә* һүҙен *өндәшкәнемә* тип төҙәтеп, заман мәғәнәһе биргәндә генә эш-хәрәкәткә йән инә.

*Ошо ризыҡ һинең ҡайтыуыңды көтөп ятыр* (Б., 26.12.96) тигәндә эш-хәрәкәттең үҙе түгел, һөҙөмтәһе күҙҙә тотола. Исем ҡылым формаһы шул һөҙөмтәне күрһәтә алмай, *ҡайтҡаныңды* тигән сифат ҡылым формаһы ғына тейешле мәғәнәне аса ала.

*Ырымбур оборона линияһы төҙөү тормошҡа ашһа, Башҡортостандың бойондороҡһоҙлоғо тамам юҡҡа сығыуын башҡорттар бик яҡшы аңлаған* (Й., 19.09.96) тигән һөйләмдә күренеп торған киләсәк заман мәғәнәһе *юҡҡа сығыуын* тип юҡҡа сығарылған. Бында *юҡҡа сығырын* тигән киләсәк заман формаһы ғына тейешле мәғәнәне бирә ала.

*...Ул ҡайҙалыр аҙашып йөрөй, табылыуына өмөт тә бар һымаҡ* (А., 96, 7, 76) тигәндә шулай уҡ киләсәктә булаһы эш-хәрәкәт хаҡында һүҙ бара, шулай булғас, *табылырына* тип киләсәк заман сифат ҡылым формаһын ҡулланыу ғына дөрөҫ була.

*XIX съезд асылыуҙан бер көн алда беҙҙең делегация регистрация үтергә Кремлгә килде* (А., 96, 9, 13) тигәндәге *алда* бәйләүесе исем ҡылым формаһы менән йөрөмәй, киләсәк заман сифат ҡылым формаһы менән генә йөрөй ала. Шуның өсөн бында *асылырҙан бер көн алда* тип кенә әйтеп була.

Тимәк, ошоноң һымаҡ, тултырыусы һөйләмдә килгән ҡылымдарҙы исем ҡылым формаһында алһаң, эйәрсен эш-хәрәкәт заманға ҡарата битараф булып, һөйләмдең дөйөм мәғәнәһе менән яраша алмай, үҙенә башҡа айырылып тора, тик сифат ҡылым формаһы ғына уны яраштырып, терелтеп, хәрәкәткә килтерә.

Исем ҡылым күпмелер кимәлдә исемләшеп, изафет ағзаһы булып йөрөй ала: *уҡыу йорто, баланың уҡыуы.* Ләкин

күп урында ундай изафет түгел, сифат ҡылым менән яһалған аныҡлаусылыҡ һүҙ бәйләнеше телгә ятышлы була. Мәҫәлән,

*Атыу тауыштары йышайғандан-йышая* (А., 96, 3, 48) тигән һөйләмдәге *атыу тауыштары* телгә бөтөнләй йоҡмай, унын урынына *атҡан тауыш* тиергә кәрәк. Урыҫтың *звуки выстрела* тигәнен күсереү яҡшы түгел.

Башҡорт телендә киләсәк заман сифат ҡылымын аныҡлаусы итеп, ниҙең дә булһа үҙенсәлекле билдәһен йәки тәғәйенләнешен белдерә торған һүҙ бәйләнеше яһау ныҡлы урын алған. Шуға күрә,

*Ике ай самаһы дауам иткән төрмә ыҙаһы аяҡтан йығылыу хәленә килтерҙе* (А., 96, 3, 79) тиеү урынына *аяҡтан йығылыр хәлгә* тип әйтеү дөрөҫ була. Яҙма телдә *туҡталыу урыны, ҡуныу өйө, күреү әмәле, ашау ваҡыты* тигән кеүек һүҙ бик йыш осрай. Тел сараһын белгән һәм иҫәпкә алған кеше уларҙы *туҡтар урын, ҡуныр өй, күрер әмәл, ашар ваҡыт* тип яҙыр ине.

Шул рәүештәге һүҙҙәрҙә ниҙеңдер тәбиғи сифатын, даими билгеһен белдерер йәки һүҙҙе көсәйтер өсөн *-ыр/-ер, -ор/-өр* ялғауҙары урынына *-ар/-әр* ялғауы ҡушыла: *осар тейен, игәр иген.* Шуға күрә яҙыусылар яҙып, артистар сәхнәнән ҡысҡырғанса, «Етер!» тип түгел, «Етәр!» тип әйтергә кәрәк.

Урыны менән исем функцияһын башҡарған хәлдә лә, хәрәкәтлек мәғәнәһен һәр ваҡыт һаҡлаған өсөн исем ҡылымдың ҡылымды исемгә әйләндереү һәләте йомшаҡ. Был йәһәттән ҡылымдың *-ш* формаһы көслө. Ул хәрәкәтлек мәғәнәһен юйып, ҡылымды ысын исем төркөмөнә күсерә һәм шуның менән урыҫ телендәге ҡылым атамаһына («имя действия»ға) тиңләшә. Шуға күрә исемләшкән ҡылым кәрәк саҡта *-ыу* формаһын түгел, *-ш* формаһын ҡулланып, йәғни *оялыуынан* тимәй, *оялышынан* тип яҙыу мәғәнәгә асыҡлыҡ бирә. Тимәк,

*...Гөлнур аптырауынан һорау бирергә мәжбүр булды* (А., 96, 7, 43) тигән һөйләмдәге *аптырауынан* һүҙен *аптырашынан* тип;

*...Ҡарарҙың үтәлеүенә яуаплы кеше тәғәйенләргә тәкдим ителде* (Б., 17.09.96) тигәндәге *үтәлеүенә* һүҙен *үтәлешенә* тип;

*...Балаларҙың туҡланыуы һәйбәт ойошторолған* (Й., 19.09.96) тигәндәге *туҡланыуы* һүҙен *туҡланышы* тип яҙғанда мәғәнәне асыҡлау йәһәтенән дә, телде матурлау йәһәтенән дә яҡшы була.

Ҡылымдың *-ш* формаһы бик уңайлы һәм кәрәк форма булһа ла, башҡорт телендә ныҡ үҫеш алмаған. Ул һәр ҡы-

лымға ҡушылып бармай, ҡушҡанда ла күп ваҡыт йоҡмай. Шундай саҡта башҡорт теле исем ҡылым формаһын ҡулланған хәлдә лә, уның исемләштереү һәләтен көсәйтер өсөн *эш, тәртип, мәсьәлә* тигән һымаҡ төрлө исем ҡушып ҡуллана: *уҡытыуҙы яҡшыртыу* тимәй, *уҡытыу эшен яҡшыртыу* ти; *тергеҙеүҙе йөкмәтеү* тимәй, *тергеҙеү эшен йөкмәтеү* ти. Ошо нәмәне иҫәпкә алмағандан беҙҙә күп нәмәне еренә еткермәй яҙалар. Мәҫәлән,

*...Башревкомды Темәскә күсереүҙе лә тиҙләтергә ваҡыт* (А., 96, 4, 84) тигән һөйләмдә *күсереүҙе* тип кенә ҡуйғас, һүҙҙең әйтеп еткерелмәгәне күренеп тора. Мәғәнәне тулыландырыр өсөн форманың исемләштереү һәләте етмәй, *күсереү эше* тип әйткәндә генә ул тейешле мәғәнәгә эйә була.

*...Терминологик һүҙлектәр төҙөүҙе үҙ өҫтөнә ала* (Б., 1.08.96) тигән һөйләмдә лә *төҙөүҙе* тип түгел, *төҙөү эшен* йәки *төҙөү бурысын* тип әйткәндә генә һүҙ тулыланып, мәғәнәһе тейешенсә асыла.

*...Пенсияны район хакимиәттәренең социаль тәьминәт бүлеге аша алыуҙы ойоштороғанда һәйбәт булыр ине* (Б., 25.07.96) тигәндәге *алыуҙы* һүҙе лә бик тоҡон булып тора. Ул ерҙе *алыу тәртибе индергәндә* тип төҙәтһәк, ысынлап та, һәйбәт булыр ине.

Урыҫ телендә исем категорияһы нығ үҫеш алған. Унда *планировка, благоустройство, вызов, уход, обучение* тигән кеүек исемдәр һәм ҡылым атамалары бик актив ҡулланыла. Төрки телдәрҙә, шул иҫәптән башҡорт телендә, ҡылым категорияһы өҫтөнлөк итә, шуға күрә бөтә нәмәне урыҫ теленән күсереп, һәр һүҙенә исем ҡылым формаһын яраҡлаштырып маташҡанса, үҙебеҙҙең тел сараларын файҙаланып, тейешле фекерҙе үҙебеҙсә әйтергә кәрәк. Миҫал өсөн урыҫ телендәге *встреча* һүҙен алайыҡ. Уны беҙҙекеләр һис үҙгәртергә ярамаған бер терминға һанап, һәр ваҡыт *осрашыу* тип ала, һәм һөҙөмтәлә *осрашыу ваҡытында, осрашыуға барыу, осрашыу үткәреү* тигән кеүек урыҫлаштырылған һүҙ бәйләнештәре хасил була. Ни өсөндөр шуны үҙ телебеҙҙең яйына килтереп, *осрашҡан ваҡытта, осрашырға барыу, осрашыу* тип әйтергә ярамай тип иҫәпләйҙәр. Урыҫ һүҙҙәрен закон итеп алмай, үҙебеҙсә яҙырға тырышҡанда,

*Һөйләшеүҙәр тамам икәнде белдереп, Ленин йәнә урынынан йылдам күтәрелде* (А., 96, 5, 77) тигән һөйләмде лә *һөйләшеп бөткәнде белдереп* тип тел рәүешенә килтереп булыр ине. Бындағы хилафлыҡ *переговоры* һүҙен ҡаҡшамаҫ бер термин тип һанағандан килеп сыҡҡан. Ләкин яҙышҡан кешеләр урыҫ теленән терминлашҡан һүҙҙәрҙе генә түгел,

ябай исемдәрҙе лә туп-тура күсереп, үҙебеҙгә зыян килтерә. Мәҫәлән,

*Төркөстанда төҙөләсәк ғәскәрҙәр өсөн аттар һатып алыуҙа ярҙамлаша* (А., 96, 6, 75) тигән һөйләмдәге *һатып алыуҙа* һүҙе *в покупке* тигәндән күсерелгән, шуны *ат һатып алырға* тип үҙебеҙсә әйтеп булыр ине.

*Был яңылыҡтың Ураҙбикәлә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыуын Сәйҙә һиҙенде* (А., 96, 7, 76) тигәндәге *ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу* һүҙе *вызвать интерес* тигәндән алынған. Урыҫса төҙөлгән был һөйләмде мөмкин ҡәҙәр яйға килтергәндә, *Был яңылыҡтың Ураҙбикәне ҡыҙыҡтырғанын Сәйҙә һиҙҙе* тигән рәүеш алыр ине.

*Өфөлә һорау алыу булманы* (А., 96, 3, 79) тигән һөйләмдәге *допрос* һүҙенә тап килтерелгән *һорау алыу* һүҙен *һорау алманылар* тип тел ыңғайына килтергәндә, ҡолаҡҡа йоғоп торор ине.

Грамматик хеҙмәттәрҙә исем ҡылымдың юҡлыҡ формаһы бар тип иҫәпләнә, һәм яҙышҡан кешеләр ҙә уның юҡлыҡ формаһын иркен файҙалана. Ләкин һөйләү телендә, йәғни халыҡ теленең нигеҙендә, ундай форма юҡ. Әҙәби телгә ул көсләп индерелгән һәм шул көсләп индерелгән нәмә телдең нормаһы итеп грамматик хеҙмәттәрҙә сағылдырылған. Яҙма телдән йыйған материал ошо фекерҙе дөрөҫләп, исем ҡылымдың юҡлыҡ формаһы гел генә кәрәкмәгән ерҙә, башҡа форма урынына ҡулланылғанын күрһәтеп тора. Уны, әлбиттә, юғарыла әйткәнсә, иң элек сифат ҡылым тейеш булған урында ҡулланалар. Мәҫәлән,

*Әлбиттә, был үткәнде һағынғандан түгел. Күрә, белә тороп та ауыл халҡының аһ-зарына иғтибар бирмәү һөҙөмтәһе* (Б., 7.09.96) тигәндәге *бирмәү* һүҙенең формаһы тотош һүҙ ыңғайын боҙған. Унда тәүге тултырыусы һөйләмдең ҡылымы *һағынғандан* тип дөрөҫ алынған. Шуның һымаҡ, *бирмәү* тигән ҡылымды ла тейешле заман менән мөнәсәбәткә килтереп, тәүге һөйләм менән яраштырып, *бирмәгәндең* тип яҙырға кәрәк булған.

*Бер нәмә лә эшләй алмауымды, көсһөҙ икәнлегемде күҙҙәремдән күрер кеүек* (А., 96, 6, 99) тигән һөйләмдә лә *алмауымды* менән *икәнлегемде* тигән ике һүҙҙең формаһы үҙ-ара ярашмаған. Шуларҙың тәүгеһен *алмағанымды* тип заман менән мөнәсәбәткә килтерһәк, икенсеһен *икәнемде* тип ҡыҫҡартһаҡ ҡына, улар тейешле рәүешкә килә ала.

*...Уларға аҙ ғына булһа ла ярҙам итә алмауымдан, ... үҙ көсһөҙлөгөмдө аңлауҙан өҙгөләнеп күҙемә йәш тулыр булды* (Й., 12.09.96) тигән һөйләмдә *алмағанымдан, аңлағандан* тип ике һүҙҙе лә сифат ҡылым формаһына ҡуйғанда

ғына, һөйләүсенең хәлен заман менән бәйләп, һүҙенә йән биреп була.

*Тәүҙәрәк өгөтләп маташтылар, хәҙер инде мине еңә алмауҙарына күнделәр* (Б., 31.07.96) тигән һөйләмдең бөтә мәғәнәһе *еңә алмауҙарына* тип йәнһеҙ, битараф итеп түгел, ә *еңә алмаҫтарына* тип киләсәк заманға бәйләп, терелтеп әйткәнде көтә.

*Тағы шуны әйтмәү гонаһ булыр — яңыраҡ ауылға тағы бер ҡот ҡайтты* (Й., 23.11.96) тигәндәге *әйтмәү гонаһ* тигән һүҙҙе әйтергә тел әйләнмәй. Ул урыҫ телендәге *грех не сказать* тигәндән күсерелгән. Башҡортса уны *әйтмәһәм гонаһ булыр* тип кенә әйтеп була.

*...Үҙе шыр наҙан булһа ла, уҡығандарҙы яратмай. Яратмау ғына түгел, күрә алмай* (А., 96, 11, 31) тигәндәге *яратмау ғына түгел* тигән һүҙ ҙә башҡорт теленә йоҡмай. Уны башҡорт *яратмай ғына түгел* тип әйтер ине.

Шулай уҡ, *мөмкин түгел* тигән модаль һүҙ бәйләнеше менән кире эш-хәрәкәтте ҡырҡа кире ҡаҡҡанда, урыҫтарҙың *нельзя не согласиться, нельзя не заметить* тигәненә оҡшатып, исем ҡылымдың юҡлыҡ формаһын ҡулланыу дөрөҫ булмай, ә *ризалашмай мөмкин түгел, уйланмай мөмкин түгел, телгә алмай мөмкин түгел, һорамай мөмкин түгел, әйтмәй мөмкин түгел* тип хәл ҡылымдың юҡлыҡ формаһы менән әйтергә кәрәк. Мәғәнәһе һәм формаһы менән был конструкциялар *әйтмәй булмай* тигән һүҙгә тура килә. Шулай булғас,

*Был әбейҙәр хаҡында айырым әйтеп үтмәү мөмкин түгел* (Б., 13.11.96) тигән һөйләмдәге һүҙҙе *әйтеп үтмәй мөмкин түгел* тип;

*Байрамда ҡатнашыусыларҙың фекеренә ҡолаҡ һалмау мөмкин түгел* (Й., 20.07.96) тигәндәге һүҙҙе *ҡолаҡ һалмай мөмкин түгел* тип;

*Уның һүҙҙәренә ышанмау мөмкин түгел ине* (А., 96, 6, 83) тигән һөйләмдәге һүҙҙе *ышанмай мөмкин түгел ине* тип яҙғанда ғына дөрөҫ була.

Был эштә гел генә исем ҡылым формаһының ҡулланырға ярамаған урындары хаҡында һүҙ алып барылды. Шуға ҡарап, кемдер берәү, уны бер ҙә файҙаланып булмай икән, тип уйлай ҡалһа, әлбиттә, ныҡ хаталаныр ине. Исем ҡылымды ҡыҫырыҡлау ниәте бында юҡ, уның мәғәнәһе һәм функцияһы хаҡында баштан уҡ асыҡ итеп әйтелде. Ләкин исем ҡылым бөтә урынға ла килә торған универсаль форма түгел, уның үҙ урыны бар. Шуны артыҡ киңәйтеү, исемде лә, сифат ҡылымды ла, ҡылым атамаһын да килешкән-килешмәгән ерҙә исем ҡылым менән алмаштырыу телде зәғиф-

ләй, биҙәктәрен юя, ныҡ ярлыландыра. Шунан ары, урыҫ теленә эйәреп, грамматик формаларҙы яңлыштырыу һүҙ бәйләнеше менән һөйләм төҙөлөшөнөң ҡанундарын боҙоуға килтерә, сөнки бер һүҙҙең формаһын урыҫ теленә оҡшатып алғас, уға мөнәсәбәте булған башҡа һүҙҙәр ҙә шуға ярақлашып китә. Һөҙөмтәлә, бер форманың хатаһы башҡа хаталарҙы эйәртеп, телдең ҡоролошон, нигеҙен емерә.

Ошо урында, төп мәсьәләнән ситләшеп булһа ла, исем ҡылым формаһының сығышы һәм бәйләнеше хаҡында әйтеп үтке килә.

Исем ҡылым яһай торған *-ыу* ялғауы боронғо *-ғ* ялғауына барып тоташа. Был *-ғ* ялғауы боронғо төрки телдәрҙә ҡылымға ҡушылып исем яһай торған булған. Һүҙ аҙағындағы *-ғ* һуңынан *-ҡ* өнөнә күскән, сөнки башҡорт теленең фонетик ҡануны буйынса яңғырауыҡлы өн һүҙ аҙағында тора алмай. Шул рәүештә яһалған *ҡылыҡ, йырыҡ, боҙоҡ* кеүек һүҙҙәр хәҙерге башҡорт телендә лә йөрөп ята. Былары — борондан уҡ айырым һүҙ булып нығынып ҡалған исемдәр, ундай исем һәр ҡылымдан яһалмаған. Шунан тыш, телдең ҡайһылыр үҫеш дәүерендә боронғо *-ғ* ялғауы һәр ҡылымдан исем ҡылым яһай торған формаға әйләнеп, шул дәүерҙәге фонетик ҡанун нигеҙендә *-у(-ыу)* ялғауына күсеп киткән. Һүҙ аҙағындағы *-ғ* өнөнөң *-у* өнөнә күсеүе бында ғына түгел, башҡа урында ла бар, һәм ике фонетик вариантты ла һаҡлаған *ҡаҙаҡ — ҡаҙау, һайғаҡ — һайғау* кеүек һүҙҙәр әле лә шул күсеште күрһәтеп тора.

Был *-у(-ыу)* ялғауының исемләштерә торған һәләте, күрәһең, исем ҡылым яһау менән генә сикләнмәй, һандарҙы исемләштереүгә лә хеҙмәт итеп, *берәү, икәү* тигән һан формаһын ғәмәлгә килтергән. Хәҙерге грамматик хеҙмәттәрҙә ул һандарҙы урыҫ телендәге *двое, трое* тигән һандарға оҡшатып, йыйнау һаны тиҙәр. Урыҫ телендәге йыйнау һаны йән эйәләрен белдергән йәки күплектә генә йөрөгән исемдәр менән ҡулланылып *(двое братьев, трое суток)*, ысынлап та, йыйнау мәғәнәһе бирә. Ә беҙҙәге ул һандарҙа йыйнау мәғәнәһе юҡ, *берәү* тигән һүҙҙә йыйнау мәғәнәһе эҙләү үҙе бер мәғәнәһеҙлек булыр ине. Был һандар ҡулланышы менән дә башҡа һандарға оҡшамаған. Башҡа һандар һөйләмдә аныҡлаусы хеҙмәтен башҡарһа, былар эйә һәм хәбәр булып килә: *Икәү барҙыҡ, Ҡәләмем алтау.* Уларҙың мәғәнәһе һан менән ниндәй ҙә булһа бер исемдән торған ике һүҙҙе эсенә ала, йәғни *берәү* тигән һүҙ, мәҫәлән, *бер кеше* тигәнде *(Урамдан берәү килә), өсәү* тигән һүҙ, мәҫәлән, *өс нәмә* тигәнде аңлата. Шуға күрә *берәү, икәү, ... етәү* тигән ете һүҙҙе йыйнау һандары тип әйтергә бер нигеҙ ҙә юҡ. Фор-

маһынан һәм мәғәнәһенән сығып, ул һүҙҙәргә бөтөнләй башҡа грамматик баһа бирергә кәрәк. Шул күҙлектән ҡарағанда, минең фекеремсә, уларҙы «исем һан» тип кенә исемләргә мөмкин. Мәсьәләнең хикмәте ул һан төркөмсәһенең атамаһын үҙгәртеүҙә генә түгел. Төркөмсәнең асылынан сығып биргән дөрөҫ атама уны грамматик йәһәттән дөрөҫ аңлатырға һәм тел белемен төрлө буталыштан сығарып, дөрөҫ юлға төшөрөргә ярҙам итә.

## ХӘҘЕРГЕ ЗАМАН СИФАТ ҠЫЛЫМЫ

Башҡорт телселәре башта *-ыусы* ялғауын хәҙерге заман сифат ҡылым формаһына һанамаған. Шуға күрә Ә. Мансур норматив мәктәп дәреслеге итеп эшләгән «Грамматика» китабының 1933 йылғы 1-се баҫмаһында хәҙерге заман сифат ҡылым формаһын күрһәтмәй, сифат ҡылым ике заман менән үҙгәрә: үткән заман — *-ған,* киләсәк заман — *-саҡ,* тип ике генә сифат ҡылым формаһын билдәләй. Ләкин дәреслектең 1-се баҫмаһы сыҡҡас, Ә. Мансур, күрәһең, урыҫ телендә хәҙерге заман сифат ҡылымының айырым формаһы булғас, башҡорт телендә лә булырға тейеш тигән уйға килеп, 1934 йылғы 2-се баҫмаһына, хәҙерге заман сифат ҡылым формаһы *-ыусы* тип өҫтәмә индерә. Шул замандан алып башҡорт теленең грамматикаһы буйынса кем генә яҙмаһын, *-ған* ялғауын үткән заман сифат ҡылым формаһы, *-ыусы* ялғауын хәҙерге заман сифат ҡылым формаһы тип яҙа башлай. Ә ғәмәлдә үҙенә башҡа форма булып йөрөгән бер бөтөн *-ыусы* ялғауы башҡорт телендә юҡ, башҡорт телендә *-сы* ялғауы бар. Ул ялғау төрлө исемдән кешенең һөнәрен, шөғөлөн күрһәтә торған исем яһай: *эшсе, һалсы, ялсы, димсе, балтасы, ҡурайсы, игенсе, мәғрифәтсе, алдаҡсы, енәйәтсе* һ. б. Башҡа исемгә ҡушылған кеүек, *-сы* ялғауы исем ҡылымға ла ҡушыла һәм шулай уҡ кешенең һөнәрен, шөғөлөн билдәләй торған исем яһай: *уҡытыусы, тегеүсе, бейеүсе* һ. б. Ошонoң һымаҡ, ныҡлап исем төркөмөнә күскән һүҙҙәрҙән тыш, *-сы* ялғауы ярҙамында исем ҡылымдан ҡайһы берҙә һүҙ ыңғайында ғына әйтеп китә торған ваҡытлы һүҙҙәр ҙә яһала. Мәҫәлән,

*Ғәйнетдин һуғыштан ҡайтҡас та ғаиләһен үҙ йортона күсереп алғайны, шуға кәнсәләрҙә йәшәүсе ҡалманы* (Б., 7.09.96);

*Йәтим ҡыҙ артынан йөрөүсе булманы* (А., 96, 1, 11);

*Ярҙам ҡулы һуҙыусы ла табылмай* (Й., 19.10.96) тигән һөйләмдәрҙәге *йәшәүсе, йөрөүсе, һуҙыусы* һүҙҙәре йәки *Аш бешерҙем, ашаусы юҡ* тигәндәге *ашаусы* һүҙе лексик берәмек булып нығымаған, үҙ урынында ғына әйтелә торған исем булып килә. Урыҫ телендәге хәҙерге заман сифат ҡылымына тап килерлек форма эҙләгәндә, Ә. Мансур, күрәһең, шундай ваҡытлы һүҙҙәргә таянған, һәм шул уҡ нәмәне таяныс итеп, артабан уның фекеренә башҡа телселәр ҙә ҡушылып киткән. Әммә ул ваҡытлы һүҙҙәрҙә сифат ҡылымға хас булған хәрәкәтлек мәғәнәһе бөтөнләй юҡ, исем төркөмөнә ныҡлап күсмәһә лә, улар тотош исем мәғәнәһенә эйә, шуға күрә *-ыусы* ялғауын хәҙерге заман сифат ҡылым формаһы тип теләгән бер ерҙә һәр ҡылымға ҡушып булмай.

Телселәрҙең *-ыусы* ялғауын сифат ҡылым формаһы тип алып китеүенә, икенсе яҡтан, *-ған* формаһының мәғәнәһен һәм халыҡ телендәге урынын тейешенсә асыҡлап еткермәүе сәбәпсе була. Ә. Мансур тәүге дәреслегендә үк, Н. Ҡ. Дмитриев әйтмешләй, элгәрге татар грамматикаларына эйәреп, *-ған* ялғауы менән яһалған форманы тик үткән заманға ғына ҡайтарып ҡуя һәм, һөйләмдең хәбәре булып килгәндә, ул бер эште «үҙең күреп түгел, башҡалар арҡыры ишетеп кенә хәбәр итеүҙе аңлата», тип билдәләй. Башҡорт телселәре әле булһа бөтә ерҙә ошо фекерҙе яҡлап, шуны алға һөрә, йәғни *-ған* ялғауы менән яһалған сифат ҡылымды үткән заман сифат ҡылымы тип, шунан сыҡҡан ҡылым формаһын, эш-хәлдең үтәлеүен үҙ күҙе менән күрмәгәндә ҡуллана торған шаһитһыҙ үткән заман формаһы, тип йөрөтә. Улар, шаһитһыҙ үткән заман формаһының 1-се затын йоҡлаған йәки иҫтән яҙған кеше үҙенең ни эшләгәнен белмәй, һуңынан башҡа берәүҙән ишетеп кенә белгән саҡта ҡуллана, тип аңлата. Тимәк, телдә иҫһеҙ ятып айныған ҡулланыр өсөн үҙенә башҡа грамматик форма эшләп ҡуйылған булып сыға. Бер ҙә иҫен юғалтмаған кешенең дә, *Мин һине бер йүнле әҙәм сыҡмаҫмы тип уҡытҡанмын; Мин әле битемде йыумағанмын* тип әйтеүе мөмкин булғанын телселәр иҫәпкә алмай. Улар ни өсөндөр Н. Ҡ. Дмитриевтың *-ған* формаһы хаҡында әйткән фекерен дә ҡабул итеп бөтмәй.

Н. Ҡ. Дмитриев «Грамматика башкирского языка» тигән китабында (1948) хәбәр ҡылымдың *-ған* формаһын, үткән заманда башҡарылған эште хәҙерге мәлдәге эҙемтәһе (йәки һөҙөмтәһе) буйынса һүрәтләп, төп иғтибарҙы эштең үҙенә

түгел, ә шуның эҙемтәһенә йүнәлтә торған форма, тип аңлата һәм башҡорт телендәге *алғанмын* тигәнде үткән-хәҙерге заман йәки перфект тип атарға тәкдим итә. Академик хеҙмәт исеменә дәғүә иткән «Грамматика современного башкирского литературного языка» тигән китап (1981) *-ған* формаһының мәғәнәһен һаман әлегесә шаһитһыҙлыкка бәйләп, 1-се затты ғына Н. Ҡ. Дмитриев әйткән һөҙөмтәлеккә ҡайтарып ҡуя, йәғни тағы бер үк форманың мәғәнәһен затҡа ҡарап икегә бүлә. Бер телдә бер үк форманың 1-се затта бер мәғәнә, ҡалған ике затта башҡа мәғәнә менән йөрөүе мөмкин түгел. Өс затта ла мәғәнәһе бер булған форма ғына грамматик форма булып йөрөй ала, шул саҡта ғына төҙөк тел барлыҡҡа килә.

Был мәсьәләлә Н. Ҡ. Дмитриевтың фекере, һис һүҙһеҙ, башҡа телселәрҙекенә ҡарағанда дөрөҫөрәк, ләкин уның да эҙемтәлеккә (йәки һөҙөмтәлеккә) баҫым яһауы *-ған* формаһының мәғәнәһен тейешенсә асып бөтмәй, сөнки,

*Йыл башынан барлығы 50 миллион һумлыҡ эш башҡарылған* (Й., 18.10.94) тигәндә эштең һөҙөмтәһе күрһәтелһә лә;

*Башымды мөйөшкә терәп, тәрән йоҡоға киткәнмен* (Ш., 96, 5, 31);

*Ауылдан кешеләр ситкә таралып бөтмәгән* (Й., 18.10.94) тигән һөйләмдәрҙә һөҙөмтәгә баҫым яһалған тип әйтеп булмай. Ошоноң һымаҡ, яҙма телдән һәм һөйләү теленән йыйған бик күп миҫалды сағыштырып, төпсөп сыҡҡандан һуң, мин *-ды* менән *-ған* формаһының мәғәнәһен, мәғәнә айырмаһын асыҡлап, үҙемсә бер төрлө фекергә килдем.

Минең фекеремсә, хәбәр ҡылымдың *-ды* формаһы эш-хәрәкәттең үткән заманда булыу-булмауы хаҡында шул уҡ үткән мәлгә ҡайтып хәбәр итә, ә хәбәр ҡылымдың *-ған* формаһы эш-хәрәкәттең үткән заманда булыу-булмауы хаҡында хәҙерге мәлдән тороп хәбәр итә. Был формаларҙа шаһитлыҡ-шаһитһыҙлыҡ мәғәнәһе юҡ, *-ған* формаһында һөҙөмтәлек мәғәнәһе бар кеүек булһа ла, ул ана шул хәҙерге мәлдән тороп һөйләгән өсөн генә шулай тойола.

Шулай итеп, хәбәр ҡылымдың *-ған* формаһы бер ыңғай үткән заманға ла, хәҙерге заманға ла мөнәсәбәтле булып, шул бәйләнештә генә ысын мәғәнәһен аса. Уны үткән заман формаһы тип кенә әйтеп булмай, бер үк ваҡытта хәҙерге заманға бәйле булғанын сағылдырып, Н. Ҡ. Дмитриев тәкдим иткәнсә, үткән-хәҙерге заман формаһы тип кенә атап була.

Форманың ике заман йүнәлешендәге бәйләнеше сифат ҡылым хеҙмәтен үтәгәндә лә үҙгәрешһеҙ ҡала: *-ған* формаһы бер юлы үткән заман сифат ҡылым хеҙмәтен дә, хәҙерге за-

ман сифат ҡылым хеҙмәтен дә башҡарып йөрөй. Хәҙерге заман сифат ҡылымы тип *-ыусы* формаһын атаған телселәр *-ған* формаһының хәҙерге заман сифат ҡылымы булып йөрөгәнен кире ҡағып бөтөрә алмай. Улар барыһы ла, *-а/-й* хәл ҡылымына *торған* һүҙе ҡушылып, хәҙерге заман сифат ҡылымының икенсе, ҡушма формаһы яһала, тип иҫәпләй, йәғни, уларҙың уйлауынса, һүҙҙәрҙе ҡушарлатып, ярҙамлыҡ ҡылымға күсереү менән грамматик форманың мәғәнәһе үҙгәрә булып сыға. Ләкин эш бөтөнләй мәғәнәнең үҙгәреүендә түгел. Хәҙерге заман сифат ҡылымының ябай формаһы тип йөрөтөлгән урында улар *-ған* ялғауын *-ыусы* ялғауына еңел алмаштыра, ә ҡушма формаһы тип йөрөтөлгән урында *эшләй торған эш, шәл бәйләй торған энә, һөт ташый торған машина* тигәнде *эшләй тороусы эш, шәл бәйләй тороусы энә, һөт ташый тороусы машина* тип *-ыусы* формаһына һис тә күсерә алмайҙар, шуға күрә *эшләй торған, яҙа торған* тигән һүҙҙе хәҙерге заман сифат ҡылым формаһы тип иҫәпләргә мәжбүр булалар, һәм шуның менән улар теләһә-теләмәһә лә *-ған* ялғауының хәҙерге заман сифат ҡылым формаһы булғанын раҫлайҙар.

Грамматик форманың мәғәнәһе ябай һүҙҙә лә, ҡушма һүҙҙә лә бер була, ҡушма һүҙгә күсеү менән уның мәғәнәһе үҙгәрмәй. Шулай булғас, *-ған* ялғауы менән килгән ҡушма һүҙ хәҙерге заман сифат ҡылым хеҙмәтен үтәй икән, ябай һүҙ ҙә шул хеҙмәтте башҡара. *Әйткән һүҙ — атҡан уҡ; Йөрөгән таш шымарыр, ятҡан таш мүкләнер* тигән мәҡәлдәрҙә, *Минән генә ҡалған ир баланы атаһы ла юҡ тип ҡаҡмағыҙ; Яландарҙан иҫкән һыҙма елгә шау-шыу итә Боғаҙаҡ ҡамышы; Ҡурай тартҡан егеткә, һылыуым, бер генә күҙеңде һал* тигән һымаҡ йырҙарҙа һәм ғөмүмән *-ыусы* формаһының ни икәнен белмәгән ябай халыҡ телендә *-ған* формаһындағы һүҙҙең үткән һәм хәҙерге заман сифат ҡылымы, йәки ике заманды ла эсенә алған уртаҡ мәғәнәле сифат ҡылым булып йөрөгәне асыҡ күренеп тора. Хатта яҙышҡан кешеләрҙең дә ҡайһы берҙә «яңлышлыҡ» менән *-ған* формаһын халыҡ телендәгесә хәҙерге заман сифат ҡылымы итеп ҡулланып ебәргән сағы булып ҡуя.

*...Сәғит Агиш исемен йөрөткән был йәмғиәт хәҙер өлгөрөп еткән* (Б., 21.09.96);

*Ситтә йәшәгән ҡәрҙәштәремә аҙ булһа ла файҙа килтерә алғаныма ҡыуандым* (Й., 25.07.96) тигән һөйләмдәрҙәге *исемен йөрөткән, ситтә йәшәгән* һүҙҙәрен грамматик хеҙмәттәрҙәге ҡағиҙә буйынса *исемен йөрөтөүсе, ситтә йәшәүсе* тип яҙырға тейеш булһалар ҙа, авторҙар, үҙҙәре лә

һиҙмәҫтән, йәштән күнеккән телдәре ҡушҡанса дөрөҫ итеп яҙып ысҡындырған.

Грамматик хеҙмәттәрҙә, хәҙерге заман сифат ҡылымы тип, ныҡ иркенләтеүҙәре арҡаһында *-ыусы* ялғауының *уҡымаусы, алмаусы* тигән мәғәнәһеҙ юҡлыҡ формаһын, *ғазапланыусы кеше* тигән кеүек хилаф яһалышын уйлап сығарыуҙары етмәгән, *уҡытыусы, яҙыусы, көтөүсе* тигән һүҙҙәрҙе сифат ҡылымдан исемгә әйләнгән, исем вазифаһын үтәгән сифат ҡылым тип бөтөнләй кирегә әйләндереп ҡуйыуға ҡәҙәр барып етәләр. Сифат ҡылымды сығанаҡ итеп, әлеге исемдәрҙе икенсе урынға күсергән саҡта телселәр *игенсе, тимерсе, һунарсы* кеүек *-сы* ялғауы менән яһалған исемдәрҙе бер нәмәгә һанамай иҫәптән төшөрөп ҡалдыра. Был яһалма исемдәрҙең бер туған булғанын, тик һуңғыларының нигеҙендә ысын исем, тәүгеләренең нигеҙендә исем ҡылым торғанын, ә ғәмәлдә тегеләренең дә, быларының да бер булғанын улар белергә теләмәй.

Тел буйынса яҙылған хеҙмәттәрҙең, бигерәк тә мәктәп дәреслектәренең, хәҙерге заман сифат ҡылымы тип көсләп таҡҡан *-ыусы* формаһы әҙәби норма булып урынлашып алды, яҙышҡан бөтә кеше, йоҡһа-йокмаһа ла, хәҙерге заман сифат ҡылымы урынына тик шуны ғына ҡуллана башланы. Мәҫәлән,

*Мин йыш ҡына ҡарағайҙар араһынан йымылдап үтеүсе электричка, йәшел вагондарҙы күҙәтәм* (А., 96, 2, 23) тигәндәге *үтеүсе;*

*Үҫеп килеүсе йәш быуын ата-бабаһының нигеҙен һыуытмай* (Й., 23.11.96) тигән һөйләмдәге *үҫеп килеүсе;*

*Ул Илеш районында йәшәүсе туғандарына китеп бара ине* (Б., 4.10.96) тигәндәге *йәшәүсе;*

*Йылғаға сығыусы тар тыҡрыҡтар... үҫемлек еҫе менән тулы* (А., 96, 1, 87) тигәндәге *сығыусы;*

*...Аяҙытау ауылы эргәһенән ағыусы Аҡташ шишмәһе башына өс ҡатлы йорт һалдыра* (А., 96, 5, 142) тигән һөйләмдәге *ағыусы;*

*Ауыл яғына барыусы машина ҡарауыллап көндәр үтә* (Б., 7.09.96) тигән һөйләмдәге *барыусы;*

*Илебеҙҙә асығыусы балалар юҡ тип әйтергә баҙнат итәм* (А., 96, 6, 5) тигәндәге *асығыусы;*

*Кибеттәрҙә эшләүсе бөтә һатыусылар ҙа бер иш матур форма кейеп алған* (Б., 26.07.96) тигән һөйләмдәге *эшләүсе* һүҙҙәрен *-ыусы* ялғауы менән сифат ҡылым итеп ҡулланыу һис башҡортса килеп сыҡмаған. Туған телен иҫенә төшөрөп, үҙенсә әйтергә уйлаған кеше был һүҙҙәрҙе *үткән, үҫеп килгән, йәшәгән, сыҡҡан, аҡҡан, барған, асыҡҡан, эш-*

*ләгән* тип яҙырға кәрәк икәнен аңлар ине, тик әлеге билдәләнгән әҙәби норма аңлаған кешегә лә дөрөҫ итеп яҙырға ирек бирмәй.

Сифат ҡылым формаһы тип билдәләгәс, *-ыусы* ялғауын теләгән бер ҡылымға ҡушып йөрөтөр өсөн киң мөмкинлек асылды. Мәҫәлән,

...*Тере балыҡ һатылыусы кибеткә юлыҡтым* (Б., 19.11.96);

...*Даими рәүештә үткәрелеүсе ижад кисәләре* (Й., 5.01.96) тип уны төшөм йүнәлешенә лә;

...*Төрлө төбәктәрҙә үткәрелеп тороусы конференциялар* (Й., 6.01.96) тип ҡушма ҡылымға ла ҡушалар. Грамматик хеҙмәттәр үҙҙәре күрһәтеп торғанда, *-ыусы* ялғауын

*Ул төшөнкөлөккә бирелмәүсе, уйын-көлкөгә әүәҫ кешегә оҡшаған* (А., 96, 11, 10);

*Йоҡларға бирмәүсе әбейҙәр бында юҡ* (Б., 20.09.96);

*Беҙҙә үҙ әҫәренән башҡаны белмәүсе әҙиптәр ҙә бар* (Б., 26.06.96);

*Бер ниндәй ҙә бәхәс тыуҙырмаусы хәҡиҡәт* (Й., 29.11.96) тип юҡлыҡ формаһындағы ҡылымға ҡушыу ҙа хәҙер хатаға һаналмай. Шуның өҫтөнә, саманан тыш әүрәп китеп, *-ыусы* ялғауы менән яһалған «сифат ҡылым» формаһын

*Пугачев яғына сығыусы тәүге башҡорт етәксеһенең исеме тарихта билдәһеҙ* (А., 96, 4, 132);

*Уға ҡарата яуызлыҡ ҡылыусы әҙәмгә лә ел-ямғыр теймәне* (Б., 17.07.96);

...*Ирек һөйөүсе яугир ата-бабаларыбыҙ* (Й., 10.09.96) тип ҡүрәләтә үткән заман сифат ҡылымы урынына ла ҡуйып ебәрәләр һәм шулай итеп сифат ҡылымдың *-ған* формаһын хәҙерге заман мәғәнәһендә генә түгел, үткән заман мәғәнәһендә ҡулланылған еренән дә ҡыҫырыҡлай баралар. Беҙгә *-ыусы* ялғауының был һөжүмен туҡтатырға кәрәк. Башҡорт телендә *-ыусы* тигән ялғауҙың юҡ икәнен, исем ҡылымға *-сы* ялғауы ҡушып исем яһағанда *-ыу* менән *-сы* ялғауы эргәләш килһә лә, уларҙың бер бөтөн ялғау, бер грамматик форма яһай алмағанын аңлап, *-ған* формаһын үҙ урынына ҡайтарғанда ғына был мөһим эште башҡарып була. Эштең мөһимлеге башҡорт грамматикаһын урыҫ теленә яраҡлаштырып яҙыуҙан ҡотҡарыу бурысы менән билдәләнә.

# ҮТКӘН ЗАМАН *-ҒАЙНЫ* ФОРМАҺЫ

Беҙҙең грамматик хеҙмәттәрҙә, башҡорт телендәге *-ғайны* формаһы менән *-ған ине* формаһы бер үк мәғәнәлә хәбәр ҡылымдың тамамланған икенсе үткән заманы йәки билдәле (шаһитлы) элек үткән заманы булып йөрөй, тигән фекер ныҡлы урын алған. Ул ғына түгел, *-ған ине* формаһы татар теленә генә хас, башҡорт телендә уның урынына *-ғайны* булырға тейеш тип, беҙҙең әҙәби телдән *-ған ине* формаһын тамам ҡыҫырыҡлап сығарҙылар, урынлымы-урынһыҙмы, тик *-ғайны* формаһын ғына ҡуллана башланылар. Ләкин, бергән, *-ған ине* формаһы татар телендә генә түгел, үзбәк, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, ҡумыҡ һәм башҡа төрки телдәрҙә лә бар, һәм ул бөтә телдә лә бер үк мәғәнә менән йөрөй; икенсенән, *-ғайны* һәм *-ған ине* формаларының яһалышында уртаҡлыҡ юҡ, улар икеһе ике төрлө форманан яһалған; өсөнсөнән, уларҙың мәғәнәһе лә бер-береһенә яҡын килмәй, шулай булғас, ҡулланыштары буйынса ла һәр береһе үҙ урынында тора.

Иң элек ике форманың яһалышына туҡтап китергә кәрәк. Әлбиттә, *-ған ине* формаһы *-ған* формаһына *ине* ярҙамлыҡ ҡылымы ҡушып яһала. Ә инде *-ғайны* формаһына килгәндә, телселәрҙең ҡайһы береһе уны *-ған ине* формаһының тартылыуы (*-ған ине — -ғайны*) арҡаһында яһалған тип аңлата. Был ҡарашҡа ҡушылып булмай.

Төрки телдәрҙә бик актив *-ғай* формаһы булған. Боронғо яҙмаларҙа ул йыш осрай. А. М. Щербак, шул яҙмаларҙан алып, *Сенитәк кечүргәй, сен аны кечүр* (һине кисерер, һин уны кисер), *Ул меңә келгәй* (Ул миңә килер) тигән кеүек байтаҡ миҫал килтереп, был форманы киләсәк заман мәғәнәһендә йөрөгән, һуңғараҡ теләк төҫмөрө өҫтәлеп, тәүге мәғәнәһе бер аҙ үҙгәргән, тип аңлата. Урыҫ ғалимдарынан С. Е. Малов менән Н. А. Баскаков та *-ғай* формаһын киләсәк заман теләк сифат ҡылымы тип атай. Ошо форма ҡасандыр башҡорт телендә лә актив ҡулланылған. Шул ҡулланышы *буғай* тигән модаль һүҙҙә һәм *Баланы ҡара, ярҙан осмағайы;*

*Ташлап киткән икән, әйҙә, әллә ҡайҙа олаҡмағайы* (Ш., 96, 6, 16) тигән һымаҡ урында әлегәсә һаҡланған.

Ябай *-ғай* формаһы менән бер ыңғай борон заманда уҡ *ине* ярҙамлыҡ ҡылымын ҡушып яһаған ҡушма форма ла йөрөй торған булған. А. М. Щербак, *Өлүр эрди эрсә ҡамуғ игләгән киши ҡалмағай эрди рузы йегән* (Үлеп торҙониһә бөтә ауырыған кеше, ҡалмаҫ ине ризыҡ ейгән), тип ҡушма формаға ла миҫал килтерә. Ҡарағалпаҡ телендә ҡушма форма әле лә *-ғай еди* булып шул көйө һаҡланған, һәм ундағы *Мен бер жаҡҡа барғай едим, адасып кеттим* тигән миҫал уның беҙҙәге *-ғайны* формаһы менән бер үк мәғәнәлә йөрөгәнен күрһәтеп тора. Тимәк, башҡорт телендәге *-ғайны* формаһы *-ғай ине* формаһының тартылып, бергә ҡушылыуынан яһалған.

Шул уҡ фекерҙе яҡлап, заманында Ж. Ғ. Ҡейекбаев та яҙып сыҡҡайны, ләкин ул, *-ған ине* һәм *-ғайны* формаларының мәғәнәһе бер, улар параллель рәүештә ҡулланыла ала, тик *алғайны, килгәйне* тибындағыһы төп башҡортса була, тигән фекер белдерҙе.

Үткән заман *-ған* формаһының мәғәнәһе хаҡында алдағы бүлектә әйтелде. Ул эш-хәрәкәттең үткән заманда булыу-булмауы тураһында хәҙерге мәлдән тороп хәбәр итә. Ә *-ған ине* тигән ҡушма формалағы *ине* ярҙамлыҡ ҡылымы хәҙерге мәлде үткән заманға күсереп, *-ған* формаһы менән бирелгән эш-хәрәкәтте шунан элгәрге заманға ҡайтара, йәғни *-ған ине* формаһы үткән замандағы бер мәлдән тороп, шунан элекке эш-хәрәкәттең булыу-булмауы тураһында хәбәр итә һәм шуға баҫым яһай. Мәҫәлән, *Сура ҡайтҡанда, Ғәни ятмаған ине* тигәндә үткән замандағы бер мәлгә ҡәҙәр Ғәни ятмаған була. Бында шуға баҫым яһала, баҫым яһар өсөн, *Сура ҡайтҡанда* тип үткән замандағы мәл билдәләп ҡуйыла. Форманы ҡулланғанда нисек тә булһа шул мәл билдәләнгән була. Үткән заман *-ған ине* формаһын дөрөҫ ҡулланмай, *-ғайны* формаһы менән алмаштырыу, заман мөнәсәбәтен боҙоп, һөйләмдең мәғәнәһен яңлыштырыуға килтерә.

Ҡиләсәк заман *-ғай* формаһынан яһалған *-ғайны (-ғай + ине)* формаһында *ине* ярҙамлыҡ ҡылымы хәҙерге һөйләү мәлен үткән заманға күсерә һәм, нигеҙендә теләк мәғәнәһе булған был ҡушма форма үткән замандағы бер мәлде билдәләп, шунан һуңғы эш-хәрәкәткә иғтибарҙы йүнәлтә. Мәғәнәһен яҡшыраҡ асыр өсөн, *-ғайны* формаһын *-ған ине* һәм шулай уҡ киләсәк заман формаһынан яһалған *-ыр ине* формаһы менән сағыштырып ҡарарға мөмкин. Мәҫәлән,

*...ул ҡалала уҡыған ине* тигәндә фекер осланған, ул, үткән замандағы бер мәлдән тороп, шунан элек булған эш хаҡында хәбәр итә.

*...ул ҡалала уҡыр ине* тигәндә лә фекер осланған, ул бер эштең үткән заманда башҡарылыу ихтималы булғанын белдерә.

*Ул ҡалала уҡығайны...* тигәндә фекер осланмаған, ул ҡалала уҡығандан һуң ни булғанын хәбәр итеүҙе һорап тора. Фекерҙе ослар өсөн был һүҙгә, *...шәпләнде лә китте* тигән һымаҡ, ниндәй ҙә булһа бер һөҙөмтәне белдергән һүҙ өҫтәргә кәрәк.

*Был ҡатын айыуҙың башына сирткәйне, теге бүрегә әйләнде* (әкиәттән) тигәндәге эйәрсен һөйләм баш һөйләмдәге эш-хәрәкәттең ғәмәлләшеү сәбәбен күрһәтә йәки, кирегә әйләндереп әйткәндә, баш һөйләмдәге эш-хәрәкәт эйәрсен һөйләмдәге эш-хәрәкәттең һөҙөмтәһе булып килә. Шулай итеп *-ғайны* формаһы ике һөйләмде бергә бәйләп, һөҙөмтәле мөнәсәбәткә килтерә. Һөҙөмтәле мөнәсәбәттәге ҡушма һөйләмдә эйәрсен һөйләмдең хәбәре *-ғайны* формаһында, баш һөйләмдең хәбәре *-ды* формаһында тора.

*...Үҙе менән Фәнилде лә алырға теләгәйне, тағы тыйылды* (А., 96, 1, 35) тигән һөйләмдәге *теләгәйне — тыйылды;*

*(Сәйҙә) күкрәк тултырып тын алырға иткәйне, сөскөрҙө лә ебәрҙе* (А., 96, 8, 8) тигәндәге *тын алырға иткәйне — сөскөрҙө;*

*Күмәкләшеп тартырға ғына сыҡҡайныҡ, артыбыҙҙан Борис килеп етә һалды* (А., 96, 11, 7) тигән һөйләмдәге *сыҡҡайныҡ — килеп етә һалды* һүҙҙәре шулай уҡ һөҙөмтәле мөнәсәбәткә ҡуйылған. Ләкин ғәмәлдәге телдә һөҙөмтәле мөнәсәбәткә ҡуйылған ике эш-хәрәкәтте тулы ҡушма һөйләм рәүешенә килтереп, тотош сағылдырыу гел генә булмай. Мәҫәлән,

*Был мәсьәлә буйынса һеҙгә ингәнсә иптәштәр менән бер аҙ фекер алышҡайныҡ инде* (А., 96, 7, 75);

*Уның хаҡында беҙ ошоғаса байтаҡ ҡына мәҡәлә баҫтырғайныҡ инде* (Б., 26.11.96) тигән ике һөйләмдә эштең һөҙөмтәһе, шунан һуң ни булғаны атап әйтелмәһә лә, ул һөҙөмтәнең артабанғы эш барышында булыры һүҙ ыңғайынан аңлашыла, шуға күрә бында *-ғайны* формаһы үҙ урынында тора.

*Ҡоштар ҡасан ғына әле оя ҡорғайны... Бала сығарып, осорға өйрәттеләр* (Б., 27.08.96) тигәндә тәүге эш-хәрәкәттең үҙ һөҙөмтәһе күрһәтелмәй, ә шуға мөнәсәбәтле булған һуңғы хәл-ваҡиға хаҡында әйтелә.

Беҙҙең грамматик хеҙмәттәрҙә хәҙерге заман хәбәр ҡылымы менән *торғайны* һүҙенән яһалған конструкцияны күптән үткән заман йәки билдәле (шаһитлы) борон үткән заман тип үҙенә башҡа бер заман формаһына һанайҙар. Шулай булғанда ла, барыбер ул форма үткән эште хәҙерге эшхәл менән сағыштырып, ике араны мөнәсәбәткә килтергән саҡта ҡулланыла.

*Торорға өй генәләре лә булмай торғайны бит уларҙың* (Ш., 96, 6, 16);

*Картуф ҡаҙырға ярҙамлаша торғайным* (А., 96, 1, 7);

*Ҡыҙыл йылғаһының яры буйлап тар ғына арба юлы үтә торғайны* (Б., 24.07.96) тигән һөйләмдәрҙә телгә алынған эш һәм хәлдәр артабанғы, хәҙерге хәлгә килеп бәйләнә, нигеҙҙәге *-ғай* ялғауы арҡаһында үткән замандағы эш хәҙерге хәл менән мөнәсәбәткә килә.

Тимәк, *-ғайны* формаһы иғтибарҙы үткән замандағы бер мәлдән алға, киләсәккә йүнәлтә, ә *-ған ине* формаһы үткән замандағы билдәле бер мәлдән артҡа, шунан элгәрге заманға тарта. Ике аралағы шул айырма бер үк миҫалды ике формаға ҡуйып ҡарағанда бик асыҡ күренә:

*Беҙ барғанда, ул йоҡонан торған ине;*

*Беҙ барғайныҡ, ул йоҡонан торҙо.*

Халыҡ телендә был ике форманы яҡшы айыралар һәм һәр береһен үҙ урынында ғына ҡулланалар. Шуны иҫәпкә алмай, бөтә ерҙә *-ғайны* формаһын йөрөткән кешеләр телде боҙоуға килтерә.

*...Ҡайтырға сыҡҡанда, ер өҫтөн ап-аҡ томан ҡаплағайны* (Й., 29.06.96) тигән һөйләмдә үткән замандағы билдәле мәлгә ҡәҙәр тамамланған эш тураһында һүҙ бара, шулай булғас, *-ған ине* формаһын ҡулланырға кәрәк икәне күренеп тора.

*Иртән тороуыма ямғыр тымғайны* (А., 96, 11, 11) тигән һөйләмдә лә үткән замандағы мәл билдәләнгән, ямғыр шул мәлдән элек тымған. Шуны белдерер өсөн *тымған ине* тип әйтергә кәрәк.

*Күптән ҡараңғы төшкәйне инде* (Й., 19.09.96) тигәндәге *күптән* һүҙе үткән замандағы мәлде күрһәтә, шуға ҡәҙәр тамамланған эш хаҡында *-ған ине* формаһы менән генә әйтеп була.

*Клуб, ... май шикелле булмаһа ла, йылынғайны* (Б., 7.09.96) тигәндә, үткән замандағы мәл атап әйтелмәһә лә, һүҙ ыңғайынан беленә. Шул мәлдән тороп билдәләгән хәл булғас, *йылынған ине* тиергә кәрәк.

*Ниндәйҙер шомло тынлыҡ урынлашҡайны бында* (Й., 11.07.96) тигән һөйләмдә, үткән замандағы мәлдән то-

роп, шуға ҡәҙәр булған хәл тураһында һүҙ алып барыла, шуға күрә бында ла *-ған ине* формаһын ғына ҡулланырға мөмкин.

Ошо ике форманы яңлыштырыу, яҙышҡан кешеләрҙең ғәйебенән бигерәк, грамматик хеҙмәттәрҙең хатаһынан килә. Тел сараһын тейешенсә тикшереп, асыҡлап бөтмәгән көйө ҡағыҙға сығарып, шул ҡағыҙҙәне нормаға әйләндереү кешене яҙа юлға төшөрә һәм әҙәби телгә бик ҙур зыян килтерә. Тел бик ҡатмарлы, бик нескә нәмә. Уны тикшергәндә һәм яҡтыртҡанда бик һаҡ, бик һиҙгер булмаһаң, хаталанып китергә лә мөмкин. Төп ғәйеп бер эшләгән хатаны төҙәтмәҫкә, дөрөҫ һүҙҙе ишетмәҫкә тырышып, ныҡышып ятыуҙан ғибәрәт. Шул кеҙелек арҡаһында Ә. Мансурҙың 30-сы йылдар башында яһаған хаталары эштән эшкә, дәреслектән дәреслеккә күсеп, һаман төҙәтелмәй килә.

## КИЛӘСӘК ЗАМАН *-САҠ* ФОРМАҺЫ

Грамматик хеҙмәттәрҙә *-саҡ* ялғауы менән яһалған форма иң элек сифат ҡылым, шунан һуң хәбәр ҡылым формаһы тип иҫәпләнә. Ләкин был форма халыҡ телендә, *Беҙгә мәңге көн буласаҡ түгел; Ул кешегә ғүмерҙә барасағым юҡ* тигән һымаҡ, бик ҡәтғи мәғәнәлә әйткәндә һәм, *киләсәк, аласаҡ, бирәсәк* тигән кеүек, исемләшкән һүҙҙәрҙә генә йөрөй. Халыҡ телендә шулай бик билдәле урында ғына ҡулланылған был форманы хәҙерге яҙма телдә ифрат активлаштырып ебәрҙеләр. Был, әлбиттә, яҡшы түгел. Ҡалай ғына булмаһын, халыҡ теле — әҙәби яҙма телдең нигеҙе, унда булмаған нәмәне көсләп индереү яҙма телде матурламай. Өҫтәүенә, тәүге мәктәп дәреслектәрендә үк, *-саҡ* формаһы бер эштең эшләнәсәге ышанысла булыуын белдерә, юҡлыҡ формаһы *түгел* һүҙе менән яһала, тип әйтелһә лә, хәҙерге яҙма телдә уны берҙән-бер киләсәк заман формаһы итеп бөтә ерҙә ҡулланыла, юҡлыҡ формаһын *алмаясаҡ* тип *-ма* ялғауы менән генә яһап йөрөтә башланылар. Ғәмәлдә был *-ма* ялғауын, исем ҡылымға һәм *-ыусы* формаһына ҡушып булмаған кеүек, киләсәк заман *-саҡ* формаһына ҡушыу ҙа дөрөҫ булмай. Ҡәтғи мәғәнәләге *-саҡ* формаһы *уны аласаҡ түгел, уны аласағы юҡ* тигән ҡәтғи юҡлыҡ формаһын ғына ҡабул итә.

Иң элек сифат ҡылым булып йөрөй тиелһә лә, тикшерелгән миҫалдар *-саҡ* формаһының сифат ҡылым урынында һирәк йөрөгәнен күрһәтә. Мәҫәлән,

*Күмертау егеттәре фестиваль үтәсәк урынды... алдан уҡ сүп-сарҙан таҙартып ҡуйған* (Й., 25.07.96) тигән һөйләмдәге *үтәсәк* һүҙе тәбиғи аныҡлаусы була алмаған.

*Бөгөн һөйләшәсәк ваҡиға уның тураһында түгел* (Б., 16.08.96);

*Мөхтәриәтте тамырынан киҫәсәк әлеге «ҡәтғи саралар» ҡулланыу нимәне аңлата?* (А., 96, 6, 42);

*Каруанһарай төҙөү өсөн башҡорт халҡынан йыйыласаҡ аҡса... күҙ уңында тотола* (Й., 10.10.96) тигән һөйләмдәрҙә лә *һөйләшәсәк, киҫәсәк, йыйыласаҡ* һүҙҙәре аныҡлаусы булып бик үк йоҡмай. Киләсәк заман *-саҡ* формаһының сифат ҡылым булып йыш йөрөмәүе уның ныҡ ҡәтғи мәғәнә йөрөтөүенән килә. Килтерелгән миҫалдарҙағы сифат ҡылымдарҙың береһе лә ҡәтғи мәғәнә талап итмәй. Грамматик хеҙмәттәрҙәге *ҡалаға барасаҡ автобус, беҙгә киләсәк ҡунаҡ, уҡыясаҡ студент, йөрөйәсәк поезд, көрәшәсәк йылдар* тигән миҫалдарҙа ул форма сифат ҡылым урынына көсләп ҡуйылған. Бер мәктәп дәреслеге сифат ҡылым булып килгән *-саҡ* формаһына миҫал тапмағас, *Бөгөн эшләйәсәк эште иртәгә ҡалдырма* тип хатта халыҡ мәҡәлен боҙоп алырға мәжбүр булған. Телдең сараһы етәрлек, уны ирекһеҙләргә, үҙең теләгән яҡҡа көсләп шаҡарырға ярамай. Шаҡарғылап уны йүнәтеп булмай, һындырырға ғына мөмкин.

Башҡорт телендә киләсәк заман сифат ҡылымы ғәҙәттә *-ыр* һәм *-һы* ялғауҙары менән яһала. Халыҡ бер ваҡытта ла *эшләйәсәк эш* тип әйтмәй, ә *эшләр эш, барыр ер, ашар аҙыҡ, торор урын, күрәһе көн, алаһы аҡса, киләһе кеше, йөрөйһө юл* һ. б. тип һөйләй. Шул рәүештәге һүҙ бәйләнештәрендә ниҙеңдер тәбиғи сифатын, даими билгеһен аңлатҡан сифат ҡылымға *-ыр/-ер, -ор/-өр* ялғауы урынына *-ар/-әр* ялғауы ҡушыла: *осар ҡош, эсәр һыу* һ. б. (*Янартау* тигән һүҙ шундай һүҙ бәйләнешенән яһалған). Шунан тыш, башҡорт телендә киләсәк заман сифат ҡылымы урынына ҡуллана торған тағы бер форма бар. Ул хәҙерге заман хәбәр ҡылымы менән *торған* тигән сифат ҡылымдан яһала: *хәл итә торған мәсьәлә, әйтә торған һүҙ, үтәй торған бурыс* һ. б. Халыҡ телендә йөрөгән ошо өс форма, *-саҡ* формаһын килешмәгән ергә көсләп индермәйенсә лә, киләсәк заман сифат ҡылымына булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндерә ала. Шулай булғас, телдең үҙ яйын һаҡларға, үҙ байлығын тотош файҙаланырға кәрәк.

Сифат ҡылым булып һирәк йөрөгән *-саҡ* формаһы хәбәр ҡылымдың киләсәк заманы булып та бер фекерҙе бик ҡәтғи рәүештә әйтергә кәрәк булғанда ғына йөрөй ала. Йөрөгән хәлдә лә, ул, юғарыла әйткәнсә, күберәк ваҡыт *түгел* һәм *юҡ* тигән модаль һүҙҙәр менән яһалған юҡлыҡ формаһында йөрөй. Шуның өсөн,

*Берлинға барып етмәйенсә, һуғыш тамамланасаҡ түгел* (А., 96,86, 40);

*Әсәй, мин малды тапмайынса, кире ҡайтасаҡ түгелмен* (А., 96, 1, 145) тигән һөйләмдәрҙә был форма дөрөҫ ҡулланылған. Ләкин шундай уҡ ҡәтғи мәғәнәләге

*Үҙәк приказ бирһә лә, ул барыбер үтәлмәйәсәк* (А., 96, 4, 75) тигән һөйләмдә юҡлыҡ формаһын *үтәләсәк түгел* тип;

*Был халыҡ бер ваҡытта ла теҙ сүкмәйәсәк* (Й., 12.09.96) тигән һөйләмдә *теҙ сүгәсәк түгел* тип;

*Баштарыбыҙҙы киҫһәң дә, мосолманлыҡтан ҡайтмаясаҡбыҙ* (Б., 13.11.96) тигән һөйләмдә *ҡайтасаҡ түгелбеҙ* тип тейешенсә алмай, авторҙар хата эшләгән.

Барлыҡта ҡулланыр өсөн *-саҡ* формаһының ҡәтғилегенә нигеҙ бирерлек үҙенә башҡа шарт кәрәк. Мәҫәлән,

*Был һуғышта ҡылынған гонаһтар тере ҡалғандарҙың хәтерендә мәңге һаҡланасаҡ* (Й., 12.09.96) тигән һөйләмдә шул кәрәкле шарт бар һәм *-саҡ* формаһындағы хәбәр ҡылымды ҡулланып була. Был форманы ошоноң һымаҡ урында ҡулланғандан бәлә булмаҫ ине. Бөтә бәлә беҙҙең хәҙерге яҙма телдә киләсәк заман мәғәнәһендә гел генә *-саҡ* формаһын йөрөтә башлағандан килә. Киләсәк заман хәбәр ҡылымының *-ыр* ялғауы менән яһалған төп формаһын хәҙер онотоп бөтөп баралар. Шунан башҡа, һүҙ ыңғайынан киләсәк заманда булаһы эш-хәрәкәттең күҙҙә тотолғаны аңлашылып торғанда, хәҙерге заман *-а/-й* формаһы киләсәк заман мәғәнәһендә йөрөй ала. Уны бөтөнләй иҫәпкә алмайҙар. Был ғәҙәт әҙәби яҙма телде ярлыландыра, боҙа, дөйөм мәғәнәгә бик ныҡ зыян итә. Мәҫәлән,

*Ауыл эсендәге урамдар ҙа ялтырап торасаҡ* (Б., 19.07.96) тигән һөйләмдә ҡәтғи итеп әйтеүҙең бер кәрәге лә юҡ. Ҡәтғи форма бында шәхестең хыялын, хис-тойғоһон юйып, һүҙен ҡырҡыулаштырып ҡуйған.

*Әсмә күрһә, ... бөтә ҡалаға фаш итәсәк* (А., 96, 7, 13) тигәндә лә *-саҡ* формаһы урынһыҙ. Бының һымаҡты ғәҙәттә *фаш итер* тип кенә әйтәләр.

*Һуғыш шаңдауы булып 50 йыл тирәһе миналар ярылып торасаҡ әле* (Й., 12.09.96) тигән һөйләмдәге фекерҙе фараз рәүешендә *ярылып торор әле* тип әйтергә кәрәк булған.

*Тиҙ генә, ҡапыл ғына яҡшырып китмәҫ әле. Киреһенсә, тормош тағы ла ауырлаша төшәсәк* (Ш., 96, 2, 129) тигәндәге тәүге һөйләмдең хәбәре юҡлыҡтағы *-ыр* формаһы менән килгән, ә икенсе һөйләмдең хәбәре *-саҡ* формаһы менән бирелгән. Аллы-артлы торған ике һөйләмдә хәбәр формалары ярашып торорға тейеш. Шунан тыш, бында *-саҡ* формаһы менән ҡәтғи итеп әйтер өсөн нигеҙ юҡ, *ауырлаша төшөр* тип әйткәндә генә һүҙҙең формаһы мәғәнәһенә тап килә. Шул уҡ нәмә юҡлыҡ формаһын ҡулланғанда ла ҡабатлана. Формаһы мәғәнәһенә тап килһен өсөн,

*Бөгөнгө юлымдан сигенмәйәсәкмен* (Б., 31.07.96) тигән һөйләмдә *сигенмәм* тип;

*Был әҙәм ҡулына бер эләккәнде һис ысҡындырмаясаҡ* (А., 96, 56 142) тигән һөйләмдә *ысҡындырмаҫ* тип;

*Райпо кибетенә ингән кеше буш ҡул менән сыҡмаясаҡ* (Б., 26.07.96) тигән һөйләмдә *сыҡмаҫ* тип;

*Беҙҙекеләрҙе туҡтатырлыҡ көс булмаясаҡ* (А., 96, 8, 40) тигән һөйләмдә *көс булмаҫ* тип;

*Ул уны бер кемгә лә бирмәйәсәк... Юҡ! Бул*[illegible]*ҡ!* (Ш., 95, 4, 42) тигән һөйләмдә *бирмәҫ, булмаҫ* тип ха[illegible] гелендәгесә яҙырға кәрәк булған.

Грамматик хеҙмәттәрҙә киләсәк заман хәбәр ҡылымының *-ыр* формаһын билдәһеҙ киләсәк заман тип бер ҙә дөрөҫ атамайҙар. Ул — билдәле һәм урыны менән бик ҡәтғи мәғәнәгә эйә була ала. Шуның өсөн халыҡ бер ваҡытта ла *Юҡ! Булмаясаҡ!* тип әйтмәй, *Юҡ! Булмаҫ!* ти.

Халыҡ телендә *-саҡ* формаһының ҡулланышы бик сикле булғанда, айырым кешенең йәки әҙәби шәхестең теленә шул форманы индереп һүҙ һөйләтеү бигерәк килешмәй.

— *Башығыҙҙы киҫәсәкмен, булдыҡһыҙҙар!* (А., 96, 2, 93) тип башҡорт кешеһенең әйтеүе мөмкин түгел, ул *башыңды киҫермен* тип әйтә. Шулай уҡ башҡорттар,

— *Һин үкенәсәкһең!* (Ш., 95, 4, 48) тип әйтмәй, *үкенерһең* ти;

— *Яҡшы сәләмдәрҙе мотлаҡ еткерәсәкбеҙ* (Б., 10.07.96) тип әйтмәй, *еткерербеҙ* (дөрөҫө: *тапшырырбыҙ)* ти.

Ауылдағы башҡорт ҡатыны һис кенә лә:

*...Ул өшәне һандыҡ төбөнә һалып ҡуясаҡмын. Ошо ризыҡ һинең ҡайтыуыңды көтөп ятыр* (Б., 26.12.96) тип әйтмәҫ, *һалып ҡуйырмын* тип әйтер ине. Башҡорт кешеһенән үҙе әйтмәҫлек итеп һүҙ әйттереү яҙма телде боҙоуға ғына түгел, халыҡ телен боҙоп күрһәтеүгә килтерә. Шул боҙолған телдән сығып грамматик хеҙмәттәр, мәктәп дәреслектәре яҙыла һәм норма булып яҙма телгә кире әйләнеп ҡайта.

Шундай урау юл үтеп, танымаçлыҡ хәлгә килгән тел халыҡ теленең нигеҙен барған һайын ныҕыраҡ ҡаҡшата.

Яҙма тел киләсәк заман мәғәнәһендә хәҙерге заман *-а/-й* формаһын ҡуллана торған бөтә ерҙә хәҙер *-саҡ* формаһына күсеп бөттө. Мәçәлән,

*Саманы онотҡаным өсөн иртәгә быларҙан миңә әләгәсәк инде* (А., 96, 9, 24) тигән һөйләмдә *иртәгә* тип ваҡыты күрһәтелгәс, *-саҡ* формаһының бөтөнләй кәрәге юҡ. Былдай һүҙҙе халыҡ, *миңә эләгә инде* тип әйтә.

*Ағас бысыу цехы оҙаҡламай аяҡҡа баçасаҡ* (Ш., 96, 36, 109) тигәндә *оҙаҡламай* һүҙе киләсәкте күрһәтә, шулай булғас, бында ла *аяҡҡа баçа* тип ҡолаҡҡа йоғошло итеп әйтеп була.

*Саша, Саша... һуғыштан иçән-һау ҡайтһам, мотлаҡ һинең Полтавщинаңа барасаҡмын... Барасаҡмын... Барасаҡмын...* (А., 96, 8, 81) тигәндә *иçән-һау ҡайтһам* тигән һүҙ эште киләсәккә күсерә, шуға күрә *барам* тип хәҙерге заман формаһын ҡулланып була.

*Ҙур үçһәм, самолетҡа ултырам да, һәр ергә йөрөп, концерттар ҡуясаҡмын* (Й., 25.06.96) тигәндә бәләкәй баланан *-саҡ* формаһы менән әйттереү бер хилафлыҡ булһа, *ултырам да — ҡуясаҡмын* тип ике хәбәрҙе ике төрлө форма менән биреү икенсе хилафлыҡ булған. Бында *ҙур үçһәм* тигән һүҙ эшләр эште киләсәккә күсергәс, *концерт ҡуям* тип әйтелергә тейеш.

*Рәсим педагогия институтының филология факультетында ситтән тороп уҡый. Быйыл икенсе курсты тамамлаясаҡ* (А., 96, 2, 74) тигәндә лә автор, киләсәктә була торған эш тураһында *-саҡ* формаһы менән әйтергә кәрәк, тип уйлаған. Ә халыҡ был урында *тамамлай* тип әйтә.

Хәҙерге заман формаһы киләсәккә тоçҡаған һүҙ булғанда ғына түгел, һүҙ барышынан һәм шул мәлдәге хәлдән киләсәк ваҡытты күҙҙә тотҡандары аңлашылып торғанда ла киләсәк заман мәғәнәһендә иркен ҡулланыла.

*...һәр саҡ маҡтанылар... Лилиә мотлаҡ йырсы буласаҡ тиҙәр ине* (Й., 16.07.96) тигән һөйләмдең мәғәнәһенән киләсәк эш тураһында һүҙ барғаны аңлашылып тора, тимәк, улар *йырсы була* тип әйтергә тейеш булған.

*— Ашҡаҙар буйында? Шәп! Балыҡҡа йөрөргә яҡын буласаҡ икән* (А., 96, 2, 152);

*— Һеҙ аңламайһығыҙ. Унда бит һеҙҙе индермәйәсәктәр* (А., 96, 1, 19);

*— Беҙ барыбер бергә булмаясаҡбыҙ* (Ш., 96, 4, 109) тигән миçалдарҙа *-саҡ* формаһы йәбешмәй, өсөһөндә лә *-а/-й* формаһы кәрәк. Шул *-саҡ* формаһын,

*Мин уны (Ҡыш бабайҙы) матур костюм кейеп ҡаршы аласаҡмын, үҙенә кәнфит бирәм, ә ул балаларға күп итеп уйынсыҡтар бүләк итәсәк* (Б., 31.12.96) тип 4—5 йәшлек баланан;

*(Ҡыш бабайҙың) үҙенә... һүрәт бүләк итәсәкмен* (Б., 31.12.96) тип 6 йәшлек баланан әйттереү бигерәк үлсәүгә һыймай.

Ҡайһы берҙә бер телмәр эсендәге эргәләш килгән һөйләмдәрҙең хәбәрен мәғәнәһенә ҡарап *-ыр* һәм *-а/-й* формалары менән әйтергә кәрәк була. Һүҙҙең барышы, телдең яйы шулай ике төрлө форма талап итә. Ләкин хәҙерге яҙма телдә шуны айырмай, бөтәһен дә бер *-саҡ* формаһы менән бирәләр. Мәҫәлән,

*Тәүге мәлдә уңайлыҡтар тамашасы өсөн генә тыуҙырыласаҡ, артистарға ҡыйынғараҡ тура киләсәк. Әлегә артистарҙың бүлмәләре икенсе, өсөнсө, дүртенсе ҡаттарҙа урынлашасаҡ* (Б., 22.11.96) тигән өҙөктә алдағы эш хаҡында хәбәр ителгәне аңлашылып тора, *-саҡ* формаһы менән ҡәтғиләштереп һөйләр өсөн бында һис бер нигеҙ юҡ. Һүҙҙең ыңғайы буйынса, *тыуҙырыла* (дөрөҫө: *булдырыла), тура килер, урынлаша* тип ике төрлө заман формаһында алырға кәрәк. Шул саҡта ғына мәғәнә менән форма үҙ-ара яраша ала.

*Мәскәү барыбер тынғы бирмәйәсәк, тимәк, тағы ауыр көндәр киләсәк* (А., 96, 3, 56) тигән һөйләмдә *тынғы бирмәҫ, ауыр көндәр килә* тип тағы ике төрлө форма менән әйтелергә тейеш. Мәғәнә ыңғайы шуны талап итә.

*Иҫән булһам, йәнә Цхалтубаға киләсәкмен, бына шул саҡ мотлаҡ һеҙҙең ауылға барып сығасаҡмын* (А., 96, 8, 62) тигән хәбәрҙе лә *Цхалтубаға киләм, барып сығырмын* тип *-а* һәм *-ыр* формалары менән алғанда дөрөҫ була.

Яҙма телдә теләк ҡылымының *-маҡсы* формаһы урынына ла *-саҡ* формаһын ҡулланып, йыш ҡына хата яһайҙар, хатта ул теләк формаһын хәҙер оноттолар тиергә мөмкин.

*Китаптар күргәҙмәләре ойошторол, беҙ ҙә үҙ әҙәбиәтебеҙҙең хазиналары менән таныштырасаҡбыҙ* (Й., 9.07.96) тигән һөйләмдең теләкте белдергәне аңлашылып тора, шуға күрә бында *таныштырмаҡсыбыҙ* тип әйтергә кәрәк булған.

*Һеҙҙең менән асыҡтан-асыҡ һөйләшәсәкмен* (А., 96, 1, 31);

*Диспансерҙан сыҡҡас, тиҙ арала йәшәү урынымды үҙгәртәсәкмен* (Б., 2.08.96) тигән һөйләмдәрҙә шулай уҡ теләк белдерелә, бында ла *һөйләшмәксемен, үҙгәртмәксемен* тип теләк формаһын ҡулланыу талап ителә.

Башҡорт яҙма телендә гел бер генә киләсәк заман формаһын йөрөтөү һаман да баяғы урыҫ теленә эйәргәндән килә. Урыҫса уйлап, һөйләмдәрҙе урыҫса төҙөп, урыҫ теленең киләсәк заман формаһына бөтә ерҙә *-саҡ* формаһын тап килтереп яҙыу арҡаһында башҡорт теленең киләсәк заман мәғәнәһен бирә торған башҡа формалары күҙҙән төшөрөлә, һәм төрлө төҫтәге биҙәктәре, яғымлы көйө менән күңелгә яғылып торған йомшаҡ тел саҡылдата һуғып, ҡолаҡты ярып алып килгән ят, ҡаты телгә әйләнә.

Халыҡта *көй айырыу* тигән һүҙ бар. Көй айырмаған кеше йырламай, йырлаһа ла уны бер кем тыңлай алмай. Йырҙың көйө булған кеүек, телдең дә үҙ көйө бар. Уның да көйөн айыра белергә, күңелең менән ишетеп өйрәнергә кәрәк. Шул саҡта ғына туған телде рәнйетмәй, зәғифләмәй, матур, дөрөҫ итеп яҙыу оҫталығына өлгәшеп була.

# ҠЫЛЫМДЫҢ ҠАЙТЫМ ҺӘМ ТӨШӨМ ЙҮНӘЛЕШТӘРЕ

Ҡылымдың ҡайтым йүнәлеше *-н* ялғауы менән яһала. Ул эш-хәрәкәтте шәхестең йәки башҡарыусының үҙенә ҡайтара. Мәҫәлән, *Ул йыуынды* тип әйтәбеҙ икән, был һүҙ *үҙен үҙе йыуҙы* тигән мәғәнәне үҙ эсенә ала. Шуның кеүек, *кейенеү, ҡырыныу, биҙәнеү, ураныу, сабыныу, йөкмәнеү* тигән һүҙҙәр эш-хәрәкәттең шәхескә йәки башҡарыусыға ҡайтҡанын, ә *тегенеү, ташыныу, ашаныу, уҡыныу, соҡоноу* тигән һүҙҙәр шәхестең ниндәйҙер бер эште үҙ алдына үҙе башҡарғанын аңлата. Ҡайтым йүнәлешендәге ҡылымдың мәғәнәһе һүҙенә һәм урынына ҡарап төрлө булырға мөмкин. Был йүнәлеш формаһына һәр ҡылымды ҡуйып булмай, *һуғыу, ярыу, эсеү* тигән кеүек күп ҡылым уны ҡабул итә алмай. Шуға күрә был форманы ҡайһы ҡылым ҡабул итеп, ниндәй мәғәнә алғанын тотош тикшереп сығыу үҙе ҙур эш, ул беҙҙең маҡсатҡа инмәй. Беҙҙең маҡсат уны дөрөҫ ҡулланмай, хата яһаған ерҙәрҙе күрһәтеүҙән ғибәрәт. Ул хаталар ҡайтым йүнәлешендәге ҡылымдың башҡарыусыға кире ҡайтҡан эш-хәрәкәтте белдергәндә генә ҡулланылғанын, башҡа нәмәгә йүнәлтелгән эш-хәрәкәтте белдергәндә уны ҡулланырға ярамағанын төшөнөп бөтмәгәндән хасил була.

Беҙҙең әҙәби әҫәрҙәрҙә, мәҫәлән, *Ул тунын кейенде* тигән кеүек һүҙ йыш осрай. Бында ҡайтым йүнәлешендәге *кейенде* һүҙе *тунын* тигән тултырыусыға йәбешмәй, ул эш-хәрәкәтте туранан-тура шәхестең үҙенә ҡайтара. Шуның өсөн йә *Ул кейенде* тип, йә *Ул тунын кейҙе* тип төҙәткәндә генә ҡылымдың формаһы менән мәғәнәһен яраштырып була.

*Һиңә хаттар* (дөрөҫө: *хат) яҙып ҡына йыуанам, ... һыуыҡ фатирым йылынып ҡалғандай була* (Б., 24.09.96) тигән һөйләмдә *йыуанам* тип ҡайтым йүнәлешендәге ҡылым дөрөҫ ҡулланылған: ул эш-хәрәкәтте шәхестең үҙенә ҡайтара. Ә *йылынып ҡалғандай була* тип әйткәне дөрөҫ булмаған, сөнки *фатир* үҙенән-үҙе йылынмай йәки үҙен-үҙе йылытмай, уны шәхестең тойғоһо йылыта йәки йылытҡандай итә. Шуға күрә *фатирым йылып ҡалғандай була* тип әйтеү дөрөҫ була. Шуның кеүек үк,

*Тирә-йүн йылынып киткәндәй* (А., 96, 6, 10) тип әйтеү ҙә дөрөҫ түгел. Бында ла *тирә-йүн* үҙенән-үҙе йылынмай, уны башҡа нәмә йылыта. Дөрөҫ булһын өсөн *йылып киткәндәй* тиергә кәрәк.

Яҙма телдә *көн йылынды, өй йылынды, һыу йылынды* тип күп ваҡыт *йылыу* ҡылымының ҡайтым йүнәлешен яңлыш ҡулланалар. Ғәмәлдә бындағы *көн, өй, һыу* йәки шуның кеүек башҡа нәмә үҙенә ҡайта торған эш башҡармай, башҡа нәмәнең тәьҫире менән улар йылы хәлгә килә, йәғни *йылый*. Үткән заман формаһында шул *йылынды* тип түгел, *йылыны* тип әйтелә: *көн йылыны, өй йылыны, һыу йылыны* һ. б.

*...Тәне ваҡыт-ваҡыт ҡалтыранып ҡуйҙы* (А., 96, 1, 46);

*Үҙе тауышы ҡалтыранып һөйләшә* (Б., 22.11.96) тигән һөйләмдәрҙә лә *ҡалтыранып* тип ҡайтым йүнәлеш формаһын хата ҡулланғандар, сөнки унда *тән* һәм *тауыш* үҙенә кире ҡайтҡан хәрәкәт башҡармай, үҙен-үҙе ҡалтыратмай, ә үҙе шундай хәрәкәткә килә. Кешенең тәне менән тән ағзаларының хәрәкәте ғөмүмән ҡайтым йүнәлешендәге ҡылым менән түгел, ә *тәне дерелдәй, тәне һыҙлай, тауышы ғыжылдай, тауышы яңғырай* тигән кеүек, һәр ваҡыт төп йүнәлештәге ҡылым менән бирелә. Килтерелгән миҫалдарҙа ла *Тәне ваҡыт-ваҡыт ҡалтырап ҡуя; һөйләшкәндә тауышы ҡалтырап тора* тип төп йүнәлештәге ҡылым менән әйтеү дөрөҫ була. Беҙҙең яҙма телдә нишләптер *йылыу, ҡалтырау* һымаҡ бер нисә ҡылымды кәрәкмәгән ерҙә ҡайтым йүнәлешендә алыу ғәҙәткә инеп киткән.

*Бына ҡылыс киҙәнеп, Ғүмәр... килә башланы* (Б., 13.11.96) тигән һөйләмдәге *киҙәнеү* һүҙе ҡайтым йүнәлешендә булғас, эш-хәрәкәтте *ҡылыс* тигән тултырыусыға бәй-

ләп булмай. Тейешле мөнәсәбәткә килтерер өсөн *ҡылыс болғау* йәки *ҡылыс менән киҙәнеү* тиергә кәрәк.

*Күңеле-йәне менән ул... буй еткеһеҙ бейеклектәрҙә ҡанат ҡағына* (Б., 30.07.96) тигән һөйләмдә лә *ҡанат ҡағына* тип әйтеп булмай, *ҡанат ҡаға* тиһәң генә дөрөҫ була.

*Аулағыраҡ урам саттарында ла ул бер алдына, биш артына ҡарана* (Б., 27.08.96) тигән һөйләмдә эш-хәрәкәтте *бер алдына, биш артына* йүнәлткәс, ҡайтым йүнәлешендәге ҡылым тура килмәй, сөнки ҡайтым йүнәлеше эш-хәрәкәтте бер нәмәгә лә йүнәлтмәй, шәхестең үҙенә ҡайтара. Бында *ҡарай* тигән форманы ғына ҡулланып була.

*Ул бөтә этлектәрҙең күршеһе менән бәйле икәнен һиҙенә ине* (Б., 10.07.06);

*Шулай булырын үҙем дә һиҙенә инем* (А., 96, 6, 58) тигән һөйләмдәрҙә шулай уҡ тултырыусылар бар, ҡайтым йүнәлешендәге ҡылымды уларға бәйләп булмай, бәйләр өсөн *бәйле икәнен һиҙә ине, шулай булырын һиҙә ине* тип ҡылымдың йүнәлеш формаһын үҙгәртергә кәрәк.

*Исхаҡ ситкә тайшанып, еңгәһен үткәреп ебәрә, үҙе солан ишегенә һөйәлә* (А., 96, 1, 38) тигән һөйләмдә ҡайтым йүнәлеше урынына *һөйәлә* тип төшөм йүнәлешендәге ҡылым ҡуйылған. Был хата ла яҙма телдә бик йыш осрай. Кемдер үҙен-үҙе бер нәмәгә һөйәгән икән, ул хәрәкәтте, *Егет бағанаға һөйәнде* тип ҡайтым йүнәлешендәге *һөйәнеү* һүҙе менән, ә ниҙелер бер нәмәгә һөйәп ҡуйғандар икән, *Көрәк бағанаға һөйәлгән* тип төшөм йүнәлешендәге *һөйәлеү* ҡылымы менән әйтергә кәрәк булғанын яҙышҡан кешеләр төшөнә алмай аптырай. Ҡайтым йүнәлешен төшөм йүнәлеше менән бутарға ярамай.

Төшөм йүнәлешенең төп күрһәткесе булып *-л* ялғауы хеҙмәт итә, ләкин һүҙҙең һуңғы ижегендә йәки ике ижекле һүҙҙәге тәүге ижектең аҙағында *л* өнө булһа, төшөм йүнәлеше *-н* ялғауы менән яһала. Ул һөйләмдәге тултырыусыны эйә урынына күсереп, өҫкә сығара, әммә шул саҡта был тултырыусы эш башҡарыусы булып китмәй, ә эш-хәрәкәтте үҙенә ҡабул иткән нәмә булып ҡала. Мәҫәлән, *Кеше көрәкте бағанаға һөйәгән* тиһәк, эш башҡарған кеше эйә булып, *көрәк* тултырыусы булып, һәр һөйләм киҫәге үҙ урынында тора. Шуны *Көрәк бағанаға һөйәлгән* тип үҙгәрткәндә, йәғни ҡылымды төшөм йүнәлешенә күсергәндә, *көрәк* һүҙе һөйләмдең эйәһе булып китә, ләкин эш башҡарыусы була алмай, һаман да эш-хәрәкәт уға йүнәлтелгән көйө ҡала. Эш башҡарыусы бында билдәле йәки билдәһеҙ булырға мөмкин. Билдәле булғанда, һөйләмгә ул ғәҙәттә *тарафынан*

тигән һүҙ менән индерелә: *Көрәк бағанаға кеше тарафынан һөйәлгән.*

Төшөм йүнәлешенең ҡулланышы киң таралмай. Бигерәк тә күсемле ҡылымдың төшөм йүнәлешен сифат ҡылым формаһына ҡуйып, һөйләмдә аныҡлаусы итеп ҡулланыу телгә йоҡмай, сөнки күсемле ҡылымдың төп йүнәлештәге сифат ҡылымы ла тейешле мәғәнәне яҡшы бирә һәм артыҡ грамматик форма менән телде ҡатмарлаштырыу кәрәк булмай. Мәҫәлән,

*Тимер юлдарында йыш ҡына сөгөлдөр тейәлгән составтар тора* (А., 96, 1, 104) тигән һөйләмдә *сөгөлдөр тейәлгән* тип түгел, *сөгөлдөр тейәгән составтар* тип әйтеү телдең ыңғайына ла, мәғәнәгә лә яҡшы яуап бирә, сөнки сөгөлдөрҙө *тейәгәндәр.*

*Ҡаҡланған сусҡа ите халыҡ күңеленә хуш килде* (Й., 18.10.94) тигәндәге *сусҡа итен* ҡаҡлағандар, шул һүҙҙән алып, *ҡаҡлаған сусҡа ите* тип әйтеү дөрөҫ була. Халыҡ *ҡаҡлаған ит* ти.

*Ильяс менән Хыҙыр бәйғәмбәрҙәр — Аллаһы тәғәләнең ерҙә ҡалдырылған илселәре* (Б., 14.09.96) тигәс, һөйләм пассив төҫ ала. Аллаһы тәғәлә уларҙы *ҡалдырған* икән, *ҡалдырған илселәре* тип әйтелергә тейеш.

*...Ғилми-тикшеренеү үҙәге(нең) яҙмышы тураһында борсолоп яҙылған хаттар күп килә* (Б., 1.08.96) тигәндә лә *яҙылған* һүҙе тейешле мәғәнәне бирмәй. Хат *яҙғандар* икән, *борсолоп яҙған хат* тип әйтергә кәрәк.

*Тәүге аҙым яһалған дүрт йыл осорон был бизмәнгә һалып үлсәү иртәрәктер әле* (Й., 18.10.94) тигәндәге *яһалған* һүҙе шулай уҡ мәғәнәгә тап килмәй. Эш башҡарыусылар үҙ урынын алһын өсөн *тәүге аҙым яһаған дүрт йыл* тип әйтеү дөрөҫ була.

Төшөм йүнәлешенең *-л* һәм *-н* ялғауҙары бер-береһен алмаштыра алмай. Мәғәнәләре бер булһа ла, һәр береһенең үҙ урыны бар. Шуға күрә,

*Был турала советтар яғы менән килешенгән* (А., 96, 4, 72) тип *-л* урынына *-н* ялғауын ҡуйып булмай.

Ҡайһы берҙә төшөм йүнәлешенең ялғауын ҡатландырып, ҡушарлатып ҡуйырға кәрәк саҡтар була. Быға урын биреү булһа ла, килешкән-килешмәгәнен ҡарап эш итергә кәрәк.

*Сәхнә коробкаһы бейегерәк тә, киңерәк тә итеп эшләнелә* (Б., 22.11.96) тигәндә ялғауҙы ҡушарлатыу урынһыҙ. Бында ул тейешле мәғәнәгә тап килмәй.

Төшөм йүнәлешенең ялғауын кәрәкһеҙгә ҡушарлатып ҡуйыу бигерәк тә ҡушма ҡылымдарҙа йыш осрай. Мәҫәлән,

*Малдар өсөн ялан кәртә әйләндерелеп алынған* (Б., 19.09.96) тигән һөйләмдәге *әйләндерелеп алынған* һүҙенең нигеҙендә *әйләндереп алыу* һүҙе тора. Шул ҡушма ҡылым бер бөтөн һүҙ хеҙмәтен үтәй. Уны төшөм йүнәлешенә күсерер өсөн *-н* ялғауын икенсе һүҙенә генә ҡушып, *әйләндереп алынған* тип әйтергә кәрәк.

*Бөтә ашлыҡ имен-аман һуғылып алынды* (А., 96, 6, 132) тигән һөйләмдә лә *һуғылып алынды* һүҙенең нигеҙендә — *һуғып алыу* һүҙе. Төшөм йүнәлешенең *-н* ялғауы ҡушма һүҙҙең икенсе һүҙенә генә ҡушылып, *һуғып алынды* тигән форма яһалырға тейеш.

*Йыллыҡ пландың арттырылып үтәлеүенә өмөт бар* (Б., 24.07.96) тигәндәге *арттырылып үтәлеүе* шулай уҡ *арттырып үтәү* тигән ҡушма ҡылымдан яһалған. Уның төшөм йүнәлеш формаһын *арттырып үтәлеренә* тип әйткәндә генә дөрөҫ була.

*Һәр деталь ентекле һайланып алынған* (А., 96, 8, 161) тигән һөйләмдә *һайлап алыу* һүҙенән *һайлап алынған* тип төшөм йүнәлеше яһарға кәрәк.

Шуның кеүек, төшөм йүнәлеше,

*...Был ерҙәргә көслөк менән күп һанлы урыҫ килмешәктәре килтерелеп ултыртыла* (А., 96, 4, 27) тигән һөйләмдә *килтереп ултыртыу* һүҙенән *килтерелеп ултыртыла* тип түгел, ә *килтереп ултыртыла* тип;

*...Ил һаҡлаусыларҙың исеме мәрмәр таҡтаташҡа яҙылып ҡуйылған* (Б., 18.07.96) тигән һөйләмдә *яҙып ҡуйыу* һүҙенән *яҙылып ҡуйылған* тип түгел, *яҙып ҡуйылған* тип;

*Эремсек ҡыҫтырылып бешерелгән ниндәйҙер милли ҡамыр аштары... ҡуйҙы* (А., 96, 6, 65) тигән һөйләмдә *ҡыҫтырып бешереү* һүҙенән *ҡыҫтырылып бешерелгән* тип түгел, *ҡыҫтырып бешергән;*

*Ғазауатта шәһит булыусыларға ожмахтың түренән урын әҙерләнеп ҡуйылған* (Й., 21.11.96) тигән һөйләмдә *әҙерләп ҡуйыу* һүҙенән *әҙерләнеп ҡуйылған* тип түгел, ә *әҙерләп ҡуйылған* тип яһалырға тейеш.

Тимәк, бер һүҙ берәмеге булып йөрөгән ҡушма ҡылымды төшөм йүнәлешенә күсергәндә, йүнәлеш ялғауы уның икенсе һүҙенә йәки ярҙамлыҡ ҡылымға ғына ҡушыла.

Ҡушма ҡылымды эш-хәрәкәттең башын, аҙағын, дауамын белдергәндә яһала торған *эшләй башлау, уҡып йөрөү, һөйләп бөтөү* тигән һымаҡ ҡатмарлы форма (ҡылым төрҙәре) менән бутарға ярамай. Был урында төшөм йүнәлешенең ялғауы форма яһаған ярҙамлыҡ ҡылымға ҡушылмай, төп мәғәнәне йөкмәгән ҡылымдың үҙенә ҡушыла. Шуға күрә,

*Һәммә эштәр хәл итеп бөтөлмәгән* (А., 96, 6, 75) тип әйтеп булмай, *хәл ителеп бөтмәгән* тиергә кәрәк.

*Мәсет 1846 йылдың авгусында ғына биҙәлеп бөтөлгән* (Й., 16.07.96) тип әйтеп булмай, *биҙәлеп бөткән* тиеү дөрөҫ була.

*Баймаҡ үҙәгендә хеҙмәт хаҡы... сағыштырмаса яҡшы ғына түләнеп килентә* (Й., 13.07.96) тип түгел, ә *яҡшы ғына түләнеп килә* тип әйтелергә тейеш.

*Әсә теле элек-электән ситкә тибелә киленгән* (Б., 19.07.96) тиелмәй, *тибелә килгән* тип әйтелә.

Башҡа грамматик категорияларҙағы кеүек, ҡылымдың ҡайтым йүнәлеше менән төшөм йүнәлешенең үҙ мәғәнәһе, үҙ ҡулланышы бар. Һәр урында формаһы менән мәғәнәһен яраштырып, дөрөҫ ҡулланғанда ғына, улар, телдең яйына килеп, фекерҙе асып, үҙ хеҙмәтен тейешенсә башҡара ала.

## ҺҮҘ ЯЙЫ ҺӘМ ҺӨЙЛӘМ ҠОРОЛОШО

Фекерҙең һөйләмдә сиселгәнен һәр кем белә. Ләкин ни өсөндөр күп кеше дөрөҫ, төҙөк һөйләмдә генә фекерҙе асыҡ итеп сисеп булғанын тейешенсә иғтибарға алмай. Гәзит-журнал мәҡәләләренең генә түгел, әҙәби әҫәрҙәрҙең дә матур, төҙөк тел менән яҙылғаны бик һирәк осрай. Шул арҡала уҡыр нәмәнде уҡый алмаған саҡтар була. Бының төп сәбәбе, әлеге лә баяғы, күҙ йомоп урыҫ теленә эйәргәндән килә.

Һәр телдең үҙ яйы бар. Шуны онотоп, бәләкәсенән ҙурына ҡәҙәр бөтә нәмәне урыҫ теленән күсереү беҙҙең телде ныҡ боҙа. Мәҫәлән, башҡорт телендә *-мы* киҫәксәһе бар. Һөйләмдә *кем?, нимә?, ҡасан?, ҡайҙа?* тигән кеүек һорау һүҙе булмағанда, ул киҫәксә һүҙҙең аҙағына ҡушылып һорау мәғәнәһе бирә. Урыҫ телендә ул юҡ. Урыҫтар *Ты читаешь* тиһә, хәбәр һөйләм була, *Ты читаешь?* тиһә, һорау һөйләм була, йәғни һорауҙы улар тауышын үҙгәртеп кенә аңлата. Беҙҙең ҡайһы бер яҙыусы башҡорт теле менән урыҫ теле араһындағы шул айырманы иҫәпкә алмай, күп ваҡыт *Әллә хәлеңде алдым?* тип яҙып ҡуя.

— *Баш тартаһығыҙ?! — тине ул үҙе лә һиҙмәҫтән* (А., 96, 5, 86) тип улар һорау билдәһе ҡуя ла, башҡортса яҙҙым, тип уйлай.

Урыҫтар ҡайһы берҙә *Об этом вспомцнаю не случайно; Делаю это не впервые* тигән һымаҡ, юҡлыҡ формаһы аша раҫлау ысулын ҡуллана. Беҙҙә шул мәғәнәне *Быны иҫкә алыуым бөтөнләй түгел; Быны эшләгән бар* тигән рәүештә сисеп булыр ине. Әммә яҙыусылар урыҫ теленән «дөрөҫ» күсерергә тырышып, шуны,

*Мин быны осраҡлы ғына иҫкә алып үтмәйем* (Б., 10.07.96);

*Дәүләткә иген һатыу буйынса социалистик йөкләмәләрен үтәүсе районлар хаҡында тәүге тапҡыр ғына сығыштар әҙерләмәйем* (А., 96, 11, 4);

*Быны ул бинахаҡ яҙанан ҡотолоп ҡалыу өсөн генә эшләмәй* (А., 96, 5, 138);

*Күпме кешеләрҙең* (дөрөҫө: *кешенең) башына етмәгән, йәмғиәтте күпме миктәтмәгән ундай яуыз уйлы, хаялы* (дөрөҫө: *хаяһыҙ) бәндәләрҙең мәкере* (А., 96, 3, 126) тип яҙа. Урыҫтар бындай урында *не* киҫәксәһен һөйләмдең хәбәренә түгел, башҡа һүҙенә ҡуша, хәбәргә баҫым яһаған хәлдә лә, уны *ни* киҫәксәһе менән ала *(как ни старался...)*. Ә беҙҙекеләр һөйләмдең хәбәрен юҡлыҡта алып, ни урыҫ теленә, ни башҡорт теленә йоҡмаған мәғәнәһеҙ бер нәмә яһап ҡуя.

Һөйләмдә, бигерәк тә ҡушма һөйләмдә, бер иш һөйләм киҫәктәре бер үк грамматик формала торорға йәки формаль яҡтан ярашырға тейеш. Шунһыҙ һөйләм эсендә бәйләнеш булмай, һүҙ яйы боҙола, фекер бутала. Был — һәр кемгә мәғлүм. Мәғлүм булған көйө күп кеше шуны иҫәпкә алмай, киҫәк-киҫәге төрлө яҡҡа тартылып торған тарау һөйләмдәр ҡороп, үҙе яҙғанды кире әйләнеп уҡып та ҡарамай үткәреп ебәрә. Мәҫәлән,

*Башҡорт хәрби делегацияһының Мәскәүҙәге мөмкинлектәре ярайһы ҙур, үҙҙәренә бүленгән тура телефон аша илдең теләһә ниндәй* (дөрөҫө: *теләгән бер) төбәге менән һөйләшә алалар* (А., 96, 4, 88) тигәндә *башҡорт хәрби делегацияһы* берлектә булғас, уға бәйле һүҙҙәрҙе лә берлеккә ҡуйырға, йәғни *үҙҙәренә* тимәй, *үҙенә* тип, *һөйләшә алалар* тимәй, *һөйләшә ала* тип яҙырға кәрәк ине.

*Үҙ төбәктәрендә йәшеренеп ятыусы* (дөрөҫө: *ятҡан) милли хәрәкәт әһелдәрен, ... хөкүмәт ағзаларын Силәбегә йыйылырға ҡушып, төрлө тарафҡа бойороҡтар, телеграммалар оҙатты* (А., 96, 3, 82) тигән һөйләмдәге *(йыйылырға) ҡушыу* ҡылымы тултырыусының төбәү килештә то-

роуын талап итә, шулай булғас, *милли хәрәкәт әһелдәренә, хөкүмәт ағзаларына* тип әйтелергә тейеш ине.

*Филүс баритоны айырым хислелек, нескәлек, зауыҡлы тембры менән һоҡландыра* (Ш., 96, 3, 119) тигән һөйләмгә *Филүс баритоны һоҡландыра —нимәһе менән?* тип һорау ҡуйһаҡ, тиң киҫәктәрҙең тәүге икеһен дә *хислелеге, нескәлеге* тип эйәлек килеш формаһында алырға кәрәк булғаны күренә.

*Мин Башҡортостанға барып аҡыл һатырға, халҡыбыҙға нисек йәшәргә өйрәтеп йөрөй алмайым*(Б., 22.11.96) тигән һөйләмдең аҙағын яҙғанда башын онотҡанға, *аҡыл һатырға... өйрәтеп йөрөй алмайым* тигән ләғеү һүҙ килеп сыҡҡан.

*Ул редакцияла икенсе йыл ғына эшләп йөрөгән, тормошто, кешеләрҙе бер ҡатлыраҡ аңлаусы йәш журналист ине* (Б., 17.07.96) тигән һөйләмдә аныҡлаусыларҙы бер формаға килтереп, икенсеһен тәүгеһе менән яраштырып, *бер ҡатлыраҡ аңлаған* тип яҙғанда ғына дөрөҫ була.

*Кемде яратҡаныңды, кемдең һинең мөхәббәтеңә рәхмәтле булыуын хәтерлә* (А., 96, 8, 148) тигән һөйләмдәге һөйләм киҫәктәре яраштырылмаған: тәүге тултырыусы *(яратҡаныңды)* сифат ҡылымдан булғас, икенсе тултырыусы ла *рәхмәтле булғанын* тигән формала ғына тора ала.

*Хәҙер донъя бөтөнләй үҙгәрәсәк, ҡайғыларың һыпырып алған кеүек юҡ булыр* (Й., 16.07.96) тигәндәге ике һөйләмдең хәбәрҙәре формаль яҡтан ярашмаған. Бер ҡушма һөйләмдең эсенә ингәс, улар *үҙгәрер — юҡ булыр* тигән рәүештә икеһе ярашып торһа ғына, һөйләм төҙөк була.

*Башҡорт хөкүмәте ағзалары урындағы большевиктар тарафынан ҡулға алына һәм уларҙы Ырымбур төрмәһенә ултыртып ҡуя* (А., 96, 10, 172) тигән һөйләмде ни тип аңларға ла белеп булмай: кем кемде ултыртып ҡуя? Ҡулға алынған хөкүмәт ағзалары үҙен-үҙе ултыртамы? Һөйләмде тейешле рәүешкә килтерер өсөн, *Урындағы большевиктар Башҡорт хөкүмәтенең ағзаларын ҡулға алып, Ырымбур төрмәһенә ултыртып ҡуя* тип яҙырға кәрәк ине.

*Бының өсөн йәштәрҙе түгел, ә шул хәлгә төшөргән башҡаларға дәғүә белдерергә кәрәк* (Б., 19.11.96) тигәндә *башҡалар* тигән һүҙ төбәү килештә торғас, *йәштәр* тигән һүҙҙе лә төбәү килешкә ҡуйырға кәрәк.

*Иҙәндәр күтәрмәнән түргә ҡәҙәр балаҫ менән түшәлгән* (А., 96, 3, 149) тигән һөйләм тотош урыҫтың *Полы от крыльца до передней стены покрыты коврами* тигәненән күсерелгән. Башҡортса *иҙәндәр балаҫ менән түшәлгән* тип әйтеп булмай, *иҙән түшәү* һүҙе иҙәнгә таҡта йәйеүҙе анла-

та. Был урында *Иҙәнгә күтәрмәнән түргә ҡәҙәр балаҫ йәйелгән* тип кенә әйтеп була.

Беҙҙең яҙыусылар урыҫ телендәге *генералы Иванов и Николаев* тигән кеүек һүҙҙе ни тип яҙырға белмәй, һәр ваҡыт *генералдар Иванов һәм Николаев* тип ала. Мәҫәлән,

*Ҡаранай ғәскәрҙәре Алабуға ҡалаһын да ҡамап ала. Бында полковниктар Шәриф Яҡупов, Шәфи Туйғужин, Күҙмәт Ишмәков етәкселек итә* (А., 96, 4, 136) тигәндәге *полковниктар...* урыҫтың *полковники Шариф Якупов, Шафи Туйгузин, Кузмет Ишмаков* тигәненә эйәреп яҙылған. Беҙҙең телдә улай тип әйтеү юҡ. Башҡорттар был урында *Шәриф Яҡупов, Шәфи Туйғужин, Күҙмәт Ишмәков тигән полковниктар* тип әйтә. Шуның кеүек,

*Академиктар Е. Е. Шмидт менән А. Н. Коновалов был диагнозды раҫланы* (Б., 17.09.96) тип түгел, ә *Е. Е. Шмидт менән А. Н. Коновалов тигән академиктар* тип;

*...Тәүге ҡатынынан тыуған улдандары Вәлиулла менән Нәбиуллаға, өйләнешеп башҡа сыҡҡастар, матди ярҙам күрһәтә* (Б., 12.09.96) тип түгел, ә *тәүге ҡатынынан тыуған Вәлиулла менән Нәбиулла тигән улдандарына, өйләнешеп башҡа сыҡҡастары...* тип яҙыу башҡортса була. Миҫалдарҙан күренеүенсә, башҡорттар был урында *тигән* ярҙамлыҡ ҡылымын ҡуйып әйтә. Ләкин ҡайһы берҙә *тигән* ярҙамлыҡ ҡылымын ҡуймай,

*Ильяс менән Хызыр бәйғәмбәрҙәр — Аллаһы тәғәләнең ерҙә ҡалдырған илселәре* (Б., 14.09.96) тип тә әйтәләр. Бында ла дәрәжә-шәрифте күрһәткән һүҙ кеше исемдәренән һуң ҡуйыла, йәғни кеше исемдәре аныҡлаусы, дәрәжә-шәриф һүҙҙәре аныҡланыусы булып килә. Киреһенсә түгел.

Элегерәк Ҡыҙыл Ғәскәрҙең Баш сәрдары байрам менән ҡотлап яҙған бойороғон *Товарищи солдаты, сержанты, офицеры, генералы* тип башлап китә һәм беҙҙең гәзиттәр шуны *Иптәштәр һалдаттар, сержанттар, офицерҙар һәм генералдар* тип тәржемә итә торғайны. Ундай бойороҡтар хәҙер күренмәй шикелле. Күренә ҡалһа, уны, үрҙә күрһәткән кеүек, *һалдат, сержант, офицер һәм генерал иптәштәр* тип алыу, әлбиттә, башҡортса булыр ине.

Башҡорт телендә *тигән* ярҙамлыҡ ҡылымын кеше йәки бер нисә кеше исеменән һуң ғына түгел, һәр төрлө атаманан һуң ҡуйып була. Мәҫәлән, халыҡ йыры уны *Порт-Артур тигән таш ҡала — күп ҡалаға баш ҡала* тип яңғыҙ ҡала исеменән һуң ҡулланған. Шулай булғас,

*Башҡортостанда беренсе булып* (дөрөҫө: *башлап*)*... «әсә һәм бала» бүлексә асылыуы ла күп нәмә хаҡында*

*һөйләй* (Й., 13.07.96) тигән һөйләмде килештерер өсөн *«Әсә һәм бала» тигән бүлексәнең асылыуы* тиергә кәрәк.

*«Рәсәй Федерацияһы Президентын һайлау тураһында» закондың бер статьяһы ла боҙолманы* (Б., 12.07.96) тигән һөйләмдә, *«Рәсәй Федерацияһының Президентын һайлау тураһында» тигән закондың...* тиһәк кенә, закон атамаһы һөйләм эсендә тейешле бәйләнешкә инә.

*...Совет ултырышында «Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы Көстәр ветерандары тураһында»ғы Башҡортостан Республикаһы законының үтәлешен тикшереү һөҙөмтәләре ҡаралды* (Б., 25.07.96) тигән һөйләмдең авторы үрҙәге бәйләнешһеҙлекте бөтөрөргә тырышҡан, ләкин шунын менән закондың атамаһын юйып ҡуйған. Атаманы айырып күрһәтер өсөн бында ла, *«Һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡораллы Көс ветерандары тураһында» тигән Башҡортостан Республикаһы законының...* тиергә кәрәк булған.

Яҙышҡан кешеләр һәр ваҡыт урыҫ теленә йөҙ тотҡанға, үҙ телебеҙҙең күп сараһын онотоп бөттө, *тигән* ярҙамлыҡ ҡылымы ла шул онотолған сараларҙың иҫәбенә инә.

Урыҫ теленән күсереү, һөйләмдең төҙөлөшөнә иғтибар бирмәй яҙыу арҡаһында, беҙҙең яҙма телдә аңлайышһыҙ, боҙоҡ һөйләмдәр бик күбәйеп китә. Уны күрһәтеп тә, аңлатып та бөтөрлөк түгел. Шулай ҙа бер нисәһен ҡарап үтмәй булмай. Мәҫәлән,

*Ул... ниндәйҙер сер йәшергән һымаҡ тойолған исемде йөрөтөүсе ҡыҙҙы күрҙе* (Б., 17.07.96) тигән һөйләмде аңларлыҡ түгел. Әллә ниндәй хис ҡатланыштарын күрһәтмәксе булып, яҙыусы бер нәмә лә күрһәтә алмаған. Матурлыҡтың сере ҡыҫҡалыҡ менән асыҡлыҡта була, бер ҙә бөҙрәлектә булмай.

*...Беҙ һүҙҙе нәҡ ошо губерна хаҡында алып барасаҡбыҙ* (Й., 13.07.96);

*Һүҙ унда нимә тураһында барасағын белер өсөн кисекмәҫтән хәрәкәт итергә кәрәк* (А., 96, 1, 19) тигән һөйләмдәрҙәге *һүҙ алып барыу, һүҙ барыу* — бер ҡылымға тиң. Шуның өсөн уның ағзаларын бер-береһенән айырырға ярамай, *Ошо губерна хаҡында һүҙ алып бармаҡсыбыҙ; унда нимә тураһында һүҙ барғанын белер өсөн...* тип, *һүҙ* менән *барыу, алып барыу* һүҙҙәрен бергә йөрөтөргә кәрәк.

*Аптекаларҙың медикаменттарҙың хаҡын күтәреүе һәм уларҙың ассортиментын кәметеүе һиҙелерлек була бара* (Б., 25.07.96) тигән һөйләмдә эйәлек килеш ялғауын ҡатландырып килтереү бөтөнләй артыҡ, уны *аптекаларҙың медикамент хаҡын күтәреүе, ассортиментын кәметеүе...* тиһәк, аңлайышлы ла, төҙөк тә була.

*...Мөнәсәбәттәрҙе көйләү процесында яҙма тарихҡа — теге йәки был ырыу-ара, нәҫел-нәсәбе ебенең килеп сығышы, ер биләргә хоҡуҡты раҫлаған документтарға ихтыяж артҡан* (А., 96, 8, 126);

*Тирә-яҡ мөхитте ныҡ ағыулаусы ҡурҡыныс ошо производствоға ялыуҙы тикшереү буйынса командировкаға ебәргәйнеләр ҙә инде Макарованы Крайскиға* (А., 96, 1, 19) тигән ике һөйләмде тотош урыҫса ҡоролған тип әйтеү генә әҙ. Ундағы *ырыу-ара, нәҫел-нәсәбе ебе, ер биләргә хоҡуҡ, производствоға ялыу* тигән кеүек, грамматик яҡтан йәбешмәгән хата һүҙ бәйләнештәре һ. б. кәмселектәр башҡорт телен мәсхәрә итә.

Бында, бәлки, миҫалды күберәк алып күрһәтергә кәрәк булғандыр. Ләкин мин уны маҡсат итмәнем, бер нисә миҫалда хәҙерге бөтә яҙма телдең булмышын күрһәтеп, яҙышҡан кешеләрҙең иғтибарын йәлеп итергә генә тырыштым. Яҙма телдәге күп етешһеҙлек, урыҫ теленә эйәргәндән тыш, яҙышҡан кешенең үҙ теленә тейешле талап ҡуймай, яҙған нәмәһен ҡабат уҡып ҡарамай, ашығып эшләгәненән килә. Шуны булдырмаҫ өсөн, һәр кеше үҙе төпсөнөргә, үҙ хаталарын үҙе табып төҙәтә белергә тейеш. Шунһыҙ бер эш тә барып сығасаҡ түгел.

Һөйләм ҡоролошо хаҡында һүҙ һөйләгәндә, бөтә тыныш билдәһен телгә алмағанда ла, бер-ике урындағы өтөр тураһында әйтеп китмәй булмай. Һөйләм ҡоролошона ул ныҡ тәьҫир итә.

Хәҙерге грамматик хеҙмәттәрҙә һәм мәктәп дәреслектәрендә өтөрҙө, хәл әйтемдәрендә ҡулланыла, хәл әйтеме һөйләмдең уртаһында килһә, ике яҡтан да өтөр менән айырыла, тиҙәр ҙә *Юлсылар, бер нисә урынға ут яғып, оҙаҡ юлдан аҙ ҡалған аҙыҡтарын бүлешеп, үҙәк ялғай башланылар,* тигән миҫалды ла шул иҫәпкә индерәләр. Ошо ҡағиҙәне тотоп, яҙышҡан кешеләрҙең күпселеге,

*Сит ауылдан килгән бабай, скрипка тартып, таҡмаҡ әйтәсәк* (А., 96, 9, 6);

*Халыҡ, баш күтәреп, хан һарайына килә* (Й., 23.11.96);

*Уныһы, бының туҡтауын күреп, үҙе ҡаса башлай* (А., 96, 7, 25);

*Миңлеғол, ныҡлап кейенеп тә тормай, ҡәйнәләренә юлланды* (Б., 27.09.96) тигән кеүек һәр урында һөйләмдең эйәһенән һуң өтөр ҡуйып яҙа. Ул ғына етмәгән, улар,

*Йөрәктәргә йәшәү* (дөрөҫө: *йән) биреп, төрмә буйлап, моңдар аҡҡан* (Й., 3.10.96) тип хатта *төрмә буйлап* тигән һүҙҙе лә аллы-артлы өтөр менән айыра. Ғәжәп түгел, сөнки грамматик хеҙмәттәрҙә, хәл әйтемдәре мәғәнә яғынан эйәгә

ҡарағанда хәбәргә яҡыныраҡ тора, шуға күрә уларға, ғәҙәттә, һөйләмдең хәбәренән сығып һорау бирәбеҙ тиелә лә, баяғы миҫалға *Нисек үҙәк ялғай башланылар?* тип һорау бирелә, *бүлешеп үҙәк ялғай башланылар* тип яуап ҡайтарыла. Ә ғәмәлдә һуңғы миҫалдағы *төрмә буйлап* тигән һүҙ генә хәбәргә ҡарап, башҡарылыу рәүешен белдерә, шуның өсөн хәбәрҙән өтөр менән айырылырға тейеш түгел; башҡа миҫалдарҙағы *ут яғып, аҙыҡтарын бүлешеп, скрипка тартып, баш күтәреп, бының туҡтағанын күреп, ныҡлап кейенеп тә тормай* тигән һүҙҙәр — барыһы ла һөйләмдең эйәһенә генә бәйләнгән. Улар һөйләмдәге һуңғы хәбәрҙең башҡарылыу рәүешен белдермәй, ә үҙҙәре эйәнең бер эш-хәрәкәтен белдереп, хәбәр булып килә. Хәл ҡылымдың *-ып/-май* формаһы был һөйләмдәрҙә хәл әйтеме яһамай, ә тиң хәбәрҙәрҙе бәйләр өсөн хеҙмәт итә. Шуға күрә килтерелгән миҫалдарҙа *Халыҡ баш күтәрә һәм хан һарайына килә; Уныһы бының туҡтағанын күрә һәм ҡаса башлай* тип хәл ҡылым формаһын *һәм* теркәүесе менән алмаштырып була. Һуңғы миҫалда *Төрмә буйлап һәм моңдар аҡкан,* тип әйтеп булмай, сөнки, үрҙә әйткәнсә, ундағы *төрмә буйлап* эйә менән бәйләнештә тормай, ул эш-хәрәкәттең башҡарылыу рәүешен аңлата. Шулай итеп, *-ып/-май* формаһы һөйләмдәге тиң хәбәрҙәрҙе бәйләп килгәндә, өтөр билдәһе ике яҡтан ҡуйылмай, аҙаҡтан ғына ҡуйыла, йәғни: *Халыҡ баш күтәреп, хан һарайына килә; Сит ауылдан килгән бабай скрипка тартып, таҡмаҡ әйтә; Уныһы бының туҡтағанын күреп, үҙе ҡаса башлай* һ. б.

Хәбәр төркөмдәрен хәл әйтеменә һанап, ике яҡтан өтөр менән айырыу ҡайҙан килеп сыҡҡан, тиһәң, тағы әлеге урыҫ теленән. Юғарылағы миҫалдарҙы *Народ, подняв бунт, пришел к ханскому дворцу; Тот, увидев, что этот остановился, сам пустился бежать* һ. б. тип урыҫ теленә күсерһәк, «деепричастный оборот» килеп сыға, ә ул аллы-артлы өтөр менән кәртәләнә. Беҙҙең өсөн урыҫ теле үлсәү булырға тейеш түгел, башҡорт теленең үҙ йыйы бар.

Хәл ҡылымдың *-ып/-май* формаһы кеүек, *да* киҫәксәһе лә башҡорт телендә ике тиң хәбәрҙе (хәбәр төркөмөн) бәйләп тора ала. Бынан тыш, *да* киҫәксәһе теҙмә ҡушма һөйләмдә бер-бер артлы килгән һәм ҡаршы ҡуйылған эш-хәрәкәтте бәйләп йөрөй. Грамматик хеҙмәттәр, шуның ике хәбәрҙе теркәгән сағында өтөр ҡуйылмай, теҙмә ҡушма һөйләмде теркәгән сағында өтөр ҡуйыла, тип ҡағиҙә сығара ла, тел дәреҫтәрендә һәм яҙыу практикаһында ошо урында йыш ҡына хата ебәрелгәнен билдәләп, иғтибарлы булырға өндәп ҡуя. Ә хаталанырға, ысынлап та, ерлек бар. Сөнки,

*Лида өҫтәл артына ултырҙы ла, аптыраштан бер-ике йотом коньяк ҡойоп эсеп ҡуйҙы* (А., 96, 8, 33);

*...Мөхәррирҙе алдан көйләп ҡуйғандар ҙа, был ни эшләр икән тип, көтөп ултыралар* (А., 96, 11, 5) тигән ике һөйләм менән;

*Бер кешенең ҡатыны үлеп китә лә, ике бәләкәй улы тороп ҡала* (әкиәттән);

*Бына һеҙ уйламай эшләйһегеҙ ҙә, унан һуң баш ҡатырып ултырырға тура килә* (Б. Хәсән) тигән ике һөйләмдәге *да* киҫәксәһенең араһында функциональ айырма юк: бөтәһендә лә ул һөйләмдең бер-бер артлы килгән ике өлөшөн теркәй, шуға күрә уны *һәм* теркәүесе менән алыштырып була, бөтәһендә лә ул үҙенсәлекле интонация менән әйтелә һәм теркәүестән һуң ҙур тыныш яһала. Шулай булғас, әлбиттә, күп кеше ҡағиҙәнең нескәлегенә төшөнөп бөтә алмай, тәүге ике һөйләмдә лә, һуңғы ике һөйләмдә лә теркәүестән һуң өтөр ҡуя. Хатта,

*Тамсылар, тәҙрә быялаһына бәреләләр ҙә, түбән тәгәрәйҙәр* (А., 96, 11, 11) тип хәбәр төркөмөн ике яҡтан да өтөр менән айырып ҡуйыусылар була. Ләкин яҙышҡан кешеләрҙең күпселеге бер ергә лә өтөр ҡуймай яҙыуҙы артыҡ күрә. Шул арҡала,

*Былар өйләнешкән дә йәшәй башлаған* (А., 96, 1, 62);

*Ул һүҙ әйтергә ынтылды ла туҡтап ҡалды...* (Б.:, 5.10.96);

*Пассажирҙар төшә лә эләгә-йығыла вокзалға ашыға* (А., 96, 11, 8);

*Эргәмдән йылмайып ҡына үтеп китһә лә йөрәгем урынынан ҡуба* (А., 96, 11, 17) тигән һымаҡ өтөрһөҙ һөйләмдәр хасил була. Һуңғы һөйләмдә *да* киҫәксәһенән һуң ҡағиҙә буйынса ҡуйылырға тейеш булһа ла, автор өтөр ҡуймаған, шунан алдағы һөйләмдәрҙең ҡағиҙәһе менән яңлыштырған. Ә ғәмәлдә быйндағы һөйләмдәрҙең бөтәһендә лә *да* киҫәксәһенән һуң өтөр булырға тейеш. Уны

*Мөйөштәр араһын иҫәпләүҙән туҡтай ҙа капитан өҫтәл янына килә* (А., 96, 1, 24) тигән һөйләм асыҡ күрһәтә. Бында автор һөйләмдең эйәһен *да* киҫәксәһенән аҙаҡ ҡуйған, әммә өтөр ҡуймағас, тыныш яһай торған ер билдәһеҙ булып ҡалған, ә һөйләмде тынышһыҙ уҡып булмай. Был һөйләмде дөрөҫ итеп, тыныш менән уҡыр өсөн *капитан* тигән эйәнән һуң өтөр ҡуйырға кәрәк. Шунһыҙ булмай. Шулай булғас, баяғы һөйләмдәрҙә лә эйәне башта ҡалдырып, тәүге хәбәрҙе (хәбәр төркөмөн) икенсе хәбәрҙән (хәбәр төркөмөнән) өтөр менән айырырға һәм *Былар өйләнешкән дә, йәшәй*

*башлаған; Ул һүҙ әйтергә уҡталды ла, туҡтап ҡалды* тип яҙырға кәрәк була.

Әле ҡараған грамматик күренешкә *да* киҫәксәһенең, *һуҡты ла ҡасты, көлдө лә ебәрҙе* тигәндәге кеүек, эш-хәрәкәттең ҡапыл булғанын йәки, *осто ла осто, иланы ла иланы* тигәндәге һымаҡ, дауамлы булғанын сағылдырыр өсөн ике ҡылымды йәки төп ҡылым менән ярҙамлыҡ ҡылымды теркәп торған сағын индереп булмай, сөнки был урында тиң хәбәр юҡ, һәм ҡылымдар араһына өтөр ҙә ҡуйырға ярамай.

Тыныш билдәһе өлкәһендә асыҡланмаған, бер нормаға ла килтерелмәгән нәмә беҙҙә күп. Телдең синтаксисын яҡшылап өйрәнмәйенсә, һәр нәмәне асыҡлап үҙ урынына ҡуймайынса, был өлкәлә дөрөҫ норма билдәләү мөмкин дә түгел. Хәҙерге яҙма телдә тыныш билдәләрен бутау күп икән, ул синтаксис мәсьәләһендәге буталыштан килә. Ул буталышты азат фекерле йәш ғалимдар үҫеп, шулар ныҡлап тотонһа ғына бөтөрә алыр, тип уйларға кәрәк.

## ҺҮҘ ҺӘМ ҺҮҘ ҠУЛЛАНЫШЫ

Башҡорт яҙма теле үҙенең 70—75 йыллыҡ ғүмере эсендә һүҙ ҡулланышы йәһәтенән бер нисә һынылышлы дәүер аша үтеп тә өлгөрҙө. Ғәмәлгә индерелгән тәүге йылдарында ул төрки телдең кәрәгенән ашҡан ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен башҡорт һүҙҙәре менән алыштырыу, үҙ телебеҙ йәки үҙ телебеҙҙән сығып яһаған яңы һүҙҙәр иҫәбенә байыу дәүерен кисерә. Ул дәүерҙә халыҡтың һөйләү теле тәбиғи сафлығын да, һүҙ байлығын да әле юғалтмаған була. Ғалимдар иркенләп шунан файҙалана һәм яңы һүҙ яһаған саҡта ла үҙ теленең эске ҡанундарына таянып эшләй. Мәҫәлән, хәҙер булһа, *млекопитающее* тигән һүҙҙе, моғайын, *һөт менән туҡланыусы* тигән һымаҡ итеп туп-тура күсереп ҡуйырҙар ине, ә теге заманда уны *һөтимәр* тип алғандар, һәм шул һүҙ бик йәтеш, йоғошло булып башҡорт теленә инеп киткән. Яҙма телдең аяҡҡа баҫа башлаған сағында ошоноң һымаҡ матур һүҙ байтаҡ яһала. Уларҙың яһалма һүҙ икәнен хәҙер белерлек тә түгел.

Халыҡ араһында үҫкән, халыҡ телен яҡшы белгән, урыҫ йоғонтоһона бирелмәгән яҙыусыларҙың әҙәби әҫәрҙәре лә ул

ваҡытта һүҙгә бай, биҙәкле була. Улар урыҫса уйлап, урыҫ теленән тәржемә итеп яҙмай, үҙ телендә уйлап яҙа, шуның өсөн ысын халыҡ һүҙе лә кәрәк урында табылып тора. Ләкин 1937 йылда һәләтле башҡорт ғалимдарын һәм яҙыусыларын бөтөрәләр, башҡорт әҙәби яҙма телен урыҫлаштырыу юлына боралар. Ҡөслөк менән урыҫ алфавитына күсереп, башҡорт теленең үҙендә булған һәм ғәрәп-фарсынан инеп үҙләшеп бөткән бөтә терминды, *государство, общество, искусство* һ. б. һ. б. тигән кеүек, урыҫ терминдары менән алыштыралар. Хатта халыҡ телендәге *урыҫ* һүҙенән шөрләп, *рус* тип яҙа башлайҙар. Һөйләмде урыҫ теленең яйына килтереп төҙөү мотлаҡ бер ҡағиҙәгә әйләнә. Шул ҡағиҙә гәзит-журнал телендә генә түгел, әҙәбиәт телендә лә ныҡлы урын ала һәм бара-бара кешене урыҫса ғына уйлап яҙырға күнектереп бөтә. Урыҫса уйлап, урыҫ теленә йәтешләп яҙғас, башҡорт теленең үҙ мөмкинлектәрен барлау хәжәте ҡалмай, һәр урыҫ һүҙенә башҡорт һүҙен тап килтерергә тырышып, йәбешмәҫ һүҙҙәрҙе йәбештереү һәм мәғәнәләш һүҙ яһау хәрәкәте башлана. Ул хәрәкәттә һүҙлектәр ҙә ныҡ ҡатнаша һәм *мауығыу, ейән, баҫалҡы* тигән кеүек һүҙҙәрҙе шул саҡта бөтөнләй икенсе мәғәнәгә бороп ебәрәләр, *ауыҙ-тел ижады, ҡул суғы, осраҡлы* тигән кеүек мәғәнәһеҙ һүҙҙәрҙе шул саҡта яһап, яҙма телгә индерәләр. Тел менән телдең һүҙҙәре бер ваҡытта ла тотош тап килеп бөтмәй, әммә һәр фекерҙе һәр тел үҙ саралары менән сисеп әйтә ала. Шулай булғас, күҙ йомоп урыҫ теленә эйәреү булмаһа, ябай ғына урыҫ һүҙҙәренә лә мәғәнәләш һүҙ яһап аҙапланыуҙың беҙгә кәрәге лә булмаҫ ине.

1956 йылғы КПСС съезынан һуң беҙҙең әҙәби яҙма тел бер аҙ тын алып ҡалғандай итә. Бик ныҡ йәбешмәгән урыҫ терминдары урынына әүәле йөрөгән терминдарҙың ҡайһы береһе кире ҡайтарыла, әммә шунан артығын эшләргә барыбер ҡыйыулыҡтары етмәй. Урыҫса уйлап яҙыу, урыҫ һүҙҙәренә яраҡлаштырып зәғиф һүҙҙәр яһау һаман шул көйө ҡала.

Үткән дәүер эсендә һөйләү теле лә үҙгәрә. 1950—1960 йылдарҙа ҡатнаш милләтле эре колхоз-совхозға берләштерелгән ауыл халҡы өсөн башҡорт теленең хеҙмәте кәмей, ул эш өҫтөндә урыҫса аралашырға, башҡортса һөйләшкән хәлдә лә, урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырып, яртылаш урыҫса һөйләшергә өйрәнеп китә. Шундай ҡатнаш тел башҡорттоң иң үҙенсәлекле, матур йөкмәткеле һүҙҙәрен яйлап оноттора, уның урынына башҡорттар урыҫ һүҙҙәрен яҡшыраҡ беләә, тиҙерәк аңлай торған булып китә. Өҫтәүенә, башҡорт мәктәптәрен ябып, балаларҙы урыҫ телендә уҡытырға тотона-

лар. Йәш быуын башҡорт теленең һүҙ байлығын ғына түгел, ҡалала һәм ҡатнаш милләтле эре ауылда торғандары үҙ телен белмәй үҫә. Быуындан быуынға тел хазинаһын тапшыра торған тарихи бәйләнеш өҙөлә.

90-сы йылдарҙа донъялағы яңы һулыш шауҡымы менән әҙәби яҙма телдәге йоғошһоҙ урыҫ терминдарын киренән ғәрәп-фарсы терминдары менән алыштырыу теләге уяна. Был теләкте, әлбиттә, хупларға кәрәк, сөнки, беренсенән, урыҫ теленән һәм урыҫ теле аша көнбайыш телдәренән алған һүҙҙәр башҡорт өндәренең үҙенсәлегенә бөтөнләй тура килмәй, ә ғәрәп-фарсы һүҙҙәрендә ундай ҡаршылыҡ юҡ; икенсенән, урыҫ яҙма теленән алған һүҙҙәр беҙҙә ни хәтле оҙаҡ йөрөһә лә, бер ҙә үҙебеҙҙеке булып китә алмай, һаман ят һүҙ булып ҡала бирә, шул арҡала башҡорт теленең лексикаһы бер системаға әйләнеп китә алмай, башҡорт һүҙҙәре һәм сит һүҙҙәр тигән ике төркөмгә бүленгән көйө тора, ә ғәрәп-фарсы һүҙҙәре башҡорттоң күңеленә яҡын, улар бер ҙә сит һүҙ булып ҡалмай, телдең лексик системаһына тотош инеп китә. Ләкин бында ла сама белергә кәрәк, элек йөрөгән бөтә һүҙҙе хәҙер ҡайтарып бөтөп булмай. Мәҫәлән, урыҫлаштырыу дәүерендә индерелгән *восстание* һүҙе урынына хәҙер *ихтилал* тигән һүҙҙе ҡуллана башланылар. Ул һүҙ ғәрәп телендә *бола* тигәнде аңлата. Тимәк, уны алһаҡ, башҡорт халҡының азатлыҡ көрәшен, урыҫ әйтмешләй, *бунт* тигәнгә генә ҡайтарып ҡуйыу була. Ә башҡорт бола ҡуптармаған, ул азатлыҡ яулап көрәшкә ҡалҡҡан һәм үҙенең азатлыҡ көрәшен *яу* тип атаған. Элекке урыҫ тарихсылары быны шулай тип яҙып ҡалдыра. Шунең өсөн Ғ. Ибраһимов үҙенең «Ҡинйә» романында башҡорт хәрәкәттәрен *яу* тип яҙа: *Алдар-Күсем яуы, Килмәк-Аҡай яуы.*

Миҫалға йәнә *сәнәғәт* тигән һүҙҙе килтерергә мөмкин. Ғәрәп телендә *синағәт* тигән һүҙ *промышленность* мәғәнәһендә йөрөй. Беҙгә ул бер аҙ үҙгәреп ингән һәм *сәнғәт* тигән тамырҙаш һүҙгә оҡшап ҡалған. Быларҙың икеһен яңлыштырмаҫ өсөн *искусство* мәғәнәһендәге *сәнғәт* һүҙен генә алып, *сәнәғәт* һүҙен алмағанда бер ҙә насар булмаҫ ине. Уның урынына элек бер аҙ йөрөп тә, һуңынан онотолған *эшкәрселек* һүҙен тергеҙеп була: *эшкәрлек* — завод, фабрика, предприятие; *эшкәрселек* — промышленность. Был һүҙ башҡорт теленең һүҙ яһау ҡануны менән ярашып, телгә бик йоғоп тора.

Йоғошһоҙ урыҫ терминдарынан телде таҙартырға тырышыу менән бергә, онотолоп барған башҡорт һүҙҙәрен тергеҙергә, шул һүҙҙәр менән үҙ телен биҙәргә тырышыу ҙа хәҙерге яҙышҡан кешеләрҙе ҡыҙыҡһырлай торған бер си-

фатҡа әйләнде, тиергә мөмкин. Был да бик яҡшы. Ләкин быуындар араһындағы тел бәйләнеше өҙөлөп торған дәүерҙә сала-сарпы ғына ишетеп ҡалған ул һүҙҙәрҙең ысын мәғәнәһен йәштәр әле белеп бөтә алмай, һәм уларҙың күп һүҙҙе урынһыҙ ҡулланып ебәреүе көнөндә ҡыра. Мәҫәлән,

*Кешеләр бер-береһен белә белгәне бирле үҙ-ара һуғыша. Ике малай осрашһа, арыҡтағы балыҡ өсөн, ике егет — арандағы ат йә өйҙәге ҡыҙ өсөн...* (А., 96, 10, 38) тигән һөйләмдәге *аран* һүҙен алайыҡ. Дөрөҫ, башҡортта аран булған, уны ҡышҡылыҡта кәзә-һарыҡ ябыр өсөн ер соҡоп яһағандар. Йылҡы малын унда тотмағандар, сөнки йылҡы малы иркенде ярата, соҡорға төшөп, тонсоу һауала тороуға түҙә алмай. Шуға күрә бер әкиәттә *Арандағы биш кәзә мырт-мырт көйшәй, һарайҙағы сыбар тай сыр-сыр кешенләй* тип кәзәне аранға, сыбар тайҙы һарайға ҡуйғандар.

*Бөгөн дә драматург ижад эшен ниндәйҙер бер тилбер тынғыһыҙлыҡ һәм һөҙөмтәлелек менән дауам итә* (Б., 12.11.96) тигәндәге *тилбер* һүҙе башҡорт телендә *эшкә етеҙ, уңған* тигән мәғәнәлә йөрөп, кешегә ҡарата ғына әйтелә, *тилбер тынғыһыҙлыҡ һәм һөҙөмтәлелек* тип әйтеп булмай.

*Күпме кешеләрҙең башына етмәгән... хаялы бәндәләрҙең мәкере* (А., 96, 3, 126) тигән һөйләмдәге *хаялы* һүҙе ғәрәптең *хая* һүҙенән яһалған, ул оятты белгән, әҙәпле кешегә ҡарата әйтелә. Ә бында уны автор, киреһенсә, *оятһыҙ* мәғәнәһендә, *хаяһыҙ* тигән һүҙ урынына ҡуллана.

*Беҙҙең аралашыу мөмкинлеге сикле ине. Һанда-һаяҡ ҡына осрашып йөрөнөк* (Б., 30.07.96) тигәндәге *һанда-һаяҡ* һүҙе ваҡыт төшөнсәһен түгел, урын төшөнсәһен бирә *(Еләк уңмаған быйыл, һанда-һаяҡ ҡына осрай)*. Уны һирәк башҡарылған эш-хәрәкәткә ҡарата әйтеп булмай.

*Беҙҙең председатель... уҡығандарҙы яратмай. Яратмау ғына түгел, күрә алмай. Сәбәбен табып барыбер ҡыуа. Фуатты ла ынйытманы* (А., 96, 11, 31) тигәндәге *ынйытыу* һүҙе *яфалау, аҙаплау* мәғәнәһенә эйә. Бында *тындырманы* тиергә кәрәк булған.

*...Ул урын йәйеп, арыған аяҡтарын яҙлыҡтырып, рәхәтләнеп кирелеп, ... башын терәне* (Ш., 96, 6, 15) тигәндәге *яҙлыҡтырыу* һүҙе *яңлыштырып, ситкә тайҙырыу* тигән мәғәнәлә йөрөй. Бында автор *аяҡтарын яҙып* тиһә, дөрөҫ булыр ине.

*Беренсе булыу, бүтәндәрҙән өҫтөн сығыу ҡоһоро үтмәү генә түгел, арта ғына бара* (А., 96, 10, 19) тигәндәге *ҡоһор*

һүҙе насар ҡылыҡтың әйләнеп ҡайтҡан язаһын, кейәһен аңлата, ә был урында *сәм* тигән һүҙ мәғәнәгә тура килә.

*Алма орлоғо... ергә төшөп, уның шифалы һутын татыу менән ай үҫәһен көн үҫеп, йыл үҫәһен ай үҫеп тигәндәй, бик тиҙ ирәйеп китте* (Й., 24.10.96) тигән һөйләмдәге *ирәйеү* һүҙе был урынға тура килмәй. Уның урынына *ирәбеләнеп* тип әйтергә кәрәк булған, уның икенсе мәғәнәһе *буйға ҙурайыу, баҙыҡланыу* тигәнде аңлата: *һөт эсергәс, быҙауың ирәбеләнеп киткән* тиҙәр.

Ошоноң һымаҡ хата ҡулланған һүҙ яҙма телдә бик күп осрай. Шуның менән авторҙар үҙ әҫәренә генә түгел, башҡаларҙы яҙлыҡтырыуға сәбәпсе булып, яҙма телгә ҙур зыян килтерә. Бынан тыш, яҙышҡан кешеләрҙең, *«Сыбай ҡашҡа»* тигән йырҙы *һыбай ҡашҡа* тип йырлағандағы кеүек, һүҙҙең әйтелешен боҙоп яҙған сағы ла йыш була. Әлбиттә, был да халыҡ телен насар белгәндән килә. Мәҫәлән,

*...Тракттың һуйыр таштарына ҡанлы көрәш, яу мисәте һалған аҙаматтар күҙ алдына килеп баҫа* (Б., 27.07. 96) тигәндәге *һуйыр таш* ысын башҡорт телендә *суйыр таш* тип әйтелә. Башҡортта *һуйыр* тигән ҡош менән *һыуыр* тигән йәнлек кенә бар.

*Ҡарсаҡ... тәүҙә «тәф-тәф» тип тора ла, шунан «һау-у-у» тип илаған тауыш сығарып олоп ебәрә* (А., 96, 10, 87) тигән һөйләмдәге *ҡарсаҡ* һүҙен башҡорттар *ҡарһаҡ, ҡарһаҡ төлкө* тип әйтә. Ул ҡыҙыл төлкөнән вағыраҡ һары дала төлкөһө була. Ләкин һөйләмдең мәғәнәһенә ҡарағанда, автор ул төлкөнө түгел, *сүл бүреһен* (шакалды) күҙҙә тота. Сүл бүреһе менән ҡарһаҡ төлкөнө яңлыштырырға ярамай.

*Ҡана, Байрас, ҡыпһыуырҙы ошолайтыбыраҡ тот әле* (А., 96, 6, 115) тигәндәге *ҡыпһыуыр* һүҙенең дөрөҫө *ҡыпсыуыр* була, ул *ҡыпсыу,* йәғни ҡыҫып тотоу, һүҙенән яһалған.

*Күпте, бик күпте татығандар, күргәндәр, тик улай һинең һымаҡ сығымсыламағандар* (А., 96, 6, 99) тигән һөйләмдәге *сығымсылау* һүҙе, бәлки, ҡайһы бер яҡта шулай әйтеләләр, әммә дөрөҫ итеп әйткәндә, ул *сығынсылау* була: *сығынсы (ат) — сығынсылау*. Һүҙлектә лә шулай яҙылған. Шуны тоторға кәрәк. Һәр кеше бер ни менән иҫәпләшмәй, үҙ белдеге менән яҙһа, әҙәби телде һис бер ваҡыт бер нормаға килтереп, диалект кимәленән юғары күтәреп, дөйөм башҡорт әҙәби теле итеп буласаҡ түгел.

*Алмасыуар күк айғырҙың... күбеге ергә тама* (Ш., 96, 4, 14) тигәндәге *алмасыуар* һүҙенең дөрөҫө *алмасыбар* була. Ул янбашында (ҡайһы берҙә тотош кәүҙәһендә) алма ҙурлыҡ түңәрәк-түңәрәк кенә тимгеле булған сыбар атты белдерә. Уны *алмачуар* тип татарҙар ғына әйтә.

Телде яҡшы белмәгәндән бер һүҙ урынына икенсе һүҙ йәки бер һүҙ урынына бер нисә һүҙ әйтеп тә яҙышҡан кешеләр ыҙаланып бөтә.

*Ул һүҙ әйтергә ынтылды ла туҡтап ҡалды* (Б., 5.10.96) тигән урында башҡорт кешеһе әүәле *ынтылды* тип әйтмәй, *уҡталды* ти торғайны. Күрәһең, ул һүҙҙе хәҙер онотҡандар.

*Ҙур ата эт хужалар менән хушлашырға теләгәндәй бераууыҡ ҡарап торҙо* (А., 96, 1, 44) тигәндәге *ата эт* беҙҙә *арлан* тип йөрөтөлә. Башҡа хайуандың атаһын *ата*, инәһен *инә* тип йөрөтһә лә *(ата бесәй — инә бесәй, ата арыҫлан — инә арыҫлан)*, беҙҙең кеше тормошта мөһим урын тотҡан хайуандарҙың атаһы менән инәһен айырым һүҙ менән атаған *(айғыр — бейә, үгеҙ — һыйыр, арлан — ҡәнтәй)*.

*(Эрисман) балаларҙағы йыраҡтан насар күреүсәнлек сирен өйрәнә* (Б., 24.07.96) тигән һөйләмдәге *йыраҡтан насар күреүсәнлек сирен* башҡортса *күрә ҡарау* йәки *күрәш*, ә алыҫтан күреп, яҡындан күрмәгәнде *үтә ҡарау* тип әйтәләр.

*...Ҡапыл атын шаҡарып, арт аяҡтарына баҫтырҙы* (А., 96, 5, 47) тигән һөйләмдәге *арт аяҡтарына баҫтырҙы* тигәнде бер генә һүҙ менән *үрәпсетте* тип әйтеп була.

Ошо уңай менән хәҙерге йәштәрҙең, үҙебеҙҙәге туғанлыҡ терминдарын һанға һуҡмай, урыҫ ыңғайына ҡайны-ҡәйнәһен (бейемен) *атай — әсәй*, ҡайнаға-ҡайынйеңгәһен *ағай — апай* тип, башҡаларын исеме менән атап йөрөтөүе хаҡында ла әйтеп үтмәй булмай. В. Псәнчин дә «Һүҙ тылсымы» тигән китабында ошоно телгә ала. Был мәсьәләгә анһат ҡарарға ярамай. Ул хәҙерге башҡорттоң, йәнәһе, замана кешеһе булам тип, һаман үҙ милләтенән ситләшкәнен, үҙ халҡының теленән, йолаларынан баш тартып, һаман урыҫлашырға ынтылғанын күрһәтә. Был насар ҡылыҡты бөтөрөр өсөн, үҙ халҡыңдың теле лә, йолаһы ла һис бер ваҡыт иҫкермәгәнен, үҙ теле менән үҙ йолаһын тотҡан кеше генә ысын замана кешеһе булғанын мәктәп йәшенән үк балаларға төшөндөрөү кәрәк.

Урыҫҡа эйәреп, үҙебеҙҙең электән булған һүҙҙәрҙе ситкә тибеү бынан башҡа ла етәрлек. Хәҙер кеше, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ, *дөгө* урынына *рис, сүпрә* урынына *дрожа, йөҙөм* урынына *виноград* һ. б. һ. б. тип һөйләүҙе бер ғәҙәт итеп алды. Шуның ярамағанын әйтһәң, улар үҙҙәренсә сәбәп табып, аҡланып маташҡан була: йәнәһе, *сүпрә* менән *дрожа, йөҙөм* менән *виноград* бер үк нәмә түгел, айырмаһы бар. Улай булғас, нишләп урыҫтар өйҙә ҡайнатҡан сүпрәне лә, магазин сүпрәһен дә *дрожжи* ти? Айырмаһы бар икән, улар ҙа ике сүпрәне ике төрлө атарға тейеш ине бит. Тимәк,

айырма — ул нәмәләрҙә түгел, ә беҙҙең ҡоллоҡка өйрәнеп, ауара булып бөткән башыбыҙҙа.

*Хна, басма буяуҙары сәсте ныҒыта* (Ш., 96, 3, 150) тип беҙ инде үҙ һүҙҙәребеҙҙе лә урыҫтан ала башланыҡ. Мин бала саҡтан уҡ ҡатындарҙың Бохара яҡтарынан килгән ҡына, баҫма менән сәс буяғанын беләм. Ул саҡта уны үҙебеҙсә *ҡына, баҫма* тип атай торғайны ауыл бисәләре. Хәҙер, йәнәһе, улай килешмәй, урыҫтан кире алып, урыҫсалап әйтһәң генә заманса була.

Ҡәрәкмәгән һүҙҙе урыҫ теленән шул көйө алыуҙан башҡа, беҙҙә урыҫ һүҙенә мәғәнәләш һүҙ яһайым тип, төрлө зәғиф һүҙ уйлап сығарыуҙары хаҡында юғарыла бер аҙ әйтелде. Шул рәүештә айырым һүҙ генә түгел, фразеологик берәмек булып ойошҡан йәки ойошмаған тасуири һүҙ бәйләнештәре лә беҙгә урыҫ теленән күп күсерелә. Ул һүҙҙәр ғәмәлдә телдең һүрәтләү һәләтен үҫтерергә тейеш. Ләкин телдән телгә күсергәндә улар, бигерәк тә фразеологик берәмектәр, кешенең аңын да, күңелен дә биләй алмаҫлыҡ һүҙ теҙмәһенә әйләнә. Күҙҙән үткәргән гәзит-журналдан шуларҙың бер аҙын ғибрәт өсөн бында килтереп китергә кәрәк: *алһыу күҙлек аша ҡарау* — урыҫтың *смотреть сквозь розовые очки* тигәненән күсерелгән, *бармаҡ аша ҡарау* — *смотреть сквозь пальцы* тигәндән, *ике аяҡка ла аҡһай* — *хромает на обе ноги* тигәндән, *ҡулдары төшә* — *руки опускаются* тигәндән, *ҡыҙыл әтәс осороу* — *пустить красного петуха* тигәндән, *теләһәң балта элеп ҡуй* — *хоть топор вешай* тигәндән, *тәүге ҡарлуғас* — *первая ласточка* тигәндән, *өйрәк осороу* — *пустить утку* тигәндән, *үҙ йөҙөбөҙҙө бысраҡка һуҡмайыҡ инде* — *не ударим в грязь лицом* тигәндән, *һауала эленеп ҡалды* — *повис в воздухе* тигәндән күсерелгән. Фразеология телдең лексикаһы эсенә иң матур, иң үҙенсәлекле бер төркөм булып инә. Ләкин ул һәр телдең үҙендә генә матур. Ул — һәр телдең башҡа телгә бирмәй торған үҙ байлығы. Фразеологияны телдән телгә тәржемә итеп булмай, ике телдәге фразеологияның мәғәнәләрен берберейһе менән сағыштырырға ғына мөмкин.

Фразеологик берәмек һәм тасуири һүҙҙәрҙән башҡа, ҡалыпланған һүҙ бәйләнештәрен һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп алыу ҙа башҡорт теленең тәбиғәтенә ҡаршы килә, һәм урыҫ теленә кире ауҙармайынса уларҙы ла аңлап булмай. Мәҫәлән, *бармаҡ менән генә һанарлыҡ* (үҙебеҙҙәге *берәмләп һанарлыҡ* урынына), *барыһын да күтәргә мөмкин, бер башҡа үҫеп киткән, бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем* (үҙебеҙҙәге *ҡара таңдан ҡара кискә тиклем* урынына), *бер ҡасан да булмағанса, биш бармағылай белә, бөтәһе лә*

*тәртиптә, күп нәмә хаҡында һөйләй, ҡулымдан килгәндең бөтәһен дә эшләрмен, тап бына ошо, тыныслыҡта ҡалдырығыҙ, үҙеңде ҡулға ал, үҙеңә ышанған һымаҡ ышанырға мөмкин* һ. б. һ. б. кеүек, ҡалыплашҡан һүҙ бәйләнештәре урыҫса уйлап яҙмаған кешенең башына ла килмәҫ ине. Урыҫса уйлап яҙған әҫәрҙе, әлбиттә, урыҫса уйлап уҡырға тура килә. Шулай итеп, башҡорт теле башҡорт яҙыусыһы менән башҡорт уҡыусыһы араһына килеп ҡыҫылған кәрәкһеҙ, формаль нәмәгә, оронсоҡҡа әүерелә. Был хәл Мәскәүҙең милли сәйәсәтенән дә яманыраҡ булып, беҙҙең телде ҡоротоуға алып бара. Беҙ үҙ тамырыбыҙға үҙебеҙ балта сабабыҙ.

Ошо күҙлектән *соглашение, встреча, переговоры* тигән кеүек һүҙҙәргә мәғәнәләш итеп алынған *килешеү, осрашыу, һөйләшеү* һымаҡ һүҙҙәрҙе бөтә ерҙә урыҫ теленә яраҡлаштырып, исем ҡылым формаһында ғына йөрөтөү ҙә башҡорт теленең ыңғайына килмәй. Мәҫәлән,

*...һис кисекмәй Советтар менән һөйләшеү башларға кәрәк* (А., 96, 4, 64) тигәнде *һөйләшә башларға* тип;

*Үҙ аллы һөйләшеүҙәр барышында ике яҡ та... бер-береһенә ғәйепләүҙәрҙе көсәйтә генә* (Б., 19.07.96) тигән һөйләмдә *һөйләшкәндә ике яҡ бер-береһен һаман нығыраҡ ғәйепләй* тип;

*Һөйләшеүҙәр тамам икәнде белдереп, Ленин йәнә урынынан йылдам күтәрелде* (А., 96, 5, 77) тигәнде *һөйләшеп бөткәнде белдереп* тип;

*Ата-әсәләр менән ун туғыҙ тапҡыр осрашыу уҙғарылды* (Б., 12.07.96) тигәнде *осрашылды* тип;

*14-се һөнәрселек-техник училищеһы ла башҡорт телен өйрәнеүҙе башлап ебәрҙе* (Б., 1.08.96) тиәһе урынға *өйрәнә башланы* тип әйткәндән зыян булмаҫ, файҙа ғына булыр ине. Ошо һуңғы миҫалдағы *һөнәрселек-техник* кеүек, башҡорт теленә йоҡмаҫлыҡ итеп урыҫтан күсергән ҡушар һүҙҙәр шулай уҡ беҙҙә әҙ түгел.

Ҡушар һүҙҙәрҙең төрлөһө бар. Ҡайһы береһендә, *ғилми-практик эш, иҡтисади-техник нигеҙ, емеш-йәшелсә магазины* тигәндәге кеүек, бер һүҙ икенсеһенә өҫтәлеп килә. Шул саҡта ҡушар һүҙҙең ике ағзаһы ла бер үк һүҙ төркөмөнән килеп, үҙ-ара ярашып торорға, береһе исем, икенсеһе исем ҡылым йә сифат булып, икеһе ике яҡҡа тартып тормаҫҡа тейеш. Мәҫәлән,

*Өс-дүрт кешенән башланған эш... сауҙа-етештереү үҙәге булараҡ үҫеш ала* (Й., 13.07.96);

*Яғыулыҡ-майлау материалдары етешмәй* (Б., 19.07.96);

*Дәүләттең ойоштороу-хоҡуҡи системаһы эффектлы эшләргә тейеш* (Б., 11.07.96) тигән һөйләмдәрҙәге *сауҙа-етештереү, яғыулыҡ-майлау, ойоштороу-хоҡуҡи* һүҙҙәренең бер ағзаһы исем һәм сифат, икенсе ағзаһы уларға иш була алмай торған исем ҡылым менән бирелгән. Ҡушар һүҙ итеп берләштерелгән был һүҙҙәр үҙ-ара ярашмай һәм һөҙөмтәлә улар ҡушар һүҙ булып китә алмай, яһалма бер һүҙ теҙмәһе генә булып ҡала. Был һүҙҙәрҙе дөрөҫ итеп әйтер өсөн, уйлап, мәғәнәһен белеп, үҙебеҙсә эшләргә кәрәк.

Ҡушар һүҙҙәрҙең *хәрби-промышленность предприятиелары, социаль-көнкүреш мәсьәләһе, мәҙәни-агитация бригадаһы, әҙәби-тәнҡит мәҡәләһе* тигән һымаҡтарында тәүге ағзаны икенсе ағзаның аныҡлаусыһы тип ҡарарға була. Шулай була икән, уларҙың араһына ҡыҫҡа һыҙыҡ ҡуйыу хәжәте бөтә, һәм улар ҡушар һүҙҙән аныҡлаусылыҡ мөнәсәбәтендәге һүҙ бәйләнешенә күсә.

Урыҫ телендәген үҙгәртмәй күсереү арҡаһында, үҙебеҙҙең һүҙ тәртибенә ҡаршы килтереп, тиҫкәрегә әйләндереп яһаған ҡушар һүҙҙәр ҙә беҙҙә йөрөп ята. Мәҫәлән, *дом-музей* тигәндә *йорт-музей* тимәй, *музей йорт* тиһәк, школа-интернат, лицей-интернат тигәнде *мәктәп-интернат, лицей-интернат* тимәй, *ятаҡлы мәктәп, ятаҡлы лицей* тиһәк, *поэт-просветитель* тигәнде *шағир-мәғрифәтсе* тимәй, *мәғрифәтсе шағир* тиһәк, йәки,

*Ул башҡорттар... хикәйә-притчалар яҙып ҡалдырған* (А., 96, 8, 123) тигәнсә, *фәһемле хикәйәләр* тиһәк, башҡорт теленең йәйына килеп аңлашылып торор ине.

Яҙма телдең һүҙ ҡулланышындағы етешһеҙлектәрҙе төркөм-төркөмгә йыйып күҙәтеп сыҡҡандан һуң, нык килешмәгән һүҙҙәрҙең бер аҙын айырым-айырым алып ҡарап китмәйенсә лә һис мөмкин түгел. Ул һүҙҙәр бында алфавит тәртибенә һалып килтерелә.

**Аңламаусанлыҡ** — *недоумение* һүҙенә мәғәнәләш итеп кемдең йәки ниҙеңдер тәбиғәтенә хас сифатты белдерә торған *-сан* ялғауы менән яһалған да, *-лыҡ* ялғауы менән исемгә әйләндерелгән: *Уның бөтә булмышы аңламаусанлыҡ, ҡарашы үпкә менән тулғайны* (А., 96, 1, 46). Миҫалдағы *аңламаусанлыҡ* һүҙе шәхескә хас тәбиғи сифатты түгел, ә уның шул мәлдәге кисерешен күрһәтер өсөн ҡулланылған. Тимәк, ялғауҙың мәғәнәһенә был һүҙ тап килмәй. Шулай булғас, теләгән мәғәнәне ул бирә алмай. Халыҡ был мәғәнәне *аптырау, аптыраш* тигән һүҙҙәр менән төшөндөрә, урыны менән башҡа һүҙ әйтеүе бар, ләкин *аңламаусанлыҡ* тигән һүҙҙе ул башына ла килтерә алмай.

Ошо юл менән яһалған *килешмәүсәнлек, ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, тыңламаусанлыҡ* тигән һүҙҙәр ҙә үҙ маҡсатына яуап бирмәй. Мәҫәлән, *...Яңы көрәш аңлыраҡ һәм килешмәүсәнлек шарттарында бара* (А., 96, 4, 132) тигән килешһеҙ һөйләмдәге *килешмәүсәнлек* бик аңлайышһыҙ һүҙ булып тора.

**Аңлашылмаусылыҡ** — *недоразумение* һүҙенә мәғәнәләш итеп кемдеңдер эш-шөғөлөн күрһәтә торған *-сы* ялғауы менән яһалған да *-лыҡ* ялғауы менән исемгә әйләндерелгән: *Әҫәрҙе ҡулдан ҡулға күсергәндәме... ҡайһы бер аңлашылмаусылыҡтар килеп сыҡҡан* (А., 96, 1, 148). Был яһалма һүҙҙең *аңлашылмаусанлыҡ* тигән вариантын да ҡулланып йөрөтәләр. Ләкин ҡалай ғына итһәләр ҙә, ҡушылған ялғауҙар был һүҙгә теләгән мәғәнәне бирә алмай, шуға күрә ул беҙҙең телгә ят һүҙ булып ҡала. Халыҡ быны *яңлышыу, яңлышлыҡ,* бик тә булмаһа, *аңлайышһыҙлыҡ* тип әйтә.

Ошо уҡ юл менән йәнә *недоверие* тигәнгә тап килтермәк булып, *ышанмаусылыҡ* тигән бер һүҙ яһайҙар. Мәҫәлән, *...Халыҡ тарафынан һайланған законлы Башревкомға ышанмаусылыҡ белдереп, «ҡәтғи саралар» ҡулланыу нимәне аңлата?* (А., 96, 6, 42). Быныһы ла һүҙ яһау ҡанунын боҙа һәм башҡорт теленә бөтөнләй йоҡмай.

**Атайсал** — бөрйән ырыуындағы атайсал араһына башланғыс биргән кеше исеме, хәҙерге Санъяп, Ҡасҡын, Иҫке Сибай ауылдарының баш бабаһы. Шул бабаның исеменә бер диуана һоҡланып: *О! Атайсал!* — тине лә, *ватан* мәғәнәһендә ҡуллана башланы. Телде уйынсыҡ урынына күргән кешеләр шуны күтәреп алды. Барлыҡҡа килде яңы һүҙ!

Мин Атайсалдың кем булғанын, ул исемде *ватан* мәғәнәһендә йөрөтөп булмағанын аңлатып, ике тапҡыр гәзиткә яҙып сыҡтым. Бер аҙ төшөнөп ҡалғандай булғайнылар, ләкин «Башҡортостан» гәзитендә (26.05.94) Басир Дәүләтов (Мәһәҙиев) миңә ҡаршы «Матур һүҙҙән баш тартмайыҡ» тип яҙғас, тағы әлеккегә ҡайттылар.

Б. Дәүләтов *атайсал* һүҙенең *ватан* төшөнсәһендә әҙәби телгә, шиғриәткә «ныҡлап» инеп китеүе «Сибай» йырынан килә, шуға күрә уны ҡабул итергә мәжбүрбеҙ тигән фекерҙә тора. *Атайсал* тип йырлағанда Сибайҙың *ватанды* түгел, ә *Атайсал* тигән ауылды күҙҙә тотҡанын ул иҫәптән сығара һәм, халыҡ күңеленә инеп киткән, тип төптө бушты һөйләй. Был һүҙ *«ватан»* мәғәнәһендә халыҡ күңеленә инмәгән, уны барлығы яҙышҡан һәм шулар тирәһендә йөрөгән ҡайһы бер кеше генә уйнатып алып китте.

*Атайсал* исеменең яңы төшөнсә алып китеүенә матур, «образлы» булыуы, тамырында *атай* тигән һүҙ ятыуы

сәбәпсе булды, «бик килешле», «бик кәрәкле булған быңдай һүҙ», ти Б. Дәүләтов, матур һүҙҙе теләгән бер мәғәнәгә бороп була икән, тип уйлай. Әммә, беренсенән, был исемдең тамырында *атай* һүҙенең булыуы бик шикле, сөнки бер кем дә балаһына *Атай* тип исем ҡушмай, ә быңа уның *ат* тигән һүҙҙән яһалған булыуы бик мөмкин, боронғо башҡорттар *ат, эт* һүҙҙәренән исемде күп яһаған; икенсенән, *яман* тигән һүҙ *яҡшы* тигән һүҙҙән матурыраҡ яңғырай, тип мәғәнәләрен алмаштырып булмаған кеүек, бер һүҙгә лә яңғырашына ҡарап мәғәнә биреп булмай.

Б. Дәүләтов, кеше исеменең ер-һыуға, хатта ҡитғаға, милләткә атама итеп ҡушылыуы мөмкин, шулай булғас, Атайсал исемен *ватан* мәғәнәһендә ҡулланыу бик яҡшы, тип бара. Әлбиттә, кеше исемен конкрет бер нәмәгә атама итеп ҡушыу — тәбиғи хәл. Шуның өсөн башҡорт ауылдарының күпселеге кеше исемен йөрөтә, Иҫке Сибай ауылының тәүге исеме Атайсал булған, Бөрйән районында шул уҡ Атайсал бабаның исеме менән аталған йылға, тау, ялан бар. Быға берәү ҙә ҡаршы килә алмай. Шунан тыш, ниндәйҙер сифаты менән ныҡ танылған кешенең исеме ҡайһы берҙә шул сифатты аңлата торған һүҙгә лә әйләнеп китә. Мәҫәлән, Д. Юлтыйҙың «Ҡарағол» пьесаһындағы Әпкәләйҙең исемен беҙҙең заманда *ярамһаҡ* тигән мәғәнәлә йөрөтәләр ине. Быңың бөтәһе лә конкрет атамаға, конкрет ҡушаматҡа ҡайтып ҡала, һәм, иң мөһиме, берәүҙең исеме конкрет бер нәмәгә йәки сифатҡа атама итеп тағыла икән, ул кешенең баяғы нәмәгә йәки сифатҡа туранан-тура ҡағылышы, мөнәсәбәте була. Буштан-буш ҡына бер кемдең исеменә лә бүтән төшөнсә биреп әйтмәйҙәр: Атайсал бабаның йәйләгән йәки торған яланын *Атайсал яланы* тип атағандар, Әпкәләй сиктән тыш ярамһаҡ булған өсөн ярамһаҡ кешене *әпкәләй* ти башлағандар. Шул рәүештә конкрет атамаға әйләнә алһа ла, кеше исеме бер ваҡытта ла абстракт, дөйөм төшөнсә алып, мәҫәлән, *йыһан, донъя, ил* тигән кеүек һүҙҙәргә тиң булып йөрөй алмай. Тимәк, Атайсал бабаның исемен дә «матур һүҙ» тип *ватан* мәғәнәһендә ҡулланыу хилаф була. Был эш телгә анһат, еңел ҡарағандан килә. Тел уйынсыҡ түгел, еңеләйеп алған баш менән уны теләһә нисек төрткөсләргә ярамай*.

---

* Минең *атайсал* һүҙенә ҡаршы икәнемде белә тороп, «Ағиҙел» журналы, ҡарышҡан кеүек, мин биргән бер бәләкәй генә хәбәрҙе «Атайсалға мөхәббәт» тигән баш менән сығарған (1997, № 6)

**Ауыҙ-тел ижады** — *устное народное творчество* тигән һүҙгә мәғәнәләш итеп күсерелгән: *һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын өйрәнеүгә, үҫтереүгә иғтибар артты* (Й., 3.08.96). Был *ауыҙ-тел* һүҙенең башҡорт телендә булыуы, ниндәйҙер мәғәнә йөрөтә алыуы ла, *устный* тигәнде аңлатыуы ла мөмкин түгел. Уны, әлеге, һәр урыҫ һүҙенә иш кәрәк тип, баш ҡатырып ултырған кешеләр генә уйлап сығарған. Ә ғәмәлдә уның да, *устный* тигәндең дә беҙгә бер кәрәге юҡ, сөнки *устное народное творчество* тигәнде *фольклор* тигән бер һүҙ алмаштыра. Ә *фольклор* һүҙе инглиз телендә *халыҡ белеме (ижады)* тигәнде белдерә. Тимәк, *халыҡтың ауыҙ-тел ижады* тигән мәғәнәһеҙ оҙон һүҙҙе *халыҡ ижады* тип кенә әйтеп була.

**Ауыҙ тултырып һөйләү** (йәки **әйтеү**) — хәҙерге ваҡытта бик урынһыҙ ҡуллана башланылар: *Әлегә ауыҙ тултырып маҡтана алмайбыҙ әле* (Б., 26.06.96). Был һүҙ халыҡ телендә кемдеңдер бик ҙур итеп бушты, ялғанды һөйләгәненә кире мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә. Мәҫәлән, *Оялмай ҙа, беҙҙе яманлап, ауыҙ тултырып һөйләп ултыра.* Телдең нескәлектәрен белергә, һүҙҙең ҡайҙа, ниндәй шартта ҡулланылғанына иғтибар бирергә кәрәк.

**Ашъяулыҡ** — һүҙҙе, йәнәһе, тәүге рәүешенә килтереп, «дөрөҫ» итеп шулай яҙалар: *Уртаға ашъяулыҡ йәйелде, тәүҙә тоҙ, шунан сәй килтерҙеләр* (А., 96, 10, 44). Ябай халыҡ был һүҙҙе *ашаулыҡ* тип әйтә. Аш табынына йәйә торған был нәмәнең яулыҡҡа бер ҡатнашы ла юҡ. Яһалышы буйынса ла, мәғәнәһе буйынса ла ул *көтөүлек, сәсеүлек* тигән һүҙҙәргә оҡшаған һәм аш-һыу ҡуйып ашар өсөн тәғәйенләнгән ябыуҙы, аш урынын аңлата. Уны яулыҡҡа әйләндермәй, үҙ асылына ҡайтарып, *ашаулыҡ* тип яҙған яҡшы.

**Баҫалҡы, баҫалҡылыҡ** — *скромный, скромность* тигән һүҙҙәргә мәғәнәләш итеп йөрөтөлә: *Был урында баҫалҡылыҡ күрһәтеү урынһыҙ... Ҡайҙа эшләгәнеңде онотма* (А., 96, 11, 5). Ләкин был һүҙ *скромный* тигәндең мәғәнәһенә тура килмәй. *Скромный* кеше үҙенең шәплеге, эше менән маҡтанмай, әҙәпле, тәрбиәле була, ә *баҫалҡы* кеше тыныс тәбиғәтле, ипле була. Уның мәғәнәһен М. Ғафури бик дөрөҫ биргән. *Минең атай,* — ти ул, — *...үҙ эшенән башҡаны белмәй, ауылдағы төрлө талашлы эшкә ҡатнашмай, бер нәмәгә лә артыҡ асыуланмай торған баҫалҡы кеше ине* (Әҫ., IV, 1955, 23-сө бит). Урыҫса уйламай, үҙенсә һөйләгән башҡорт был *скромный* тигәнде һүҙ ыңғайында урынына ҡарап, төрлөсә әйтә ала.

**Бронза** — урыҫ теленән алынған (урыҫ үҙе француздан алған). Ә башҡортта уның *ҡула* тигән үҙ һүҙе бар. Ул *ҡула*

*ҡаҙан* тигән һүҙҙә һаҡланған. *Ҡула ҡаҙан* тәүҙә ҡуланан ҡойолған ҡаҙан тигәнде аңлатып, аҙағыраҡ юлда йөрөтә торған бәләкәй аҫмалы ҡаҙандың атамаһы булып киткән. Шуның һымаҡ, *баҡырса* тигән һүҙ ҙә башта баҡырҙан яһалған сәйгүн тигәнде белдереп, һуңынан *сәйгүн* тигән дөйөм мәғәнә алған. Үҙ телебеҙҙең мөмкинлегенән файҙаланып, *бронза* урынына *ҡула* һүҙен йөрөтөү, әлбиттә, бик яҡшы булыр ине.

**Бәйге** — *конкурс* һүҙен алыштырыр өсөн ҡуллана башланылар: *Балалар сығышы халыҡ ижады бәйгеһенә... сын һиҙәптәй булды* (Б., 5.07.96). Хәҙер шулай уҡ *йыр бәйгеләре, заман ҡыҙы һәм егете бәйгеләре* лә үткәрелә. Ләкин *бәйге* һүҙенең мәғәнәһе *конкурс* тигәнгә тура килмәй. Бәйгенең үҙәгендә ат сабышы була. Тәүҙә беренсе тапҡыр сабышҡан йәш аттарҙы яҡын арağа ебәрәләр, уны *кесе бәйге* тиҙәр. Шунан тәжрибәле аттарҙы алыҫ арағa сабыштырып, *оло бәйге* яһайҙар. Ошо бәйгене йыр, уйын, көрәш һәм башҡа төрлө ҡыҙыҡ менән биҙәп, матур байрамға әйләндерәләр. Һуңғы ваҡытта *һабантуй* тип, уның исемен дә, эске йөкмәткеһен дә үҙгәртеп ебәрҙеләр. Ә *конкурс* — латин һүҙе, ул урыҫ телендәге *соревнование* һүҙенә, ә *соревнование* тигәне башҡорт телендәге *ярыш* һүҙенә тотош тап килеп тора. Шулай булғас, *конкурс* тигәнде үҙебеҙсә *ярыш* тип кенә әйтеп була. Ниндәй генә конкурс булмаһын, барыбер унда кеше үҙ-ара ярыша. Бәйгелә кеше ярышы ҡыҙыҡ өсөн генә була, төп урында ат ярышы, ат сабышы тора.

**Генеральный** — шул уҡ *генераль* тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Урыҫ теле аша көнбайыш телдәренән ингән сифаттарҙы башҡорт теле, ғөмүмән, тәүге үҙ формаһына ҡайтара: *актуальный — актуаль, санитарный — санитар, технический — техник*. Әммә ни сәбәп менәндер беҙҙә ҙур түрәләрҙең вазифаһындағы *генеральный* һүҙен *генераль* тиергә ҡурҡып, *Башҡортостан телерадиокомпанияһының генеральный директоры, БЭТО концерны акционерҙар йәмғиәтенең генеральный директоры* тип яҙалар. Был форма башҡорт теленә бөтөнләй йоҡмай һәм уны һаҡлауға һис бер нигеҙ юҡ.

**Герой** – һәр урыҫ һүҙенә — бер башҡорт һүҙе, тигән фекерҙең көслө сағында килеп ингән, йәнәһе, *храбрый — батыр, смелый — ҡыйыу,* ә *герой ... герой* була. Шулай итеп әүәлге ысын башҡорт батырҙары (Алдар батыр, Салауат батыр һ. б.) *храбрый* ғына булып ҡала, ә хәҙерге *геройҙар* уларҙан юғары күтәрелә. Ғәмәлдә *батыр* менән *геройҙың* бөгөнгө мәғәнәһендә бер айырма ла юҡ, һәм беҙгә *герой* ти-

гән ят грек һүҙен бөтөнләй ҡулланмай, бөтә ерҙә *батыр* йәки *ҡаһарман* һүҙен йөрөтөргә мөмкин.

*Герой* һүҙенең икенсе мәғәнәһе әҙәби шәхесте белдереүгә ҡайтып ҡала. Унда ла был һүҙҙең кәрәге юҡ. Ул урында тейешле мәғәнәне дөрөҫөрәк биргән *әҙәби шәхес* һүҙен ҡулланып була. Шулай итһәк, *ыңғай герой* ҙа герой, *кире герой* ҙа герой булып йөрөй алмаҫ ине.

**Ейән** — *внук* һүҙенә мәғәнәләш итеп хата йөрөтөлә. Уға шул мәғәнәне тағып, Т. F. Баишев тәүҙә «Русско-башкирский словарь» тигән һүҙлеккә индерә, шунан һуң «Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку» (1955) тигән китабында: *внук — ейән, внучка — ейәнсәр, правнук — бүлә, правнучка — бүләсәр, праправнук — тыуа, праправнучка — тыуасар* һ. б. тип 6—7 быуынға хәтле теҙеп яҙып сыға. Был эште Т. F. Баишев, әлбиттә, әлегесә һәр урыҫ һүҙенә иш табып, башҡорт телен байытыу ниәте менән эшләй. Шул уҡ теләктә торған яҙыусылар уның «табышын» күтәреп ала һәм тора-бара был «яңы» һүҙҙәр башҡа зыялыларға таралып, «әҙәби телгә» инеп китә. Ләкин башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ һ. б. төрки телдәрҙең үҙ-ара тап килеп торған мәғлүмәттәре Т. F. Баишев ҡорған «төҙөк» бүленеште дөрөҫләмәй. Ул мәғлүмәттәр буйынса, икенсе ауылға кейәүгә сыҡҡан ҡыҙҙың балалары тыуған ауылының кешеләренә (шул иҫәптән, үҙенең ата-әсәһенә) *ейән (ейән ул, ейән ҡыҙ)* була. Ҡайһы бер яҡта сит ауылға сығыуын да шарт итеп ҡуймай, ғөмүмән ҡыҙының һәм һеңлеһенең балаларын *ейән ул, ейән ҡыҙ* тип атайҙар. Шул уҡ кешеләр *ейән ҡыҙҙың* ирен *ейән кейәү* тип йөрөтә. Мәҫәлән, Әбйәлил районының Яңы Балапан ауылында торған Ишмөхәмәт сәсән Баймаҡ районының 2-се Этҡол ауылындағы Fәбит сәсәнде *ейән кейәү* тип, «Урал батыр» ҡобайырын ятлатҡан. Әгәр Fәбит сәсәндең ҡатыны Ишмөхәмәт сәсәндең *внучкаһы* булған булһа, ул уны *ейән кейәү* тип әйтмәҫ, *кейәү* тип кенә әйтер ине. Тимәк, Fәбит сәсәндең ҡатынының әсәһе Яңы Балапан ауылыныҡы булған, шуның өсөн Ишмөхәмәт сәсән Fәбит сәсәнде *ейән кейәү* тигән. Шунан һуң, башҡорттар *ейәнсәр* тип *внучканы* түгел, *ейәндең* балаларын әйтә *(ейәнсәр ул, ейәнсәр ҡыҙ)*. Апалы-һеңлеле ике ҡатындың балалары (әсәһе яғынан ике туғандар) бер-береһен *бүлә, бүләләрҙең* балалары *(әсәһе яғынан өс туғандар)* бер-береһен *бүләсәр* ти. Был һүҙҙәрҙәге *-сәр* ялғауы ҡыҙ енесен түгел, әбаланың бер быуынға йәшерәк булғанын күрһәтә *(ейәнсәр* — ейәндең балаһы, *бүләсәр* — бүләләрҙең балалары).

Урыҫса *Банное озеро* тип йөрөтөлгән күлде башҡорттоң *Мауыҙҙы күле* тигәнен дә белмәй, *Бана күле* тип һүҙлеккә

индергән заманда *ейән, булә* һүҙҙәрен яңлыштырып, булмағанды яһап бөткәндәренә аптырамаҫка ла булыр ине, ләкин тейешенсә өйрәнмәгән, уйламаған көйө, урыҫ теленә яраҡлашыр өсөн генә үҙ телебеҙҙе боҙоу, зәғифләү, телгә ғәжәп анһат, яуапһыҙ ҡарау һаман дауам итә, һаман көсәйгәндән-көсәйә. Шундай яуапһыҙлыҡ менән әҙәби яҙма телгә индергән хата нәмәләрҙе хәҙер төҙәтеүе лә ҡыйын, улар үҙенә тейешһеҙ урынды биләп алған һәм һүҙлектән һүҙлеккә, әҫәрҙән әҫәргә, кешенән кешегә күсеп һаман нығына бара.

Урыҫ телендәге *внук, внучка* тигән һүҙҙәргә килгәндә, уны күпселек ерҙә башҡорт *улым, ҡыҙым* тип әйтә һәм бик кәрәк булғанда ғына *улымдың улы, улымдың ҡыҙы* тип асыҡлап ҡуя. Был ғөрөфтө аңлауы бер ҙә ҡыйын түгел, сөнки атаһының нәҫелен дауам иткән ир баланың балалары өлкән ғаилә башлығы өсөн дә үҙ балаһы булып ҡала, ә иргә сыҡҡан ҡыҙының башҡа нәҫелдән тапҡан балаларын ул ғаилә башлығы (ҡыҙҙың атаһы) үҙ балаһына һанай алмай, шуға күрә уларҙы икенсе төрлө итеп, *ейән* тип атай. Икенсе ауыл кешеһенә иргә сығып, шул ауылдың нәҫелен үрсеткән ҡыҙҙың балалары үҙенең ата-әсәһенә генә түгел, тотош тыуған ауылына ейән булыуы ла шунан килә.

Шундай уҡ ҡараш башҡа халыҡтарҙың телендә лә сағыла. Мәҫәлән, ғәрәп телендә лә *внук, внучка, племянник, племянница* тигәнде аңлатҡан айырым һүҙҙәр юҡ. Улар ҙа, хәс башҡорт кеүек, *внук* тигәнде *улымдың (ҡыҙымдың) улы* тип, *внучка* тигәнде *улымдың (ҡыҙымдың) ҡыҙы* тип, *племянник* тигәнде *ағайымдың (энемдең) улы, апайымдың (һеңлемдең) улы* тип *племянница* тигәнде *ағайымдың (энемдең) ҡыҙы, апайымдың (һеңлемдең) ҡыҙы* тип әйтә. Әммә шулай ҙа боронғо башҡортта улының балаларын атар өсөн дә айырым һүҙ булғанын ошоғаса һаҡланған мәғлүмәт буйынса сырамытып була.

Туғанлыҡ терминдарын яҡшы өйрәнгән Н. В. Бикбулатов халыҡ хәтеренән юйылып бөтөп барған *торон* һүҙенең ҡасандыр башҡортта *внук* тигән мәғәнәлә йөрөгәнен билдәләп китә. Ысынлап та, «Ек Мәргән» тигән боронғо башҡорт хикәйәтендә *Ҡәҙерле нәнә үҙенең шаян торондарының уҡ, йәйә менән уйнағанын рәхәтләнеп ҡарап тора, уларҙың тура атҡанына һөйөнә ине* тигән һүҙҙәр бар. Шундағы *торон* һүҙе, һис шикһеҙ, *внук* тигәнде аңлата. Төрөк телендә лә шул һүҙ *внук* мәғәнәһендә йөрөй. Ҡайҙандыр белеп, Ғ. Ибраһимов «Ҡинйә» романында *внук* тигәнде гел генә *торон* һүҙе менән бирә. Урыҫтарҙың *внук, внучка* тигәненә мәғәнәләш итеп, уландарҙың балаларын атай торған һүҙ бик

кәрәк булып киткән икән, уны мәғәнәһе буйынса бөтөнләй тап килмәгән *ейән* һүҙе менән атағанса, ошо *торон (торон ул, торон ҡыҙ)* һүҙе менән атап, торондоң балаларын *торонса (торонса ул, торонса ҡыҙ)* тип алғанда бер ҙә зыян булмаҫ ине. Ул саҡта, исмаһам, борондан килгән *ейән, бүлә* һүҙҙәренең мәғәнәһен яңлыштырыу булмаҫ ине.

**Етем** — һүҙҙең был варианты дөрөҫ түгел. Бәлки, ҡайһылыр яҡта уны шулай тип әйтеү ҙә барҙыр, ләкин башҡорт халҡының күпселеге *йәтим* ти, һәм ул ғәрәп телендә лә — *йәтим*. Һүҙҙең был *етем* тигән яҙылышы ниндәйҙер билдәһеҙ сәбәп менән тәү башлап Ғ. Дәүләтшиндың 1930 йылғы орфографик һүҙлегенә инә. Шунан күсереп уны Ҡ. Әхмәр 1952 йылғы орфографик һүҙлеккә ала, шуның менән әҙәби вариант итеп нығытып ҡуя. Ләкин барыбер кеше *йәтим* тип һөйләй, *етем* тигән яҙылышты ят күрә һәм йыш ҡына *йәтим* тип дөрөҫләп ебәрә. Мәҫәлән, *Бында көн күрһәтмәҫтәр, йәтим ҡайҙа — һүҙ шунда, тиҙәр* (А., 96, 1, 11); *Йәтимлек, хәйерселек бәкәленә һуҡты, шикелле* (Ш., 96, 6, 16). Шуға күрә ғәрәп телендәге һәм күпселек башҡорттағы *йәтим* тигән вариантын әҙәби яҙма телгә индерергә кәрәк.

**Икмәк** — *хлеб* һүҙенә тотош яраҡлаштырып, *иген, ашлыҡ* тигән мәғәнәлә лә ҡуллана башланылар: *Яңы хаҡтар билдәләнеп өлгөрмәһә, икмәк үҫтереү ҙә крәҫтиән өсөн файҙаһыҙ эшкә әүерелеп китмәҫме?* (Й., 27.07.96). Башҡорттар икмәкте үҫтермәй, игенде үҫтерә, мейестә бешереп алғанын ғына *икмәк* ти. Урыҫ теленә баш эйәм тигәс тә, шул хәтле хәлгә төшөү ярамаҫ ине.

**Иртәгә** — ошо рәүештән сифат яһағанда ныҡ буталыу бар: *иртәгәге көн, иртәгәһе көн, иртәгеһе көн* һ. б. Быларҙың һуңғы икеһе бөтөнләй дөрөҫ түгел, сөнки *-һе* — сифат ҡылым ялғауы, уны ҡылымға ғына ҡушып була *(киләһе йыл)*.

Башҡорт телендә *иртә* тигән һүҙ бар. Ул исем *(йәй иртәһе)*, сифат *(иртә таң)*, рәүеш *(иртә тороу)* мәғәнәһендә йөрөй. Шул һүҙҙән *-н* тигән рәүеш ялғауы *(иртән)* һәм *-гә* тигән килеш ялғауы *(иртәгә)* ярҙамында ныҡлы рәүеш яһала, һәм был ике һүҙ бер үк мәғәнәгә эйә була. Ҡайһы бер диалектта *иртән* һүҙен *иртәнсәк* мәғәнәһенә, *иртәгә* һүҙен *киләһе көндә* тигән мәғәнәгә бәйләһәләр ҙә, был уларҙың мәғәнә уртаҡлығын бөтөрә алмай, улар икеһе мәғәнәләш һүҙ булып ҡала: *Иртән эшкә барам* тигән һүҙ менән *Иртәгә эшкә барам* тигән һүҙ бер-береһенән айырылмай. Шуның өсөн Эйек-Һаҡмар һөйләшендә *иртәгә* тигәнде гел генә *иртән* тип әйтәләр.

Хәҙер нык̧лы рәүеш мәғәнәһе алған һүҙҙән нык̧лы сифат яһар өсөн халык̧ телендә ике тиң мәғәнәле һүҙҙең *иртәгә* тигән формаһына түгел, *иртән* тигән формаһына *-ге* ялғауы к̧ушалар: *иртәнге көн, иртәнге эш.* Шуға күрә, *Иртәнгеһен ишәк к̧айғыртк̧ан* тигән мәк̧әлдә *иртәгәгеһен* йәки *иртәгәһеһен* тип әйтмәйҙәр, ә телдең яйына килтереп, дөрөҫ итеп әйтәләр.

Бынан тыш, нык̧лы сифат мәғәнәһендәге һүҙҙе халык̧ телендә *иртә* тигән тамыр һүҙгә *-ге* ялғауы к̧ушып та яһайҙар. Ул сак̧та баяғы мәк̧әлде *Иртәгеһен ишәк к̧айғыртк̧ан* тип әйтәләр, ләкин бында инде *-һе* ялғауы сифат к̧ылым ялғауы түгел, эйәлек ялғауы була. Ошондағы *иртәгеһе* тигән һүҙгә төбәү килеш ялғауы к̧ушһаң, *иртәгеһенә* тигән рәүеш яһала: *Улар китте, иртәгеһенә беҙ ҙә к̧уҙғалдык̧.*

*Иртә* тигән һүҙҙән төрлө мәғәнәләге һүҙ яһағанда халык̧ бер вак̧ытта ла яңлышмай, әллә ниндәй формалар яһап аптырамай.

**Йәшәйеш** — *жизнь* тигән һүҙгә мәғәнәләш итеп яһалған: *К̧ешеләр үҙ к̧улдары менән үҙ йәшәйешен күрәләтә к̧ара төнгә батырыуы ни тиклем аяныс* (А., 96, 5, 143); *Уйын — к̧оро уйын ғына түгел, йәшәйеш... мәктәбе* (Б., 10.07.96); *...Киләсәк иң элек беҙҙән, балаларыбыҙҙың бөгөнгө йәшәйешенән башлана* (Й.,13.07.96) һ. б.

Ошо һөйләмдәрҙә һәм ошоноң һымак̧ башк̧а урында *йәшәйеш* һүҙе тейешле мәғәнәне бер ҙә бирә алмай, мәғәнәһеҙ, буш бер һүҙ булып к̧ала. Шуға к̧арамаҫтан, яҙышк̧ан кешеләр уны һуңғы вак̧ытта бик йыш к̧уллана һәм к̧айһы берҙәре яңы яһалған шул һүҙҙе үткән дәүерҙәргә күсереп, мәҫәлән, *Улар өсөн тарих та, милләт тә, халык̧тарҙың үҙенсә йәшәйеш рәүештәре лә юк̧* тигәнде хатта Зәки Вәлиди ауыҙынан әйттерә башланы. Ә ғәмәлдә уны үткән дәүергә генә түгел, хәҙерге дәүергә лә йәбештереп булмай. К̧улланып маташк̧ан бөтә ерҙә уны *донъя, тормош, көнкүреш, көн, тереклек* тигән һүҙҙәрҙең береһе менән алмаштырып була, тимәк, телдәге ысын һүҙҙәр урынына килешһеҙ бер яңы һүҙ яһап алыуҙың бөтөнләй кәрәге юк̧ булып сыға. Икенсенән, был һүҙҙең яһалышын да башк̧орт теленең һүҙ яһау к̧анунына һыйҙырып булмай: к̧анун буйынса, *-ш* ялғауы туранан-тура к̧ылымдың нигеҙенә к̧ушыла, йәғни, *һук̧ — һуғыш, тала — талаш, к̧ара — к̧араш.* Ә бында уны хәбәр к̧ылымдың хәҙерге заман формаһына к̧ушып к̧уйғандар: *йәшәй — йәшәйеш.* Ошо йәһәттән дә был һүҙ к̧абул итерлек түгел.

Беҙҙең яҙышк̧ан кешеләргә *жизнь* тигән һүҙ бик ҙур к̧ыйынлык̧ килтерә. Улар урыҫса уйлап, урыҫ теленән ауҙа-

рып ултыра торғас, шул һүҙгә килеп төртөлә лә, ни тип әйтергә белмәй аптырап ҡала. Бына шул аптырағандан улар *йәшәйеш* тигән мәғәнәһеҙ һүҙҙе уйлап сығара. Урыҫ теленең ҡоло булмаһалар, ул һүҙ ҙә донъяла булмаҫ ине. Улар ҡайһы берҙә *йәшәйеш* тигән хилаф һүҙҙән башҡа, *йәшәү, тормош, ғүмер* тигән һүҙҙәрҙе иҫенә төшөрә, ләкин уларын да дөрөҫ ҡуллана алмай. Мәҫәлән,

*Йәшәү йәме, ... ғаилә ныҡлығы ошоларға (сабырлыҡҡа) ныҡ бәйләнгән бит* (А., 96, 5, 146) ти улар, ә мәғәнә буйынса бында *донъяның йәме* тиергә кәрәк.

*Улар был тормош тигәндең ҡатмарлылығын, хәйләләрен белеп бөтмәй* (Ш., 96, 4, 151) тигәнде йәнә *донъяның ҡатмарлығы* ти халыҡ.

*Ғүмерҙең ҡәҙерен белеп, мәғәнәле йәшәргә кәрәк* (А., 96, 10, 119) тигәнде лә *донъяның ҡәҙерен белеп* тип әйткәндә генә дөрөҫ була. Шулай уҡ *вечность жизни* тигәнде *йәшәүҙең мәңгелеге* тимәй, *донъяның мәңгелеге* тип, *духовная жизнь* тигәнде *рухи йәшәйеш* тимәй, *рухи донъя* тип әйткәндә генә мәғәнә тейешенсә асыла. Хәҙер *донъя* тигән һүҙҙең *жизнь* һүҙенә тап килгәнен онотоп бөттөләр, ә ул күп ваҡыт шул мәғәнәне дөрөҫ бирә һәм, иң мөһиме, үҙебеҙҙең фекер йөрөшөнә йоғоп тора.

Телдәге донъя һүҙен онотоуҙан тыш, баяғы *йәшәү, тормош, ғүмер* һүҙҙәрен бер-береһенә алмаштырып урынһыҙ ҡулланыу ҙа яҙма телдә йыш осрай. Мәҫәлән,

*Йәшәү нигеҙен баҙар, аҡса хәл итә* (Ш., 95, 4, 42) тигәнде *тормош нигеҙен* тип,

*Йәшәү дауам итә бит* (Й., 19.10.96) тигәнде *тормош дауам итә* тип әйткәндә генә мәғәнәгә тейешле асыҡлыҡ биреп була.

Урыҫ һүҙенә яраҡлаштырырға тырышып, башҡорт теленең мөмкинлектәрен сикләү яҙма телде ярлыландырыуға ғына түгел, бик ныҡ боҙоуға, зәғифләүгә килтерә. Әйтәйек,

*Туйыныу — кешелә иң көслө инстинкттыр ул. Беҙҙең ғүмер тип аталған биологик мөғжизәне тап шул ижад итә* (Б., 7.08.96) тигән һөйләмдәге *ғүмер* һүҙенең;

*Муйылдар, алма ағастары туй күлдәген кейгән. Ҡыҫҡаһы, йәшәү тантана итә* (Б., 27.07.96) тигәндәге *йәшәү* һүҙенең фекерҙе дөрөҫ асмағаны, был һүҙҙәр урынына *тереклек* тип әйтергә кәрәк икәне күренеп тора, әммә беҙҙекеләр, күрәһең, уны *жизнь* һүҙенә тап килмәй тип уйлай. Шуның кеүек,

*Кешеләргә йәшәү биргән моңдар ғына тынмаһын* (Й., 3.10.96);

*Үҙебеҙгә йәшәү бүләк иткән, оло донъяға юл асҡан тыуған төйәгебеҙҙе онотоп китмәйбеҙме?* (А., 96, 5, 145) тигән һөйләмдәрҙә лә йә *йән,* йә *тереклек* тип әйтергә кәрәк.

Был *йән* һүҙе лә хәҙерге яҙма телдә кәрәкһеҙгә ҡалды. Урыҫтар *жизнь отдать, спасти жизнь* тип әйтә икән, беҙҙә, йәнәһе, шуға тура килтереп, *ғүмерҙе биреү, ғүмерҙе һаҡлау* тип яҙалар, *ғүмер* һүҙенең бында һис тура килмәгәнен уйлап тормайҙар.

*...Үҙ ғүмерҙәрен аямай ут эсенә инә улар* (Й., 16.07.96) тигәндәге *ғүмерен аямай* һүҙе башҡорт телендә юҡ, уны *йәнен аямай* тиҙәр.

— *Һинең ғүмереӊ минең ҡулда... Һиңә ҡулым етә минең* (А., 96, 2, 99) тигәндә лә *ғүмереӊ* тигән һүҙ урынһыҙ, унын урынына *йәнең* тип әйтәләр.

*Йәшәү менән үлем тартҡылашҡанда урталыҡта... реаниматор тора* (Й., 19.10.96) тигән һүҙ башҡортса *йән талашып ятҡанда* тип әйтелә.

Урыҫ теленән күсермәй, үҙенсә яҙырға тырышҡан кеше *биться не щадя жизни* тигән һүҙҙе башҡорттарҙың *йән аямай һуғышыу* тип, *дороже жизни* тигәнде *йәндән артыҡ* тип, *между жизнью и смертью* тигәнде *йә үлә, йә ҡала* тип, һәм шулай уҡ *жизнь дорога* тигәнде *баш ҡәҙерле* тип, *положить жизнь* тигәнде *башты һалыу* тип әйткәнен белергә тейеш. Шуның өсөн халыҡ йырында *Ирҙәр үлә, башын һала, бөтмәҫ дандары ҡала* тип әйтелә, ә бер ҙә *ғүмерен бирә, ғүмерен һала* тип түгел.

Урыҫ телендәге *жизнь* тигән бер һүҙгә беҙҙең телдә әллә нисәмә һүҙ тура килә, һәм һәр һүҙ үҙ урынында тейешле мәғәнәне дөрөҫ кенә итеп асып тора. Был хәл башҡорт теленең һүҙгә бай булғанын күрһәтә. Матур, йоғошло итеп яҙыр өсөн, шул байлыҡты тотош үҙләштерергә, тулыһынса файҙаланырға, *йәшәйеш* тигән һымаҡ теләһә ниндәй мәғәнәһеҙ һүҙ яһап ултырмаҫҡа кәрәк.

**Киеренкелек** — *напряженность* тигән һүҙгә мәғәнәләш итеп яһалған: *Башкирпомощь комиссиялары менән урындағы власть органдары араһындағы киеренкелек бермә-бер артты* (А., 96, 6, 31).

Был тағы, баяғы *йәшәйеш* һымаҡ, кәрәкһеҙгә яһап алынған мәғәнәһеҙ һүҙ. Беҙҙә *көсөргәнешле, көсөргәнешлек* тигән һүҙ бар. Нимәгә кәрәк булғандыр инде тағы был «яңылыҡ»?

Үкенескә ҡаршы, беҙҙең арала теләһә ниндәй калька яһауға бик әүәҫләнеп алған кеше күбәйҙе. Улар шул ҡоротҡос ҡомарын тыйып, телде өйрәнеүгә күберәк көс һалһа, мең артыҡ булыр ине.

**Көнүҙәк** — *злободневный* тигәнгә мәғәнәләш итеп яһалған: *Етәксе эшмәкәрҙәр әҙерләү зарурлығы һәр саҡ көнүҙәк мәсьәлә булып һаналды* (Б., 26.12.96); *Был һүҙҙәр әле лә көнүҙәк яңғырай* (Б., 19.07.96).

Урыҫ теленән ауҙарып яҙырға күнеккән кешеләрҙән башҡа был зәғиф калька бер кемгә лә кәрәкмәй. Етмәһә, шуны урыҫ телендәге сифат урынына ла, *злободневно* тигән рәүеш урынына ла ҡулланып маташалар. Юғарыла килтерелгән башҡа калькалар һымаҡ уҡ, был һүҙ әҙәби телде сүплеккә әйләндереүҙән башҡа бер нәмәгә лә ярарлыҡ түгел.

**Күҙаллау** — *представлять* тигәнгә мәғәнәләш итеп әлеге калька яһауға әүәҫләнгән кешеләр тарафынан яһалған: *Запаста саҡта һуғышты уйын итеберәк күҙаллаған һалдаттар ҡапыл етдиләнә* (А., 96, 4, 115). Ошо бер миҫалдан уҡ *күҙаллау* һүҙенең ят икәне, урыҫ теленә кире ауҙармайынса аңлашылмағаны күренеп тора. Уны *уйлау,* бик булмаһа, *күҙ алдына килтереү* тип әйткәндә, үҙебеҙҙең телгә йоғоп торор ине. Бынан тыш, урыҫтың *представлять* тигәнен башҡорттар күп урында бүтән һүҙ менән әйтә. Мәҫәлән,

*Беҙ тормошто башҡасараҡ күҙаллайбыҙ* (Й., 7.06.97) тигәнде *күрәбеҙ тип;*

*Уның тормош юлын, хеҙмәтен күҙалланым да үҙем өсөн ҙур асыш яһаным* (Б., 14.09.96) тигәнде *күҙҙән үткәрҙем* йәки *уйланым* тип;

*Халыҡтарҙың донъя төҙөлөшөн күҙаллауы... күп төрлө һәм үҙенсәлекле* (Б., 12.07.96) тигәнде *донъя төҙөлөшө хаҡындағы төшөнсәһе* тип әйтһәк, һис һүҙһеҙ, башҡортса яҡшы аңлашыла. Был *күҙаллау* һүҙенең бөтә ерҙә урыҫ теленә яраҡлаштырып ҡулланылғаны асыҡ күренеп тора. Шул насар ғәҙәттән ҡотолһаҡ, уның беҙгә кәрәге лә булмаҫ ине.

**Күңел төшөү, күңелде төшөрөү** — *падать духом* тигәнгә яраҡлаштырып ҡулланалар: *(Директор) уҡытыусыға үҙенең ҡарашын тағыуы менән яңы ғына эш башлаған йәш уҡытыусыларҙың күңелен төшөрә* (Й., 3.08.96); *һәр саҡ үргә ынтылыусы Азат күңелен төшөрмәй* (Й., 19.10.96).

Был һүҙ башҡорт телендә миҫалдағыға ҡапма-ҡаршы мәғәнәлә йөрөй. Кеше нимәгәлер ихласлыҡ һиҙһә, теләге булһа, *күңеле төшә,* теләге булмаһа, *күңеле төшмәй* тиҙәр *(эшкә күңеле төшмәй, күңеле төшмәгәнде эшләмәй).*

**Ҡабул итеү** — яҙма тел һәр ваҡыт ошо рәүештә генә ҡуллана: *Ҡабул итеү бүлмәһенә халыҡ йыйыла башланы* (Б., 19.07.96). Шуның һымаҡ, *ҡабул итеү имтиханы, ҡабул*

*итеү комиссияһы, ҡабул итеү көнө* һ. б. тип яҙалар. Ғәрәп телендә *ҡобул* һүҙе үҙ алдына исем булып йөрөй. Шулай булғас, беҙҙә лә *ҡабул итеү* тигәнен ҡылым формаһы, *ҡабул* тигәнен исем итеп, *ҡабул бүлмәһе, ҡабул имтиханы, ҡабул комиссияһы, ҡабул көнө* тип йөрөткәндә, килешлерәк булыр ине. Беҙҙә ҡылым өҫтөнлөк итә, шуға күрә тел ҡанунын боҙмаҫлыҡ ерҙә мөмкин ҡәҙәр исемгә юл бирергә кәрәк.

**Ҡайтарылыу, ҡайтартыу** — ошо һүҙҙе *алып ҡайтыу, килтереү* тигән мәғәнәлә ҡуллана башланылар: *Интернаттың бер бүлмәһен... оҫтахана иттек, 20 яңы тегеү машинаһы ҡайтарылды* (Б.,25.07.96); *Быйыл бойҙайҙың суперэлита орлоғо ҡайтарылды* (Б., 19.10.96); *Ҙур сепаратор ҡайтартып, ул халыҡты таң ҡалдырған* (А., 96, 6, 158).

Башҡорт телендә *ҡайтыу, ҡайтарыу* һүҙенең ситкә киткән ерҙән үҙ өйөнә, иленә кире әйләнеп килгәнде йәки кире килтергәнде генә аңлатҡанын һәр кем белә. Үрҙәге миҫалдарҙа бер ҙә кире килтергән нәмәләр хаҡында түгел, ҡырҙан алып ҡайтҡан нәмәләр тураһында һүҙ бара. Нишләп тоҡ-томалға һүҙҙең мәғәнәһен боҙоу кәрәк булғандыр — һис аңлашылмай.

**Ҡалым** — урыҫтың *калым* тигәненә яраҡлаштырып, *ҡалын* тигән үҙ һүҙебеҙҙе шулай боҙоп ебәрҙеләр: *Ҡыҙға яусы ебәрһәң, ҙур ҡалым түләргә кәрәк* (А., 96, 1, 62).

Башҡортостандың көньяҡ һәм көнсығыш яғында бөтә башҡорт *ҡалын* ти. Туй йолаһын яҡшы белгән Мөхәмәтша сәсән Буранғолов менән Н. В. Бикбулатов та *ҡалын* тип яҙа. Урыҫ теленең йоғонтоһонан ҡотолоп, был һүҙҙе халыҡса алырға кәрәк.

**Ҡатын-ҡыҙ** — *женщина* тигән һүҙгә яраҡлаштырып, берлек мәғәнәһендә ҡуллана башланылар: *Тупһа алдында бер ҡатын-ҡыҙ күренде* (Б., 18.07.96); *Бүлмәгә... аҡ халатлы ҡатын-ҡыҙ инде* (А., 96, 41); *Стәрлетамаҡ район прокуроры ла ҡатын-ҡыҙ — Татьяна Саблина* (Б., 7.03.97).

Шулай уҡ *мужчина* тигәнгә яраҡлаштырып, *ир-егет* һүҙен ҡулланыу ҙа осрай: *Әле ҡырҡҡа ла етмәгән ҡаҡса ғына кәүҙәле ир-егеттең... йөҙө болоҡһоу* (Б., 22.08.96).

Был ҡушар һүҙҙәр күплек, дөйөмлөк мәғәнәһенә генә эйә, уларҙы берлек мәғәнәһендә, бер кешегә ҡарата әйтеү башҡорт теленең грамматик ҡанунына һыймай. Урыҫ теленә яраҡлашыр өсөн үҙебеҙҙең тел ҡанундарын боҙоу тел нигеҙен юҡҡа сығарыуға килтерә. Беҙгә нимә кәрәк: башҡорт теленең бөтә үҙенсәлеген, сафлығын һаҡлаумы, әллә уны урыҫ теленең суррогатына әйләндереүме? Шуны уйларға кәрәк. Был анһат мәсьәлә түгел.

**Ҡул суғы, суҡ һөйәге** — *кисть руки* тигәнгә калька итеп яһалған: *Тиреһе сырышҡан, суҡ һөйәктәре беленеп торған ҡулын күрешергә һуҙҙы* (Б., 23.07.96).

Был һүҙ ҙә, баяғыса, — үҙ телебеҙҙе меҫкенгә ҡалдырыу билдәһе. Хәҙерге башҡорт уны *ҡул осо* ти, ә элегерәк шул уҡ мәғәнәлә *әл* тигән һүҙ йөрөгән. Ул һүҙ башҡорт шәжәрәләрендә осрай, башҡа төрки телдәрҙә әле лә актив ҡулланыла. Урыҫ теленән мәғәнәһеҙ калька яһап алғанса, шул үҙ һүҙебеҙҙе кире терелтһәк, яҡшыраҡ булыр ине.

**Малай** — *мальчик* тигәнгә яраҡлаштырып ҡулланалар: *Улар... биш бала үҫтерәләр — дүрт малай һәм бер ҡыҙ* (Б., 13.09.96). Был урында, әлбиттә, урыҫтар *четырех мальчиков и одну девочку* ти, шулай булғас, беҙ ҙә, йәнәһе, уларса әйтергә тейеш. Ошонан башланған эш *ул, улан* тигән һүҙҙе беҙҙең телдән ҡыҫырыҡлап сығарыуға килтерҙе: *Сания иртән иртүк малайын етәкләп китә лә кис кенә алып ҡайта* (А., 96, 1, 16); ...*Ата-әсәнең берҙән-бер малайы Германияла хеҙмәт итте* (А., 96, 1, 117).

Хәҙер *минең улым, уның уландары* тип яҙғанды табыуы бик ҡыйын, хатта һөйләгәндә лә үҙ балаларын *Мальчикка* әйләндерә башланылар. Үҙебеҙҙең телдә *улым, уландарым* тигән матур һүҙ барында, балаларҙы эт исеме менән атау бер ҙә яҡшы түгел.

**Образ** — әҙәбиәт белемендә ҡулланыла: *Үҙенең артынан әйҙәрҙәй образдар бик һирәк* (А., 96, 5, 144).

Беҙҙә *һүрәт, шәхес* тигән һүҙҙәр бар. Шунан алып, был йоғошһоҙ, ят һүҙҙе *әҙәби һүрәт, әҙәби шәхес* тигән һүҙҙәр менән алыштырып булалыр, моғайын. Шул йүнәлештә әҙәбиәтселәр уйлаһа, башҡорт теле тағы бер килешһеҙ нәмәнән ҡотолор ине. Һәр хәлдә, килтерелгән миҫалдағы *образ* һүҙенә *әҙәби шәхес* тигән һүҙ тура килеп тора.

**Предмет** — *мәктәптә уҡытҡан фән* һәм *нәмә* тигән мәғәнәлә ҡулланалар: *110 берәмек шартлатҡыс предмет тартып алынған* (Ш., 96, 3, 117); *(Тормош һабаҡтары) яңы уҡыу предметы булараҡ саҡ формалашыу этабына аяҡ баҫҡан* (Й., 20.07.96).

Үҙебеҙҙә киң, асыҡ мәғәнәле *нәмә* тигән һүҙ бар саҡта беҙҙең тел *предмет* һүҙенә бер ҙә мохтаж түгел. Шулай уҡ мәктәптә лә элегерәк *предмет* тигән бер нәмә лә булмай торғайны, бөтәһен дә *фән* ти торғайнылар, һәм, ысынлап та, шул һүҙ тейешле мәғәнәне дөрөҫ бирә. Мәҫәлән, математика йәки биология ниндәй *предмет* булһын, улар бит — фән. Был *предмет* тигәнде башҡорт телендә ҡулланыу дөрөҫ түгел.

**Премия** — *бүләк* мәғәнәһендә ҡулланыла: *дәүләт премияһы, Салауат премияһы* һ. б. Шул уҡ *бүләк* мәғәнәһендә *награда* тигән һүҙҙе лә йөрөтәләр.

Үҙебеҙҙәге *бүләк* һүҙе етмәй икән, электән йөрөгән *һебә, бәйге* тигән һүҙҙәр бар. Һебәне кешенең яҡшы эше, батырлығы өсөн биргәндәр, бәйгене бәйгеләге сабышта алға сыҡҡаны өсөн биргәндәр. Шуларҙы ташлап, башҡорт теленә йоҡмаған сит һүҙҙәрҙе алыуҙың бер кәрәге лә юҡ. Һуңғы ваҡытта гәзит-журнал сит һүҙҙәр урынына үҙ һүҙҙәребеҙҙе ҡайтара башланы. Шуның кеүек, *бүләк, һебә, бәйге* тигән һүҙҙәрҙе ҡайтарып алғанда насар булмаç ине. Улар *премия, награда* тигәндән бер ҙә кәм түгел.

**Сиҙәм күтәреү** — *поднять целину* тигәндән күсерелгән: *Яҙ көнө ат һатып алдыҡ, сиҙәм күтәрҙек, арыш сәстек* (А., 96, 5, 126).

Башҡорттар уны *сиҙәм асыу* ти. Исмаһам, ошоноң һымаҡ ныҡ билдәле һүҙҙәрҙе урыç теленән алмаһындар ине.

**Сит ил теле** — *иностранный язык* тигәнгә яраҡлаштырылған: ...*Төп иғтибар сит ил телдәрен өйрәнеүгә бүленә башланы* (А., 96, 4, 123).

Элек *сит тел* тип һөйләй, *сит тел* тип яҙа торғайнылар. Хәҙер урыç телендә *иностранный* булғас, беҙҙә лә *сит ил теле* булырға тейеш тип үҙгәртеп ебәрҙеләр. Йәнәһе, урыç теленә тотош тап килеп торһа ғына дөрөç була.

**Танып белеү** — *познать, познание* тигәнгә мәғәнәләш итеп яһалған: *Бутәндәрҙең мине һәм халҡымды танып белеүен, аңлауын бик теләйем* (А., 96, 6, 7); *Донъяны танып белеү* (Б.,10.07.96).

Урыç телендәге *познать, познание* һүҙҙәре кемдең йәки ниҙеңдер ни икәнен белеү, аңлау тигәнде аңлата. Башҡорт телендә уны *төшөнөү, белеү, аңлау* тиҙәр, *таныу* тигән һүҙ бында бөтөнләй тура килмәй. Шулай була тороп, бер-береһенә йәбешмәгән *таныу* һәм *белеү* һүҙҙәренән мәғәнәһеҙ ҡушма һүҙ яһайҙар.

**Теләһә кем, теләһә ниндәй** — *любой* тигәнгә яраҡлаштырып ҡулланалар: ...*Теләһә ниндәй ойошманың, учреждениеның ишеген аяҡ тибеп кенә асабыҙ, теләһә кемде тәнҡитләйбеҙ* (А., 96, 11, 8).

Ғәмәлдә бындағы *теләһә* тигән һүҙ бөтә һүҙ бәйләнешенә *ыңғай баһаға торошһоҙ, юҡ-бар* тигән кире мәғәнә бирә: *теләһә кем* тигәс, *кәрәкмәгән юҡ-бар әҙәм, теләһә ниндәй* тигәс, *эшкә ашмаған, юҡ-бар* тигән һүҙ килеп сыға. Шуның кеүек, *теләһә нимә, теләһә нисек, теләһә ҡайҙа* тигән һүҙҙәр ҙә кире мәғәнәгә эйә. Урыç телендәге *любой*

һүҙенең мәғәнәһен *һәр, теләгән бер* тигән һүҙҙәр генә бирә ала. Телдәге шул нескәлекте белергә кәрәк.

**Тере** — *живой* тигән һүҙгә ярак̡лаштырып к̡улланалар: *К̡әйнәһе тере сак̡та өйҙәре лә таҙа, эштәре лә уң булған* (Б., 17.08.96); *Был һуғышта к̡ылынған гонаһтар тере к̡алғандарҙың хәтерендә мәңге һак̡ланасак̡* (Й., 12.09.96).

Башк̡орт кешеһе быңдай урында *тере* тимәй, *иҫән* ти. Ул *тере* һүҙе *үлеп терелде* тигән кеүек ерҙә генә әйтелә.

**Теүәл** — *точный* тигән һүҙгә мәғәнәләш итеп йөрөтәләр: *Хәҙер генә ул сиктәр теүәл күрһәтелгән, ер майҙандары билдәләнгән* (А., 96, 6, 6); *Мин теүәл генә итеп шуны әйтә алам* (А., 96, 1, 61).

Башк̡орт телендәге *теүәл* һүҙе ниҙеңдер һан, иҫәп яғынан тулы, күләм яғынан кәмселекһеҙ, бөтөн булғанын аңлата. Унан яһалған *теүәлләү* к̡ылымы ла һан һәм күләм яғынан бөтөн, тулы хәлгә килтереү, етеш итеү тигәнде белдерә. Үрҙә килтерелгән миҫалдарҙа һәм ғөмүмән уны *дөрөҫ* тигән мәғәнәлә к̡улланып маташалар. Ундай мәғәнә был һүҙҙә юк̡. Урыҫ теленә ярак̡лашыр өсөн генә булмағанды көсләп индереү менән бер нәмәгә лә өлгәшеп булмай. Шуға күрә *теүәл фәндәр* тигән термин да тейешле мәғәнәне бирә алмай. Мәғәнәһе аңлашылһын өсөн уны *тәбиғәт фәндәре* тиергә, ә ижтимағи донъяны өйрәнә торғандарын *йәмғиәт фәндәре* тиергә кәрәк.

**Тороп** — *тороп* тигән хәл к̡ылым менән яңлыштырып, хата яҙылған киҫәксә: *Бәһлеүәндәй таҙа Шәрәф иңләп тороп сабыуын дауам итте* (А., 96, 8, 116); *Түҙмәнем, ятак̡к̡а к̡айтып еткәнсә үкһеп-үкһеп тороп иланым* (Б., 26.03.97). Миҫалдарҙағы *тороп* һүҙе үҙ хеҙмәтен үтәй алмаған, сөнки ул дөрөҫ яҙылмаған.

Был һүҙ киҫәксә булып үҙенә башк̡а тора. Халык̡ телендә, *да/дә* киҫәксәһе кеүек, *тырып/тереп* тигән ике фонетик вариантта йөрөй. Шуға күрә үҙ асылына к̡айтарып, уны *шарк̡ылдап тырып көлдө, к̡ыҫк̡ырып тырып ебәрҙе, семтеп тереп алды, осоп тырып китте, өҙөп тереп к̡апты* тип яҙырға кәрәк.

**Тынсыу** — *тынсыу булмә, тынсыу һауа* тип хата к̡улланалар. Уның дөрөҫө — *тонсоу*, ул *тонсоғоу* тигән һүҙ менән тамырҙаш, ә *тынсыу* тигән һүҙ *тыныслыныу* тигәнде аңлата: *Аяғымдың һыҙлауы баҫылып, тынсып к̡алдым.*

**Тыуыу, тыуҙырыу** — *возникать, рождаться, рождать, вызывать, создавать* тигән һүҙҙәргә ярак̡лаштырып к̡улланыла: *Фатир табыуҙа к̡ыйынлык̡тар тыуа* (Й., 13.07.96); *...Ыҙғыш тыуҙырған сәбәптәр буйынса ике яктың да к̡а-*

*рашы асыҡлана* (Б., 19.07.96); *Урындағы ревкомдарҙа был асыу тыуҙырҙы* (А., 96, 5, 78).

Бер яҙыусы үҙенең әҙәби шәхесенән: *Шул тыуа һүҙен урынһыҙ ҡулланмағыҙ әле, әсәнән генә бала тыуа...* тип әйттерә лә, үҙе гел генә *тыуа, тыуҙыра* тип яҙа. Тимәк, ул баяғы һүҙҙе кемдәндер ишетеп, шуны мыҫҡыл итмәк булған була. Мыҫҡыл итер алда был яҙыусы үҙ ауылының телен хәтергә алһын ине. Унда хатта баланы ла *тыуҙы* тимәйҙәр. Бер башҡорт әсәһе лә *бала тыуҙырҙым, балам тыуҙы* тип әйтмәй, ә *бала таптым, балам булды* тип әйтә. Башҡорт кешеһе бер ваҡытта ла

*Йәштәр тәүге балаларын тыуҙырып та өлгөрмәгән, һуғыш башланған* (А., 96, 1, 61) тип, йәки

*Район дауаханаһының бала тыуҙырыу бүлеге* (Й., 19.10.96) тип һөйләмәй. Ләкин, үкенескә ҡаршы, беҙҙең яҙышҡан кешеләр үҙ әсәләренең теленә әйләнеп тә ҡарамай, тик урыҫ теленә генә йөҙ тотоп яҙа. Улар ябай халыҡ теленә ҡолаҡ һалһа, яҙма телдәге *мөмкинлек тыуҙы, шик тыуҙы, ығы-зығы тыуҙы, бола тыуҙы, ҡыйынлыҡ тыуҙы, мәшәҡәт тыуҙы, уй тыуҙы, уңайлыҡ тыуҙырҙы, бәхәс тыуҙырҙы, ыҙғыш тыуҙырҙы, хәүеф тыуҙырҙы, йыр тыуҙырҙы* һ. б. һ. б. тип әйткәнде лә ишетмәҫ ине. Ябай кеше, һис шикһеҙ, *мөмкинлек асылды (йәки табылды), шик уянды, ығы-зығы ҡупты, бола сыҡты, ҡыйынлыҡ килде, мәшәҡәт килеп сыҡты, уй килде, уңайлыҡ булдырҙы, бәхәс ҡуҙғатты, ыҙғыш сығарҙы* һ. б. тип әйтә йәки әллә нисә төрлө башҡа һүҙ таба. Төрлө төҫтәге, төрлө мәғәнәләге шул һүҙҙәрҙе һис кәрәкмәгән *тыуыу, тыуҙырыу* тигән бер һүҙ менән алмаштырыу яҙма телде иҫ киткес ярлыландырып, меҫкен хәлгә ҡуя.

Яҙышҡан кешеләр күп урында бөтә һөйләмен урыҫ теленең яйына килтереп ҡорған өсөн *тыуыу, тыуҙырыу* тигән һүҙҙе ҡулланырға ирекһеҙҙән мәжбүр була. Мәҫәлән,

*Ошондайыраҡ фекерҙәрҙе ишетеү хәҙер миндә артыҡ ғәжәпләнеү тыуҙырмай* (Б., 10.07.96) тигәнде *...мине артыҡ ғәжәпләндермәй* тип;

*Миндә Зәлифә Ситдиҡованы күреп һөйләшеү теләге тыуҙы* (Б., 25.07.96) тигәнде *минең... күреп һөйләшкем килде* тип;

*Башҡорттарҙа был ҡаушау, аптырау тыуҙырҙы* (А., 96, 4, 68) тигәнде *башҡорттарҙы ҡаушатты, аптыратты* тип әҙ генә башҡортса уйлаңҡырап яҙһалар, ул *тыуыу, тыуҙырыу* тигән һүҙҙәр үҙенән-үҙе төшөп ҡалыр ине.

Ысын башҡорт телендә *тыуыу* һүҙенең ҡулланышы сикле. Ул *фәлән ауылда, фәлән йылда тыуған* тигән ерҙә һәм

шуның һымаҡ һанаулы урында ғына ҡулланыла. Ә *тыуҙырыу* һүҙенең халыҡ телендә йөрөүе ғөмүмән шикле. Урыҫ күҙлегенән ҡарамай, халыҡ теленә ҡайтып уйлаған кеше уның шулай икәнен үҙе күрер.

**Уның ҡарауы** — боҙоп алған көйө йөрөтөлә: *Байлығы күп түгел, уның ҡарауы эшһөйәр ҡулдары бар* (А., 96, 2, 147);

*Өй эсе ҡойто ғына, уның ҡарауы һоҡланырлыҡ таҙа* (Б., 27.08.96).

Нимә ул был һөйләмдәрҙәге *ҡарауы*? Бында *уныңмы*, башҡа берәүҙеңме ҡарауы йәки ҡарамауы нимә бирә? Был һорауға яуап юҡ, сөнки *уның ҡарауы* тигән һүҙ үҙе юҡ.

Башҡорт телендә *ҡарыу* тигән һүҙ бар. Ул *ҡаршы* тигәнде йәки ниндәйҙер *эш-ҡылыҡҡа ҡаршы яуап* тигәнде аңлата. Мәҫәлән, «Урал батыр» ҡобайырында:

*Ҡурҡыуыма ҡурҡыуың ҡарыу булһын, егетем,* йәғни, ҡаршы яуап булһын;

*Ай, егетем, ярҙам ит... Ярҙамыңа ҡарыуға мин дә ярҙам итермен,* йәғни, ярҙамыңа ҡаршы яуап итеп, ярҙамыңды кире ҡайтарып;

*Бер ҙә ҡарыу ҡылмаған... ит еймәҫтәй боланды минең дошман үлемгә асмарланың бахырҙы,* йәғни, бер ҙә ҡаршы эш ҡылмаған боланды.

Ғилмияза йырынан:

*Атаҡайым мине ситкә бирҙе, ҡарыу йырҙарымдан туйғандыр,* йәғни ҡаршы әйтеп йырлаған йырҙарынан.

Шулай уҡ халыҡ телендә *ҡарыу итеү* — ҡаршы яуап итеү, *ҡарыуын ҡайтарыу* — ҡаршы яуап итеп бер эш ҡылыуҙы белдерә.

Ошо билдәле һүҙҙән *уның ҡарыуы* тигән теркәүес яһалған, һәм ул бер эш-хәлде икенсеһенә ҡаршы ҡуйғанда, *уның киреһе, уның урынына* тигән мәғәнәгә эйә булып тора. Шуға күрә башта килтерелгән миҫалдарҙа ла *...күп түгел, уның ҡарыуы..., ...ҡойто ғына, уның ҡарыуы...* тип әйтергә һәм ғөмүмән был һүҙҙе *уның ҡарыуы* тип әҙәби телгә төҙәтеп алырға кәрәк.

**Урып йыйыу, урып һуғыу** — гәзиттәрҙә генә түгел, әҙәби әҫәрҙәрҙә лә бөтөнләй мәғәнәһеҙгә ҡулланыла: *Урып-йыйыу менән берлектә хужалыҡта мал аҙығы әҙерләү ҙә әүҙем бара* (Й., 27.07.96); *Ужым бойҙайын урып һуғыу тамамланып килә* (Б., 26.07.96). Гәзит-журналдан отоп, ҡайһы бер ауыл кешеһе лә хәҙер шулай тип һөйләй башланы. Бер ассоциация рәйесе телевидениенан: *Йөҙ гектар сөгөлдөрҙө урып йыйҙыҡ,* тип хәбәр һөйләп ебәрҙе. Көлөрһөң дә, иларһың да.

Ә нимә һуң ул *урып йыйыу ҙа урып һуғыу*? Урмай йыйып буламы, йыйғас, шул үҙе урғанды аңлатмаймы? Башҡорт телендә был һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Элек уны *иген йыйыу, ашлыҡ һуғыу* ти торғайнылар. Шул нимәһе менән ярамаған? Ошо хаҡта мин гәзит редакцияһына барып әйтеп тә ҡараным — тыңламанылар.

**Усаҡ** — *костер* һүҙенә яраҡлаштырып йөрөтәләр: ...*Аттарҙы тышауларас, ҡоро сыбыҡ-сабыҡ йыйып, усаҡ яғып ебәрҙек* (А., 96, 6, 10); *Ул арала кис булды, ҡараңғы төштө. Бөтәбеҙ ҙә дөрләп янған усаҡ тирәһенә йыйылдыҡ* (Б., 31.07.96); *Ниндәйҙер ҡалҡыу ергә барып еттек. Ҡарайым, усаҡтар дөрләй, ҡораллы кешеләр күренә* (Й., 12.09.96).

Был һүҙҙең ысын мәғәнәһен һәр кем белә, ул ҡаҙан ултыртыр өсөн йәтешләп эшләгән бәләкәй генә мейесте аңлата. Уны хатта урыҫтар беҙҙән алып, шул мәғәнәлә йөрөтә һәм *домашний очаг* тип, кешенең үҙ өйөн, үҙ ғаиләһен аңлата торған йылы һүҙ яһаған. Ләкин беҙгә, йәнәһе, урыҫтарҙың *костер* тигәненә һүҙ кәрәк булған. Оҙаҡ уйлап тормай, шуға *усаҡ* һүҙен тәғәйенләп тә ҡуйғандар. Телгә иҫ киткес еңел ҡараған берәү шуны эшләгән, шундай уҡ анһат ҡарашлы икенсе берәүҙәр күтәреп алған. Был да, әлеге, урыҫ теленең һәр һүҙенә һүҙ тәғәйенләргә тырышыу, урыҫ теленә ҡол булыуҙың ғилләһе. Ул *костер* тигән нәмәне башҡорт электән яҡҡан һәм бер ҙә уны *усаҡ* тип әйтмәгән, ә *ут* тип йөрөткән. *Йылтыр ғына йылтыр ут күренә, юлаусылар ҡунған ер микән* тип йырҙа ла йырлаған. Шуға күрә үрҙәге миҫалдарҙа *усаҡ* тигәнде *ут* тип алмаштырып сыҡһаҡ, мәғәнә шунда уҡ дөрөҫләнеп, асыҡланып ҡала.

Был, әлбиттә, бер нәмәнең атамаһын икенсе нәмәгә күсерергә ярамай тигән һүҙ түгел. Иҫкергән, ҡулланыштан сыҡҡан йәки сыҡмаған нәмәне яңы нәмәгә оҡшатып, атамаһын күсереү була, тик уның өсөн ике нәмәнең тәғәйенләнеше, башҡарған хеҙмәте бер-береһенә яҡын булырға тейеш. Шул йәһәттән ҡырҙа яҡҡан утҡа ҡарағанда, хәҙерге газ плитәһен *усаҡ* тип атау нигеҙлерәк була.

**Үҙаң** — *самосознание* тигән һүҙгә мәғәнәләш итеп йөрөтәләр: *халыҡтың үҙаңын үҫтереү, милли үҙаң* һ. б.

Урыҫ телен ситкә ҡуйып, ошо һүҙҙе башҡортса аңларға тырышып ҡарайыҡ. Бармы уның мәғәнәһе, бирәме ул тейешле төшөнсәне? Хәҙер шул һүҙҙе ҡайҙа ҡулланып булғанына иғтибар итһәк, уның *милли үҙаң, синфи үҙаң, этник үҙаң* тигән кеүек һанаулы ғына ерҙә йөрөгәне күренә. Ә был һүҙ бәйләнештәрендә кешенең үҙ милләтенә, синыфына, этник берәмегенә, шундағы урыны һәм бурысына ҡарата булған мөнәсәбәтен *аң* тигән һүҙ яңғыҙ үҙе лә яҡшы аңлатып

тора. Шулай булғас телгә йоҡмаған, урыҫ теленә тәржемә итмәйенсә бер мәғәнә лә бирә алмаған *үҙаң* һүҙен көсләп тағыу бөтөнләй кәрәкһеҙ булып сыға.

Уңышһыҙ калькалар башҡорт теләнен үҙ мөмкинлектәрен ситкә тибеүгә, уны үҙ тауышынан мәхрүм итеүгә килтерә. Башҡорт телен байытыр, мөмкинлектәрен киңәйтер өсөн үҙ сараларыбыҙҙы ныҕыраҡ файҙаланып өйрәнергә кәрәк.

**Үҙемде белгәндән бирле** — *как себя помню* тигәндән күсерелгән: *Үҙемде белгәндән бирле йырлайым* (Й., 16.07.96).

Быны башҡорт *иҫ белгәндән бире* тип һөйләй. «Тамсы тамып күл була» тигәндәй, үҙебеҙҙекен онотоп, урыҫтан күсергән ошоноң һымаҡ бәләкәй нәмәләр ҙә йыйыла-йыйыла телде бөтөрә.

**Һыҙыҡ өҫтөнә алыу** — *подчеркнуть* тигәнгә оҡшатып яһағандар: *Уның зарланып йәшәмәгәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып үтке килә* (Б., 24.09.96); *Үҙеңдең кешелегеңде һаҡлап ҡалыуҙы һыҙыҡ өҫтөнә ала* (Й., 18.07.96).

Был — иң мәғәнәһеҙ калькаларҙың береһе. Шулай булһа ла, уны яҙышҡан кешеләр йыш ҡуллана. Бик кәрәк икән, был урында *баҫым яһау, айырып әйтеү* тип йәки башҡа төрлө яҙып була.

**Ысынбарлыҡ** — *действительность* тигәнгә мәғәнәләш итеп яһалған: *Тарихты үҙгәртеү берәүҙең дә көсөнән килмәй, ысынбарлыҡ үҙен булғанынса ҡабул ҡылыуҙы талап итә* (А., 96, 6, 11).

Тағы әлегесә урыҫ телен иҫкә алмай, башҡорт теләнен үҙ күҙлегенән ҡарағанда, был һүҙҙең яһалышын да, мәғәнәһен дә төшөнөп булмай. Яһалышына килгәндә, ҡушылған ике һүҙҙең тәүгеһе аңлашылһа ла, икенсе төп өлөшө теләгән мәғәнәне бирмәй, шул арҡала ҡушма һүҙҙең дөйөм мәғәнәһе тотош бушҡа сыға. Урыҫ телендә был һүҙҙең мәғәнәһен *ғәмәлдәге ысын хәл* тип аңлаталар. Тимәк, ул беҙҙең *булмыш* тигән һүҙгә тап килеп тора, һәм, ысынлап та, күҙҙән үткәргән миҫалдарҙың күпселегендә уны *булмыш* тигән һүҙ менән алмаштырып була. Был һүҙ бөтөнләй кәрәкһеҙгә, урыҫ теленән күсергән өсөн генә ҡулланыла. Мәҫәлән,

*Ҙур ялған хатта өлгөргән, аҡылға ултырған кешеләрҙе лә шаңҡыта. Ә инде йәштәрҙең, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уны ысынбарлыҡ тип ҡабул итеүе лә мөмкин* (А., 96, 6, 4) тигәндәге *ысынбарлыҡ тип ҡабул итеүе лә мөмкин* тигән оҙон һүҙ урынына нормаль кеше *ысынға алыуы бар* тип кенә әйтер ине. Шуның кеүек,

*Халыҡҡа ысынбарлыҡты матур итеп аңлатһаҡ, һәр кем мәсьәләнең айышына тиҙ төшөнә* (Й., 29.06.96) тигәндәге *ысынбарлыҡ* һүҙе урынына *ысын хәл* тип әйткән булһа, ысынлап та, һәр кем тиҙ төшөнөр ине, ә был көйө ул бупбуш бер һүҙ булып ҡала.

*...Көрьәндең шиғри юлдарын кешеләргә еткерә торған махсус кешеләр бар. Ә бына беҙҙең ысынбарлыҡта шиғыр юлдарын халыҡҡа еткереүсе бармы?* тигән һөйләмгә лә ул һүҙ урыҫса уйлап, урыҫ теленең яйына килтереп яҙған өсөн генә килеп ингән. Үҙебеҙсә уйлап яҙһа, уның кәрәге булмаҫ, *беҙҙең* арала йәки *беҙҙә* тип кенә әйтеп булыр ине.

**Эх, о, оһо** — урыҫ телендәге ымлыҡтарҙан күсерелгән: *Эх, ауырымаһам, ... күрһәтер инем һеҙгә* (Б., 14.09.96); *О, илаһи гүзәллек!* (Й., 19.09.96); *Оһо! — тип аптыраған-дай итте быныһы* (А., 96, 6, 65).

Яҙышҡан кешеләр хис-тойғоларын урыҫса ғына белдерә. Улар *эй!, и!, их!, у!, аһ!* тип башҡортса һоҡланыу, башҡортса аптырауҙы онотто. Ул урыҫ ымлыҡтарын ысын башҡорт кешеһе әйтәм тигәндә лә әйтә алмаҫ ине, сөнки башҡорт телендә ундай тауыштарҙы белдерә торған өндәр юҡ.

Ымлыҡтарҙы ғына түгел, оҡшатыу һүҙҙәрен дә *бах, бум, тик-тик, трах* һ. б. тип беҙҙең яҙыусылар урыҫ теленән ала, оҡшатыу һүҙен башҡорт теленән таба алмай аптырай.

**Юлланыу** — *китеү* мәғәнәһендә бөтә кеше ҡуллана башланы: *...Мәскәүгә түгел, Өфөгә юлланды* (А., 96, 4, 65); *...Ҡәйнәләренә табан юлланды* (Б., 27.09.96); *Был юлланғанында улар юҡ ине* (Б., 18.07.96); *...Донъя кимәлендәге бәйгегә юллана* (Й., 19.10.96) һ. б.

Хәҙер *китеү, барыу* тигән ябай һүҙҙәргә көн бөттө. Бөтә ерҙә *юлланыу* тип кенә яҙалар, уның урынлымы, урынһыҙмы икәнен ҡарап тормайҙар.

Ғәжәп бер ғәҙәт бар беҙҙә: бер һүҙҙе белеп ҡалһалар, күмәкләшеп шуға тас йәбешәләр. Һуңғы ваҡытта *зарур, фарыз* тигән һүҙҙәргә лә ҡаныға алдылар. Был ғәҙәт яҙма телде бер ҙә матурламай, киреһенсә, уның йәмен ала. Шуны уйларға кәрәк.

Һүҙ ҡулланышын ҡараған уңай менән бында ирекле-ирекһеҙҙән күҙгә эләккән ҡайһы бер һүҙҙең яҙылышы хаҡында ла әйтеп үтергә тура килә.

Һүҙ яҙылышы хәҙерге башҡорт орфографияһында арыу ғына эшләнгән, ябай һәм ҡушма һүҙҙәрҙең һәр төрө тиерлек сағылыш тапҡан. Ләкин, әҙәби норманы билдәләй торған орфографик ҡағиҙәләрҙе тотош үтәр өсөн тәртип етмәгәнлектән, беҙҙә ҡайһы берәүҙәр һаман әле үҙ белдеге менән яҙып ебәреү ғәҙәтен ташлап бөтә алмай, тәртипкә күнмә-

йенсә әҙәби телде нормаға килтереп булмағанын аңлап еткермәй. Ҡағиҙәне боҙоу бигерәк тә һүҙҙең һөйләү телендәге әйтелешен яҙма телгә күсереү арҡаһында килеп сыға.

Башҡорттоң һөйләү телендә ике-өс һүҙҙең ҡушып әйтелгәне, шул саҡта ике һуҙынҡы эргәләш килһә, береһенең төшөп ҡалғаны, ике һуҙынҡы йәки һуҙынҡы менән ҡайһы бер яңғырауыҡлы өн араһына эләккән *к, ҡ, п* өндәренең яңғырауыҡлыға әйләнгәне һәр кемгә билдәле. Шул әйтелеш әҙәби һөйләү теле өсөн дә ҡағиҙә булып тора һәм һәр һүҙҙе айырып әйткән артистарҙың һәм дикторҙарҙың теле әҙәби норманы боҙа. Әммә быныһы — һөйләү телендә. Яҙма телдә, бер һүҙ берәмегенә әйләнгән ҡушма һүҙ булмаһа, айырым йөрөгән һәр һүҙ айырып яҙылырға тейеш.

Әйтәйек, *ауыҡ* тигән һүҙ бар. Ул ҡыҫҡа ваҡыт араһын аңлатып, айырым һүҙ булып йөрөй. Шуға күрә лә уны: *берауыҡ ҡарап торҙо* (А., 96, 1, 44) тип ҡушып яҙып булмай.

Шулай уҡ *элгәре* һүҙен *бер көн элгәре, һеҙҙән элгәре* тигән кеүек ерҙә ҡушып яҙа алмайбыҙ икән, *Көнэлгәре әҙерләтеп, өҫтәленә һалып ҡуйҙы* (А., 96, 11, 12); *Һәләкәтле ваҡиғаларҙы көнэлгәре тоя* (Б., 18.10.96) тигәндә лә ҡушып яҙып булмай.

Үҙ аллы һүҙ булғаны өсөн *уҡ* киҫәксәһен дә ҡушмай яҙабыҙ, *бөгөн ук, быйыл уҡ, тиҙ ук* тип бөтә ерҙә айырып ҡуябыҙ. Ләкин ҡайһы бер кеше нишләптер шуны *...ҡалалағы хәлгә бигук йоғонто яһап бармай* (Б., 17.09.96); *...һыйыр тиҙәге апаруҡ өйөлөп киткәйне шул* (Б., 26.09.96) тигәндә ҡушып яҙырға кәрәк, тип уйлай. Шунан тыш, һуңғы һүҙҙең *ап-* тигән өлөшөн *ап-аҡ, ап-анһат* тигәндә ҡыҫҡа һыҙыҡ аша яҙғас, бында ла *ап-арыу* тип яҙырға кәрәк. Был һүҙҙәр һөйләгән саҡта фонетик шарт буйынса бергә ҡушып әйтелһә лә, яҙылыш ҡағиҙәһен уға буйһондороп булмай.

Беҙҙең телдә яңғыҙ һүҙҙән генә түгел, һүҙ бәйләнешенән дә хәл ҡылым яһаған саҡ йыш була: *ике ҡуллап йәбешеү, һыңар аяҡлап һикереү* һ. б., һәм шул саҡта хәл ҡылым төркөмөнә ингән ике һүҙ айырым көйө тороп ҡала. Тимәк, *...ҡушуслап һыу эскәнен күрҙе* (Б., 4.10.96) тигәндә ике һүҙҙе ҡушып яҙыу хата булып сыға.

Икенсе яҡтан, кәрәкмәгән ерҙә айырып яҙыу ҙа орфографияны боҙа. Шуға миҫал итеп *әлдә* тигән һүҙҙе килтереп була:

*Әл дә был яҡтан йәш талсыҡтар ураҡкан ҡая итәген* (Й., 11.07.96);

*Әл дә хоҙай урмандарын, ағастарын йыл да йәшәртеп, үҫтереп тора* (А., 96, 10, 117).

Башҡорт телендә ҡайһы бер һүҙҙең баҫымы тәүге ижеккә төшә: *ләкин, сөнки, йыйын эшлекһеҙ* һ. б. Ошонан тыш, һүҙҙе көслө итеп, хис менән әйткәндә баҫымды тәүге ижеккә төшөрөү беҙгә хас нәмә. Шуның өсөн *әлдә* тигән һүҙҙе лә беренсе ижегенә баҫым яһап әйтәләр, ләкин был әйтелеш һүҙҙе икегә бүлмәй. Уның икенсе ижеген *дә* киҫәксәһе менән яңлыштырып, айырып яҙырға ярамай. Айырып яҙһаң, һүҙ юҡҡа сыға, сөнки үҙ аллы *әл* һүҙе был урында юҡ.

Башҡорт теленең урта һөйләшендәге *-нт-, -лт-* күренеше әҙәби телгә фонетик норма итеп алынмаған, был һәр кемгә мәғлүм. Ләкин, бая әйткәнсә, тәртипкә күнеп өйрәнмәгән кешеләр йыш ҡына ҡағиҙәне һанға һуҡмай, үҙе теләгәнсә яҙа. Мәҫәлән,

*Эске хужалыҡ тармаҡтары мантый алмай яфалана* (А., 96, 4, 127) тигәндәге *мантый;*

*Тәүге тур йомғаҡтары мине һеңкәҙәтте* (Б., 2.10.96) тигәндәге *һеңкәҙәтте;*

*Ҙур ялған хатта өлгөргән, аҡылға ултырған кешеләрҙе лә шаңҡыта* (А., 96, 6, 4) тигәндәге *шаңҡыта* һүҙҙәре әҙәби норма буйынса *мандый, һеңгәҙәтте, шаңғыта* тип яҙылырға тейеш.

Был йәһәттән бигерәк тә *-ды, -дыҡ* ялғауҙарының яҙылышын бутайҙар. Башҡорт телендә был ялғауҙар *йыуынды, ҡаралды, тапанды, үҫенде, һөрөндө, емдек, ҡалдыҡ, ҡушылдыҡ, табылдыҡ, ташландыҡ, һайландыҡ* рәүешендә йөрөй, һәм шул көйө уларҙың күбеһе үҙ аллы исемгә әйләнеп киткән. Дөйөм башҡорт телендәге ошо *-ды, -дыҡ* варианты әҙәби телгә норма итеп алынған, уның *-ты, -тыҡ* варианты урта һөйләшкә генә хас*. Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы берәүҙәр һаман үҙенсә ныҡышып, әҙәби норманы нығытыуға ҙур тоткарлыҡ яһай. Мәҫәлән,

*Ауылдарҙың шәхси ҡаралтыларына ҡағылған* (Й., 28.09.96) тигән һөйләмдәге *ҡаралты;*

*Һәр үҫенте үҙ ваҡытында баш төртә* (А., 96, 6, 7) тигәндәге *үҫенте;*

*...Һөрөнтө ерҙәр, урман, күл, туғайлыҡтар тартып алына* (А., 96, 4, 27) тигәндәге *һөрөнтө;*

*Һыу һөлөгөләй гүзәл зат сүплектән емтек ташый* (А., 96, 1, 36) тигәндәге *емтек* һүҙҙәренең ошондағы яҙылышы кешене яңлыштырып, орфографияға буталыш килтерә.

Уңышһыҙ ҡулланып йөрөтөлгән һүҙҙәрҙең ошонда күҙҙән үткәргән хәтлеме генә булһа ла яҙышҡан кешеләрҙе, би-

---

* Быларҙы *-лы, -лыҡ* ялғауҙарының көнсығыш диалекттағы *-ты, -тыҡ (ташты, таштыҡ)* варианты менән бутарға ярамай.

герәк тә йәштәрҙе, уйландырһа, һүҙ ҡулланышына ҡарата әҙме-күпме йүнәлеш бирһә, яҙма телде камиллаштырыу юлында мөһим бер аҙым яһалыр ине. Әлбиттә, телдең иң хәрәкәтсән, иң үҙгәреүсән өлөшө булған лексика өлкәһендә мәңгелек норма билдәләп булмай, ләкин уның нигеҙе, үҫтереү ҡағиҙәләре үҙ телебеҙҙең ҡанунына ярашлы итеп нығытылған булырға тейеш.

Һүҙ ҡулланышындағы иң яман сир урыҫ һүҙҙәренә мәғәнәләш итмәк булып үҙ телебеҙҙең ҡанунына һыймаҫлыҡ һүҙҙәр яһауға һәм кәрәкһеҙ калькалар алыуға ҡайтып ҡала. Шул килешһеҙ, зәғиф һүҙҙәрҙе яһар алда үҙебеҙсә әйтергә тырышыу күп ваҡыт беҙҙең кешелә булмай, сөнки ул бөтә иғтибарын урыҫ теленә йүнәлткән була. Шул арҡала матур, йөкмәткеле үҙ һүҙҙәребеҙ ҡулланыштан төшөп ҡала бара. Телде нык боҙа торған ошо нәмә яҙма телгә генә түгел, ғөмүмән башҡорт теленең булмышына, киләсәк яҙмышына ҙур хәүеф килтерә. Шул хаҡта һәр кем уйланмаһа, бик насар хәлгә ҡалырыбыҙ күҙгә күренеп тора.

## ДӘҮЛӘТ ҺӘМ ХАЛЫҠ АТАМАЛАРЫ

Бөтә донъя менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән хәҙерге заманда дәүләт һәм халыҡ атамалары көндәлек матбуғатта ғына түгел, һәр төрлө баҫма хеҙмәттә киң ҡулланыш ала. Шуға күрә әҙәби лексикала урын алған ул атамаларҙы, бигерәк тә һуңғы дәүерҙә килеп ингәндәрен, үҙебеҙҙең тел ҡағиҙәләре нигеҙендә тәртипкә килтереп, бер нормаға һалыу мөһим мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Ошо мәсьәлә тейешенсә хәл ителмәгәнлектән яҙма телдә төрлө хатаға юл ҡуйыла.

Ул атамаларҙы беҙҙең баҫмалар ғәҙәттәгесә урыҫ теленән тәржемә итеп ала, шулай булһа ла бер ағзалы йәки, *Гвинея Республикаһы, Дания Короллеге, Көньяҡ Корея* тигән кеүек, ике ағзалылары ҡыйынлыҡ килтермәй, ысын ауырлыҡ өс йәки унан күберәк ағзалы атамаларҙы тәржемә иткәндә хасил була. Уның сәбәбе башҡорт теленең үҙ ҡанундарын һәм дөйөм мәғәнәне иҫәпкә алмай, урыҫ телендәге һүҙ тәртибен һаҡларға тырышҡандан килә. Мәҫәлән, беҙҙең матбуғат *Федеративная Республика Бразилии, Демокра-*

*тическая Республика Мадагаскар, Кооперативная Республика Гайана, Объединенная Республика Камерун* тигән кеүек атамаларҙы *Бразилия Федератив Республикаһы, Мадагаскар Демократик Республикаһы, Гайана Кооператив Республикаһы, Камерун Берләшкән Республикаһы* тип яҙыуҙы дөрөҫкә һанай. Ә тел һәм мәғәнә күҙлегенән ҡарағанда, был яҙылыш һис тә хупларлыҡ түгел. Ни өсөн тигәндә, ул атамаларҙың нигеҙендә, юғарыла килтерелгән ике ағзалы атамаларҙағы кеүек, *Бразилия Республикаһы, Мадагаскар Республикаһы, Гайана Республикаһы, Камерун Республикаһы* тигән изафеттар тора һәм шул изафеттар төп мәғәнәне йөкмәй, ә *федератив, демократик, кооператив, берләшкән* тигән һүҙҙәр изафеттарға аныҡлаусы булып килә. Аныҡлаусыны ике араға ҡыҫтырғас, изафет бәйләнештәре өҙөлә һәм дөйөм мәғәнә тейешенсә асылмай. Матбуғатта ошо атамаларҙы хата яҙыу менән бер ыңғай *Объединенные Арабские Эмираты* тигәнде *Берләшкән Ғәрәп Әмираттары* тип дөрөҫ яҙалар һәм шуның менән бер үк типтағы атамаларҙы төрлөсә алып, телгә буталсыҡ индерәләр. Был дәүләт атамалары башҡорт теле менән бер системала булып та, урыҫ теленең тәьҫирен кисермәгән төрөк телендә *Федерал Бразил Жүмһүрийети* һ. б. тип, нәк беҙ тәҡдим иткәнсә йөрөтөлә. Тимәк, үҙ яйлы төрки фекер шул рәүештәге һүҙ тәртибен талап итә.

Дәүләт атамаларында башҡа төрлө изафет бәйләнештәре лә булырға мөмкин. Әйтәйек, *Народная Республика Бангладеш, Китайская Народная Республика* тигәнде *Бангладеш Халыҡ Республикаһы, Ҡытай Халыҡ Республикаһы* тип тәржемә итәбеҙ икән, бында *халыҡ республикаһы* тигән изафет нигеҙ булып, *Бангладеш, Ҡытай* тигән исемдәр аныҡлаусы хеҙмәтен үтәй. Шуның кеүек, *Йеменская Арабская Республика, Арабская Республика Египет, Исламская Республика Иран* тигән атамаларҙың тәржемәһендә *Ғәрәп Республикаһы, Ислам Республикаһы* тигән изафеттарға *Йәмән, Мысыр, Иран* тигән исемдәр аныҡлаусы була һәм дәүләттәрҙең тулы атамаһы *Йәмән Ғәрәп Республикаһы, Мысыр Ғәрәп Республикаһы, Иран Ислам Республикаһы* тигән төҫ ала.

Ҡайһы бер дәүләт атамалары бик ҡатмарлы итеп ҡоролған була. Шул саҡта атама эсендәге һүҙҙәр төрлө изафет һәм аныҡлаусы мөнәсәбәтенә инеп, ҡатлы-ҡатлы һүҙ бәйләнеше яһай. Шуны башҡорт теленең ҡағиҙәләренә килтереп теҙә белергә кәрәк. Мәҫәлән, *Корейская Народно-Демократическая Республика, Лаосская Народно-Демократическая Республика* тигән атамаларҙың тәржемәһендә *халыҡ*

*республикаһы* тигән изафет төп урынды алып, иң тәүҙә *демократик* һүҙе шуға аныҡлаусы була, шунан һуң *Корея, Лаос* тигән исемдәр бөтә һүҙ бәйләнешенә аныҡлаусы булып китә лә, *Корея Демократик Халыҡ Республикаһы, Лаос Демократик Халыҡ Республикаһы* тигән атамалар барлыҡҡа килә. Бында урыҫ телендәге һүҙ тәртибен һаҡлайым тип, *демократик* һүҙен *халыҡ* һүҙенән һуң ҡуйып булмай, сөнки улай итһәң, баяғы әйткәнсә, изафет бәйләнеше өҙөлөп, мәғәнә боҙола.

Дәүләт атамаларын бик ҡатмарландырыу, әлбиттә, яҡшы түгел. Ләкин һәр халыҡ үҙ дәүләтен үҙе теләгәнсә атай, беҙ уға ҡыҫыла алмайбыҙ. Шулай булғас, нисек бар, шулай ҡабул итеп, *Социалистическая Народная Ливийская Арабская Джамахирия* тигәнде лә аңлайышлы, килешле итеп тәржемә итергә тейешбеҙ. Юғарыла килтергән миҫалдарҙан сығып, был атаманың нигеҙендә йәнә *халыҡ йөмһүриәте* тигән изафет булғанын билдәләп була. Шул изафетты иң элек *ғәрәп* һәм *Ливия* тигән исемдәр аныҡлай, шунан һуң *социалистик* һүҙе бөтә һүҙ бәйләнешенә дөйөм аныҡлаусы булып килә. Тотош алғанда, был атаманы *Социалистик Ливия Ғәрәп Халыҡ Йөмһүриәте* тип ҡорорға кәрәк була. Шулай иткәндә генә ул башҡорт теленең һүҙ бәйләнеш ҡағиҙәләре менән ярашып, кәрәкле мәғәнәне бирә ала.

Дәүләт атамаларынан башҡа, халыҡ атамалары ла беҙгә күп ваҡыт ҡыйынлыҡ килтерә, сөнки уларҙың, *абхаз, балҡар, ҡаҙаҡ, тува, удмурт, урыҫ* тигән кеүек, әүәлдән йөрөгән йәки, *грузин, корей, әрмән* һымаҡ, яҡшы үҙләштерелгәндәре генә түгел, беҙҙең тел өсөн күпмелер дәрәжәлә ят булғандары ла бар. Әлбиттә, халыҡ исеме дәүләт атамаһының нигеҙендә булһа, уны айырып алыуы анһат. Әйтәйек, *Албания* атамаһы *албан, Свазиленд* атамаһы *свази, Таиланд* атамаһы *таи* тигән халыҡ исемдәренән яһалған. Ләкин донъялағы байтаҡ ил һәм дәүләт атамаһы халыҡ исеменән яһалмай, киреһенсә, халыҡ исеме дәүләт атамаһынан яһала. Урыҫ теле шундай урында халыҡ һәм уның айырым кешеһен билдәләр өсөн *-ец* ялғауын ҡуллана, шул ялғау уға универсаль сара булып хеҙмәт итә. Башҡорт телендә ундай сара юҡ. Шул сәбәпле беҙ урыҫ теле аша үҙләштергән ят атамаларҙы күпселек урында баяғы *-ец* ялғауын киҫеп ташлау юлы менән яһайбыҙ. Мәҫәлән, урыҫтың *аргентинец* һүҙен беҙ *аргентин* тип, *кубинец* һүҙен *кубин, перуанец* һүҙен *перуан, швейцарец* һүҙен *швейцар, ирландец* һүҙен *ирланд, исландец* һүҙен *исланд, нидерландец* һүҙен *нидерланд, шотландец* һүҙен *шотланд, австралиец* һүҙен *авст-*

*рали, австриец* һүҙен *австри, бельгиец* һүҙен *бельги, замбиец* һүҙен *замби, колумбиец* һүҙен *колумби* тип ҡыҫҡартып халыҡ атамаһы итәбеҙ. Был ысул бер ҙә яҙыҡ түгел, сөнки ҡайһы бер халыҡ үҙ-үҙен тап шулай атай: кубиндар үҙен *кубан,* бельгиҙар *бельжи* ти һ. б., ә Австрияның халҡын башҡорт элек-электән *эстрэй* тигән, шуны яҙма телгә яраҡлаштырып, *австри* тип алыу бик килешле була.

Быныһы шулай. Ләкин урыҫтың *-ец* ялғауын ҡырҡып ташлау менән генә халыҡ һәм халыҡтың бер кешеһе тигән төшөнсәне бирмәй, дәүләт төшөнсәһен һаҡлай торған атамалар күп. Мәҫәлән, *алжирец, бразилец, израилец, пакистанец* тигән һүҙҙәрҙе *алжир, бразил, израил, пакистан* тип ҡыҫҡартыу менән тейешле мәғәнә килеп сыҡмай. Шуның өсөн был атамаларға ҡарата башҡорт телендә йөрөгән аналитик ысулды ҡулланырға тура килә. Ул ысул дәүләт йәки ер атамаһына *кешеһе, халҡы* тигән һүҙҙәрҙе ҡушыуҙан ғибәрәт. Урыҫтың *уфимец* тигәнен башҡорт *Өфө кешеһе, уфимцы* тигәнен *Өфө кешеләре, Өфө халҡы* ти. Әлбиттә, *өфөләр* тип әйтеү ҙә бар, әммә уны *уфимец* мәғәнәһендә ҡулланып булмай. Шуның кеүек, *алжирец, алжирцы* тигәнде башҡорт *Алжир кешеһе, Алжир халҡы, бразилец, бразильцы* тигәнде *Бразилия кешеһе, Бразилия халҡы, израилец, израильцы* тигәнде *Исраил кешеһе, Исраил халҡы, пакистанец, пакистанцы* тигәнде *Пакстан кешеһе, Пакстан халҡы, камерунец, камерунцы* тигәнде *Камерун кешеһе, Камерун халҡы* тип әйтә. Был ысул ғәрәп телендә лә ҡулланыла, унда Исраил кешеһен, *бәне Исраил,* йәғни *Исраил улы* тиҙәр. Шул һүҙҙе ғәрәптән алып, әүәле беҙҙә лә файҙаланғандар. Шулай булғас, был аналитик форманы һис шикләнмәй хәҙерге әҙәби яҙма телгә индерергә мөмкин. Ҡайһы бер төрки телдәрҙә аналитик форманы уңайһыҙ күреп, *-лы* ялғауы менән *өфөлө, алжирлы, пакстанлы* тигән үҙенә бер төрлө форма яһарға тырышалар. Башҡорттар араһында ла ошо форманы файҙаланып матаҡан кешеләр осрай. Ләкин ул форма тейешле мәғәнәне бирмәй, шуның өсөн беҙҙең телдә нығынып китә алмай.

Дәүләт һәм халыҡ атамаларының телдә йөрөгәндәрен мөмкин тиклем һәр халыҡтың үҙенсә йә, һис юғында, башҡорт теленең фонетик системаһы талап иткәнсә алырға кәрәк. Туранан-тура аралашмаған, әүәлдән билдәле булмаған халыҡтарҙың атамаһын ул талапҡа килтереүе, әлбиттә, ҡыйын. Шулай ҙа байтаҡ атаманы мөмкин булғанда ла үҙ телебеҙгә йәтешләмәй, урыҫса йөрөтөүҙән беҙ әле һаман ҡотола алмайбыҙ. Мәҫәлән, беҙҙә *литовец* һүҙен нишләтергә белмәй, *литовец, литва* тип төрлөсә яҙып аптырайҙар, ә ул

халыҡ үҙен *литау* тип атай, венгрҙар үҙҙәрен *һунғар* тип йөрөтә. Ошо һүҙҙәр бөтә яҡлап башҡорт теленә йоғоп тора, *һунғар* тигәне хатта электән үк беҙгә таныш. Шул йоғошло һүҙҙәрҙе һис ҡыйынлыҡһыҙ нормаға индереп була. Шулай уҡ урыҫтың *абазинец* тигәнен *абаза, кабардинец* тигәнен *кабарда, зулус* тигәнен *зулу, ненец* тигәнен *нена, йеменец* тигәнен *йәмән, датчанин* тигәнен *дат, бербер* тигәнен *бәрбәр, бушмен* тигәнен *бушмән, ительмен* тигәнен *итәлмән, багамец* тигәнен *баһам* тип алһаҡ, башҡорт теленең талабына яҡыныраҡ булыр ине.

Урыҫ телендә дәүләт һәм халыҡ атамаларындағы йомшаҡ *ж* өнөн *дж* тип яҙалар: *азербайджанец, аджарец, таджик, белудж, Джакарта, Джибути, Фиджи* һ. б. Йомшаҡ *ж* өнө башҡорт телендә лә юҡ, ләкин беҙ уны айырып билдәләргә кәрәк тип һанамайбыҙ, *й* йәки *ж* өндәре менән алмаштырабыҙ, шуның өсөн *әзербайжан, тажик* тип яҙабыҙ. Шулай булғас, башҡа урында ла *ж* менән алмаштырып, *ажар, белуж, Жакарта, Жибути, Фижи* тип яҙыу беҙҙең телгә бер зыян да килтермәй. Беҙ кәрәгенән артыҡ урыҫ теленең күҙенә генә ҡарап торабыҙ шул. Башҡа азат халыҡтар бер ҙә улай икенсе бер телгә яраҡлашырға тырышмай. Атамаларҙы ғына түгел, ғәҙәттәге интернациональ һүҙҙәрҙе лә үҙенсә, үҙ теле талап иткәнсә әйтеп һәм яҙып йөрөтә. Шуның менән улар туған теленең һәм теле аша халҡының үҙ аллығын нығыта.

Үрҙә телгә алғандарҙан тыш, беҙҙең халыҡҡа әүәлдән яҡшы таныш булған бер төркөм дәүләт, халыҡ, ҡала, ер-һыу атамаһы бар. Ул атамалар элекке ныҡлы бәйләнеш тотҡан заманда ғәрәп һәм башҡа мосолман халыҡтарынан алынып, Октябрь революцияһына ҡәҙәр ныҡ ҡулланылған һәм һуңғы ваҡытта ғына урыҫсаға әйләндереп ебәрелгән. Фонетик төҙөлөшө һәм әйтелеше менән ул атамалар башҡорт теленә бик яҡын, урыҫтан алған һүҙҙәр һымаҡ ят булып яңғырамай. Шуға күрә уларҙы кире ҡайтарыу әҙәби башҡорт теле өсөн файҙа ғына буласаҡ. Бында иң элек *Ғираҡ, Ғуман, Әлжазаир, Мысыр, Мәрәкеш, Сүриә, Урдуния, Хәбәш* тигән кеүек мосолман дәүләттәренең атамалары күҙҙә тотола. Шуға тағы ҡала, ер-һыу атамаларын ҡушһаҡ, ҙур ғына исемлек килеп сыға. Ул исемлекте бында тотош килтереп булмай, тик кәрәк урында уларҙы онотторға ярамай.

Дәүләт һәм халыҡ атамалары лексиканың ҙур ғына бер өлөшөн тәшкил итә. Әҙәби яҙма телде яйға һалғанда был өлөштө лә ситтә ҡалдырып булмай. Уны ла тәртипкә килтерергә, ят нәмәләрҙән таҙартып, мөмкин ҡәҙәр башҡорт теленең үҙ ҡанундары менән яраштырырға һәм, иң мөһиме, ныҡлы норма итеп, башҡорттоң аңына һеңдерергә кәрәк.

# Аҙаҡҡы һүҙ

Әҙәби телде, бигерәк тә уның яҙма рәүешен, ысын камилгә күтәреү мәсьәләһе бөтә башҡорт йәмәғәтселегенең иғтибарын алырға тейеш. Был өлкәлә барыһы ла яуаплы, ләкин иң ҙур яуаплыҡ барыбер матбуғат менән әҙәбиәткә төшә. Ғилми хеҙмәттәр ни хәтле төплө, ентекле булһа ла, әҙәби телдең төп нормаларын билдәләүҙән ары китә алмай. Билдәләнгән нормаларға йән өрөү, телдең үҫешенә йүнәлеш биреү кеүек ҡатмарлы һәм нескә нәмәләрҙе матбуғат менән әҙәбиәттә генә, оҫталар ҡулы менән генә эшләп була. Тел хәрәкәтенең эсендә ҡайнаған матбуғат был йәһәттән бигерәк ҙур эш башҡара. Тормоштоң бөтә яғын, кешенең бөтә эш өлкәһен һәм шулай уҡ ағымдағы яңылыҡтарҙы сағылдыра торған һүҙ һәм терминдарҙы иң алда матбуғат ғәмәлгә индерә, шуның менән телдең даими хеҙмәтен тәьмин итеп тора. Шундай ҙур бурыс матбуғаттың яуаплылығын тағы ла нығыраҡ арттыра. Уға мәсьәләнең мөһимлеген аңлап, яҡшы белеп, төптән уйлап эшләргә кәрәк була.

Әҙәбиәттә, матбуғаттағы кеүек, көн ағышынан ҡалмай эйәрә барыу хәжәте юҡ. Ул халыҡ теленең төп байлығын тәшкил иткән ынйылар менән эш итә һәм матбуғатта һыналып, яҡшы аҡланған яңылыҡтарҙы ғына әҙәби телгә үткәреп нығыта бара. Әҙәбиәт халыҡты ысын әҙәби телгә өйрәтә торған мәктәп, матур телгә зауыҡ тәрбиәләй торған остаз хеҙмәтен үтәй, әҙәби телдең яҙмышын хәл итә, һәм шул талапҡа яуап биргәндә генә ул үҙ исемен аҡлай. Әммә, үкенескә ҡаршы, беҙҙең бөгөнгө әҙәбиәт тейешле талапҡа яуап бирергә бик үк ынтылып бармай. Күпселек яҙыусы, әҙәбиәттең төп ҡоралы — тел, тигән фекерҙе яҡлаһа ла, шул ҡоралды оҫталыҡ менән файҙаланмаған яҙыусыларҙы бер кем дә оялтмай, әҫәргә баһа биргәндә телен иҫәпкә алмай. Шул арҡала бик насар телле әҙәби әҫәрҙәр ҙә маҡтаулы булып йөрөп ята.

Әҙәби әҫәрҙең теленә ҡарата иғтибарҙы йомшатыуға ғәжәп ҡаршылыҡлы, ялған бер ҡараштың көсәйеп китеүе лә

сәбәпсе булды. Ул ҡараш буйынса, йәнәһе, яҙыусы образ менән эш итеп, үҙенең идея һәм идеалдарын уҡыусыға еткергәндә, тел ҡануны менән грамматик ҡағиҙә ситлегенә бикләнеп ултырмай, уны иркенләп боҙа, емерә ала. Әлбиттә, әҙәбиәттең үҙ маҡсаты донъяның булмышын, кешенең тормошон һүрәтләү аша кәрәкле идея һәм идеалдарҙы уҡыусыға еткереүҙән тора. Ләкин яҙыусыға үҙ әҫәре, шул әҫәрҙәге идея һәм идеалдары ҡәҙерле булһа, шуны мөмкин тиклем дөрөҫ, асыҡ итеп еткереү теләге лә булырға тейеш. Шул теләкте яҙыусы бөтә яҡтан камил, төҙөк, матур тел ярҙамында ғына ғәмәлгә ашыра ала. Әҙәби һүрәтте, йәғни образды, баҙыҡ, тәьҫирле итеп бирер өсөн әҙәбиәт теленең дә баҙыҡ, тәьҫирле булыуы кәрәк. Зәғиф тел менән һүрәтте терелтеп булмай. Шуға күрә туған телде бөтә нескәлектәренә хәтле өйрәнеп, ысын тел оҫталығына эйә булыу үҙ ижадын яратҡан һәр яҙыусының иң беренсе бурысы булып тора. Әммә беҙҙә туған телде өйрәнеү эшенә илтифат биреү етмәй, сөнки күп кешелә минбелдемлек көслө, һәр кем үҙен бик белгәнгә һанай, шул уҡ ваҡытта күп кешенең яҙғаны, юғарыла әйткәнсә, ысынлап та, телдең грамматикаһын иркенләп емереүгә ҡоролған була. Грамматика — ул яҙыусының иркен кәртәләй торған ситлек тә, мәктәп дәреслектәрендә ҡойолған ҡалып та түгел. Грамматика — тотош телдең үҙе, телдең бөтә ҡоролошо. Телдәге бер генә нәмәне лә грамматиканан ситкә ҡуйып булмай. Грамматика бер кемдең дә иркен сикләмәй, ул теләгән бер нәмәне теләгәнсә әйтергә тулы мөмкинлек бирә. Грамматика һүҙ һәм һөйләмдәр араһында тейешле бәйләнеш һәм мөнәсәбәт булдырып, төрлө уй-тойғоноң асылышын тәьмин иткән саралар системаһынан тора. Төҙөк бер тәртип алып, һәр кемгә мәжбүри булып киткән система булмаһа, бөтә халыҡҡа бер тигеҙ аңлашылған, бер тигеҙ хеҙмәт иткән дөйөм тел дә булмаҫ ине.

Башҡорт халҡының дөйөм милли теле бар. Быға ҡәҙәр үҙ телендә еңел аңлашҡан халыҡ әле лә шулай аңлаша ала. Ирекһеҙҙән түгел, белә-күрә ситтән күсергән хилаф нәмәләрҙе үҙенсә әйтергә башҡорт теленең сараһы етәрлек. Яҙышҡан кешеләр үҙенең телен урыҫ теле менән үлсәмәй, шул сараларға йөҙөн борһа, башҡорт теленең киләсәге өмөтлө булыр ине. Әммә унаң өсөн үҙ телеңде бик ныҡ яратырға кәрәк.

ЭСТӘЛЕГЕ

Баш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 3
Тел һәм милләт . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 7
Ҡуплек төшөнсәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 11
Изафет . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 19
Эйәлек төшөнсәһе . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 29
Ҡилеш менән бәйләүес . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 38
Сифат менән рәүеш . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 47
Сифат һәм исем яһай торған *-ғы, -лы, -лыҡ* ялғауҙары . . 58
Рәүеш яһай торған *-са* ялғауы . . . . . . . . . . . . . . . . 61
Исем ҡылым . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 68
Хәҙерге заман сифат ҡылымы . . . . . . . . . . . . . . . . . 77
Үткән заман *-ғайны* формаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . 83
Ҡиләсәк заман *-саҡ* формаһы . . . . . . . . . . . . . . . . . 87
Ҡылымдың ҡайтым һәм төшөм йүнәлештәре . . . . . . . . 93
Һүҙ яйы һәм һөйләм ҡоролошо . . . . . . . . . . . . . . . . 98
Һүҙ һәм һүҙ ҡулланышы . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 106
Дәүләт һәм халыҡ атамалары . . . . . . . . . . . . . . . . . 137
Аҙаҡҡы һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 142

Учебное издание

**Биишев Акрям Гибадуллович**

**ПРИЧУДЫ РЕЧИ**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире **С. Ғ. Мөхтәруллина**
Мөхәррире **З. И. Яйҡарова**
Рәссамы **А. Р. Ғарипов**
Биҙәүсе мөхәррире **А. Р. Мөхтәруллин**
Техник мөхәррире **З. Ғ. Чингизова**
Ҡорректоры **З. Ш. Ҡарабаева**

Лицензия № 0168, 10.04.96. Йыйырға бирелде 23.11.98. Баҫырға ҡул ҡуйылды 04.03.99. Ҡағыҙ форматы $84 \times 108^1/_{32}$. Офсет ҡағыҙы. Әҙәби гарнитура. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 7,56. Шартлы буяу отт. 7,98. Иҫәп-баҫма таб. 8,01. Тиражы 4500 дана. Заказ № 132.

Башҡортостан «Ҡитап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.



Әкрәм Бейеш (Әкрәм Ғибаҙулла улы Бейешев) 1926 йылда Башҡортостандың Йылайыр кантоны, Бөрйән-Ҡыпсаҡ вулысы, Туйөмбәт ауылында тыуған.

1956 йылда Мәскәү дәүләт университетының филология факультетын тамамлап, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә килә, 1958—1961 йылдарҙа СССР ФА Тел институтының аспирантураһында уҡып, «Первичные долгие гласные в тюркских языках» тигән китап сығара (1963) һәм шуны кандидатлыҡ диссертацияһы итеп яҡлай.

Ул бөтә ғүмерен тел ғилеменә арнай, башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеген төҙөүҙә ҡатнаша. Һүҙлек төркөмөнөң етәксеһе булып, һүҙ байлығын йыйыу эшен ойоштора, һүҙлектең ғилми нигеҙен, төҙөлөш принциптарын эшләй, төҙөүселәр тапшырған ҡульяҙмаларҙы өр-яңынан ҡарап, йүнәтеп бара. «Башҡорт теленең һүҙлеге» тигән исем менән 1993 йылда донъя күргән ике томлыҡ оло һүҙлек Әкрәм Бейештең төп хеҙмәте булып тора. Шунан тыш, ул башҡорт теленең яңы орфографияһын эшләп ғәмәлгә индерә, төрки тел ғилеме буйынса байтаҡ мәҡәлә сығара. «Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше» (1993), «Нация и национальная политика» (1995) тигән китаптар яҙып баҫтыра, «Эйек бөрйәндәре һәм Туйөмбәт менән Ҡотлөмбәт» тигән тарихи китап яҙа, гәзит-журналда милли мәсьәләгә ар[illegible]ан мәҡәләләр менән сығыш яһай. «Тел хикмәттәре» тигән бы[illegible] китап — уның һуңғы осорҙа яҙған эштәренең береһе.